**Зигат Султанов**
**Йыһат Солтанов**

# СОЧИНЕНИЯ
# В ПЯТНАДЦАТИ ТОМАХ

# ӘҪӘРҘӘР
# УН БИШ ТОМДА

## ТОМ
## II

## ПОЭМЫ И РОМАН
## ПОЭМАЛАР ҺӘМ РОМАН

**Солтанов Й.Ә.**
Әҫәрҙәр ун биш томда, том II. Поэмалар һәм роман. — 468 бит.

Был китапта шағирҙың иң мөһим һәм күләмле шиғри әҫәрҙәренең күбеһе тәүге тапҡыр донъя күрә, улар яҙылыу йылдары буйынса сиратлаштырып бирелде. Үҙәгәйле йыйынтыҡ шиғриәт һөйөүселәргә шиғри зауыҡ та, фәһем дә, тәрән кисерештәр ҙә килтерәсәк.

# АУЫЛ ЕГЕТЕ

## *Бағышлау*

Кешеләр бар — даны ерҙе күмеп,
Ашып киткән тауҙар түбәһен.
Кешеләр бар — байып, алтын менән
Нышып бөткән һандыҡ, кеҫәһен.

Бар һәр төрлө ҡара груһлылар,
Бар шаҡшылар — ҡанлы ауыҙҙар.
Байлыҡ өсөн йәнен, илен һатып,
Ир башына еткән яуыздар.

Һәм бар тағы ерҙең хужалары —
Саф күңелле ябай кешеләр.
Даны менән, малы менән түгел —
Эше менән дәү тау ишеләр.

Был ябайҙар ҡырҙа ер аҡтара,
Шахталарҙа күмер ҡаҙалар.
Ҡомло далаларға һыу сығарып
Баҡса баға, һарай һалалар.

Йәшәйем мин бына шулар өсөн!
Әҙермен һәм шулар хаҡына
Утҡа керергә йә ташланырға
Ҡояш системаһы артына.

Теләйем мин тормош йондоҙомдо
Нурландырып хәлдән килгәнсе,
Бағышларға шулар файҙаһына,
Хеҙмәт күрһәтергә үлгәнсе.

Юҡ, үлгәс тә!
Кереп ятҡас та, тим,
Ҡара ерҙең һалҡын ҡуйынына,
Ҡалырға мин тейеш улар менән,
Йырым менән юлдаш булырға!

Ашырмы һуң эшкә был теләгем?..
Тырышам мин уны үтәргә.

Көсөм тауҙай!.
Ваҡыт!
Алҡынырға
Иңем менән күкте күтәрәм!

Йә еңермен,
Йәки еңелермен —
Яна йөрәк ылғый ялҡында!
Инсем итеп тәүге поэмамды
Бағышлайым ауыл халҡыма.

Сазым ҡылы!
Яңра,
Яңра, әйҙә,
Осорт осҡа Пегас ҡашҡаһы!
Йырлайыҡ бер ярһып ауыл егетен,
Һәм йырларбыҙ тағы башҡаһын.

## I бүлек

Сылбырланып йылға буйҙарында
Теҙелешкән кескәй ауылдар.
Өйҙәр өҙләй кейеп һалам кәпәс,
Урамдарҙа бейей ҡайындар.

Ҡайындарҙа ҡайнай сыйырсыҡтар,
Утлай ерҙә ҡаҙ-ҡош көтөүе.
Малай-шалай шәйләй сыбыҡ тотоп,
Һарыҡ көткән циклоп[1] шикелле.

Тәҙрәләрҙең селтәр пәрҙәләрен
Апрель еле елә тартҡылап.
Тартҡан саҡта тышҡа ҡараш ата
Һылыу ҡыҙҙар — мөләйем, шат ҡына.

Ҡояш батһа, урам буйҙарынан
Сурлап китә ҡурай, дәрт-йырҙар.
Егеттәр һәм ҡыҙҙар ыңғайына
Шаңдай йырлап урман, тау, ҡырҙар.

Таңға тиклем йәшлек тантанаһы
Күкрәй бында... Ҡайһы берәүҙәр
Башлап танышалар. Ә ҡайһылар

[1] Циклоп — грек ҡарыһүҙендәге алпамыша.

Һөйгәндәрен тәүгә үбәләр.

Йәш йөрәктәр татлы яныу менән
Сәскә ата бындай төндәрҙә.
Бөтә ҡайғың, бөтә хәсрәттәрең
Төпкә бата бындай мәлдәрҙә.

Йәшлек, йәшлек, янар ялҡынында
Аҙмы йәндәр янып үткәндәр!
Ялҡынында ярһыу йөрәк хисен
Аҙмы йәндәр яғып үпкәндәр!

Аҙмы инсан, алйып тик һин ҡушһаң,
Икеләнмәй юйған яҙмышын?
Гүрҙән тергеҙгән аҙ кешенеме,
Дәртләндереп сыңрау тауышың!..

*    *    *

Урман ҡыçаһында юлаҡланып
Юл ярылған ауыл яғына.
Ҡарағайҙар, ҡойоп иçкеләрен,
Йәшел ылыç-шәлен ябына.

Сөйгән улар осло түбәләрен,
Ғорурланып, күктең төбөнә.
Көнөн-төнөн Ҡояш, Ай нурҙары
Үтә алмай ылыç егенә.

Көн-төн бында ҡуйы ҡараңғылыҡ,
Көн-төн бында һалҡын күләгә.
Иртәләрен, үтеп кәртәләрен,
Ысыҡ тама ҡусҡыл үләнгә.

Дауылдарҙа урман ҡоторона,
Дауыл тынһа тора шым ғына.
Ҡайһы ваҡыт, таң торбаһын ҡабып,
Серле бер көй тарта — моң ғына...

Шат шишмәһе — шаталаҡ ҡыҙ төçлө,
Мең-мең сыңға мең-мең селтерәп.
Шул ҡыҙ сулпылары сыңын тыңлай
Ярҙа үçкән яңғыҙ ҡуш тирәк.

Һандуғастар бейей ботағында,

Арғы ярҙан кәкүк саҡыра.
Айыу сыҡһа үкереп шырлыҡтан,
Ҡоралайҙар тертләп бышҡыра.

Бөкөрө-сал тауҙар ҡырлаһынан
Ҡуян ҡыуа һоро бүреләр.
Төпһөҙ күктә, емтек еҫен тойоп,
Таҙғаралар тубы сөйөрөлә...

* * *

Урман аша ҡыҫыҡ юл буйынан
Бер йәш егет ҡайта ауылға.
Һоро шинель, һалдат пилоткаһы.
Йәшел тоҡсай аҫҡан яурынға.

Һыңар еңе... ни өсөн буш, тимме?! —
Юрый ғына әллә кеймәгән?..
Ҡуңалтаҡлыҡ еңгә ят булғанға,
Билбауына ҡыҫып бәйләгән.

Тәрән уйға сумып килә егет,
Йөҙө моңһоу — ҡайғы шәүләһе.
Аяҡтары алға атлағанда
Тарта кеүек артҡа кәүҙәһе.

Һис теләмәй тегә аҙымын ул,
Ваҡыт-ваҡыт ауыр уфтана.
Тертләгәндәй айнып уйҙарынан,
Нәфрәтләнеп әсе йылмая.

Бер ҡараһаң — ғазап сиккән кеүек,
Бер ҡараһаң — ауырыу төҫлө ул.
Икенсе мәл — шашып шатланғандай,
Өсөнсө мәл — ифрат үсле ул...

* * *

Егетте юл, этеп, төкәлдерә
Балсыҡ ярлы йылға ситенә.
Һыуҙар быйыл бик ныҡ ташҡан икән —
Ярҙы ашап тулҡын һикерә.

Йөҙө һытыҡ — асыу тота кемгә?

Урман әллә ҡыҫып һыҡҡанға?
Елдең әллә ҡаршы өрөүенән,
Боролоп-боролоп әллә аҡҡанға?

Аҡ күбектәр күсә кәпәсләнеп,
Өйөрөлә сөмөкәй упҡындар.
Ярҙар ауа өҫтән умырылып,
Бәргән саҡта уҫал тулҡындар.

Егет, баҫып текә яр башына,
Алыҫтарға ата ҡарашын.
Йылға һаман ыға алға ғына,
Ике ярға һуғып ҡанатын.

Ҡартлас йылға, йәшен юйған йылға!
Үҙенең ул оҙон ғүмерендә
Аҙмы тиргән төрлө тарихтарҙы,
Аҙмы яҙған тағы тирергә!

Ярҙарының яғып яҡаһына,
Татыған йыш ҡанлы ҡайғыны.
Ир баштарын йыйған ҡамыштары,
Алып киткән йәки ағыны.

Ырғылған ул, ярһып, күпме тапҡыр
Ҡаяларын ҡайып күбеккә.
Нисә ҡабат ҡыҙыл ҡанға ҡанап
Ҡайтҡан кире иҫке йөҙлөккә.

Күңелдәрҙең нескә ҡылдарына
Сиртеп кемгә сихри йырлаған?
Төндәр буйы кемдәр, ҡосаҡлашып,
Сайпылыуын уның тыңлаған?..

Бөтәһен дә белә изге йылға,
Бөтәһенә әҙер күнергә.
Бабаларҙың уҙып ғүмеренән,
Килеп кергән беҙҙең ғүмергә...

* * *

Кирза итектәрен һалып, егет
Ҡаҡ текәгә килеп ултыра.
Аяҡтарын аҫка һәлендереп,
Күҙен төбәй һыуҙың һыртына.

“Эй ағын һыу, йәнгә иң яҡын һыу,
Таралт минең таралт ҡайғыны!
Һалҡын телең менән йөрәк йөйөн
Шифаласы, ялап яй ғына.

Әсәйем бит мине “тотоп алған”
Һинең ошо ағын һыуыңдан!
Ҡосағыңда тәүге өнөм тыуған,
Кендегемдең ҡаны йыуылған.

Биргәнһең һин миңә ғүмеремде,
Биргәнһең һәм көйлө йырымды.
Һалайымсы һары һағышымды,
Яңғыратып һырлы ярыңды!”

Оҙон көйләп түгә егет моңон —
Йылғаһылай оҙон ағышлы.
Бер тыңлаһаң — ифрат күтәренке,
Бер уйлаһаң — үтә һағышлы:

“Ағын йылға, туған, яҡын йылға,
Аяҡ баҫтым бына ярыңа.
Бойоҡмон шул: йәшлек хыялдарым
Осто кеүек елгә бары ла.

Һүҙ биргәйнем, киткән саҡта, һиңә,
Ҡайтырмын, тип, данға уралып.
Ә хәҙерен?!. — Данды эт ялаған,
Шырауланып баҫып торамын.

Һыңар ҡулым ҡалды тар окопта.
Үҙем дә мин илгә — һыңар ҡул”...
Туған йылғам! Кисер егетеңде!
Яҙһын уға Хоҙай изге юл!

* * *

Сумды Ҡояш... Талғын елгә болғап
Ағылдырҙы урман хуш еҫен.
Төн шаршауын һүреп шат йондоҙҙар
Ҡыҫышты күҙ шаян-йәшертен.

Боролманан баҡа баш сығарып
Сурылданы оҙон бер көйгә.

Сабаҡтарҙы салып дәү сурағай
Һыҙып үтте һыуҙы икегә.

Муйын һуҙып талдар араһынан,
Мышы тыҡты морон тулҡынға.
Өйрәк өйөрҙәре, быжҡылдашып,
Ҡамыш араһына сумдылар...

Бер... биш минут...
Ҡапыл килде телгә
Бөтә урман, күл һәм йылғалар.
Өҙөлмәҫ көй көйәҙләтте төндө —
Оркестры ерҙең сорлаған:

Әйтерһең дә, көллө кейек, ҡоштар
Концерт бирә бөйөк сәхнәлә.
Әйтерһең дә, улар бер-береһен
Уҙыу өсөн сәмле дәртләнә.

Скрипкәләр серле һыҙа ҡылда,
Ғарҡылдаша рояль, гармундар.
Граммофон һәм борғо, пианино —
Үреләләр бергә бар моңдар.

Ботаҡтарҙа — мең-мең йыраусылар,
Көләүендәр — олон төбөндә.
Көлә ылыҫ, ҡул сәпәкләй япраҡ,
Айыу төшә ҡыҙып бейергә.

Ә Ай-Ағай ебәк арҡан буйлап
Күтәрелә көмөш һауаға.
Кәкре ҡайығына ҡырын ятып,
Дирижерлыҡ ҡыла донъяға...

***

Арғы ярҙан, һуҙып һары телен,
Төн ялай ут — йылға ситендә.
Тексәй Айҙың күҙен әсеттереп
Төтөн йөҙә урман өҫтөндә.

Кем ул төндә усаҡ тоҡандырған,
Йәнгә тиртеп ауыл йылыһын?
Ат көтәме? Өйрәк өшкөтәме?
Балыҡсымы — ҡарай йылымын?

Кем булһа ла, килгән Хоҙайҙан ул,
Мосафирға был йән таяныс.
Арала тик шашып ташҡын ҡайнай,
Һуҙырға ҡул етмәй, аяныс...

Ҡулын ҡуйып егет маңлайына,
Уйға батып текләй был утҡа.
Ә йөрәге, төнгө сихри ҡылдай,
Иңрәй, иңрәй ошо минутта.

Ҡыуаныска, шашҡын хыялдарға
Сумып үткән тиле йәшлеге
Күҙ алдына килә ҡубарылып
Ихлас көйө, гүзәл, саф көйө...

Арғы яҡта иһә ҡыҙыл ялҡын —
Ебәк яулыҡ кеүек елберҙәп,
Тартып тора егет хыялдарын,
Ҡомарлатып, ҡуҙлы бер ергә.

Утҡа кереп янған йәшлегенең
Һүнеп бармыш һуңғы осҡоно
Булып күренәлер серле усаҡ —
Уфтай егет, уфтай бошоноп:

“Йәшлек, йәшлек, ниңә көйҙөң, йәшнәп,
Гөл баҡсаңда сәскә ҡалдырмай?
Һүрелерме сағыу хыялдарым
Мәңгелеккә, инде ҡабынмай?

Нәҡ ҡарсыға -- күккә сорғолорға
Ҡанат яҙған ярһыу йөрәгем.
Һыныҡ ҡанат, бойоҡ һалдат булып
Ҡайтып килә, алып кәрәген...

Яҙмыш, яҙмыш! Үсең ҡандымы, дуҫ,
Мыҫкыл итеп йәшлек хисемде?
Уйланыңмы үҙең ялтырарға,
Юйып ташлап минең есемде?!.”

* * *

Ойоп туймай өйкөм-өйкөм туғай,
Ҡойоноп шуҡ Айҙың нурына.

Ғаләмдәрҙең күҙе күҙләй ерҙе,
Тылсымланып урман хорына...

Егет йәнен ләкин арбамайҙар,
Әҙәмсә һүҙ улар әйтмәйҙәр.
Ҡатып ҡалған ниңә ҡаялары —
Ҡотороноп бейеп китмәйҙәр?!

Улар хушһыҙ, улар ҡайғыһыҙ шул,
Белмәй улар көрәш, еңеүҙе.
Улар өсөн тормош — өҙөлмәҫ моң,
Көнө-төнө — бер ғәм диңгеҙе...

Сал сағылдар! Мәғрур сал сағылдар!
Һеҙ белһәгеҙ ине егеттең
Ниндәй һағыш йөҙөн һарғайтҡанын —
Ҡалмаҫ инегеҙ һис түҙеп тын.

Тулар, шаулар, даулар һәм үкерер
Инегеҙ һеҙ шашып был төндө:
Еңел мени, тауҙы баҫҡан ҡарҙай
Ҡайғы баҫҡан башын егетеңдең!

Ватан яуы, түгеп ҡайнар ҡанды,
Үләт ыуын ҡырсып йөрөгәндә,
Риза мыни егет, өйгә ҡайтып,
Яугир баштан ҡалһа “бер бәндә”?!.

Ҡурҡты мыни фронт дәһшәтенән?!
Юҡмы уның керһеҙ намыҫы?!.
Барыһы бар!
Фәҡәт ул уңышһыҙ,
Көлә унан яһил яҙмышы...

* * *

Яҡтан ҡубып, утлы тулҡын ярып
Кәмә дөрә егет ярына:
Усаҡ яғыусы йән йөрьәт иткән
Сығарып уҡ уны алырға.

Шығырҙап ҡом, кәмә яр уртына
Бәргәс кенә осло маңлайын,
Иҫен йыйып шунда елде егет,
Ялпылдатып шинель салғыйын.

Сихри шәүлә һымаҡ, аҡ һаҡаллы
Кес кенә бер бабай тырышып
Һөйрәй ине кәмә моронсайын,
Һыу ағыны менән көрәшеп.

Тейен мени! — етеп биш ырғыуҙа,
Тейҙе егет. Ҡарыш кәмәне
Шытырҙатып һыңар ҡулы менән
Тартып алды ярға дәртләнеп.

— Һәй йәш ваҡыт!
“Дурной” көс күп ваҡыт!
Беҙ ҡуш ҡуллап ала алмаған
Айыуҙы һеҙ һыңар ҡул менән тик... —
Шымды бабай... һүҙе ҡалмауҙан...

Күрҙе сөнки етем елпелдәгән
Һалдат шинеленең буш еңен...
Бороллдо ла ситкә, күҙен һөрттө
Әллә тиктән, әллә йәш килеп...

— Һаумы, бабай! Танымайһың әллә?
— Һаумы, улым! Күҙем күрмәй шул...
— Был мин — Талғат, яуҙан ҡайтып киләм.
— Талғат?! Балам! Бына осрашыу! —

Ҡалтыранмыш ҡырыҫ усы менән
Һыйпап улдың сикә сәстәрен,
Егетте ул ҡыҫты күкрәгенә,
Сын күңелдән түгеп йәштәрен.

— Әйтмәһәң дә, күреп торам, улым,
Белеп торам ҡайҙан икәнде...
Яуыз Гитлер! Муйыны һынғыры!
Ҡырып һалды күпме ул йәнде... —

Әсәһенең йылы ҡулы һымаҡ
Яҡын, ипле, шыршау ҡулынан
Йәне иреп өнһөҙ торҙо егет,
Арынғандай күңел туңынан.

Әйтерһең дә, икәү сабый ғына —
(Береһе сал, береһе йәш, мыҡты)
Ҡосаҡлашып, йән-тән уртаҡлашып,
Бар донъяһын шул мәл онотто.

Килеп иçкә, кереп ҡаҡ кәмәгә,
Күмелделәр тулҡын артында.
Һыу йөҙөндә көләс Ай бәүелде,
Ҡуш ишкәкте ҡайырып тартҡанда.

* * *

Ғилми бабай сытыр өçтәкләне
Сәйнәп талған усаҡ уртына.
Сәйгүн элде түҙмер өс тағанға:
— Килтерәйек, — тине, — шартына.

Төн өçтөнән төшмә ҡайтып өйгә —
Ҡыйын булыр ҡаршы алыуы.
Йөрәге бит насар әсәйеңдең —
Хатта мөмкин шартлап ҡалыуы...

Юғалттыҡ шул һине беҙ ауылда —
Хат-хәбәрең күптән килмәне...
Юҡ, хәйерле булыр, балаҡайым,
Таң аттырып боҙһаҡ ғилләне!..

...Ҡыҙыл ялҡын ялай сәйгүн төбөн,
Үрләй төтөн — ел юҡ. Донъя тын.
Яр ҡоршауы сумды һарғылт нурға,
Төтөн яҙҙы күктә ҡанатын.

Ҡаршыһына уттың сүкте егет
Үҙҙәренсә бөкләп аяғын,
Быуаттарҙың барлыҡ һуҙымында
Ултырғандай ата-бабаһы.

Ә Ғилми ҡарт япон һуғышынан
Ҡабып ҡайтҡан (“иблес мираçы”!..)
Төрөпкәһен ҡуҙға быҙылдатып,
Төтөн менән йөҙөн уратты.

Оҙаҡ-оҙаҡ ултырҙы ул өнһөҙ,
Уйға сумып, ғәмгә күмелеп.
Көттө Талғат уның уяныуын,
Ҡуҙ һалыуын йәнгә һүҙ телеп.

Сатор-сотор серен систе сытыр,
Махра ыçын төтөн күтәрҙе.

(Фронтта ла тартмай ҡайтҡан егет
Аптыратыр әле күптәрҙе!)

Тура бағып баш ҡалҡытты бабай,
Төрөпкәһен төрнәп бер уста.
Һорап ҡуйҙы:
    — Һөйлә әле, улым,
Ҡайһындай хәл хәҙер фронтта?

Яҡын микән инде еңеү көнө
Ҡоторонған фашист йыланын?!
(Ишеткәндәй булды гөрһөлдәүен
Егет фронт тигән ҡибланың...)

    — Күп ҡалманы Берлин түбәһендә
Елберҙәр көн беҙҙең ал байраҡ.
Атып килгән анау ал таң кеүек
Бәхәсһеҙ был! Түгел ул йыраҡ!

Их бабайым, миңә ни файҙа һуң,
Уттар ярып үҙем бармағас
Шул еңеүле таңдың ҡосағына,
Барған кеүек яҙға ҡарлуғас?!

“Үс хәнйәрен ҡаҙап йөрәгенә,
Фашизмды, — тинем, — ауҙарһам...”
Ирешмәнем ләкин мораҙыма —
Бушйөң киләм ҡайтып “баҙар”ҙан...

Ултырҙым, һай, тишек кәмәһенә
Яҙмыштың мин — ҡулһыҙ һәм данһыҙ!..
Бер ҡанаты һыныҡ ҡарсығалай, --
Ҡарғыр саҡта ҡалдым яраҡһыҙ...

Скрипкәм ҡалды ауылымда –
Һыҙҙыртыр, тип көтә торғандыр...
Йөрәгемдән урғыр тулыш моңдо
Сулаҡлығым йота торғандыр...

Кәрәгем бар инде хәҙер кемгә...
Мин ни эшләй алам ауылда?
Ятырғамы һамҫып, күк төтәтеп?..
Юҡ! Мин риза түгел был юлға! —

Шулай тине егет. Йәне көйрәп
Торҙо ырғып усаҡ янынан.

Әсе көлмөш Айҙың йөҙөн йырып
Аҙымланы ярҙың буйынан.

* * *

Ғилми бабай ыҫлы төтөн йотоп
Ыҫмағынан, һалҡын ҡан менән
Көтөп алды уның тынысланып
Ултырыуын кире янына.

Ҡартлас менән уйҙаш-ҡорҙаш кеүек,
Ҡарағайҙар кәңәш ҡорҙолар.
Шуҡ тейендәр ылыҫ араһынан
Ҡаш йыйырып ҡарап торҙолар.

Һәр бер ҡыяҡ, һәр бер көмөш сәсәк
Йөҙөн бороп егет яғына
Шыбыр-шыбыр ниҙер белештеләр,
Көлөштөләр серле, яй ғына...

Һалдат иһә, моңло башын услап,
Үҙ уйҙарын һаман уйланы.
Әле утҡа, әле һыуға төшөп,
Ғүмер буйҡайҙарын буйланы:

“Бабай, бабай, күп йәшәгән бабай,
Бабай, бабай, күп күргән бабай!
Быуат буйы әсе-сөсө татып,
Илдәр гиҙеп күп йөрөгән бабай!

Нужа баҫып, башын бәҫ ҡаплаған,
Биленә тиң һаҡаллы бабай!
Һаҡал бөртөгөнән дә күберәк
Тәжрибәле, аҡыллы бабай!

Әйтсе миңә, әйтсе, ни ҡылайым?
Скрипкәмдә нисек уйнайым?
Ата-бабаларҙан ҡалған моңдо
Илкәйемә ҡалай ҡояйым?

Ҡолағымдан ҡыҫа үлмәҫ сыңы –
Бирер инем һыҙып -- әмәл юҡ.
Моң диңгеҙен гиҙеп үтер инем,
Ишкәгем юҡ, илтер кәмәм юҡ...

Өндәшмәйһең ниңә, ниңә, бабай?!
Ни әйтерһең минең һүҙҙәргә?
Ҡор тиҙерәк, ҡор хаҡ хөкөмөңдө —
Сабырлығым етмәй түҙергә!..”

*    *    *

Ҡуҙ кәренән ҡайнап ҡыҫылған боҫ
Алып бәрҙе сәйгүн ҡапҡасын.
Хуш еҫ бөркөлдөрөп үлән сәйе
Тәмләндерҙе урман һауаһын.

Ҡалай көрөшкәгә ағыҙҙы ҡарт
Ҡандай ҡыҙыл сихәт ағымын.
(Ә үҙенә сәйгүн ҡапҡасына
Ҡойоп теүәл ҡылды табынын.)

— Мә, ҡап, улым, ауыл күстәнәсен,
Һалдатмын, тип, һыйҙан тартынма.
Ата-бабаң һөйгән эсемлек был
Борондан уҡ һәр бер табында.

Эсһәң сәйҙе — китер баштан ҡайғы,
Эсһәң сәйҙе — тәнең ял алыр.
Ә ҡандарың, ҡорос кеүек ҡайнап,
Тамырҙарың буйлап таралыр.

Мә тот, улым! —
Тотмай, һәй, ҡайҙа ул!
Эсмәй ҡайҙа башҡорт һыуында
Бешкән сәйҙе!
Ян-яғында йырлап
Башҡорт урмандары торғанда!

Ут кисте ул,
Төрлө һыу эсте ул, —
Махра тартып хәмер эсмәне.
Әсәйенең тәмле сәйҙәренең
Тәме сөнки телдән китмәне.

“Их, барыбер әжәл көтә беҙҙе!..
Эсеп, тартып, дуҫтар, ҡалайыҡ!
Тура килһә һылыу — үбеп ҡыйыу,
Ҡосаҡҡа беҙ уны алайыҡ!” —

Тигән йырҙы бик йыш тыңлаттырҙы
Ҡанлы окоп...
Тик ул тартманы,
Эсмәне һәм
Һантый һылыуҙарҙы
Ҡосаҡлап та һис бер ятманы
(Әллә шуға тәҡдир һаҡланы...)

Торҙо сөнки һаман күҙ алдында
Тыуған ауыл, әсәй, һылыуы...
Шул һылыуҙың уны оҙатҡанда
Һулығып-һулығып илап ҡалыуы...

* * *

Сәй эсәләр, тирләп сәй эсәләр
Сал бабай һәм мыҡты был егет.
Бушаған бер соҡор тула йәһәт,
Сәйгүн сыйнай ҡуҙҙа бөркөлөп.

Һалҡын һауа күккә болот һауа
Боҫ имсәген тартып табындан.
Күҙәүенә етеп күңел тулы,
Туҫтаҡтарҙың тулы сағында!

“Һемер, бабай! Ҡалышмам мин һинән,
Сыҙаһын тик сәйгүн мороно!
Сәй “һөймәй” ул һалдат, ә тотонһа
Шикләнмәй көт күлең ҡороуын!

“Аҙ ҡаба” ул һалдат, тик хуш күрә
Ҡайтарғанда аштың яулығын
Еңел булһын өсөн аяҡсыға,
Ҡорһағында бар һый ҡалыуын!..”

* * *

Ғилми бабай, ҡатҡан тамырҙарын
Ҡойондорғас ҡайнар сәй менән,
Һүҙ башланы йәне-тәне йомшап,
Төрөпкәһен һурып тәм менән:

— Улым, улым, ярһыу йөрәгеңдең
Аңлайым мин ҡуҙрап ҡыҙыуын.

Һиҙенәмен ҡыйғыр күңелеңдең
Тоҡтонлоҡта тулап һыҙлауын.

Үҙем дә мин, гәрсә ҡарт яугирмен,
Теләр инем һуғыш ҡырында
Дан яуларға — еңеү көндәрендә
Байраҡсыһы униң булырға.

Йылдар мине ләкин бөкләнеләр —
Яраҡһыҙ мин ҡанлы көрәшкә.
Колхозымда хәлдән килгәнемсә
Еңеү яулайым сын йөрәктән:

Йүнәтәмен ҡамыт-ызбурыйын,
Йөрөгәндә йәштәр һабанда.
Әле бына һыуға йылым һалдым,
Һый булһын, тип, дөйөм ҡаҙанда.

Ауылда бит ашау наҡыҫ хәҙер —
Ас ҡарынлай йонсой ил эштә.
Фронт ейһен, фронт еңһен, тиеп,
Бөгөләбеҙ бында гел бишкә.

Түрәләре, ҡәһәр һуҡкырҙары,
(Йәшермәйсә әйтһәк үҙ-ара)
Иген иккән илдең асығыуын
Фронт бәләһенә туғара.

Аҫыл ирҙәр китеп бөткәс яуға,
Ике яуыз сапты тамырға:
Береһенең ләҡәбе Өсбармаҡ,
Икенсеһенеке – Ҡабырға...

Һуғыш сыҡкас сөнки ҡуш бармағын
Косилканан береһе ҡырҡтырған.
Икенсеһе, яуға барып етмәй,
Ҡолап, ҡабырғаһын һындырған...

Башаҡ ашап (ағыу башағы ул!)
Сәсәп үлде яҙын сабыйҙар.
Бер ус бойҙай семтеп алған өсөн
Сабый әсәләрен яуыздар

Олаҡтырҙы, тотоп, Тоҙтүбәгә —
Һалдат ҡатындары төрмәлә!..
Артығын һис әйтер әмәлем юҡ,

Башым ҡата, телем көрмәлә...

Әйткән өсөн ошо сал башымды
Әйҙәһендәр, әйҙә, шул юлдан!..
“Эһ!” тә итмәм!
Ашым бит ашалған,
Йәшем инде йәшәп уҙылған...

Ә һин һаҡлан.
Башың тыҡма тоҡҡа!
Телең тешлә.
Сыҙа.
Бул сабыр.
Ҡанһыҙ түрәләрҙе ҡамтарырға
Мәскәү үҙе, бәлки, юл табыр...

Һин бит, егет, көйөнәһең юҡҡа:
Бәхет түгел мени шул үҙе —
Ҡайнар ҡаның яуҙа ҡойоп ҡайтыу,
Яҡынайтыу өсөн еңеүҙе!

Сафта ҡалған ғәййәр яуҙаштарың
Еңеү елберҙәген ал таңға
Ашырырҙар — һөймәйме шул һине?
Күммәйме шул һине шан-данға?!

Төнгө күбәләктәр шәм утына
Уҡталғандай, һин дә дан эҙләп
Тик үҙеңә, талпынмасы ерҙә.
Нимә ул дан? Кәрәк ул ниңә?

Ғүмереңде, егет, данға түгел,
Илкәйеңә ихлас бағышла.
Аралап ут ғәмдән һәр бәндәне —
Килер йәм дә, дан да — барыһы ла!

Башың эймә яҙмыш елдәренә —
Ҡурҡмай ҡайыр ҡырыҫ ҡанунын!
Һәр упҡындың сығыу баҫҡысы бар —
Таба бел һин шуны, аҡыллым.

Өҙөлһә ҡул — көс һал аяғыңа!
Аяҡ-ҡулһыҙ ҡалһаң — аунаҡла!
Башың ҡайтҡан — илгә аҡыл ҡайтҡан —
Аҡылыңды егеп ил һаҡла!

Бабай һүҙен егет шым тыңланы,
Башын эйеп, уҡка төбәлеп.
“Ауыр, ауыр! Күпме шелтә бында...
Сындыр, бәлки, уның тигәне?

Сын булыуҙан миңә ни мәғәнә?
Ҡулһыҙ кеше — ҡулһыҙ инде ул.
Осор ине — бер ҡанаты һыныҡ...
Таянысһыҙ, юлһыҙ инде ул”...

Егет, тороп, тура юҫыҡлана
Берләм юлдан ауыл яғына.
Таң томаны, ҡайнап-ҡабарынып,
Ҡаршыһына уның ағыла.

Оҙон көйлө әтәс аҙандары
Ҡубарыла алыҫ, алыҫтан.
Тертләп ҡорҙар ҡанат пырылдата
Сыртлап сыбыҡ һынған тауыштан.

Йөрәк ҡаға — алда тыуған ауыл!
Оҙаҡламай өйҙәр күренер.
Һыйыр һауа сыҡҡан әсәкәйе
Ҡаршыһына сыр-сыу йүгерер.

Бер-бер артлы, ҡапҡа шығырҙатып,
Эркелешер туған-теләктәр.
Нишләр икән үҫеп буйға еткән
Муйыл күҙле ҡыҙый бигерәк тә?!.

## II бүлек

Төпкә батҡан әсәй күҙҙәренең
Күреү менән нурһыҙ бағыуын,
Ҡойолдо ла төштө егетебеҙ —
Бағаналай ҡатып ҡалыуын

Тойманы ул... “Аһ!” итте лә әсәй,
Ҡосаҡланы килеп иңенән;
Көллө тәне дер-дер ҡалтыраны,
Ҡыҫҡан саҡта ҡулһыҙ еңенән.

— Балаҡайым! Баллы ҡолонсағым!
Ышанмайым!.. ысын һинме был? —
Илаһа ла, күҙҙән йәш сыҡманы,

Илай-илай кипкән ине шул...

— Көтмәгәйнең әллә мине, әсәй?
Ваҡытһыҙмы ҡайтып килеүем?..
— Эй балаҡай! Ясин сығартҡайным,
Мәғлүм булғас яуҙа үлеүең...

— Тәүбә, әсәй! Бына баҫып торам,
Штык һымаҡ шыҡай -- ҡаршыңда.
Ниндәй үлеү?!
— Ҡара ҡағыҙыңды
Алғанға бит алты ай ғына... —

Һандыҡтағы ҡалай ҡумтаһынан
Ҡармап шомон улға тотторҙо.
“Похоронка”...
“Ҡаты бер алышта
Юғалттыҡ беҙ улың батырҙы”...

...Ҡалғайны шул, эйе, ул йығылып
Туптар яуған, йорттар ауғанда...
Бер соҡорҙан уны соҡоп алған
Үлек йыймыш трофей-команда...

Госпиталдә иҫһеҙ ятҡан оҙаҡ...
Ишетмәгән, теле күрмәлгән.
Ҡулһыҙ ҡалып, йөрөй башлағас уҡ,
Үҙен-үҙе оҙаҡ белмәгән...

Әсәй күҙе йәнһеҙ бына ниңә...
Илаһа ла, сыҡмай күҙ йәше...
Сөнки бит ул уға — тере мәйет, —
Ғазраилдең әрһеҙ көндәше...

Сисендерә әсә балаҡайын,
Ҡабат-ҡабат ҡыҫып ҡосаҡлай.
Бушең төбөн һәрмәй һәм, ниһәйәт,
Йәше тама тулыш борсаҡтай...

— Әсәкәйем, шулай инде бына...
Ҡуш ҡуллап уҡ ҡосор инем дә...
— Эй балаҡай, әлдә мең ризамын —
Йәнең генә ҡайтһын тәнеңдә!

Эй Хоҙайым, шөкөр биргәнеңә!
Башҡалар ҙа күрһен был көндө.

Ошо шатлыҡҡалыр инде, кисә
Йөрәккәйем бигерәк елкенде.

Йыуын, балам, хәҙер сәй бешерәм,
Бына һөлгө, бына һабының.
Атаҡайың ғына күрәлмәне
Ғаиләһенең теүәл табынын...

Сыҡты Талғат тышҡа бит йыуырға.
Һыҡтай йәне, юҡтап атайҙы.
“Ҡара ҡағыҙ” уға килде, тиеп,
Әсәһенән былтыр хат алды...

Бер фронтта бергә йөрөгәндәр...
Өскөл хаттар ҡалған ҡумтала...
Әсәй һаҡлап тотҡан һабын менән
Йыуына ла өйгә уҡтала.

Күҙләй уны түрҙән скрипкәһе
Быялалы шкаф эсендә.
Күпме хыялланды егет шуны
Һыҙҙыртырға, ҡайтып ошонда...

...Сабый саҡтан һөйҙө сыңрау телен,
Үҫә төшкәс һөйән, ат ҡылдан
Яһап тартты үҙе һөйөклөһөн —
Ныҡ арбалды атай был моңдан.

Шул көҙөн үк, ике һарыҡ һатып,
Ырымбурға атай юлланды.
Әллә ҡайҙан табып алып ҡайтты
Улҡайына шөңгөр ҡоралды.

Ырымбурға китеп әртис булған
Скрипкәсе Ишәй Ишмырҙа
Ҡайтҡан һайын уны күнектерҙе
Ҡайҙа баҫып, ҡалай ышҡырға.

Үҙе менән ҡуша һайратырға
Тотонғастын ауыл егете:
— Булды! — тине. — Минән уҙҙырып уҡ
Сыңратырға һиңә көн етте!..

Ишетелде: Мәскәү һуғышында
Һалған башын Ишәй Ишмырҙа.
Уйлағандыр: “Бөтмәҫ моңдарымды

Дауам итер илдә иш мырҙа”.

Иш мырҙаһы бына иш ҡанатһыҙ...
Моң ҡумтаһы илай шкафта...
“Ышҡылтаһын ышҡыр уң ҡулым юҡ,
Муйынсаһын һулым тотҡанда”...

Быялаға (һалҡын!..) маңлай терәп
Талғат бата ауыр моңдарға.
(Паганини һымаҡ, теләгәйне
Бер ҡылында йәндең уйнарға...)

*   *   *

Барыһы бар әсәй табынында —
Башлы ҡорот, ҡағы, муйылы.
Яңы ғына бешкән күкәй менән
Мысай тәбәһе лә ҡуйылды.

Госпиталдең юллыҡ күстәнәсе —
Сәй-шәкәре йәнә өҫтәлгәс,
Ҡуҙҙа ҡыҙған сәйгүн ҡапҡасынан
Танауҙарға тәмле боҫ бәргәс,

Аллы-гөллө булды көллө донъя,
Күңел көпкәйҙәре кирелде.
Мысай тәбәһенән ауыҙ итеп,
Ошондай ҙа һорау бирелде:

— Был ни, әсәй? Ҡоммо, тиһәм — ризыҡ...
Жмых, тиһәм — тора ыуалып...
— Илде ҡотҡарыусы шул булмаһа,
Үлер ине астан бар халыҡ.

Мысай тигән әрһеҙ сүп үлән ул,
Ә беҙҙеңсә — сысҡан тарыһы.
Сысҡан күҙенән дә кескәй ҡала,
Һыҙырылһа күкшелт ярыһы.

“Манный ярма беҙҙең!” — тибеҙ уны.
Ҡабыҡлата тартһаң — була он.
Алабутанан ул мең ҡат артыҡ —
Үҫә күрһен был сүп, Илаһым!

Сын игенде — бойҙай, арыштарҙы

Ейгән юҡ беҙ — китә фронтҡа.
Иләк аҫтындағы мысай ғына
Ҡала беҙҙәй аҫҡаҡ тауыҡҡа.

Уныһы ла түгел һис туйғансы —
Услап ҡына бүлә «Өсбармаҡ»...
— Ә? «Өсбармаҡ»?! Кем ул?
— Белмәйһеңдер...
Зекер тигән бөткөр ул һармаҡ.

— Зекер? Беләм — минән бер йәш кесе.
Түгел мени Зекер фронтта?
— Ҡәһәр һуҡҡыры ул тылда ҡалды,
Бармаҡтарын турап силосҡа.

— Аңламайым...
— Силос турағыстан
Өҙҙөрттө лә ике бармағын,
Бармай ҡалды...
«Өсбармаҡ» тип хәҙер
Йөрөтәбеҙ колхоз ҡарағын.

Шул «Өсбармаҡ» колхоз келәтенең
Аҫҡыстарын йылғыр уйната.
Бойҙай тартҡан һайын, бер ҡапсығын
Ҡара баҙарына оҙата.

Ҡалғандарын бүлә түрәләргә...
Ҡала беҙгә ҡырлыҡ, мысайы.
Уныһы ла тейә берәр устан...
— Совет ҡайҙа?!
— Закон тоҡсайы

Заңлай фәҡәт Зекер зауығына...
— Ә бригадир?
— Ул да бер ҡалып.
«Ҡабырға» гел ҡағып торғас беҙҙе,
Сығырынан сыға мут халыҡ.

— «Ҡабырға»?! Кем?
— Совет ул «Ҡабырға».
Рәйеселер йәғни советтың.
Мулла ҡушҡан аты — Ҡорбанғәли,
Һыңар ҡабырға юҡ ул эттең.

— Ҡорбанғәли? Ҡорбанғәли ағай...

Беләм уны...
— Ҡайтҡас “фронт”тан
Ҡабырғаһын һалып... шуның үсен
Ала һымаҡ ябай халыҡтан.

Ҡаты ҡуллы ине Ҡорбанғәли,
Хәҙер инде ҡаты бәғерле.
“Үҙем закон!” — тиеп, кеше хаҡын
Ашай-ашай һала йәберҙе...

Бригадиры – “Ҡабырға”нан кире –
Ҡулында гел ҡамсы сыжлата.
“Ҡамсы” тигән ҡушаматҡа ҡалып,
Ҡанлы йәштәр менән илата...

Тешен ҡыҫып төшә егет түрҙән,
Үрле-ҡырлы йөрөй иҙәндә.
Әллә ниңә буш ең уң йоҙроғо
Йомарлана, хатта киҙәнә...

Әсәһенән ҡыймай һорарға тик
Муйыл күҙле ҡыҙҙың хәлкәйен.
*Өммөгөлсөм*...
Барып урау кәрәк
Ҡырынлатып уның өйкәйен...

* * *

Әсәкәйе дәррәү китә эшкә:
Уттай сула — сәсеү ваҡыты.
«Өсбармаҡ»тың дөйөм келәтендә
Орлоҡ ағыулайҙар — эш ҡаты.

Сәсәй-сәсәй ишек яба әсәй —
Ағыу һулап күкрәк киҫелгән.
Ағы ла юҡ — һыйыр ҡыҫыр ҡалған,
Ағыуҙан баш ҡатҡан, иҫергән...

Сыға Талғат урам әйләнергә —
Гимнастерка-салбар, пилотка...
Уң еңен тик теләп күрһәтмәҫкә,
Беренселек бирә һул яҡҡа...

Бына ул өй. Тәҙрә пәрҙәһеҙ тик...
Бер күҙенә картон ҡағылған.

Күренмәне теге, күренмәне,
Күпме уҙһа ла шул янынан...

...Ҡырғын яуы ҡупҡан көнбайышҡа
Оҙатҡанда ауыл улдарын,
Ҡыҙ-ҡырҡындар урам осонаса
Тиреп барҙы таҡмаҡ-йырҙарын.

Бер ҡыҙ ғына ләкин йырламаны,
Сабыйлыҡтан сығып етмәгән...
Муйыл күҙҙәрен ныҡ мөлдөрәтеп
Талғатҡа ҡыҙ фәҡәт текләгән...

Егеттәрҙе егет иткән арба
Айырылып ҡорҙан киткәндә,
Сеңләп-сеңләп илап ҡыҙ йүгерҙе...
Ҡоштай осоп килеп еткәндә

Ҙур асылған моңһоу күҙҙәренән
Түгелде нур Талғат күҙенә.
— Тиҙ ҡайт!.. — тине, күҙйәшкә төйөлдө...
Тороп ҡалды, сәскә бирҙе лә...

Шул сәскәне егет юғалтманы –
Күкрәгендә тәңкләп йөрөттө.
Сәскә янды ҡуша окоптарҙа –
Дошман уты уны көл итте...

Йөрәгенә тамыр йәйгән шул гөл
Ҡайтты алып бына тамуҡтан.
Типмәй микән дарçлап йөрәккәйе
Ҡыҙыйҙың да ошо минутта?!.

*  *  *

Ҡуна ятып эшләй ҡырҙа халыҡ —
Тирәклелә баçыу ыçтаны.
Тал сыбығы һымаҡ етһә буйға,
Ҡайҙа булһын инде ҡыҙ тағы?!

Ер һөрәлер йәки тырматалыр.
Ат ҡыуалыр, бәлки, сәсеүҙә.
Ир-атты был һуғыш ҡырсып алғас,
Ҡатын-ҡыҙ бит ҡалды мисәүҙә...

Донъя күркен күреп бара егет:
Их тыуған ер! Саңы, туҙаны!
Әрем әселе саф елен һулап,
Берләм юлдан тик бер уҙғаны!

Баҫыуҙар тын... Һөрөп ҡабартылған,
Тырматылған бер ни тиклеме.
Ай-һай ҡыйын! Ат һәм үгеҙ менән
Йырып сығыуҙары икеле!..

Бураҙнаның тойоп йылылығын,
Бармаҡтарын ҡарай батырып.
Тәрән генә... Оҙон был баҫыуҙы
СХТЗ һөргән, ахыры.

Бригадала ҡалған быйыл, тиҙәр,
Эшкашырлыҡ тик бер трактор.
“Запсас” юҡтан, тиҙәр, башҡалары
МТС-та шәңгеп тормаҡтыр...

Бына ыҫтан... Йорт бар ине ныҡтан —
Йәйләү күрке ошо тирәлә.
Ирҙәр бөткәс китеп,
Урыҫтарға
Һатып эскән, тиҙәр, түрәләр...

Ә хәҙерен һалам ҡыуыш рәт-рәт —
Биғәйни бер ауыл урамы!
Их, шулай ҙа егәр һабансылар
Һағыналыр ағас бураны!

Иркен ине. Йылы, күркәм ине.
(Ә ҡыуыш — хөрт... мыжғый талпаны.
Йоҡлағанда битең сыйып үтә
Кеҫәрткеһе йәки сысҡаны...)

Өйлә ваҡыт... Төшкө ашта ыҫтан:
Малай-шалай... Күберәк ҡатын-ҡыҙ.
Арыш ыумасҡайын тәмләртергә
Урталыҡта тора ҡаты тоҙ.

Ҡатыҡтары бары — ҡатыҡ ҡата,
Эй ҡатыҡлы арыш ыумасы!
Тик шыйыҡ шул... Икмәк тә бер һыныҡ...
Төйөрөмө күберәк булһасы!

Ит боҫлана ҡуна таҡтаһында —
Һарыҡ һуйған колхоз һабанға.
Ғилми бабай наҡыҫ ҡалъяларҙы
Ҡуна таҡтаһына һалған да:

“Кемгә был?” — тип төртә һәр өлөшкә...
(Арты менән баҫҡан бер малай:
“Фәләнсәгә” — тиһә, шул “фәләнсә”
Үҙ өлөшөн йәһәт ҡармалай...)

Икеләтә өлөш бар биш-алты —
Ике норма йөктө тартҡанға.
Икмәкте лә ала ике һыныҡ —
Ударниктар ҡыҙыл таҡтала!..

...Ҡуна ятып эшләү яҡлы халыҡ,
Ыумас эсеп дөйөм ҡаҙандан.
Тик ошо юл бер аҙ ҡотолдора
Ауылдағы аслыҡ-ҡазанан...

*     *     *

Сыуылдашып килеп күрештеләр,
Кереттеләр түргә һалдатты.
Ҡунаҡ көтөп ҡалған ҡалъяны ла
Әллә ҡайҙан Ғилми ҡарт тапты.

Ҡатындарҙың тамды күҙ йәштәре,
Фронт хәлен һорап, ыумаҫҡа.
Еткән ҡыҙҙар киткән һөйгәндәрен
Хәтерләне, баҫып баш аҫҡа.

“Күрмәнеңме унда атайымды?” —
Тип текләне ҡырыҫ малайҙар.
Барыһының табып күңелдәрен
Сыға алды хәлдән алай ҙа.

Әсе ине, әсе арыш ыумас...
Әрселмәгән борсаҡ бәрәңге...
(Бесән биреп алған уны колхоз
Урыҫтарҙан...) Иҙҙе зар йәнде:

*Өммөгөлсөм* тигән ҡыҙ барлығын
Белмәй ине һымаҡ бер кем дә...
Тик осраҡлы ғына әйтә һалды

Ғилми бабай, табын бөргәндә:

— Аш илтергә ине Өммөгөлгә, —
Төйәк ҡылған Ярыш баҫыуын.
Ватыҡ тракторын йүнәтәлмәй,
Көнө-төнө көйләп ятыуы...

“Тракторсы икән Өммөгөлсөм!” —
Дарҫлап типте егет йөрәге...
Тик шул мәлдә ҡупҡан бер ғәрәсәт
Иғтибарын ситкә һөйрәне:

Атын бороп, төшә ҡырандастан
Буҙарынған «Ҡамсы»-бригадир,
Сарылдатып яра бер малайҙы,
Ҡамсы тамған һайын ҡыҙа ир:

— Әйтмәҫһеңме, башҡа әйтмәҫһеңме:
“Болғау һатып түрә эсә”, — тип.
“Һабан аттарына болғау онон
Урыҫтарға илтте кисә”, — тип!

— Әйтмәм! Әйтмәм!...
Бер ырғыуҙа Талғат
Барып баҫты түрә ҡаршына.
Тартып алып саж-сож ут-ҡамсыһын,
Ярҙы үҙен...
Ҡайраҡ ташына

Ташлап,
Һабын тапап һындырҙы һәм
Утынлыҡҡа сүптәй бырғытты:
— Үҙ башыңа бәлә ҡунмаҫ борон,
Бригадир, ҡуй һин был холоҡто! —

Шыҡырҙатты тешен: — Ҡурҡаҡ ҡуян,
Тылда боҫоп үҙең ҡалғанһың!
Ҡулың барып ҡалай ҡайыҙлайһың
Яуҙа ауған һалдат балаһын! —

Тибергә лә итеп киҙәнгәйне,
Тотоп ҡалды, ярай, Ғилми ҡарт.
«Ҡамсы» ҡасты ҡарпып ҡырандасҡа —
Ауыл яҡҡа алып елде ат.

Тороп ҡалды янап яр һалыуы:

— Күрһәтермен әле “ҡуян”ды!
Һалдат тимәй ябып серетерҙәр
Етәкселек көсөн ҡыйғанды!..

Башын сайҡап, уфтап әйтте Ғилми:
— Ах балаҡай, кемгә киҙәндең!..
«ҠамсыҒ» барып тишһә «Ҡабырға»ға,
Һыңар таҡтаһына иҙәндең

Баҫтыртырҙар, тартып прокурорға...
“Халыҡ дошманы” ла итерҙәр.
Фронтовик тип һис тә торманылар —
Башын юйҙы шулай хаҡ ирҙәр...

Ҡулын ғына Талғат һелтәне... Һәм
Бабай менән, ығыш ат егеп,
Өммөгөлсөм һылыу ҡатарына
Ярыш яҡҡа китте хаҡ егет.

* * *

СХТЗ тигән тракторҙың
Ята ине майлы аҫтында,
Гайкаларҙы бороп, Өммөгөлсөм
Ҡара майға ҡатҡан “костюм”да...

Һын турайтты, тороп, тал сыбыҡтай.
“Костюм”ы ла ҡалай килешә!
Егет күҙҙәрен ныҡ ҡыҙҙырырға
Ҡыҙҙы биргән Хоҙай, мең йәшә!

Күҙҙәренең муйыл ҡаралығы
Баҡты тишеп егет йөрәген.
Танины... тик... ситкә боролдо ҡыҙ...
Ҡул да бирмәй birҙе кәрәген...

Һулышынан һалҡын боҙ ҡойолдо,
Өндәшмәне өнө килһә лә.
Иремәне,
Картер ябып егет
Тракторын көйләп бирһә лә.

Ултырҙы ла китте һабан һөрөп,
Бураҙналар барҙы бөрөлөп...
...Ҡырҡынсы йыл илап ҡалған ҡыҙҙы

Юҡтаны йән үлеп, терелеп...

“Ғәрип бәндә — ғәрле бәндә инде...
Ҡайырғандыр буш ең күңелен.
Их, белһәңсе, ҡыҙый, был донъяла
Мөхәббәттең ендә түгелен!..” —

Ғилми бабай менән ҡайтты егет
Даңғор-доңғор ҡаты арбала.
Һүтелде ҡарт:
— Быйыл яҙын ғына
Харап булды ошо ҡыҙ бала.

Үҙем илткән мискә кәрәсинен
Яуыз йәндәр урлап киткәндәр.
“Үҙе урлап һатҡан Өммөгөл!” — тип,
«Өсбармаҡ»ты шаһит иткәндәр.

Эҙәрлекләй ине һылыуҡайҙы
Упалнамус-түрә Байсәләм...
Төрмә менән янап килгән уға
Һәм талаған ҡырҙа... Бар ғәләм

Белә быны... Ләкин упалнамус
Барыһын тиң бөттө ҡурҡытып.
Ил күҙенә ҡалҡып ҡарай алмай
Өммөгөлсөм йөрөй ут йотоп...

* * *

— Их!.. — түҙмәне егет, бабайының
Арбаһынан ҡалды ҡубынып. —
“Ташларғамы тапап бар донъяһын?
Иларғамы әллә һулығып?!.”

Килде алйып орлоҡ келәтенә —
Әсәһенең тартты йылыһы.
Бисә-сәсә орлоҡ ағыулауҙа —
Тын алырлыҡ түгел һауаһы.

Яулыҡ менән бәйләп ауыҙ-морон,
Һалдаткалар ғүмер ҡыҫҡарта.
Уйнап йөрөй һалдат балалары
Әжәл йотоп шул ыу-боҫлаҡта.

Ә бер малай ята ерҙә аунап
Уҡшый-уҡшый... Әсә һөйләнә:
— Ашаҡайным кисә “эт ҡойроғо”,
Ҡоҫа алмай шуны этләнә...

— Нимә ул? — тип һалдат аптырағас,
Аңлаттылар:
— Ул — тал бөрөһө.
Бешергәстен, ҡойроҡ кәкерәйтеп
Һыуҙа йөҙәлер һәр береһе...

Аслыҡ киҫкән үкһеҙ һалдаткалар
Шул бөрөнө барып йыялар.
Һәм өс тапҡыр һыуҙа ҡайнаталар —
Әсе ыуын өс ҡат йыуалар.

Һемергәстен ошо эт өйрәһен, —
Әллә ыуыҙ, әллә ыу ғына, —
Күрәһегеҙ: әҙәм ята аунап,
Сыға алмай әжәл яғына...

Һәм әсәһе шул саҡ сыңғылдатты
Аҫыулы бер һабан дөрәнен:
— Әхирәттәр! Ҡуйың мәлгә эшен! —
Көнлөк ризыҡ бүлеп бирәмен!

Эркелделәр... Әсәй ҡалаҡ менән
Бүлеп һала мысай күк онон.
— Әл дә, — тиҙәр, — ике ҡалаҡ он бар
Йәшәтергә башҡорт тоҡомон!..

Ике ҡалаҡ... Өйҙә биш балаһы...
Бере ята ана тартышып.
— Их Йәмилкәй, рәхәт һиңә яуҙа —
Күрмәйһең был тамуҡ ярышын... —

Шулай ти ҙә һылыу Йәмиләкәй
Улын ала ерҙән күтәреп...
Ҡиблалары түңкәрелгән Талғат
Сығып китә табан түңкәреп.

*  *  *

Килеп керҙе һалдат сельсоветҡа,
Совет власына күҙ терәп.

Әллә ниңә “совет” тигән һүҙҙән
Иркен һулай ине күкрәк.

«Ҡабырға» һәм түрә-Упалнамус,
«Ҡамсы»һы ла ҡарғый ҡырында.
«Ҡамсы» теҙгән хөсөт һүҙҙе яҙып
Зыҡ-ҡубалар рәсми урында.

— Әһә! — тине «Ҡамсы».
— Вәт мас! — тине
«Ҡабырға»һы. — Килдең ваҡытлы!
Упалнамус, ҡуйы ҡаш һикертеп,
Кереүсегә башын ҡалҡытты:

— Һин, фронтовик, сығып сама сиген,
Ташланғанһың ерле власҡа!
Совет власының хөкөмө киң —
Һин дә һыйырһың ул ҡоласҡа!

...Ауылдағы әрген, таҙ Байсәләм —
Упалнамус хәҙер — вәт бәлә!..
Совет власын ул үҙе итеп
Инанған ныҡ — шунда мәсьәлә...

Ҡарыулашыу ҡотһоҙ уның менән...
Еңелерәк унда — фронтта
Штык тоçҡап барыу атакаға!.. —
Иçен йыйып хәтәр минутта

Китте сығып Талғат сельсоветтан,
Тап районға табан көйләне:
“Төпкөл ауыл ҡалай йәшәгәнен
Үҙ телемдән телеп һөйләрмен!”

* * *

Сәләм биреп хәрби комиссарға,
Теркәлгәстен “мирный” иçәпкә,
Керҙе егет тура партияның
Райкомына хисап бирмәккә.

Үҙе кеүек яуҙан ҡайтмыш урыç —
Нәк беренсе йәғни сәркәтип,
Туҡылдатып ағас бер аяғын
Тыңлап бөткәс, сәмен сәсрәтеп,

Кәңәш бирҙе утташ ҡорҙашына:
— Бирешмә һин, бул ныҡ, түҙемле.
Берлин ҡапҡаһына атакаға
Барғандай той, брат, үҙеңде!

Ә ваҡ-сыбыр һине йөҙәтеүсе —
Ваҡытлыса! Кәрәк түҙергә.
Кеше юҡтан ғына кеше улар —
Ҡотолорбоҙ ҡайтҡас төҙ ирҙәр! —

Һәм ҡыуанып унның килгәненә,
Тар иңенә киң эш йөкмәтте:
— Белеп торам, ялмай йот-ялмауыҙ
Фронтҡа тигән изге икмәкте.

"Ҡомаҡ" юлын кәрәк йомғаҡларға —
Глубинкаға[2] ҡайтып бул мөдир.
Һаҡлап ҡалһаң быйыл бар уңышты,
Булырһың, тим, ысын баһадир! —

Шуның менән егет ризалашты,
Мөдир булып ҡайтты ауылға.
Иген менән илең бәйләнешен
Һалыу кәрәк ине хаҡ юлға.

* * *

Ауыл мәсетенең киң күләмен
"Глубинка"-келәт ҡылғандар.
Иҙәненең шыплап ярыҡтарын,
Ишегенә йоҙаҡ һалғандар.

Йәй буйына Талғат әҙерләне
Шул бинаны яңы игенгә.
Бер бөртөгөн ҡоймай урып алып,
Оҙатырға фронт тигәнгә...

Көҙ ҙә килде. Бойҙай башаҡтары
Ураҡ тойоп түбән эйелде.
"Глубинка"-мәсет иҙәненә
Көнө-төнө иген өйөлдө.

---

[2] Глубинка – ауылда дәүләткә тапшырылған игенде ваҡытлыса һаҡлай торған келәт.

«Ҡабырға» һәм «Ҡамсы», «Өсбармаҡ»тар
Йышлаттылар бер саҡ эҙҙәрен.
Егет ҡылын сиртеп ҡаранылар:
Тондортмаçмы нәфсе күҙҙәрен?

Гәрәбәләй эре, саф бойҙайҙы
Юлландыртһаң төндә баҙарға,
Аҡса керһә һайрап кеçәләргә —
Булыр ине ожмах таҙҙарға!

Ҡыланғандар шулай быға тиклем —
Бойҙай һатып эсеп ятҡандар.
Ябай халыҡ астан ҡырылғанда,
Затлы тауар тейәп ҡайтҡандар...

Тел төптәрен яҡшы төйөрөмләп,
Өс тағанды егет ауҙарҙы:
— Тоҙтүбәнең тоҙло төрбәһенән
Табырһығыҙ, — тине, — баҙарҙы! —

Тибеп ҡалды хатта арттарына,
«Ҡабырға»ға тиклем тәкмәсте...
...Йоҙроҡ төйөп улар төйнәлделәр
Түңкәрергә ипһеҙ "әтәс"те.

* * *

Ил байлығын икәү һаҡланылар:
Ғилми бабай — төнгө ҡарауыл.
Имен генә иген ыратҡанда,
Телгә килде кинәт бар ауыл:

"Тотолғандар төндә яһил бурҙар —
Һатып ятҡан фронт икмәген.
Райпрокурор үҙе алып киткән
Боғалаҡлап төп бур икәүһен".

Кем һуң улар?
Улар — Талғат, Ғилми —
Ҡулһыҙ һалдат менән аҡһаҡал.
"Ҡарауыл һәм мөдир, бер булышып...
Атҡарғандар үтә тәүәккәл"...

Тәүәккәл шул...
Сөнки ул бойҙайҙы

«Өсбармаҡ» һәм «Ҡамсы» урлаған.
Талғат менән Ғилми аҙбарына
Илтеп һалған – мәкер ҡармаған...

Ә «Ҡабырға», ҡыҙыу эш йүгертеп,
Прокурорға хәбәр еткергән.
Мөдир, ҡарауылды тентетергә
Район әһелдәрен килтергән.

Ике ҡапсыҡ бойҙай менән ҡуша
Алып киткән улар икәүҙе.
Шул китеүҙән Ғилми һеңеп ҡалды...
Эҙ юғалтты Талғат шул йәйҙе...

## III бүлек

Тоҙтүбәнән Талғат тоҙ сығарҙы
Тиргә мансып тәрән шахтала.
Өс йыл буйы тоҙға һеңешкәндәй
Һеңмәһендәр ине башҡалар!..

Белгәнгәме икән техниканы,
Булғанғамы әллә фронтовик,
Вагон йөрөтөүсе итеп уны
Беркеттеләр, еңел эшкә, тип.

"Еңел"е лә унын шундай "еңел" —
Теҙген тартып алйый һыңар ҡул.
Ашауы ла — "бикле фронт" нормаһы...
Көнө-төнө янда ҡарауыл...

Үлеүҙәре бары фронттағыса —
Йығылырың белмәй бараһың.
Тоҙ түбәһе түҙем аңдып тора
Йәшәү менән әжәл араһын.

Көтмәгәндә түбә әүшәрелә —
Тоҙға һеңә әҙәм балаһы.
(Күҙ йәшенең тоҙо булып ҡата
Кемдең күҙҙәренең ҡараһы?..)

Ә шулай ҙа өс йыл йыйҙы егет...
"Үрнәкле" тип эше танылды.
Срогынан элек сығарҙылар
Ер аҫтынан улын ауылдың.

Ултырып уҡ Ташкент поезына,
Ҡайтып бара бына сәләмәт...
...Киткән саҡта район төрмәһендә
Булғайны бер серле ғәләмәт:

“Бик шәп һылыу “сирткән” ауылыңдан
Бер күрергә һине!” — тинеләр.
Инәлһә лә күпме илай-илай,
Индермәгән ҡыҙҙы шиклеләр.

“Передача” ғына тапшырылды:
Мысай тәбә, бер баш ҡорот ине.
Ә яҙыуын көрмәп юғалттылар —
Сәләмдәргә һаран йорт ине...

Белмәй китте ҡыҙҙың ул кемлеген,
Маңлайына моңһоҙ тай тибеп...
Борһалана хәҙер: ”Берҙән-бер йән
Бар ине бит... ул бит... һай, егет!..”

Күҙ алдында теге яу сыҡҡан йыл...
Бәүелеүе хәрби арбала...
Илай-илай уға осоп килеп
Сәскә һонған сихри ҡыҙ бала...

*“Өммөгөлсөм!* Ул бит Өммөгөлсөм! —
Елдерт, поезд, елдерт тиҙерәк!
Таш яуһа ла, табып күрешергә,
Серләшергә күҙгә күҙ терәп!

Хаин һалған көсләү хурлығынан
Алырмын мин, тартып алырмын!
Ҡанһыраған йөрәк яраһына
Йөрәгемде ярып ябырмын!

Сәскә генә бит ул йәнем өсөн
Мәңге саф һәм мәңге балҡышлы!”
...Муйыл күҙле күтәп алыр төҫлө,
Һирпеп ташлап зарлы һағышты...

* * *

Ҡайтып төштө Талғат ауылына
Иҫләмәҫтән — күптәр көтмәҫтән.

Иҫләгәндер уны тик әсәһе
Һәм көткәндер өмөт өҙмәҫтән.

Килеп ләкин улдың инеүкәйен
Ҡаршылаы әжәл-түшәктән.
Күҙен генә бер тултырып ҡарап,
Йәнен бирҙе бер һүҙ әйтмәҫтән...

Осло бысаҡланып, йөрәгенә
Һуйып керҙе сикһеҙ был ҡаза.
Көткән ҡыуанысла ҡауышыуҙы
Алмаштырҙы ҡәбер, йыназа...

Әсәй ҡәберенең тупрағына
Усын һалып өнһөҙ ултырҙы.
Ҡаршыһында ғына икенсе гүр —
*"Өммөгөлсөм"* тиеп уҡылды...

Был ни ғиллә?! Ниңә *Өммөгөлсөм?!.*
Аңлай алмай егет бер нисек.
Был исем бит берәү генә ине...
Яҙыуы ла яңы... Сер сисеп

Ярып кергәс йәнгә мәғәнәһе,
Салҡан ауҙы егет ҡысҡырып.
Ике усын ике гүргә ябып
Юйҙы иҫен...
Фәҡәт кисҡырын

Ауа-түнә сыҡты зираттан ул.
Танһыҡ йортҡа тура атланы.
Өммөгөлсөмөнөң әсәһенән
Һорашмайса сара тапманы...

* * *

Теге көҙҙө ҡырҙа эштәр бөтөп,
Иген шылғас дәүләт-келәткә,
Мысайы ла илгә аҙ эләккәс,
Аслыҡ гиҙгәс эҙләп һөйәркә,

Упалнамус киткәс бынан ҡайтып,
Донъя ҡалған һәптән өсәүгә.
Һәм өс таған мутлы һүҙ ҡуйышҡан
Әйләнергә "төнлөк кейәү"гә:

Сиратлашып, һалдат ҡатындарын
Берәм-берәм “һәрмәп үтергә”...
Упалнамус үткән юлдан башлап
Китергә, тип килгәс фекергә,

Шыбаға, ти, тирләп тотошҡандар...
«Өсбармаҡ»ҡа сыҡҡан юл башы.
Өммөгөлсөмгә ул ябырылған,
Һаҡҡа ҡуйып ике юлдашын.

(Был төн әсә өйҙә юҡ саҡ булған...)
Бөгалмағас талды «Өсбармаҡ»,
Теге икәү баҫып кергән өйгә...
Ғәрлегенән йәнен йомарлап

Өммөгөлсөм ап-аҡ хур күлдәктә
Борам тауға сығып йүгергән.
Мәсхәрәнән әжәл татлыраҡ, тип,
Текә ярҙан һыуға һикергән...

Һөҙөп һыуҙан иртән сығарғандар
Һылыуҙы — тик инде һуң булған...
Нәүбәттәге ҡәберташ битенә
Нәүбәттәге ядкәр уйылған...

*   *   *

Ятты ҡайтып Талғат ятағына,
Тапма тапҡан тәндәй ҡалтырап.
Ә шкафтан баҡты скрипкәһе,
Татлы хыял һымаҡ ялтырап.

Ярым өнлө, ярым төшлө көйө,
Үткәндәре килде алдына.
Әсәһе һәм һылыу Өммөгөлсөм
Скрипкә һалды ҡулына.

Ҡулһыҙ көйө лә ул –ҡуллы имеш,
Йөрәккәйе тулап-талпына.
Үҙәккәйен өҙөр моң ҡылдарын
Тибрәтергә йәне алҡына.

Ышҡылтаһын ышҡый Өммөгөлсөм,
Әсәй баҫа нескә ҡылдарға.

Талғат үҙе шөңгөр күкрәгенән
Сихриәтле моңдар сығара.

Күктәргә бер аша тылсымлы моң,
Ерҙәргә бер таша түгелеп.
Илау килә әллә һулҡылдаған,
Өҙләү өҙә әллә күңелен...

Үҙе, имеш, Талғат моң шишмәһе —
Скрипкә икән ул үҙе!
Оҙон көйгә һыҙылып уянды таң,
Тулҡынланды моңдар диңгеҙе!

Күкрәгенән таша, урғылып, моң...
Скрипкә тыңлай кәштәлә...
*Өммөгөлсөм* тигән тылсымлы көй
Йырҙарына илдең өҫтәлә!

Йәне һыҙлап, буҙлап барған килеш,
Борам тауға барып ул менде.
*"Өммөгөлсөм"* осҡан текә ярҙың
Сите ялҡынланып кителде.

Күкелдәне кәкүк туғайлыҡтан,
Ботаҡ бөгөп былбыл тирбәлде.
Ҡарпынылар һыуҙа аҡ ҡормандар,
Ҡамыш һайын ел йыр елгәрҙе.

Һыйыр һаумыш, көтөү ҡыумыш йәндәр
Эшен ташлап килде арбалып.
Борам тауҙың һырып итәгенә,
Гүзәл йырҙы йотто бар халыҡ.

Һәм күсте йыр ауыл сәхнәһенә,
Ауылынан осто ҡалаға.
Ә бер заман Өфө радиоһы
Яңғыратты бөтә донъяға:

Талғат тигән моңло йән барлығын
Йырҙарынан тыңлап белделәр.
...Йылдар үткәс, "халыҡ йырсыһы" тип
Данлы исем уға бирҙеләр...

### *Хушлашыу*

Баш ҡаланың иң ҙур һарайында
Концерт бара. Баҫыр урын юҡ.
Мин саҡ керҙем. Ишек төбөндәрәк
Ултырттылар, биреп урындыҡ.

Моңдар һуҙа данлы ауылдашым —
Күкрәк тулы халыҡ моңдары.
Һуңғы өлөшөндә концертының —
Үҙе яҙған шөңгөр йырҙары.

Бер илата, бер көлдөртә илде —
Йөрәктәрен сихри сыңрата.
Паганини һымаҡ, бөтөн залды
Бер ҡылында ғына уйната!

Хушлашырға етте бына ваҡыт...
Иңрәүҙән йән әммә туйманы.
*"Өммөгөлсөм"* йырын бөтөн ғаләм
Аяғөҫтө баҫып йырланы...

28.07.1950. Сәнкем-Биктимер.
18.11.1951. Ырымбур.

## ҠУРАЙ ҺӘМ ТУЛҠЫНДАР

*Мачталарҙың башын күмеп*
*Ургылганда упҡындар,*
*Матрос бескозыркаларын*
*Кейеп китә тулҡындар...*
Матрос йырынан.

### *1*

Мин йәш кенә матрос инем әле
Балтикала — Хәрби флотта.
Беҙҙең карап тулҡын яра ине
Сал диңгеҙҙә — алыҫ походта.

Ҡарт мичманды — һуғыш ветеранын
Сирләп киткән ҡапыл, тинеләр.
Командирҙан алып юнгағаса

Ҡаһармандың хәлен белделәр.

Флоттың иң оҫта хирургы --
Ханым сыҡҡан, тиҙәр, ярҙамға.
Гидросамолетта осоп килеп,
Ауырыуҙы тейеш ҡарарға.

Был ханымды белә командирҙар, —
Уҙған, ти, ул Ватан һуғышын.
Академияла уҡып, ҡабат
Флот менән үргән яҙмышын.

Алтын ҡулы бик күп ғүмерҙәрҙе
Алып ҡалған “теге донъя”нан.
Күптәргә ул бәхет килтергән, ти.
Тик үҙ бәхеткәйе булмаған...

Аҡкоштай саф көйө һайлаған ҡыҙ
Йәрһеҙлеккә тиңдәш яңғыҙлыҡ...
“Тап беҙҙең дә мичман ағай кеүек!..”
Тип уйлайым эстән, йән һыҙып.

Мичмандың да, хирург ханымдың да
Яҙмыштары икән бер төрлө.
Һөйгән йәрен күмгән һыуға тама
Мичмандың бит күҙ йәш бөрсөгө...

“Похоронка” тигән ҡара ҡағыҙ
Тыуған илгә күпләп яуғанда,
Мөхәббәтен, тиҙәр, хирургтың да
Убылдырған, Урал ауғандай.

Десант отрядында юғалтҡан ҡыҙ
Өҙөлөп тә һөйгән бөркөтөн...
Дошман йөрәгенә ауһын өсөн
“Похоронка” ҡатыш көл-төтөн,

Бөркөт булып аҡкош атылған, ти,
Йәрен йолған диңгеҙ-флотҡа.
Шунан бирле башы яңғыҙ ҡалып,
Яна икән һылыу зил-утта...

Исеме кем икән был һылыуҙың,
Их, беләһе ине, беләһе!..
...Легендалар өнгә ялғана ла
Ялҡынланып яна йөрәгем.

“Һуғыш ветераны ағай ҙа бит
Яңғыҙ бөркөт, — тиеп уйлайым. —
Бөркөт менән бөркөт ос(о)рашһа,
Ялҡын саңҡыр ине, моғайын!..”

*2*

Яҡташ бит ул миңә Рәхим ағай —
Икебеҙ тиң мәғрур Уралдан.
Ул йығылһа, Урал ауыр төҫлө —
Йөрәгемә йәне уралған.

Лазаретҡа керҙем йәнем көйрәп...
Тынып ҡалдым башы осонда.
Еҙ көпшәне ҡырҡып яһап алған
Ҡурай ине ҡырыҫ усымда.

Ялҡынымды тышҡа урғылтырға
Яйын таба алмай торамын.
Хирург ханым, мичман яҙмыштарын
Ҡауыштырып хыял ҡорамын:

“Оя үрә бына ике бөркөт —
Мөхәббәттән ғорур турайған.
Балтиканың бейей сағылдары,
Бейегерәк ырғып Уралдан!..”

Хәлһеҙ ҡулын һоноп, Рәхим ағай
Эргәһенә мине саҡырҙы:
— Урал һәр саҡ Урал булып ҡалыр,
Ә беҙ унһыҙ — ниндәй батырбыҙ?!

Матростың да ерҙә бар тамыры.
Тамырыңды, ҡустым, ҡырҡтыртма!
Уралым, тип үлә был “ҡарт мичман” —
Ошоно һин мәңге онотма!

*3*

Рәхим ағай ап-аҡ йүргәгенә
Көрәк ҡулын ҡырыҫ ҡаушарҙы.
Диңгеҙ тоҙо һеңгән ошо устар

Алып сыҡты уттан Ер-шарҙы.

Юҡ, йәҙрәләр атыу өсөн генә
Бирелмәгән ҡөҙрәт матросҡа.
Салғыһын да тотҡан һәм сәйен дә
Бешергәндер, һалып баҡрасҡа.

Тыуған ерҙең усаҡ төтөндәрен
Хәтерләйҙер йәшлек төндәре.
Саҡма тояҡ тайҙар ялын услап,
Онтағандыр Урал иңдәрен...

Ошо ҡулдар Урал ҡурайҙарын,
Ҡырҡып алып, көйләп тартҡандыр.
Тәфтиләүҙәр үртәп киткән ергә
Был ҡулдарҙан ырыҫ артҡандыр.

Тик... ни өсөн бында — тулҡындарға
Ғүмеркәйе ҡалған уралып?
Урал урағынан артыҡ күргән
Балтиканың дәһшәт ҡоралын?..

## *4*

Легендалар йөрөй Балтикала
Урал улы — матрос турында.
Атакаға ирҙәр күтәрелгән,
Ҡанатланып уның йырынан.

Һөйгән ҡыҙы булған — Гөллирәкәй,
Бергә барған намы десантта.
Дошман ярҙарына, йәҙрәләтеп,
Уның өсөн матрос үс атҡан.

Күмелгәндәр улар күк йәйғорға —
Балтиканың тәрән төбөндә.
Ошо хаҡта беҙҙең йөрәктәрҙе
Ашҡындыра йырҙар бөгөн дә.

Кем икән ул батыр — серле матрос?
Кем икән ул серле Гөллирә?
Улар өсөн ниңә был көндә лә
Матрос йөрәктәре тилерә?

Ошо хаҡта янып йөрөйөм мин,

Һорарға бер шуны уйлайым:
Батыр матрос менән Гөллирәне
Рәхим ағай белә, моғайын.

Рәхим ағай ҙа бит — Балтиканың
Десанттарын башлап барыусы!..
Күҙҙәремде йомам...
Ул — мин, имеш...
Шул десанттың яугир матросы.

## *5*

Бына мине күкшел Уралымдан
Гөллирәкәй яуға оҙата.
Һалҡын диңгеҙ керә араларға...
Йөрәгемде нәфрәт ҡуҙлата.

Ант итәмен ҡарап сал ярҙарға:
“Фашизмды тапап-емерәм!
Ҡайталмаһам, илгә Еңеү ҡайтыр,
Хуш бул, Урал, хуш бул, Гөллирәм!

Һуңғы һулышҡаса һуғышырға,
Яу ҡырырға һеҙгә һүҙ бирәм.
Ҡайталмаһам, илгә Намыҫ ҡайтыр,
Хуш бул, атам-әсәм, Гөллирәм!

Артҡа сигенмәйсә ырғылырға,
Ут булырға изге һүҙ бирәм.
Ҡайталмаһам, илгә Хаҡлыҡ ҡайтыр,
Хуш, ауылым, хуш бул, Гөллирәм!

Дошман утын күкрәк менән ҡаплап
Һүндерергә, илем, һүҙ бирәм.
Коммунист тип мине иҫәпләгеҙ,
Хуш, Ватаным, хуш бул, Гөллирәм!”

Ҡуямын мин шулай үҙ-үҙемде
Десантсылар янған йылдарға.
Ҡурайымдың осо мөлдөрәмә, —
Тулышҡандыр туған моңдарға.

Тыуған ерҙең һомғол сағылдары
Штыкланып күҙгә сағыла.
Хатта ерем, нәфрәт менән дөрләп,

Һөңгө тоҫкай дошман яғына!

### *6*

Юҡ, мин әле торам лазаретта.
Легендалар аша үрт йотам.
Урал ҡыҙы, Урал улдарының
Утлы шәүләләрен уятам.

Легендалар йөрөй Балтикала:
Ҡыҙыл флотсы ҡыҙ — Гөллирә...
Десантсылар һәр саҡ әйтер булған:
“Гөллирәкәй беҙгә көс бирә!”

Атакаға ҡыйыу ырғылырға
Егет йөрәктәрен ут иткән.
Матрос яраларын бәйләгән ул,
Дошманды ла күпләп юҡ иткән.

Эҙләгән ҡыҙ Балтик буйҙарында
Ғәйеп булған һөйгән егетен.
Тулҡындарға ҡарап йырлаған ул:
“Ишет мине, ишет, бөркөтөм!”

Йырын уның диңгеҙ төптәренә
Убып торған уҫал упҡындар.
Бескозыркаларҙы ғына ҡыҙға
Тәгәрләткән сап-сал тулҡындар...

Легендалар йөрөй Балтикала:
Гөллирәкәй көткән бөркөтөн.
Намы менән уның дошман ҡырған,
Мөхәббәтен йәнгә беркетеп.

Ҡыҙ үҙе лә сап-сал тулҡындарға —
Легендаға кереп күмелгән...
Заятүләк менән Һыуһылыуҙай,
Бер-береһе өсөн өҙөлгән...

Уйлайым мин, моңдар һулайым мин —
Аҡ лазарет моңға туп-тулы.
Рәхим ағай, услап ҡурай осон,
Ут өргәндәй миңә был юлы:

— Ҡарт мичманмын... Ятам аҡ йүргәктә...

(Күкрәгемдә ярсыҡ ҡуҙғалған...)
Мыйығыма, һырлы маңлайыма
“Диңгеҙ бүреһе” тип яҙылған...

Уйлама һин: Урал тартмай мине...
Ҡалай тарта — илап үлерлек!
Балтиканың тоҙло ҡосағына
Урал өсөн бирҙек ғүмерҙе...

Күмәк инек, һиндәй еләк инек —
Йыйылдыҡ беҙ бөтә киң илдән.
Тыуған еркәйҙәге тамырҙарҙы
Ҡурсыныҡ беҙ тороп диңгеҙҙән.

Һөйә белдек, һөйөп үлә белдек...
Диңгеҙ булды беҙҙең “һуңғы өй”...
Илгә ҡайтһаң, ҡустым, мен Уралға,
Беҙҙең өсөн, ятып, ерҙе һөй.

Мең йылға тип сығып китмәнек беҙ,
Һуғыш сыҡҡас, булды мең йылдай...
Ә шулай ҙа, йомһам күҙҙәремде,
Шәм-уттары илдең йымылдай...

## 7

Рәхим ағай, услап ҡурайымды,
Хәлһеҙ генә бер моң көйләне.
Ҡарт мичмандың утлы күкрәгенән
Урал моңо йәнде биләне.

Бөтәһе лә бергә тулышҡайны
Саҡ-саҡ ҡына сыҡҡан тауышта:
Зәңгәр күк һәм ап-аҡ йәйге томан,
Ҡараңғы төн, йәшел ҡамыштар.

Һандуғастар сазы, торналарҙың
Сылбырланып сыңрап ҡайтыуы.
Яғалса тау, Рапат, Ирәндектән
Ай ҡалҡыуы, Ҡояш батыуы.

Бөтәһе лә бергә гөжләй ине —
Тыуған ер һәм тоҙло сал диңгеҙ...
Иҫтәремә төшөп Ирәмәлем,
Баҫып торҙом өнһөҙ һәм тынһыҙ.

Нескә ҡылдай сыңрау ҡурай моңо,
Ут ҡапҡандай, ҡыурап өҙөлдө.
Йәш матростың күҙе сыланыуын
Ҡарамай ҙа ағай һиҙенде.

Тыны бөтөп һалды еҙ ҡурайҙы.
Өндәште ул:
— Беләм, бик ауыр.
Тыуған ерҙе, өҙөлөп һөйгән йәрҙе
Юҡһына ла һыҙлай был бауыр.

Һине ләкин көтә, көтә унда
Аҫыл йәрең — илгә ҡайтырһың!
Улар өсөн бында ут йотҡанды
Ҡурайыңа һалып тартырһың.

Ата-бабанан ул ҡалған йола —
Ил сигендә илде ҡурсылау.
Ватан өсөн бында баш һалғанға,
Имен тора йыр һәм йырсылар!

Әсәләр бит беҙҙең кендектәрҙе
Ялҡын менән киҫкән яуҙарҙа.
Башҡорт яраһының әрнеүҙәре
Һулҡый беҙ ҡойонған һыуҙарҙа.

### *8*

Рәхим ағай утлы уйҙарынан
Дары кеүек дөрләп ҡабынды.
Йөрәк тәңгәлендә ҡырған ярсыҡ
Йөрәгемә, гүйә, абынды.

Графиндан ҡойоп һыу эсергәс,
Ятты оҙаҡ өнһөҙ, ҡуҙғалмай.
Лазареттың ап-аҡ түшәмenә
Баҡҡан килеш тынды, күҙ алмай.

Сығып китергә мин талпынғайным,
Ҡулын һоноп ҡапыл туҡтатты.
Барлай-барлай алыҫ үткәндәрен,
Йөрәк моңо менән һүҙ ҡатты:

— Их ҡустыҡай, туған телкәйемдә

Һуңғы тапҡыр, ахыры, һөйләшәм!
Күпме һүҙҙәр ҡалған әйтелмәйсә...
Һин — йәш әле... Һинән көнләшәм!..

Һин — саф әле. Әйтер һүҙҙәрең күп,
Көндәрең күп уны әйтерлек.
Минең һүҙем — Ҡояш ҡолағына
Алҡа элеп кенә китерлек...

Һуғыш сыҡты, флот яуға ҡупты.
Уҡмаштыҡ беҙ бергә ҡоростай,
Дуçлыҡ беҙҙең — Ватан-ил ҡоралы --
Дошмандарҙы сапты ҡылыстай.

Ил маршына типте беҙҙең йөрәк
Дошмандарға ҡаршы барғанда.
Евдокимов Петро ине минең
Йән дуçҡайым ҡанлы яуҙарҙа...

Үлгәндә лә әсәй һәм йәрҙәрҙең
Мөхәббәте менән яҡтырҙыҡ.
Яуҙа ауған ғәзиз дуçтарҙы беҙ
Яҡтыһына шуның ятҡырҙыҡ...

## *9*

“Ә ниңә һуң, ниңә, — тип уйлайым, —
Һуғыш бөткәс илгә ҡайтманың?
Ҡулдарыңды арыш баçыуында
Бураҙнаға һалып ятманың?

Һабантурғайҙарҙың сыңрауына
Ҡайраманың ҡарлау-ҡырғыңды.
Һылыуҙарҙың йөрәк моңдарына
Сорнаманың ярһыу йырыңды.

Һин булмағас, бәлки, ил таңдары
Һүрәнерәк булып атҡандыр.
Бер һылыуҙың йомшаҡ мендәренә
Ай нурҙары ғына ятҡандыр...” —

Йәнем әрнеп, шулай уйлайым мин,
“Диңгеҙ бүреһе”нең ҡырында.
Рәхим ағай һиҙә: минең йөрәк
Урғылырға тора йырындай...

— Беҙ йәрҙәрҙең күҙ яуҙарын, ҡустым,
Кәнфит биреп кенә алманыҡ.
Йөрәктәргә терәк йөрәктәрҙе
Фиҙа ҡылып йәнде яуланыҡ!

...Ҡала ҡыҙы килде ауылҡайға —
Атаныҡ беҙ, һөйөп, “Һыуһылыу”.
Заятүләк шуға булыу өсөн,
Һәй, ҙур ине илдә ымһыныу!

Ауыл клубына мөдир булғас
Һыуһылыуҡай — оҙон толомҡай,
Толомдары егет йөрәктәрен
Сырмаланы ебәк болоттай.

Гармундарҙың көмөш телкәйҙәре
Һулҡылданы көн-төн ниңәлер:
“Һыуһылыуҡай — оҙон толомҡайҙың
Күҙкәйҙәре кемгә төбәлер?..”

Колхоз клубына, хәтерләйем,
Беҙ радиоалғыс ҡайтарҙыҡ.
Ул йылдарҙың ысын мөғжизәһе
Хайран ҡылды йәш һәм ҡарттарҙы.

“Комсомолдар беҙҙе алдайҙыр” тип,
Ҡапшай улар серле ҡумтаны.
(Йәшеренеп шунда берәй бәндә
Ләпелдәй, тип улар уйланы...)

Эй сабыйлыҡ!..
Ил вәкиле булып,
Баш ҡалаға барып һөйләгәс, —
Тылсым ҡумтаһынан Бөкөрө Ғилман
Ауылдаштар исемен “сөйләгәс”,

Арбалдылар тамам ил ҡарттары,
Тәбрик яҙҙы улар Мәскәүгә...
Клуб мөдиребеҙ Һыуһылыуҙы
Күмде ауыл ҡәҙер-хәстәргә.

“Былай булғас, Совет дошмандары
Һуҙа алмаç ҡулын!” — тинеләр.
(Гитлер фашизмы көсәйеүен
Зирәк заттар белә инеләр...)

Көнбайышта болот ҡуйырыуын
Хәбәр ҡылды бер көн Левитан:
“Комсомол шеф булған флоттарға
Ҡыйыу егеттәрен ил көтә!”

Һыуһылыуҙың нурлы күҙ ҡарашы
Һөйҙө мине был кис ниңәлер...
Бейегәндә ҡулға-ҡул тотошһаҡ,
Эҫеле-һыуыҡлы киләбеҙ...

Гөртләп китер дары ине һауа,
Ялҡын ине беҙҙең таҡмаҡтар.
Һыуһылыуҙы өйгә оҙатҡас та
Бейей ине минең аяҡтар...

Үҙебеҙҙең осҡа боролғанда
Офоғона аҡ Ай ауышты.
Ирәмәлгә тейеп сыңрап китте
Һыуһылыуҙың талир тауышы:

*“Комсомолдар клубта,*
*Хат яҙалар флотҡа.*
*Ҡыҙыл флот булған йәрем,*
*Көтәм һине, онотмам!..”*

.......................................................

Иртәгәһен беҙҙең хәлебеҙҙе
Үҙәк өҙгөс йырҙар килтерә:
“Диңгеҙҙәргә китә Заятүләк,
Һыуһылыуҡай шуға тилмерә!..”

...Ҡыҙыл флотсыһын оҙатҡанда,
Асманда Ай шундай йәш ине!
Ҡамыш керпек ҡайыған күҙкәйҙәрҙә
Мөлдөрәмә тулы йәш ине...

## *10*

Рәхим ағай ауыр һулыш ала...
Тулҡын кеүек бәүелә күкрәге.
Лазареттың ап-аҡ простыняһын
Йомарлаған йоҙроҡ-көрәге.

Ә мин иһә моңло хикәйәттең

Дауамдарын төптән кисерәм.
Күҙ алдыма йәҙрә олоуҙарын,
Десант төшөүҙәрен килтерәм:

“Ура! Ура!” —
Баҫҡынсыны ҡыра
“Ҡара әжәл” валы, боғаҙлап.
Көбәк менән көбәк күҙ текләшә,
Ике донъя үсен йомарлап.

“Алға, братва! Тыуған ил хаҡына!” —
Күкрәк киреп Рәхим йүгерә.
Таҫмалары әйҙәй атакаға,
Байраҡ һымаҡ елгә елберҙәп...

Рәхим ағай ҡыҙыу башымдағы
Хыял утын кинәт һүндерҙе:
— Хаҡ яҙмаһын һеҙгә күрергә, тим,
Десант төшкән ҡара төндәрҙе...

Еңел түгел, ҡустым, ер яныуы,
Күҙҙе өтөп диңгеҙ яныуы.
Төштәремә керә офоҡ аша
Уфтаныуы Урал тауының...

Беҙҙең еңеү, беҙҙең егетлектәр
Күктән генә килеп төшмәне.
Унең өсөн утта һәм һыуҙарҙа
Ең һыҙғанып Хаҡлыҡ эшләне!

Унең өсөн кәрәк булды беҙгә
Ҡотолорға һыҡтау-өрәктән.
Ҡаһарманлыҡ тигән ҡорос яугир
Ярып сыҡты беҙҙең йөрәктән!

### *11*

Донъяла бар, ҡустым, хәтәр әмер:
Төнгө десант дошман ярына!
Йәшермәйем: былдай минуттарҙа
Күңелдәргә һағыш һарыла.

Һығып ала йәнде ул яһилдай,
Автоматһыҙ телә йөрәкте...
Бына кемдер, таныш көйгә мансып,

Таныш йырға өҙә үҙәкте:

*“Их, ауыр шул упҡындарҙа*
*Дуҫтарҙы ҡалдырыуы.*
*Матростарға мавзолейҙы*
*Кильватерҙан ҡороуы...*

*Мачталарҙың осон күмеп*
*Урғылғанда упҡындар,*
*Матрос бескозыркаларын*
*Кейеп китә тулҡындар...”*

Туҡта, был ни? Ниндәй әсе көлөү?
Әжәл еңгес көлөү тауышы! —
Парторгыбыҙ Петро Евдокимов
Сигендерҙе матрос һағышын:

“Кем ул бында сорнай осһоҙ моңға?!
Десантта юҡ хәсрәт тоҡсайы!
Упҡындарға атып фашистарҙы,
Хөрмәтләйбеҙ фриц хоҙайын!

Фашисҡа ер кәрәк булған, тиҙәр,
Фюрерына бүләк итергә.
Шуға күрә, ерҙе эҙләп уға
Һыу төбөнә кәрәк китергә!

Һыу аҫтында, ай-һай, ер күп унда
Яңы “рейх” төҙөп ятырлыҡ.
Теләктәрен, дуҫтар, теүәлләйек,
Гитлерын да шунда батырып!”

Яугир гавань иңен тетрәтә
Матрос көлөүе, көр яңғырап.
Парторгыбыҙ төрткән үс үртенән
Карабыбыҙ тора ҡалтырап!

### *12*

Рәхим ағай!
Бөгөн йөрәк башым
Факел һымаҡ дөрләп ҡабынды.
Легендалар ҡапыл өнгә килеп,
Яу ҡырына ҡаным яғылды.

Ул десантсы матрос — мин инем бит!..
Керҙем утҡа — Урал бөркөтө...
Шул уҡ төндә башҡа бер десантта
Урал һылыуын да ут өттө...

“Похоронка” күмде ике өйҙө —
Ҡалала һәм аулаҡ ауылда...
Әйтерһең дә, бөгөн лазаретҡа
Тулды кереп бөтә яу йылдар...

Легендалар, изге легендалар!
Кем йөрәге һеҙҙе тыуҙырҙы?
Беҙҙең ҡурайҙарҙың үҙәгенә
Үҙәк өҙгөс итеп тултырҙы?

Һөйләүселәр һәләк була барған,
Һөйләүҙәре ҡалған быуынға.
Бөгөн дә бит шашып йырлай диңгеҙ
Гөллирә һәм Матрос турында!

Икеһенең, тиҙәр, исемдәре
Валундарға соҡоп яҙылған.
Шул таштарға килеп ҡуна икән
Ике бөркөт йыл да, яҙ булһа.

Ишетелә, имеш, Балтикала
Ирәмәлдең ғорур саңҡыуы...
Ниңә, ниңә һаман самолет юҡ,
Хирург ханымдың юҡ саф ҡулы?!.

Ҡотҡарырға ине ҡарт мичманды,
Ҡотҡарырға ине ханымды.
Ерҙә улар ниңә яңғыҙ ҡоштай —
Ошо ҡайғы өтә ҡанымды...

...Амурғаса алып киткән ҡыҙҙы
Санпоездың ҡорос юлдары.
Госпиталдә оҙаҡ ятып сыҡҡас,
Алыҫ Көнсығышта булған ул.

Һәм эләккән Тымыҡ океанға,
Хирург булған, уҡыу тамамлап.
Ауылдан һәм Балтиканан һаман
“Бөркөтөң юҡ...” — тиеп алған хат...

Йөрәгенә йомоп ҡайғыларын,

Тол аҡҡошҡай оса һауала.
Ҡаңҡылдап бер ергә ауыр өсөн,
Болоттарға инеп юғала...

Шуның һымаҡ, беҙҙең һылыуҡай ҙа
Эш тауҙары менән күмелгән.
Ғүмеркәйен илгә бирә-бирә,
Аҡҡош йыры уның һүрелгән...

Уйлап ҡараһаң, шау легендалар
Тыуа икән тыныс яуҙа ла! —
Күҙ алдында беҙҙең Аҡҡош менән
Сал Бөркөттөң йыры яҙыла!..

## *13*

Һәм бер көндө була ҙур мөғжизә —
Һылыу килә Балтик ярына.
Үҙе ҡан ҡойған сал ҡаяларға
Толомдарын урап табына.

Үҙ исемен күрә шунда ханым
Һәм йәренең, — ҡәбер ташында...
Үҙе иҫән булғас, бөркөтө лә
Терелер, тип, йәне шашына...

Тороп ҡала, китмәй, Балтикала —
Алмаштыра хеҙмәт төйәген...
Әйтер төҫлө, иҫән һөйгәнең, тип
Таң елдәре... Көтә көндән-көн...

Ниңә, ниңә йәнде киҫә яман
Мәңге тынмай янған салғы-ут?..
Ниңә, ниңә килеп етмәй һаман
Һауаларҙан гидросамолет?!

Хирург ҡулы йолҡоп алһа әгәр,
Йөрәк телгән ҡорос ярсығын,
Ҡурайымда шашып уйнар инем
Урал бөркөттәре саңҡыуын!..

Заятүләк менән Һыуһылыуҙар
Ҡауышырҙар ине шул мәлдә.
“Рәхим ағай, ҡуйсы, ял итегеҙ,
Тын ятығыҙ хирург килгәндә!..” —

Ҡурайымды тығып ҡуйыныма,
Сығып китергә мин йыйынам.
Өтөп ләкин утлы ирендәре,
Ҡулы ҡыҫып тота ҡулымдан:

— Ғәзиз ҡустым! Иҫән ҡалһам әгәр,
Яҙыр инем десант һуғышын...
Шуны бел һин: һәр бер матрос унда
Ватан менән алды һулышын.

Пүләләрҙән һауа иләкләнеп,
Сикәләрҙе әсе ут өттө.
Тулҡын һайын йөҙҙө бескозырка,
Валун һайын фашист дөмөктө...

## *14*

Аҙмы һыуҙар аҡкан шул төндән һуң,
Кемдәр — ерҙә, кемдәр — ҡәберҙә.
Фашизмдың ләкин ярсыҡтары
Планетаны һаман йәберләй.

Ҡитғаларҙан ҡыя ул ирҙәрҙе,
Киҫеп аҫтан йөрәк тамырын.
Беҙ әжәлгә ҡаршы күтәрәбеҙ
Матрос хеҙмәтенең ауырын!

## *15*

Әйтерһең дә, Рәхим ағай түгел,
Ятам үҙем һуғыш ҡырында.
Минең бит ул эҙләп маңлайымды,
Дошман пүләмәте тырылдай.

Юҡ, Рәхимгә түгел, минең тәнгә
Әжәл ярсыҡтары ҡаҙалған!..
Һис кем мине ғәйеп итмәҫ төҫлө,
Таш артында боҫоп ҡалалһам...

Йөрәкһенеп шулай текләп торам
Ҡарт мичмандың мендәр ағына.
Ул йомарлап тотҡан ап-аҡ сепрәк,

Әйтерһең дә, гөлтләп ҡабына:

— ...Менәм шыуып окоп ҡырыйына,
Тынып ҡалған ҡорҙаш ҡулынан
Күтәрәмен тоғро автоматты,
Ҡурғашланып үсем ҡубына...

“Дөмөк, дошман, дөмөк!
Беҙ йәшәрбеҙ,
Беҙҙең менән бергә — Тыуған ил!
Ер йөҙөнә һарҡкан ҡара төндө
Һыҙырасаҡ беҙҙең яҙғы ел!” —

Прицелгә эләм ярһып килгән
Офицерҙың текә букһәһен.
Петро дуҫым янда ҡеүәт бирә:
“Шәп һуғаһың шаҡшы көлтәһен!..”

Бары икәү ҡалдыҡ тар окопта...
Сөпөрҙәй ҡан аҡ бинт аҫтында...
Десант таңы!.. Үлеп ҡалғанда ла
Тейешле беҙ еңеп ҡайтырға!
.....................................................

— Ҡустым, ҡустым, фашист һөрәндәрен,
Һәй, әшәке — янда ишетеү!..
Штыктарҙы яуға әҙерләнек —
Ҡалды беҙҙән һуңғы эш итеү...

Ике моряк — тимәк, ул өс взвод!
Өс взвод ул — тимәк, батальон! —
Петро менән ҡаты ҡул ҡыҫыштыҡ:
“Үлгәндә лә еңеп ҡайтылһын!”

Күкрәк киреп изге атакаға
Күтәрелдек, иңгә-иң терәп...
Шул саҡ беҙгә ҡапыл ярҙам килде,
Ер тетрәтте “ура!” күкрәп.

Браттарҙың ҡара бушлаттары
Үтте күмеп шаҡшы сафтарын.
“Совинформбюро” хәбәр иткән:
“Түктек һыуға фашист заттарын!”

Ауғанымды үҙем иҫләмәйем,
Беләм шуны: Петро, күтәреп,

Алып сыҡҡан мине һәм байраҡты,
Пүлә киҫкән килеш күкрәген...

Ә шунан һуң үҙен ятҡырғандар,
Ал байраҡты бөркәп, табутҡа.
Браттарым! Уның ал ҡаны бар
Байраҡтарҙа янған ал утта!..

### *16*

— Ҡустым, ҡустым! Күрәм Урал тауын
Аҡтыҡ тапҡыр һинең күҙеңдән.
Ҡуйыныңа тыҡҡан ҡурайыңды
Шаңғыртырһың, һеҙҙән өҙөлһәм...

Һыуһылыуҙы ҡайтып күралманым —
Фронтҡа бит киткән ул теләп.
“Десант отрядында һәләк булды
Диңгеҙҙә”, — тип хәбәр иттеләр...

Күҙҙәремә әсе йәш төйнәлде:
— Көтөп үтте, тимәк, ғүмерең?!.
— Һуғыш хәле, ҡустым, шундай уйын —
Үлеләр ҙә ҡайта терелеп.

Хаҡ эҙҙәрен юллап тороп ҡалдым,
Диңгеҙҙәрҙе гиҙҙем йән атып...
Аҙмы Петро, Һыуһылыуҙарҙы беҙ
Йөрәктәргә күмеп юғалттыҡ!..

Һөйләнем мин, ҡустым, бер десантты,
Ул десанттар мең һәм мең ине —
Мең ярымға яҡын көн ине,
Мең ярымға яҡын төн ине...

Шул көн, төндәр ҡабат планетаны
Өтмәһен, тип, инде теләгеҙ.
Ураҡ менән Сүкеш именлеген
Штыкты ныҡ тотоп көйләгеҙ!

Йөрәгеңә ҡыҫкан ҡурайыңдың
Аллатмаһын, тимен, ҡан — осон.
Мылтыҡ көпшәң, ҡурай көпшәңде лә
Ҡулда һәр саҡ баҙыҡ тот, ҡустым.

Теләп шуны, изге Уралыңда
Сал бөркөттәр бала осора.
Таҡыябаш ҡурайҡайҙар унда
Бескозырка кейеп ултыра...

Күрерһең һин, ҡайтһаң, ап-аҡ гөлдө —
Умырзая булған Һыуһылыу...
Күрерһең һин һомғол бер ҡурайҙы —
Заятүләк һымаҡ моңһоу ул...

## *17*

Ошо урында мин ҡарт мичманды —
Ғәфү итһен бер үк! — бүлдерҙем:
— “Һыуһылыу” бит ҡыҙға тик ҡушамат,
Ысын исеме кем ул гөлдөң?!

Күҙҙәренән Рәхим ағайымдың
Тәгәрләне саф йәш бөртөгө:
— Гөллирә ул.
Толомдары өсөн
Һыуһылыу тип атап йөрөтөлдө...

Бөркөт булып ос та Уралыма
Алып ҡайт һин ошо исемде!
“Гөллирә” тип йәшлек туғайында
Һандуғастар теле сиселде...

Уралымдан иҫкән елгә һалып,
Һуңғы юлға мине йыуығыҙ.
Матрос кейеменә кейендереп,
Диңгеҙ-мавзолейға ҡуйығыҙ...

## *18*

Шул йөмләлә беҙҙең ҡарт мичмандың
Ирендәре ҡаты ҡымтылды.
Ишетмәгәндер ул: күкте ярып
Шул мәл һыуға ҡорос ҡош ҡунды.

Ҡанаттары ине ал тәреле —
Килеп етте көткән самолет.
Туҡтатылды карап.

Палубаға
Күтәрелде хирург һәм пилот.

Хайран ҡалдыҡ шунда хирургка —
Һылыуҙарҙан һылыу булымы!
Хәрби фуражканан бөгәренә
Ағылған сөм-ҡара толомо!

Матрос йолаһына йыйылышҡан
Командаға табан атланы.
Ап-аҡ тентта моряк ята ине,
Ап-аҡ кәфен менән ҡатланып.

Ҡара күҙле һылыу, ауыр һулап,
Асты уның йөҙө тәңгәлен...
Әрнеп сыҡҡан йөрәк ғазабынан
Китте һымаҡ асман әйләнеп:

— Рәхим! Бәғерем! —
Саф башҡортса шул өн
Йөрәгемде итте зил-зилә.
Рәхименең ауҙы күкрәгенә
Легенданан сыҡҡан Гөллирә...

### 19

Васыятын үтәп ветерандың,
Тынып ҡалды карап диңгеҙҙә.
Флаг төштө... бергә табут төштө...
Тулҡын ҡалҡты.
Тулды йәш күҙгә...

Таштай ҡатып торҙо Гөллирәкәй
Матросының һуңғы юлында.
"Бәхил бул!" тип ниңә әйтмәне ул?..
— Рәхим йәнем, йәнем, мин бында! —

Бер кем бер ни ҡылып өлгөрмәне,
Палуба тик уфтап тулғанды.
Урал һылыуының толомдары
Тулҡындарға кереп юғалды...

Өлгөрйәндәр һыуға ырғынылар,
Эҙләнеләр...
Ләкин һуң ине.

Легендалар бергә үрелделәр,
Төйөнләнеш — төпһөҙ моң ине...

Ерҙәр, күктәр хатта тыялманы
Мөхәббәттең изге минутын.
Заятүләк менән Һыуһылыуҙы
Алды тартып беҙҙән күк упҡын...

Буҙарылған һыуҙы бурап уҙҙы
Карап менән гидросамолет.
Көбәктәрҙән күккә шартлап осто
Йөрәктәрҙә янған моң-салют.

Ҡалды тороп ике бескозырка,
Тулҡындарҙың баҫып тулауын.
Ике тулҡын күҙҙән күмелгәнсе
Ҡурайымда шашып уйнаным...

Ошо мәлдә
Тыуған Ирәмәлдең
Маңлайына болот ҡунғандыр.
Ап-аҡ умырзая эргәһенә
Һомғол ҡурай үҫеп сыҡҡандыр...

Эй изге мәл!
Эй һин, изге һөйөү!
Мәңге, мәңге шулай булып бар!
...Заятүләк менән Һыуһылыуҙы
Йырлап аса телен былбылдар...

Таллин, 1953.
Өфө, 19.03.1980.

# КРЕМАТОРИЙ

Ватанымды һатманым,
Ил серҙәрен асманым.
Йәшәһен Ватан!
**Александр Русанов.**
*(Концлагерь дәфтәренән.)*

***1***

Крематорий...
Мөрйәләр

Өрәләр,
Өҙләкһөҙ
Бирәләр
Һауаға төтөндө.
Бына
                    ҙур ҡапҡанан
Йөк инде.
“Ҡайта”ға
                    боролоу
Юҡ инде!
Был юлы
Ут... кемде?..

Крематорий...
Мөрйәләр
Төтөнгә
Төрәләр,
Һауаға өрәләр
Ил йәмен,
Ер йәмен:
Йәшлекте,
Ҡартлыҡты,
Сабыйлыҡ-аҡыҡты —
Бөтәһен,
Бөтәһен.

Милләттәр,
Яҙмыштар,
Изгеләр,
Аҙмыштар,
Тойғолар,
Хыялдар —
Бында тик “ноль бөтөн”,
Тик төтөн...
Үтәләр
Ут булып,
Китәләр
Юҡ булып
(Көл булып,
Ел булып) —
Көллөһө тик утын,
Көллөһө тик төтөн...

Крематорий...
Мөрйәләр...
Бетондан

Төрмәләр,
Тәҙрәлә
Рәшәткә...
Суҡмарлы
Йоҙ(о)роҡ
Күренә
Йоморолоп
Ҡараңғы тишектә.

Йоҙ(о)роҡ
Елкенә,
Йәҙрәләй
Һикерә,
Ҡош кеүек
Талпына.
Төрмә тын...
Һаҡсылар
Атлайҙар
Аҫтыртын.
БыҒауҙар
Зыңы ла
Баҫалҡы,
Саҡ ҡына...

Сеү! —
унда
Кем
йырлай?
Йыр аға,
Сыңғырлай
Өҙөлмәҫ
Сылбырҙай.

Йыр яна,
Дөрөлдәй
Ялҡынлы
Кратерҙай —
Ватанын
Ир ҙурлай:

*"Ватаным — атайым,*
*Ватаным — әсәйем,*
*Алыҫта мин һине*
*Һағынып йәшәйем,*
*Тотҡонда мин һиңә*
*Табынып йәшнәйем!*

*Ватаным-атайым,*
*Һине мин һатманым,*
*Ватаным-әсәйем,*
*Сереҥде асманым —*
*Намыçым сафлыгын*
*Үлсәйем ҡан менән,*
*Ҡайтыр тик шаҥ минән!”*

Бетондың йотомо
Йотһа ла тотҡондо,
Рәшәткә тотомо
Тотһа ла тотҡондо,
Йыр аға, йыр аға
Тотомһоҙ ел кеүек.
Болотһоҙ көн кеүек
Нур бөркә донъяға, —
Йыр аға, йыр аға...

Часовой тупһала,
Часовой ҡапҡала,
Эстә лә часовой.
Ҙур төрмә ныҡ, һаҡлы,
Ишектәр йоҙаҡлы —
Себен дә осалмай,
Себен дә осалмай...

Себен дә осалмай,
Йыр ләкин оса ала!
Себен юл асалмай,
Йыр ләкин юл һала!
Көнгә юҡ тотҡарлыҡ —
Нурҙы кем ҡыуалһын?
Елкенеп елерлек
Йырҙы кем быуалһын!

Фашистың ҡан баçа
Алйыған күҙҙәрен:
“Хәҙер үк был йырҙы
Мин тапап иҙәрмен!
Ул йырҙың боғаҙын
Меҥ-меҥ ҡат һуйырмын!
Ул йырҙың тиреһен
Меҥ-меҥ ҡат тунармын!

Меҥ-меҥ ҡат аçырмын
Мин уны арҡанға!

Мең-мең ҡат атырмын
Мин уны атҡанда!
Мең-мең ҡат дөрләтеп
Яғырмын мейесте!
Мең-мең ҡат яндырып
Алырмын мин үсте!”

Мең-мең ҡат, мең-мең ҡат
Йыр ҡаға тик ҡанат.
Мең-мең ҡат, мең-мең ҡат
Йыр ҡаға мең набат!
Мең-мең ҡат, мең-мең ҡат... —
Әйтерһең, сапҡан ат!
Әйтерһең, ал байраҡ
Мең-мең ҡат, мең-мең ҡат!
Әйтерһең, ир менеп
Сапҡан ат, ялҡын-ат!..

Фашистың ярһыуы
Аҙаҡҡы сигендә.
Асҡыстар бәйләме
Шалтырай билендә:
“Ни өсөн фюрерым
Бирмәгән бөтмәҫ көс
Быуырлыҡ был йырҙы,
Алырлыҡ унан үс?!

Бығауҙар яһаныҡ
Ҡитғалар быуырлыҡ,
Ә йырға ни өсөн
Сылбыр юҡ, сылбыр юҡ?!
Пушкалар яһаныҡ
Илдәрҙе атырлыҡ,
Ә йырға ни өсөн
Мортир юҡ, мортир юҡ?!.”

Яғыла мейестең
Иң ҙуры — олоһо...
Төрмәнән илтелә
Йөрәктең йырлыһы...
Алда ла — ҡарауыл,
Артта ла — ҡарауыл.
Йөрәк — тик йырауыл!

Йыр йырлап бара ул
Палачтар алдынан

Мейескә — тамуҡҡа.
Йөрәк һәм йыр керә,
Тайпылмай, тап утҡа.

Төтәмәй, көл булмай
Ләкин йыр барыбер.
Күктәргә аша йыр,
Ерҙәрҙән бара йыр!
Фашистар йөрәген
Яра йыр,
Яра йыр!
Йыр үлмәç,
Еңелмәç
Барыбер,
Барыбер!

**2**

Крематорий...
Мөрйәләр...
Бетондан
Төрмәләр...
Дөрләгән мейескә
Йырсыны илтәләр,
Артынан төртәләр,
Керетәләр...

Дөрләй ут, дөрләй ут –
Осҡоно була юҡ.
Күк ала йырсыны
Ҡайғырып, моңайып.
Әммә йыр, йыр ҡала
Донъяны яңғыратып.
Мәғрур йыр юл ала
Ер шарын уратып!

Илдәрҙең үлемдән
Быуыны биртенгән,
Ғүмере кителгән...
Ләкин йот-үлемде
Сүктереп көс гиҙә,
Еңелмәç көс гиҙә —
"Йыр" тигән:

*"Мин биргән антымды*
*Боҙманым, Ватаным.*
*Еремә һатлыҡ йән*

*Булып һис ҡайтмамын!*
*Ҡалырмын юғалып*
*Алыҫта, ят ерҙә,*
*Ләкин хаҡ яҙмаһын*
*Халыҡҡа әйтергә:*
*“Себен йән ине, — тип, —*
*Себендәй серене,*
*Балҡып ут янғанда*
*Булды тик һөрөмө...*
*Ҡалды тик ҡоромо”...*

*Фашистар ваҡытын*
*Тик юҡҡа уҙҙыра.*
*Әйтер, тип, тәнемде*
*Телгеләй, яндыра.*
*Язалар һындырмаҫ*
*Намыҫлы антымды.*
*Үлермен — һатмамын*
*Илемде, халҡымды!”*

Йыр үрләй һауаға,
Йыр дөрләй майҙанға,
Дуҫ-иште, фашисты —
Бөтәһен йыр таба.
Дәртле йыр, көслө йыр,
Ҡанат ҡаҡ шәберәк!
Сығарған һине ир —
Ялҡынлы ҙур йөрәк!
Ҡаҡ ҡанат, йыр ғынам,
Ярһыулы ҡанат ҡаҡ!
Төрмәгә төрөлгән
Дуҫтарҙы эҙләп тап!
Еткер һин уларға
Исемен йырсының —
Намыҫы һөттән аҡ
Бәһлеүән кешенең!

Александр хаҡында
Һөйлә һин уларға
Һәм өйрәт шул ирҙәй
Арыҫлан булырға!
Ирҙәрҙең ире ул —
Бөркөттән яралған.
Александр, Александр,
Һинән нур таралған!
Александр, Александр,

Һинән ил нур алған!
Бөйөк ер, ил генә
Һиндәй ир биралған!

Александр, Александр,
Ватаным улы һин.
Әсәйҙәр күҙ нуры
Һәм йөрәк моңо һин.
Ғүмерең, осҡондай,
Асманға атылған.
Йондоҙға әйләнеп,
Төндәрҙә балҡыған!
Йыр булып әйләнгән
Ул алыҫ йылдарҙан.
Йөрәктән йөрәккә
Мәңгелек юл ярған.

Намыҫын үлсәй йыр
Иң ғорур ирҙәрҙең,
Аса ул ирлектең
Асылмаҫ серҙәрен:

*"Ватанымды һатманым,*
*Атайым!*
*Ватан серен асманым,*
*Әсәйем!*
*Ватанымдың йыры мин —*
*Йәшәйем!.."*

Александр, Александр,
Туғаным һин минең!
Башҡортйән булғанһың,
Булғанһың, тимен мин.
Шуға ла йөрәгем
Тынғыһыҙ, тимен мин.
Шуға ла күҙҙәрем
Йоҡоһоҙ, тимен мин.
Хаҡ яҙһа беҙҙәргә
Ғәрәсәт, тимен мин,
Әҙер мин, тап һиндәй,
Һәр сәғәт, тимен мин.
Йәшәргә хаҡлымын
Мең тапҡыр, тимен мин.
Кәрәкһә, ил өсөн
Мең тапҡыр үлермен!

Миңә һин — мең терәк
Көрәштә, тимен мин.
Ир үлмәй, ил өсөн
Көрәшһә, тимен мин.
Бил быуып хеҙмәткә
Барғанда, тимен мин,
Александр рәтенән
Бар алда, тимен мин.

Ташсыға, таш тотһаң,
Эш яндырт, тимен мин.
Аусыға, йырткыстан
Баш һалдырт, тимен мин.
Игенсе, булһа хаҡ
Хеҙмәтең, тимен мин,
Ер йөҙөн туйҙырыр
Ҡөҙрәтең, тимен мин.
Космонат иптәшкә,
Көслө ос, тимен мин.
Сорғолоп күктәргә,
Айҙы ҡос, тимен мин.
Йырсыға, сыңрат йыр
Ҡоростай, тимен мин.
Ҡоростай ир тыуһын
Һәр оста, тимен мин.
Шағирға, һыу ҡойма
Пероңдан, тимен мин.
Ҡайнар ҡан урғылһын
Яраңдан, тимен мин!

Александр, Александр,
Тырышам, тимен мин,
Һиндәй нур-йыр ҡоям
Ҡоростан, тимен мин.
Тиңәлмәһә ул һиңә,
Ғәфү ит, тимен мин.
Бейеклегең — буй етмәç
Бейек бит, тимен мин...

1963.

# ЙӨРӘК ИЛАУЫ

Сал сәсле уҙаманға.

### *1*

Таң һыҙыла Урал һыртынан...
Ойоп торған моңло йыр һымаҡ
Күкрәк төбөндәге моңлоҡта.
Нур һарҡымы талғый офоҡта.

Ел дә өрөп уны өшкөтмәй,
Төн дә сүгеп уны көслө итмәй:
Ҡаҡсау түбәләргә ятҡан да,
Сағыл-ҡаяларҙы япҡан да
Бәҫле күкрәгенә ҡосаҡлап,
Тынлыҡ туплап, көнгә көс баплап,
Йәш балалы талған әсәләй
Аҡ таң ҡалғый... Сағыу сәскәләр
Аҡ нур имә йоҡо аралаш.
Бер һандуғас, алйыу-ярандаш,
Бәүелмәксе һиртмә талында.
Ҡылған ҡымйый тауҙар ялында...

Тауҙарға баҡ иртән, һөйөклөм:
Арбар һине моңло бөйөклөк.
Күҙ йоморға, йәнем, ашыҡма –
Ҡарама һин көлөп «ташлыҡ»ҡа!
Уралтау бит былар! Уралтау!
Тәнгә — төйәк, ҡулға — ҡорал тау!
Олатайҙар ере Уралтау!

Тауҙарға баҡ иртән, һөйөклөм,
Яулар һине моңло бөйөклөк.
Ер — Күк сиген күҙҙән кисерһәң,
Һыҙаттарын яҡын килтерһәң,
Һүрәтләнер сихри алдыңда
Батыр һыны тауҙар ҡабында:
Салҡан ята бөйөк баһадир —
Ике ҡулын янға һалған ир.
Биләненә – батыр башына
Ал нур сиртеп шаңдаҡ шашына.
Ҡалын сәсе — ҡара Шыртуғай,

Уны ярып Ҡаҫмарт шылтырай.
Тәңкә ҡаға көмөш тулҡындар,
Төптән баға тоноҡ упҡындар.
Ә батырҙың муйын өҫтөнән,
Муйынсаҡлап, таш юл үтелгән...

Машиналар елә туҡтауһыҙ –
Муйын төймәләре йоҡлауһыҙ!
Ҡуҙғалмай тик батыр, ҡуҙғалмай —
Мең быуаттар ята һыҙламай:
Аҡ таң яулап илгә алғанда
Ғәзиз башын ергә һалған да!..

Тыңла, иркәм, быны онотма —
«Ябай тау-таш», — тиеп бойоҡма:
Урал Батыр бит был, һөйөклөм,
Таңды төндән тартҡан бөйөклөк!

Таң һыҙыла тауҙар һыртынан.
Офоҡ ситләп «юрған» йыртыла.
Балҡый саҡты – саға осло нур,
Саз ҡылдарын сиртеп! Хисле йыр!
Сағыллыҡтар сорғой уянып:
Маңлайын тау һөртә йыбанып
Нәфис һөлгө — шуҡ таң еленә.
Баһадирҙың мыҡты биленә
Ҡолай болот, күктән өҙөлөп.
Сағыл мөгөҙөнән һөҙөлөп
Ағыла ул тымыҡ үҙәнгә,
Юйыла һәм шулай күҙҙән дә...
Һелкенмәй тик талған Баһадир.
Йоҡоло-уяулы ҡалған ер...

Юл юлағы әле йәнләнмәй,
Һыу һулағы әле йәмләнмәй.
Юҡ хәрәкәт һәм юҡ тауыш та:
Йоҡлай әле һәр йән ҡыуышта.
Ләззәтле бит таңда был йоҡо,
Йәнгә сихәт, тәнгә бал йоҡло!

Йоҡлай ҡырҙа себен-бөжәктәр,
Йоҡлай һыуҙа сумғыр өйрәктәр,
Бөркөт йоҡлай ҡая ташында,
Ҡарға йоҡлай ағас башында,
Күк талында талғый һандуғас,
Яр ҡырында ҡалғый ҡарлуғас.

Ятып ялҡый һыйыр ҡурала,
Йылҡы ҡалғый, баҫып торһа ла.
Төн йоҡоһоҙ өргән уҫал эт —
Ояһына ул да кергән бит!
Ҡалған ҡунып юлда — юлаусы.
Талған тынып кеҫә тунаусы –
Ҡара эшкә барған ерендә
Йығҡан йоҡо хәнйәр ирен дә!
Ә бишектә сабый балалар,
Мыш-мыш һулап, ләззәт алалар.
Йоҡлай ойоп йөклө ҡатындар
Һәм тыуасаҡ ҡотло «алтын»дар.
Йәш-елкен дә һәм сал ҡарты ла —
Таң йоҡоһон йоҡлай барыһы ла.
Көллө ауыл — шаулы Һунарсы
Йоҡлай кеүек, таңға юл арсып...

Юҡ, йоҡламай икән Һунарсы:
Бер өй тора, шаран күҙ асып.
Майшәм яна өйҙөң эсендә,
Сыҫкан күҙҙәй утлы есемдән
Тоноҡ ҡына аға һары нур,
Йомолмай тик бер күҙ барыбер...

Ерҙең күҙе таңға баҡҡанда,
Һәр йән сихри иҙрәп ятҡанда,
Кем ул унда – таштай ҡатҡан һын?
Керпек ҡаҡмай, хатта алмай тын?!
Башын тотоп яңғыҙ уфтай кем:
«Ауыр төн был! Ниндәй ауыр төн!»

Көләсләнеп яҡты көн килһә,
Буҙ турғайҙар күккә сөйөлһә,
Йәмғе йәнле – йәмгә эркелһә,
Бер йырлаһа сыңрап, бер көлһә,
Башын тотоп ауыр уфтай кем:
«Ауыр көн был! Ниндәй ауыр көн!..
Йәнде алыр, гүргә һалыр кем?!.»

Керпек ҡаҡмай был күҙ, ҡуҙғалмай,
Саҡты сәсеп майшәм быҙламай —
Уйланған да ҡатҡан бер көйгә.
Ниндәй ҡайғы ҡапҡан был өйгә?..

Ата ал таң ҡуйы нур тибеп,
Сүгә майшәм һары нур һибеп.

Ҡыуа аҡ таң һары шәм нурын,
Өҙмәй серем татлы сылбырын...
Ниңә һүнмәй һуң был шәм һүнмәй?
Йоҡо баҫып ниңә бәүелмәй
Шәмгә текләп ҡатҡан яңғыҙ ир?
Әллә микән был ир — йәнһеҙ бер?!.

Бөтөн донъя ҡалғый иҫереп
Ояһында — ойоу кисереп.
Был ир ниңә шуны кисермәй,
Был ир ниңә шулай иҫермәй?
Торатašмы, әллә йәмһеҙ сир --
Өнһөҙ-тынһыҙ ҡатҡан яңғыҙ ир?!.

Керпектәре бына һелкенде,
Ике тамсы ергә эркелде.
Туҡта, туҡта, был — йәш түгелме?
Тораташтан күҙйәш түгелде!
Ҡалҡытып ир ауыр күкрәген
Алды һулыш — майшәм тетрәне.
Көрһөндө ир — майшәм һөрөмө
Өй эсендә йөҙөп йөрөнө.
Усланы ир ҡалын күкрәген,
Баҫыр өсөн йәне күкрәүен.
Был күкрәктә — бысаҡ айҡала,
Ҡан эсендә йөрәк сайҡала.
Бәғер итен тунай туң бысаҡ.
Бысаҡлауы — йылдар һыуыҡ саҡ...

Баллы ғына бала саҡ ине,
Атай – атлы, әсәй шат ине!
Түрҙән баға даһи мыйыҡлы –
Һүрәтенән, тиҙәр, ил йоҡло...
Хәтерләй ир, шуны хәтерләй:
Атай түшендә тап терелә́й
Балҡый ине илдең ордены –
Яуҙа еңгән батыр Ир ине!
“Тыныс таңдар атыр! – тир ине. --
Илгә бәхет ҡайтыр!” – тир ине...

Тап ошондай талғын таңдарҙа
(Утыҙ Ете тигән йылдарҙа)
Сыңлап ҡапыл тәҙрә ҡағылды,
Дөбөр-шатор ишек ҡайрылды.
Күн итекле ауыр аҙымдар
Инде баҫып өйгә, аҙғындай.

Ауҙарылды шкаф, өҫтәлдәр...
“Халыҡ дошманы һин, Искәндәр!” –
Ике ҡулын артҡа ҡамтарып,
Наган менән яҙмыш атҡарып
Золом тулағанын был өйҙә
Күреп торҙо мыйыҡ-даһи ҙа...
Илдән Ирҙе алып киткәнде
Ил һиҙмәне... тауҙар һиҫкәнде...

Илап ҡалды өйҙә ир бала...
Шунан ҡала бысаҡ айҡала,
Нәҡ йөрәккә үтеп арҡанан...
«Дошман улы һин!» тип һәр заман...

Һыҙылып ҡына таңдар атҡанда,
Донъя-ғаләм ойоп ятҡанда
Ҡанлы ҡанундарҙа сыуала
Ир ҡорона кергән был бала...
Һыҙлай, һыҙлай ҡанлы был яра...
Һулышынан гөлдәр ҡыуара...

Эй Уралтау, моңло Уралтау,
Эй Уралтау, илгә ҡорал тау,
Ниңә тыуҙы, ниңә — был йылдар,
Ниңә ҡупты ҡотһоҙ ҡойондар?
Ер инеме быны көтөүсе,
Ир инеме быны һүтеүсе?
Уйламаған көндән ҡупты был,
Утыҙ ете тигән ҡотһоҙ йыл...
Йөрәктәргә атты тупты был...

## 2

Һөйөклө дуҫ, ҡуйсы, бошонма,
Йылмайып көл инде ошонда:
Утыҙ етеләләр бөттө бит!
Ватан һуғышы ла үтте бит!
Шартламай ҙа утлы йәҙрәләр! —
Ямғыр ғына сыртлай тәҙрәлә.
Дыңғырҙатмай пүлдәр түбәне,
Ҡан түгел — дым йота ер тәне.
Төтөн түгел, өйгә ел инде —
Йылмайып көл, дуҫым, көл инде!

Ултырмасы яңғыҙ бикләнеп,

Ауыр көн, тип, ауыр хисләнеп.
Күкрәк киреп атыл урамға,
Иҙҙәреңә паклыҡ урарға
Йүгереп сыҡ сап-саф Уралға!

Май ямғыры һине ҡаршылар,
Сәстәреңдән ләйсән тамсылар;
Күҙ-керпегең, ҡашың буйлатып
Йәйғор тамыр ергә “тып” та “тып”.
Тамған һайын, күкрәп гөл үҫер,
Күҙҙәреңде һыйпап ел иҫер;
Эҙҙәреңдә шытыр орлоҡтар,
Эштәреңде илең ярлыҡар!

Ултырмасы, бошоп ултырма,
Бокалыңды нышып тултырма.
Шифалы ғәм ер-күк эскәндә,
Эсмә инде ағыу һин — “бәндә”:
Ләйсән бит ул — илгә яуыусы,
Иңдәреңә “шып-шып” ауыусы!
Яуған һайын йәшнәр йәш күңел —
Юҡ, түгел был, ауыр көн түгел!

Күрсе, күрсе, нисек кинәнә,
Ләйсәндәрен йотоп, ер әнә!
Бүҫерелеп ята тупрағы —
Тәбиғәттең йөклө ҡорһағы.
Миллион орлоҡ миллион арала
Ҡыяҡланып унда ярала.
(Яҙ ғына тыу ине, ә хәҙер
Тулғаҡ тоторға ла ер әҙер –
Буйға уҙҙы донъя тиҙ генә.
Һиҙмәй ҡалды хатта үҙе лә)...

Ә һин, дуҫым, ауыр көн, тиһең,
Шешә төбөн, уфтап, тентейһең...
Ауыр түгел, бәлки моңло ул,
Йөклө йәндәй уйсан-уйлы ул...
Ғүмер яралтҡанда ул нисек
Булһын инде еңел-елкенсек?!
Ауыр алма, дуҫым, был көндө,
Күңеләңде йәмгә елкендер!

Ниңә, дуҫым, ниңә бөгөлдөң,
Күҙҙәреңдән йәшең түгелде?
Беҙ инекме тиҙләй бирешкән,

Зар зәхмәте менән килешкән?
Кесе йәштән төйнәп дуҫлыҡты,
Ел-ямғырҙар күрмәй үҫтекме?
Киҫтеме аҙ беҙҙе дауылдар,
Теттеме аҙ төрлө яуындар?
Ҡауырһындай ғына билкәйҙе
Өҙә яҙып, аҙмы иңкәйҙек?
Аҙмы яттыҡ хатта тәкмәсләп,
Юл саңдарын йотоп һәм сәсәп?!
Тайманыҡ тик Намыҫ юлынан —
Әйләнмәнек иблес ҡолона!

Тик һин генә түгел, мин дә -- бел! –
Утыҙ ете һанын күрһәм, гел
Тетрәнәмен ҡылыс сапҡандай...
Аяҙ көндө йәшен атҡандай,
Аҫылдарҙан аҫыл ирҙәрҙе
Яуыз ҡулы һелтәп ебәрҙе!..
Шул яуыз ҡул ҡыйған ҡамсынан
Ал ҡан торҙо көн-төн тамсылап...
Ғәмһеҙ генә быны белмәне.
Белде ләкин Хаҡлыҡ бизмәне...

Ныҡ булдыҡ беҙ, дуҫым, ныҡ булдыҡ,
Юҡ булаһы ерҙә ут булдыҡ.
Һалып иңгә ауыр йылдарҙы,
Ябырылдыҡ һаман юғары.
Илау-һыҡтаныуҙы белмәнек,
Зарыбыҙҙы һөйләп йөрөмәнек —
Күҙҙән түгел, йөрәк төбөнән
Ҡанлы йәштәр беҙҙең түгелгән...

Тетрәндек беҙ, эйе, ул саҡта
(Кескәй генә улдар булһаҡ та):
Яуҙа йөрөп сәсе ағарған,
Ҡырҡ үлемде ҡырған ҡаһарман
Өнһөҙ үтте конвой эйәртеп,
Йөрәгендә йондоҙ буҙартып
(Яуҙа еңелмәгән батырҙы,
Яғып яла, яһил батырҙы)...
Оялыуҙан хатта наган да
Йәшерҙе күҙ, аңдып барғанда...

Дуҫым минең! Ҡалай ярһының,
Шул ауыр көн йөгөн тарһынып!
Осҡон сәсте осҡор күҙҙәрең,

Телең булды әсе күгәрем.
“Яуызлыҡты ерҙән һөрөргә,
Кәрәк, — тинең, — беҙгә үҫергә!”
Уфтаның һин шунда ир булып,
Өнһөҙ үкһеү менән быуылып...
Ҡыңғырлыҡтың ҡылын өҙөргә,
Донъяны тик нурҙан төҙөргә
Ант иттең... Һәм белмәй хыянат,
Күкрәп килде һинең ҡыйын ант!.. --
Ғәҙел үтәп йәшлек антыңды,
Яуызлыҡҡа уҡтай атылдың:
Ҡыҙыл погон һалып иңеңә,
Ауыр наган аҫып билеңә,
Именлектең булдың яугире —
Хәҡиҡәттең һынмаҫ дау ире!

“Ҙуры”, “вағы” тиеп торманың
Ғәҙелһеҙлектәрен донъяның.
Ваҡҡа ҡаршы ондан вағыраҡ
Ваҡланыуҙы торһа ил һорап,
“Эһ” итмәнең. Дошман эҙенән
Төшһәң, килдең йөҙгә — йөҙ менән!
Йәшәмәнең көнгә күҙ йомоп —
Балаларға индең теш ҡымып.
Хәҡиҡәттең алмас ҡылысын
Ҡайрап, ярҙың нәҙек ҡыл осон.
Арыҫландай алғыр ырғының,
Хаҡлыҡ өрһә оран борғоһон.
Икейөҙлөлөктө яныңдан
Көйҙөрҙөң һин, үртәп ҡамылдай...
Тут баҫыуҙан көндө ҡотҡарып,
Алға барҙың нурға юл ярып.
Әммә бөгөн... “ауыр көн” тиһең...
Шешә төбөн талғыр тентейһең...

Ҡарт ағасҡа төшһә ҡанъяра,
Һыҙлай-һыҙлай ағас ҡыуара.
Ҡыу ағасҡа төшһә ҡанъяра,
Ҡаңғып ауа ағас бисара.
Йәш ағасҡа төшһә ҡанъяра,
Уңала ла бөрө ул яра.
Көрәшсегә төшһә ҡанъяра,
Бөтәшә лә ҡабат яңара —
Ғүмер буйы һыҙлай был яра...

Егеттәрҙән тыуа егетлек,

Күтәртмәһә илгә йөк итеп
Көрәштәрҙә алған яраһын;
Һыҡтаныуҙың белһә самаһын —
Егеттәрҙән тыуа егетлек!

Ултырма, дуҫ, яңғыҙ бикләнеп,
“Ауыр көн” тип ауыр хисләнеп.
Донъяла бит тоғро дуҫтар бар,
Тоғролоҡтан тыуыр йоҡтар бар!

Кирелеп тә күҙ ат донъяға:
Тейенер йән бөтмәҫ улъяға!
Ерҙе төргән күбек болоттар —
Йәйен — ямғыр, ҡышын булып ҡар
Яуыр улар; ергә һут биреп,
Йә аҡ ҡарҙан аҡ тун кейҙереп
Бәүетерҙәр тупраҡ-әсәне...
Еңеләйеп тәне, йәшәрер
Тулғаҡ тотоу өсөн бар донъя —
Ауырлыҡтан науа бар бында!
Ә һин һаман: “Ауыр көн”, — тиһең,
Шешә төбөн уфтап тентейһең...

Талпын, дуҫым, талпын урамға,
Аҡ болотто билгә урарға,
Күк йәшендәр сөйөп уйнарға —
Атлығып сыҡ, дуҫым, Уралға!

Тәбиғәттең тынмаҫ ҡарыуын,
Көрәшеп гел еңә барыуын,
Хәрәкәттән алып бәрәкәт
Яңырыуын ялап йәрәхәт —
Ер-ғаләмгә ҡарап күрерһең
Һәм шатланып-шашып көлөрһөң!

Аңларһың һәм ҡапыл үҙеңде:
Ер кеүек бит һин дә түҙемле!
Күк ҡыяҡтар күпме шыттырҙың,
Гөлө булһын өсөн осорҙоң!
Ҡырау ҡырғанда ла туңманың!
Тота һинең күңел тулғағың!..

Беләм, беләм – яңы заманда
Золом тере әле һаман да...
Мыйыҡлы мор утыҙ етене
Күмһәк тә беҙ тапап-елкенеп,

Ҡәберенән сығып ул йөрөй...
Батшаланып хатта ил һырый...
Һиңә лә ул типте аҫтыртын...
«Мыйыҡланып ҡайта башҡырҡым», --
Тип шомланып, беләм, уфтайһың...
Юҡ! Был ыуҙы, дуҫым, йотмайһың!
Бокалыңды бәреп, урамға
Атлығайыҡ! Көтә Урал да
Ауыр көндө беҙҙәр еңгәнде!
Намыҫ, Хаҡлыҡ дөрөп килгәнде!

Күк тә, әнә, һиңә талпына,
Шифаларын һибә алдыңа.
Миллион-миллион ләйсән бөртөгөн
Яраңа мин йыйып бөркөрмөн;
Ҡырҡып алып йомшаҡ болотто,
Бәйләрмен һаҡ, йәнең йылытып.
Атайҙарҙың ҡотло еренә
Игелектәр игеп йөрөргә
Тыуғанбыҙ бит! Беҙҙән һуңғылар
Атайҙарҙан (беҙҙән) уңһалар,
Шыттырһалар изге орлоҡтар,
Хоҙай үҙе беҙҙе ярлыҡар!

31.05.1964.
Һунарсы ауылы.

# МИНЕҢ ШӘЖӘРӘМ

Башҡорт АССР-ының данлы
50 йыллығына арнайым.
*Автор.*

## *1*

Үткер күҙле зирәк ейәндәрем,
бағам һеҙгә шөйлә алыҫтан.
Ҡара күҙле хәреф-өндәр булып,
ишетелер беҙҙең тауыштар...

Хәреф кенә ләкин түгел инек, —
хәреф теҙеүселәр инек беҙ.
Һеҙ йәшәгән Йәшлек Заманаһын

янып төҙөүселәр инек беҙ.

Ҡышҡы һарайҙарҙы штурмлаған
атай, олатайҙар заманы,
Октябрҙең ялҡын-ялы булып,
йөрәктәрҙе беҙҙең ялманы.

Әллә ниндәй ғәжәп быуын инек
Быуындарҙың сылбыр-ебендә:
әсәйҙәр бит, яуҙа гөманланып,
тапкан беҙҙе поход йөгөндә.

Ҡылыстарҙан ҡойған ураҡ менән
киҫелгәндер беҙҙең кендектәр.
Кулактарҙың обрез гөрҫөлдәүен
тойоп, ырғып төштөк бишектән.

Бер ҡулыбыҙ — мәктәп ишек бауын,
икенсеһе тотто һабанды.
Уттан һурып алған аяғыбыҙ
ялҡындарға барып ялғанды.

Әллә ниндәй ғәжәп быуын булдыҡ:
йә ҙур түгел, йә — бик бәләкәс...
Беҙҙе, тылға тылҡып, тупһыҙ төйҙө
көнбайыштан ҡупкан һәләкәт.

Тағы шул уҡ атай, олатайҙар
ураҡтарҙан ҡойҙо ҡылысын.
Гитлер башын сабып өҙмәккә тип,
йәшенләтте утлы ҡул осон.

Һелтәп улар беҙҙең күҙ йәштәрен,
бураҙнаға тәпәй баҫтырҙы.
Улар киткән яҡтың ҡылыс сыңын
һабан йыры беҙҙең шаштырҙы.

Бер ҡул ҡыҙып ҡырҙа иген икһә,
бер ҡул сүкеш һуҡты заводта.
Малай килеш, ҡара мазут һеңеп,
ятты беҙҙең быуын табутта...

Әллә ниндәй ғәжәп быуын инек:
йә ҙур түгел, йә — бик бәләкәс...
Октябрь һәм Ватан һуғышының
аралында таптыҡ бәрәкәт...

Утлы теле ике ялҡындың да
урталыҡта беҙҙе ялманы.
Йөрәктәрҙе беҙҙең көл итергә,
юҡ итергә яһил уйланы.

Тотоп торҙоҡ донъя быуындарын,
замандарҙы теркәп заманға...
Ҡара күҙле зирәк ейәндәрем,
тарымағыҙ, берүк, ялғанға!

Кәм тигәндә, торһон ете быуын
арағыҙҙа, ҡурсап Хаҡлыҡты!
Етмеш тапҡыр етмеш быуындарҙың
яҡтылығы беҙҙе балҡытты!

Беҙ ҡалабыҙ ҡояш аралында
Октябрь һәм Ватан яуының.
Беҙгә тиклем, беҙҙән һуңғыларҙы
Күтәрә был мыҡты яуырын!

Үткәндәрһеҙ килер көткәндәр юҡ.
Беҙҙең тамыр һеҙҙә йәшәрә.
Бөрөләрен ярып, сәскә атһын
олатайҙар һуҙған Шәжәрә!

## 2

Хәтерләйем,
олатайҙар
һөйләнеләр,
көйләнеләр
бәләкәйҙән
миңә
йәш-ара:
— Тыңла, балам,
ҡарттар һүҙе —
мәңгелектән ишара,
булыр ул һүҙ
һинең өсөн
ҙур донъяға
тәҙ(ә)рә.

Белдем хәҙер:
һөйләгәндәр

икән улар
Шәжәрә...

Шәжәрә...
Тарих төпкөлөнән —
Киләсәккә тәҙ(ә)рә!

Быуын һайын
быуын бағып,
тамға табып,
даға ҡағып
яҙған уны минең
ата-баба.
Илдә гиҙгән
аслыҡ, ваба.
Тупһаларҙан ингән
ҡоро һаба.
Ҡанға батҡан
изге даға.
Әммә баш тартмаған,
туҡтатмаған,
Шәжәрәһен яҙған һаман,
тамғаларҙың асылын
таба-таба,
минең ата-баба!

Халҡым тарих төпкөлөнән
күрә белгән
килерен дә.
Ҡаны ҡатыш ҡыҙыл буяу иҙеп,
билдә ҡуйған Киләсәккә
Шүлгән-мәмерйәнең
таш түрендә.
Ҡоралайҙар,
тарпан-ҡырағайҙар,
сал мамонттар
булған уның
тәүге
тамғалары.
Таш ҡатламын уйып,
яҡты тойоп,
ҡара тау күкрәгеннән
сыҡҡан ярып
донъялыҡҡа ҡорған
дәғүәләре!

Көнгә ҡарай ылығып,
ҡара Шүлгән һүлен кисеп сығып,
хисе ныңып,
ташланған ул донъя ҡосағына.
Ғашиҡ булған һәр бер ағас-ташҡа,
Ай-Ҡояшҡа,
күк үләнгә,
ҡошло ҡыуағына.

Сихырланып,
көнөн — серле ергә,
төнөн
тере йондоҙҙарға
ҡараған.
Күҙ иңләгән,
йән тиңләгән ерҙе
үҙенеке итеп һанаған.

Һәм киткән ул
һалып тамғаларын
ағастарға, йылға, таштарға,
януарҙарға,
күктә — ҡош-ҡорттарға,
йондоҙҙарға, ҡояш, айҙарға.
Шул тамғалар шундуҡ көйләнгәндәр
теле менән уның һайрарға,
йырларға...

Ҡама – Иҙел һыуҙан сөм Обҡаса,
Боҙ-диңгеҙҙән тоҙло Каспийғаса
был тамғалар ерҙә таралған.
Үрҙә Етегән,
Өлкәр,
Тимер Ҡаҙыҡ
тамғаланып аҡ нур тараған,
ер улдарын күккә арбаған...
Тик ҡупмаған
                    халҡым
тыуған ерҙән,
йондоҙ өмөт итеп,
ҡыуыҡ тотмаған.
Төйәгенә төплө табан терәп,
Уралында ғәйрәт туплаған!

Ят дағалар ятһа тамғаларға,
ҡылыс менән уны ҡайырған.

Үҙ һөйәген тамға итеп һалып,
Дошмандарҙың ауыҙын ҡайырған.
Шәжәрәһен яҙған ҡан-йырҙан...

Тамғаларҙы талҡан ҡылыр өсөн,
боғаҙҙарҙан алған ят йола.
Үлем менән Булым юрау ҡорған,
эйелмәгән башты сапҡылап...

Ҡөрьән ингән ҡибла яҡтан,
килгән тәре,
килгән буддаһы.
Килмешәккә
һәм ишәккә
ҡырыҫ ерҙең, ҡорос ирҙең
уҡ һәм ҡылыс булған доғаһы!

Шуғалыр шул
халҡым ерҙә ҡалған,
алла эҙләп китмәй күктәргә.
Тамғаларын
таңға һалыр сағын
йола итеп илен күтәргән!
Әҙәм ғүмере һанһыҙ заманда ла
ҡурсай белгән күҙе ҡараһын.
Бишектән үк,
ғәййәр яҙмыш юрап,
бысаҡ һалып өҫтөнә
йоҡлатҡан
һәр ир балаһын!

*3*

Ҡара күҙле ғәзиз ейәндәрем,
күҙ ҡарайтып, зирәк ҡарағыҙ:
кемдәр ҡулы тотоп торған илде,
быуындарҙың өҙмәй араһын!

“Эйелгәнде ҡылыс киҫмәй” тиеп
өгөһә лә баҫҡын өкөһө,
ҡотҡоларға төшөп һатылмаған
Уралымдың хатта төлкөһө!

Дошман башын билсән һымаҡ ҡырҡып,
шәһит иткән ирҙәр үҙ башын.

Күсәр башы тейгән һәр муйынды
сабып үткәс баҫҡын ҡорбашы,

яңы тыуған керһеҙ сабыйҙарға
имсәктәрҙән тирткән үрт тәме.
Бишек йырҙарынан әсәләрҙең
яугир быуын булып еткән ил!

Ҡара күҙле минең ейәндәрем,
таңды беҙҙең улар аттырған:
Бикбау бабам минең Үсәргәндән
таңды юллап аттар саптырған.

Ҡыпсаҡ ырыуының Мышы улы,
Бөрйән ырыуынан Иҫке би,
Тамъян ырыуының Шәғәлие,
ишетегеҙ, һеҙгә нимә ти:

“Бикбау бейҙең ап-аҡ тирмәһендә
беҙ ултырып бергә кәңәштек.
Башҡорт илен дүрткә сабып өҙгән
айбалтаға ҡаршы берләштек.

Балталарҙан аша һуҙылыусы
дуҫлыҡ ҡулын күрҙек тирмәнән.
Тураҡланған илде беркетерлек
көс алдыҡ беҙ уны күргәндән.

Үҙебеҙ ҙә һуҙҙыҡ ҡулыбыҙҙы,
йомарланды бергә биш дуҫ ҡул.
Биш тирмәне бергә тоташтырған
урыҫ менән башҡорт – бер иш ул!

### *4*

Эйе,
ҡылыс айҡап,
һаумал-ҡымыҙ сайҡап
баҡҡан илем килер заманды.
Ысын дуҫтан
айырған ялғанды.
Саңғылары менән ҡар мәретеп,
сит тамғалы ҡырҡ ил ярып үтеп
барып тапҡан
урыҫ-туғанды.

Бикбау бабамдың аҡ тирмәһенән
балҡып күренгән аҡ Әрәсәй.
Бабам әйткән:
“Бәлки, һәммәбеҙгә
хаҡ Әрәсәй -- булыр бер әсәй!”

Изге булған уйы бабаларҙың...
Шәжәрәгә ҡунған ҡот-тамға.
Аҡ тирмәнән сатҡы һуҙған Дуҫлыҡ
быуаттарҙы уҙған, онталмай.

“Аҡ” аталмыш ҡара батшалары
киҫһәләр ҙә башҡорт баштарын,
киҫелмәгән Дуҫлыҡ! Тере ҡуҙҙай
йән йылытҡан, шытҡан таш ярып!
.........................................................

Урыҫ менән башҡорт —
Бүгәс, Салауат
Урал үртен яғып йәҙрә төйгән
аҡ батшаның ҡара йөрәгенә атырға.
Был йәҙрәләр Рәсәй төрмәһенә,
тамға итеп,
мәңгелеккә
ут-тәҙрәләр уйып ҡалдырған!

Шул тәҙрәнән шәйләй белгән халҡым
тәҙрәләргә уртаҡ Хаҡлыҡты.
Күпме дошман,
                    кереп Әрәсәйгә,
был Хаҡлыҡтан кире ҡаҡлыҡты!
.........................................................

Баҫҡын француз
танау сөйөп килгәс
Кремлгә,
үҙәк майҙанға,
урыҫ пуләһе һәм башҡорт уғы,
шул танауҙы тишеп сығып,
Париж түбәһенә ҡаҙалған...

Ҡурсап илде,
берҙәм тора белде,

халҡым ҡаршы уртаҡ дошманға.
Тик баш тартты сүгеп баш эйеүҙән
илен һуйған түрә, ҡуштанға!

Сая күҙле минең ейәндәрем,
йәшермәйек илдә ни барын:
ҡылыстарын һатып ашаусылар,
эсеүселәр һатып уҡтарын —

ундайҙар ҙа булды...
Иле барҙың
иблесе лә барҙыр, ире лә...
Һеҙҙең арала ла йөрөп ятыр
эсенә мүк бөргән тиреләр...

Әҙәм ҡиәфәтен алған булып
лаф орһалар,
төртөп тишегеҙ!
Паклыҡ менән Хаҡлыҡ ҡына инһен,
аҡ тирмәнең асып ишеген!

Мүкле йәндәр
һеҙҙең, тим, ейәндәр,
мүкләмәһен Заман тирмәһен.
Шулар аша илдең бәғеренә
ниндәй генә шырау кермәне...

Ҡылысынан яҙып
ҡалта таҡҡан
берәҙәккә ҡалһа ил ғәме,
тәгәрләтмәҫ тимә, ҡамғаҡлатып,
Уралды ла заман шүлгәне!..

Ирҙәр ләкин
йәнен бирһә-бирер,
алмаштырмаҫ ғорур йәшәүен:
"Тыуған ергә ятып үлеү — яҡшы,
шаҡшы — ерҙе һатып ашауы!"

**5**

Ҡара күҙле ғәзиз ейәндәрем,
һеҙгә лә был тирһен ғорурлыҡ:
йәнен биргәндә лә бирелмәгән,
һаҡлай белгән ирҙәр тоғролоҡ

ҡара күҙле ере Уралына,
зәңгәр күҙле күге Рәсәйгә.
Ерҙе-Күкте бергә тоташтырып,
башҡорт менән урыҫ көсәйгән!

Ҡара ергә зәңгәр күк ҡауышҡан,
ҡара ҡалған ләкин тупрағы.
Ҡара ерем ҡара икмәк биргән,
ҡара ҡарағаттың суҡтарын.

Аҡ икмәккә ләкин күҙе тоноп
ҡара ерҙән бабам китмәгән.
Ҡара икмәк, ҡара күҙ хаҡына
ҡара төнөн сабыр йөкмәгән.

Ҡайнатҡандыр ҡара дегетен дә,
яҡҡандыр ул ҡара күмерен дә,
ҡайырғандыр ҡара ер майын.
Ҡараларҙан ғына аҡ килерен
төҫмөрләгән бабам, моғайын!

Шуға ла шул сабыр түҙә белгән,
теҙә килгән быуын сылбырын.
Ҡарындыҡлы тәҙрә өлгөһөнән
түгелдергән көнгә моң-йырын...
..................................................

Уландарҙың “ура!” оранынан
ireп аҡҡас иҙел боҙҙары,
Урал тоҡомдары ил ҡынынан
хаҡ-ҡылысын һурып сығарҙы.

Һәм ул ҡөҙрәт,
мәңге һынмаҫ өсөн,
еңмәй тынмаҫ өсөн,
йәшенләнеп ҡалҡты тәүге ҡат:
аҡ һаҡаллы олатайҙарҙы шатландырып,
яугир егеттәрҙе атҡа атландырып,
илде буйлап китте Хәҡиҡәт.
Өйҙән-өйгә инеп,
ярлы халыҡ өсөн көйөнөп
йөрөнө был изге Хәҡиҡәт
тәүге ҡат.

Саҡма сағып, ялҡын яғып дөрләтте
йөрәктәрҙә һүнгән өмөт шәмдәрен.
Тынын өрөп, һулыш биреп тергеҙҙе
әжәл тамға һалған әҙәм йәндәрен.
Айҡал-сайҡал килеп торған заманда
сын тамғаны айырҙы ят-ялғандан.

Атһыҙ ҡалған бураҙнаға егеп ат,
яу ҡырына солох көнөн ҡылып шарт,
көн нурына тартып сүккән һәр өйҙө,
тулғаҡ тотоп Хаҡлыҡ тапҡан донъяға
был Хәҡиҡәт булды кендек әбейе.

Тәре менән түгел,
Ҡөрьән менән түгел,
Будда менән түгел —
һөйәлле ҡул ҡыҫып тотҡан
Ураҡ менән, Сүкеш менән
кендек киҫеп,
тамға һалды киртеп
ул йәндәргә,
биләмдәргә,
тыуасаҡ һәр яҙ һәм көҙ,
ҡыш һәм йәйҙәргә!

Шул көн
минең ата-бабам ауылы Сәнкемдә лә
ҡыҙарып таң атҡан;
шул көн
бабаларҙың яугир ейәндәрен
“Бәйнәлмиләл” ярһып уятҡан;
шул көн,
Шәжәрәгә ҡотло даға ҡағып,
саҡма тояҡ аттар яуға сапҡан!
Һаҡмар ярһып аҡҡан,
Яйыҡ ялын ҡаҡҡан,
Иртыш, Иҙел, Ағиҙел алҡҡан,
Ҡама ҡамсыһын һелеккән,
ярһыу аттар сапҡан, сапҡан...

Алһыу Ҡояш ҡалҡҡан,
алһыу таҫма таҡҡан
күкрәгенә
минең атай, олатайҙар.
Теләктәре сынығып,
ат йөҙҙөрөп сығып,

ҡыҙыл яуға барып ҡушылған
минең атай, олатайҙар!

Етмеш ете халыҡ улдарының
уйын,
күңелен,
ҡулын,
ваҡ тамғалар ҡоллоғонан ҡотҡарып,
уртаҡ һабанға,
йыһанға
тоташтыра торған Тамғаны
минең өсөн,
һеҙҙең өсөн
ҡанға мансып
ҡылыс осон,
Шәжәрәгә уйып яҙа-яҙа,
ҡыҙыл ташҡын булып аҡҡан
яугир ағай, олатайҙар
(өнәп торған ата-баба!)
изге оран ҡупҡан Ерҙең кендегенә —
Ленин төйәгенә!
Арғымаҡтар шыҡ-шыҡ төйөп барған
быуаттарҙың күкрәгенә,
бабаларҙың һөйәгенә...

## *6*

Ҡара күҙкәй ейәндәрем минең!
Ҡара төнгә бағып ҡарағыҙ:
Октябрҙең нуры сағыулана,
йырағайған һайын арабыҙ.

Күҙ йомһаң да, балҡып ул күренер —
мөмкин түгел уны күрмәҫкә!
Шул саҡтының нурын имеп үҫә
һеҙҙең ҡырҙа атҡан гөл-сәскә!

Гөл тамырын булды киҫеүселәр,
нур тыуынан уны айырып,
үркеп сығып шайтан таяҡтары
баҫһын өсөн һеҙҙең пак ҡырҙы.

Көрәштек беҙ шундай шойҡан менән,
тамырҙарҙы ҡурсап һаҡланыҡ.
Ә ҡай саҡта белмәй, үҙебеҙ үк

изге шытымдарҙы тапаныҡ...

Утыҙ етенсе йыл һәм башҡаһын
Хәтерләүе хатта имәнес.
Ғазраилы илдең, мыйыҡ бороп,
әжәлдәрҙән тапты кинәнес...

Балта сапһаҡ тәрән тамырҙарға —
берүк, беҙҙе ғәфү итегеҙ.
Ерҙе һатып ләкин ашаманыҡ,
баш эймәнек ятҡа, белегеҙ!

Ғибрәт булһын беҙҙең яңылыштар,
үрнәк булһын беҙҙең еңеүҙәр.
Ике ялҡын ҡапҡан аралдан беҙ
күҙ төбәйбеҙ һеҙгә, ейәндәр.

Октябрь һәм Ватан һуғышының
ялҡындары беҙҙә тоташа.
Беҙҙең аша ата-бабаларҙың
аманаты һеҙгә олғаша.

Аҡ күңелле булған ул бабалар,
аҡ күңелле булды атайҙар.
Ҡояш элеп ҡылыс остарына,
беҙҙең аша һеҙгә ҡарайҙар...

## 7

Егерменсе быуат башындағы
ҡаралыҡтың ҡаҡшап сүгеүен
кем онотор!
Башҡорт аттарының
Питер урамынан елеүен!

“Битыр батша” мужик һөйәктәрен
түшәп йәйгән яҫы таш урамдан
сыҡ-сыҡ баҫып,
осҡон сәсеп
Смольныйға китте эскадрондар.
Утлы тимер ташҡын сафтарында,
тәпәш, йөнтәҫ, теремек аттарында
уйға сумып өнһөҙ барҙы,
теҙемендә халыҡтарҙың,
Шүлгән томораһын ярып сыҡҡан халыҡтың —

Урал батырҙарҙың,
Ерәнсә сәсәндәрҙең,
Аҡайҙарҙың,
Алдарҙарҙың,
Батыршаларҙың,
Салауаттарҙың ғорур тоҡомдары —
бығау өҙгән батша тотҡондары —
минең атай, олатайҙар...

Уттан,
йоттан,
үлемдән дер-ҡалтыранған ҡалаға,
утлы балдаҡ алһыулаған һауаға,
таң тынлығын тулғандырып,
мәңгелек йыр яңғыраны:
“Уралым”,
шау-гөрләтеп Питер урамын!

Алтындары тамып торған бай тәҙрәләр
ябылдылар,
һөрөм баҫҡандары алсаҡ асылдылар:
ҡоромланған көрәк ҡулдар йәбен сөйөп
тәбрикләне эшсән Питер Уралын,
синыф биргән үткер ҡоралын!

Һәм башҡорттар ҡайнап янған утҡа —
Революция тамуғына атылдылар уҡтай,
ҡылыс, һөңгөләрен тырпайтып,
ҡорос аҙым менән
“тып” та “тып”,
ут божраһын өҙә һуғып
Хаҡ-тамғаһын һалыу өсөн донъя картаһына!
Һәм шул ғәйрәт —
яугир башҡорт көсө,
Рәсәй көсө менән берегеп,
осло һөңгө булып ҡаҙалды
Капиталдың күкрәк ҡалҡанына!

Етмеш ете илдең балалары
берләшеп,
яурынға-яурын терәшеп,
ергә ҡаты баҫып,
ярһып,
күкрәк көсө менән эттеләр,
тәгәрләттеләр
күп быуаттар буйы халыҡ үсе төйгән,

донъялағы иң дәү Пушканы —
Хөкөм көбәген —
планетаның фронт һыҙығына.
Йөрәктәрҙә нәфрәт ҡыҙҙы ғына!..

Америка,
Европаны
һөйәктәре менән ашлап ағартҡан
ете быуын ҡара ҡолдарҙың,
Кортес атҡан ғорур индей ырыуҙарының,
Лион,
Бастилия,
Ҡыҙыл Пресня геройҙарының
ғазаплы һәм үсле рухы терелеп,
ерҙең йәҙрәһенән үрелеп
алға этеп торҙо миллион табандарҙан,
оран ялғап ауып ҡалғандарҙан
изге һуғышҡа!..

Һуңғы һулышҡа,
һуңғы йөрәк тибешенә ҡәҙәр берегеп
Ленин океаны менән,
Пушка этеп сыҡты донъя офоғона
башҡорттар,
бөтә халыҡтар —
беҙҙең яугир атай, олатайҙар.
Туҡтаны Ер, гүйә, әйләнеүҙән —
мәғрур көскә биреп майҙан!

"Аврора"ның саҡкылары ярған күккә
кинәт ҡалҡты,
Ер шарына аяҡ кирә баҫып,
бер яҡты,
тере маяҡ —
Ленинизм маяғы.
Бармаҡ төртөп төндөң дөм-төбөнә,
йүнәлтте ул Заман талабын.

Шул дәғүәнән дөрләп күкрәк кирҙе,
оран бирҙе
сапҡыланып ауған һәр яҡтан
ҡанлы байраҡтар;
меридиандар аша Ер шарының
ҡитғаларын бергә тоташтырған
ҡыҙыл епкә
тарамышлы ҡулдар берегеп,

терәлделәр сөйҙәй аяҡтар;
бар кешелек билдән ергә батып,
тартып
саҡма саҡты,
атты
быуаттарҙан ташҡан утлы нәфрәтен
Рәсәй ҡулы тоҫҡап тотҡан
Тарих Пушкаһынан.
Тетрәне Ер ярһып осҡанынан
Снарядтың —
Антантаның ун дүрт ҡурғаш йөрәген өҙөп,
үҙ хөкөмөн төҙөп сыҡҡан ғали йәнәптең!..

Был Снаряд —
Нур-заряд
яҫалғайны бөтә замандарҙың
көндәренән тыуған ғибрәт менән.
Ғәҙеллеккә аҡ юл бирергә,
Нахаҡлыҡтың төбөн киҫергә,
тулышҡайны тылсым-ҡөҙрәт менән.
Уны —
тылсымды
Заман Снаряды яҫап төйҙө
Хаҡлыҡ мәңгелеген раҫлаусы көс!
Көбәгенән салют итеп сөйҙө!..

Һәм был салют —
Капиталдың ҡара бәғерен телгән
етмеш ете милләттәрҙең салюты,
донъя боғаҙына батҡан ҡара һөлөктөң:
Ротшилдтарҙың,
Крупптарҙың,
Фордтарҙың
Рокфеллерҙарҙың теҙен сүктереп,
һалҡын тирен түктереп,
яңы сафтар яуға торғоҙҙо;
күкрәр көндәр өсөн Тельмандарҙы,
Димитровтарҙы,
Торез, Тольяттиҙарҙы тыуҙырҙы;
Тарих сәғәтенең утлы уғын
киҫкен
синфи бәрелештәр һыҙығына шыуҙырҙы;
Заман Снарядын бер туҡтауһыҙ
Киләсәккә төбәп осорҙо.

Үҙ еленә егеп осорҙо,

дәүерҙе,
илдәр,
йылдар,
баррикадалар аша осто был хаҡ Снаряд.
Кулак обрездарының,
КВЖД,
Халхин-Гол,
Мадрид,
Маннергейм йыртҡыстарының
үлемесле көбәктәрен тонсоҡтороп,
үҙ артынан ерҙе-күкте,
океандарҙы ылыҡтырып
осто был хаҡ Снаряд!..
Ҡола яландарҙа Магниттарҙы,
Днэпрогэстарҙы,
Амур ҡалаларын торғоҙоп;
Аҡ диңгеҙҙән Балтикаға
Ҡотоп дарьяларын ағыҙып;
шинель кейгән яңы быуын күкрәгендә
Матросовтар дәртен ҡабыҙып
осто был хаҡ Снаряд!..
Нур-заряд!

### *8*

Нурлы күҙкәй ғәзиз ейәндәрем,
бағаһығыҙ миңә йыраҡтан!..
Ҡара күҙле хәреф-өндәремде
сығарҙым мин ысын йөрәктән.

Бураҙнанан барҙым диңгеҙҙәргә,
миналарҙан донъя арсаным:
атайҙарға фашист ҡороп киткән
үлем ҡырҙарынан атланым...

Ҡайтҡас илгә хәрби хеҙмәтемдән,
егелдем гел әрһеҙ эштәргә.
Бураҙнала һабан тотҡан килеш,
тотондом аң-белем эстәргә.

Эшләп йөрөп бөттөм унынсыһын,
эшләп йөрөп бөттөм вузын да.
(Эшләп йөрөп һаман аҡыл алам,
ҡәләм тотҡан килеш ҡулымда.)

Бабаларҙың яҡты аҡылына
еңел түгел аҡыл ялғауы.
Университетым минең мәгәр
һеҙҙең вузға барып ялғаныр!

Кеҫәл ярҙа, һөт йылғалы ерҙә
йәшәр, тиеп һеҙҙе әйтәләр.
Ышанмайым! Һеҙҙең заманда ла
кәрәк булыр баш һәм елкәләр.

Хаҡлыҡ асы булыр һеҙҙәргә лә,
Нахаҡ юлы — еңел һәм тайғаҡ.
Шәжәрәгә Заман таяндыртыр,
уфтанғанда тоғро юл һайлап.

Кем булды, тип әгәр һорағанда,
муйыл күҙле алыҫ бабағыҙ,
“Намыҫлы булды”, — тип минең хаҡта
Шәжәрәнән яуап алһағыҙ,

Кәрәк түгел башҡа һис бер нәмә!
Тиң күрҙем мин фәкәт Намыҫты.
Намыҫыма үлсәп билдәләнем
был донъяла Дошман һәм Дуҫты.

Илемдең бер бөтмөр һабансыһы
булып ҡалдым, шағир булһам да.
Игеп китәм һеҙҙе Киләсәккә,
ҡурсау өсөн Хаҡты Ялғандан!

Арба-арба алтын түгел һеҙгә,
Намыҫымды биреп ҡалдырам.
Баштар китһә китһен, Намыҫ ҡалһын,
ил баҫмаһын өсөн ят оран!

Киләсәктең аҫыл сәскәләре
сумһын өсөн нурға тамырҙан,
ҡара күҙкәй ғәзиз ейәндәрем,
Шәжәрәне һеҙгә ҡалдырам.

Ерҙе арбап оҫкан пак Снаряд —
беҙҙең аша һеҙгә үткән юл.
Күңелдәрҙең ағын ылыҡтырып,
Шәжәрәгә нурын бөрккән ул.

Бациллаһы баҫып фашизмдың,

ҡалыр ине донъя шәп-шәрә,
атай, олатайҙар оранына
таянмаһа әгәр Шәжәрә.

### *9*

Ытырғаныс дүрт аяҡлы свастика
йөрөгәндә,
Европаның ашай-ашай ҡыртышын,
кешелектең ғүмере өсөн ҡырҡышып,
әсәләрҙең түше көн-төн тартышыуҙан
Лидицелә, Орадурҙа көл-таш-һыуҙан
Ерҙең ҡанлы күкрәк һөтө тиртеп сығып,
балаларын яуға саҡырғас,
Бухенвальдтең ҡорбандары сың орғас,
ҡырҡ беренсе йылдан
ҡырҡ бишкәсә
ҡан-дошманға үлем сәсә-сәсә,
ғәрәсәтле Мәскәү яндарында,
Сталинградта,
Дунай буйҙарында,
Эльба яҡтарында
ҡөҙрәт саҡҡыларын ҡалдырып,
Гитлер үләт-ҡортон яндырып,
донъя албаҫтыһы фашизмдың
гүр-өңөнә ауҙы үс-заряд —
шанлы Питер ҡапҡаһынан
беҙҙең ярһыу атай-олатайҙар
атҡан Снарядтан ҡупҡан көс-ғәйрәт!

Саҡҡылары уның
асман ашып,
Ҡош Юлына тоташып,
йондоҙ ямғырына күмде офоҡтарҙы.
Шул ямғырҙан ҡитғаларҙа
шытып сыҡты дауыл орлоҡтары;

дауылдарҙан тайфун ҡубып,
Европаның ғәмле илдәрендә,
алыҫ Америка ерҙәрендә,
Азия һәм Африканың төпкөлдәрендә
бүҫерелеп китте иҫкелектең
ерҙе быуған ҡанлы сынйырҙары...

Нурға мансып ҡала һәм ҡырҙарҙы,

бөгөн дә,
хәҙер ҙә
һаман-һаман гиҙә ут-саткылар
кешелектең зәңгәр көмбәҙендә.
Капиталдың шашкан көндәрендә
детонатор булып сакма саға
халык нәфрәтенең үҙәгендә!

Греция Глезостарының,
Астурия шахтерҙарының,
Детройт,
Чикаго,
Гарлем негрҙарының,
Ғәрәп, вьетнам батырҙарының
баррикадаларҙан аткан һәр ташында,
пүләһендә,
йәҙрәһендә
зарядланып оса был саткылар!
Ялған-ялмауыҙҙы салт сапкылап,
Балтиканан Тымык океанғаса,
карт Каспийҙан боҙло котопкаса
бөйөк Ватанымдың һәр саңын
Йәншишмәһе менән һуғарып;
ике йөҙ кырк миллион халкымдың
йөрәк төпкөлөнә туғарып
Хаклык утын,
Хаклык дәртен,
Хаклык акылын,
Хаклык нәфрәтен;
бергә төйнәп илем көҙрәтен,
бер космодром итеп тоташтырып
ике йөҙ кырк миллион ҙур усты,
күккә сөйә Кыҙыл коросто,
кешелектең Шәжәрәһен яҙыр өсөн,
беҙҙең атай, олатайҙар Хаклык менән
кеүәт итеп Берҙәмлектең көсөн,
Тарих Пушкаһынан аткан Снарядтан
купкан был заряд...

Һаман-һаман осор ул Снаряд,
осорҙарҙы егеп осорға.
Осраған һәр шакшы каралыкты
төбө-тамырынан кырсырға!

Ерҙең үҙе кеүек егәр килеш,
Күктең үҙе кеүек сибәр килеш,

кешеләргә бирер көс-заряд
тылсымдарға тулы Снаряд!

Йылдар,
быуаттар
һәм дәүерҙәр үтер рәт-рәт;
шул зарядтан алып ғәйрәт,
һаман-һаман үрләп юғары,
етмеш ете милләттәрҙең
ҡыҙҙары һәм улдары
ғаләмдәрҙең Шәжәрәһен яҙыр,
ҡәләм-ракетаның осона мансып
Заманамдың һүнмәҫ нурҙарын!..

Ғәзиз улдарым һәм ҡыҙҙарым,
һеҙгә ҡала ихлас йырҙарым,
һеҙгә ҡала минең Шәжәрәм —
Мәңгелеккә асҡан Тәҙ(ә)рәм!..

1968.
16.02.1980.

# МЕТЕОРҘАР ЮЛЫ

*Заманында партия ҡалыбына һыйышмауым арҡаһында матбуғатҡа юл яра алмай архивымда ятып ҡалмыш әҫәрҙәрем араһынан әле килеп ошоноһон әҙәбиәт һөйөүселәргә тәҡдим итергә булдым, сөнки ул бынан утыҙ йыл элек яҙылһа ла, хәҙерге фирҡәләр алышы ҡайнаған буталсыҡ осоробоҙға лайыҡлы үҙ аһәңен, фәһемле тарихи әһәмиәтен һаҡлаған һымаҡ... "Балыҡ башынан серей", тигәндәй, хаҡимлыҡ ҡылыусы Коммунистар партияһының шул етмешенсе йылдар башында уҡ "боҙола" башлауын да абайлар бында зирәк уҡыусым. Метеорҙар юлынан барған миллиондарҙың йөрәк уты һүнмәһен, йәш йөрәктәрҙә, ниндәй фирҡәлә булыуҙарына ла ҡарамай, азатлыҡ ялҡыны дөрләп тоҡанһын ине.*

**Автор.** 28.11.1999.

## I

Партияға
икәү бергә керҙек, —
һин таҫыллы инең күптәрҙән, —
шатландыҡ беҙ:
"Ирҙе арабыҙҙан

яугир итеп
Заман күтәргән!”

Ул хаҡ-көндә
Ленин хаҡ-һүҙҙәре
шартлап торҙо һинең телмәрҙә.
Бюро әйтте:
“Беҙҙең йәш уҙаман
йәнен өрөр йәнһеҙ йәндәргә!”

Һинең менән ҡуша
мин бит үҙем
Ҡояш-атҡа ҡайттым атланып:
ике ҡорҙаш —
бөйөк партияның
яугирҙәре булып атланыҡ!

Йөрөп сыҡтыҡ
янып беҙ ул төндө,
Ер шарында гиҙҙе хыялдар...
Утлы ҡантамырҙай,
табандарға
типте утлы меридиандар:

“Һеҙ — коммунист! Донъя һорай һеҙҙән! —
Хаҡ һәм Нахаҡ яуын осларға!”
Ант итештек:
мәңге, мәңге тынмай
ҡылыс ҡайрап һөңгө тосларға,
ныҡ торорға ҡыҙыл постарҙа!

Һәм ҡояштың ҡыҙыл хәнйәрҙәрен
һурып алып,
таңдан һаплаттыҡ.
Һәр икебеҙ илгә
биш ҡитғалы
ал Ер шарын йөкмәп апҡайттыҡ,
үҙебеҙгә үҙебеҙ шаҡ-ҡаттыҡ...

Керештек беҙ
Көндө арсаларға
ялмауыҙҙан, яллы-ялғандан.
Ҡояш үҙе көйрәр төҫлө ине
беҙҙең йөрәк бәргән ялҡындан!

Ярылырға —

яугир булырға! — тип,
шартлап китер саҡтар бар ине.
Ғәзелһеҙлек күреп еҥ һыҙғанһаҡ,
беҙҙеҥ өсөн донъя тар ине.

Көн-саҡтынан ҡойған хәнйәребеҙ
төҙ ҡаҙалды Нахаҡ күҙенә —
атам арбаулыһы булмағайы! —
тормаҫ инек ҡарап йөҙөнә...

Шул көрәштә,
беләм,
мүк ҡаплаған
яраларҙы
ярһып ҡуҙғаттыҡ.
“Дуҫ!” тип туҫтаҡ тотор тоҡомдарҙы,
туғандарҙы хатта юғалттыҡ.

Беҙҙеҥ өлөш —
түгел майлы бәлеш,
яуып торҙо ҡаты туҡмаҡтар.
Ал хәнйәрле ҡояш ҡоро өсөн
һалынмаған берләм һуҡмаҡтар...

## II

Көрәштәш дуҫ!
Булдыҡ бит беҙ ырыҫ --
ут-йылдарҙы яуҙа үткәрҙек!
Бил бөгөлөп һыныр сәғәттәрҙә
ир намыҫын ғорур күтәрҙек!

Кер ҡармалап беҙҙеҥ табандарҙан,
күпме сәүек ерҙә буталды.
Ләүкеп янған ҡайбер усаҡтарҙан
ҡай саҡ фәҡәт бер ус көл ҡалды.

Наҙламаны
беҙҙе
күк Тәҥреһе:
“Был юл шыма —
шунан ел, кешем”.
Дөрөп барҙыҡ,
төрөп табандарға
меридиандарҙыҥ керешен!

Яугир ҡорҙаш!
Әйтмә: “Һәй, арыныҡ —
сикәләргә
ҡарҙар ҡунғылай...”
Беҙ — коммунист!
Ә коммунист ғүмере —
йыһан ярған метеор юлылай!

Атыла ул
ярып төн ҡабағын,
күкрәп-дөрләп сихри сәм менән,
выжданының йыһан масштабын
һыҙыр өсөн ғаләм йәненә.

## III

Атылдыҡ шул янар метеорҙай,
ярҙы төндө
йөрәк,
утланып...
Кем уйлаған
беребеҙ
ярты юлда
ярһыуҙан, тип, төңөр, мутланып?!.

Метеорҙар юлы — ялҡынлы юл,
тәүәккәллек теләй ирҙәрҙән.
Кем уйлаған
быçҡыр беребеҙ тип,
дөрләп барыр саҡта үрҙәрҙә?!

Метеорҙар юлы — ҡатмарлы юл,
ут иләге аша үткәрә.
Метеорҙан ыçлы торомбашҡа
ҡалмаç өсөн талмаç үрт кәрәк!

Ә ул үртте,
дары моҙғайылай,
һаҡлай белә
ирҙәр
йөрәктә.
Метеорҙар булыу ғилемдәрен
метеорҙар юлы өйрәтә!

## IV

Кем уйлаған...
                    Беҙ ҡуш янғын инек,
яҙлығышты утлы яурындар...
Әллә инде,
            тим,
                    беҙ алмашындыҡ,
Алмашынды әллә урындар...

Бер ҡояштың ҡуҙлы ҡуш хәнйәре
көн ҡоронда шундай үҙгәрҙе:
бере йомшаҡ ҡынға кереп ятты,
бере сәсрәп ташҡа йөҙ бәрҙе...

Мин күҙ асып
                    тәү ҡат баҡтым һине,
алйыу иткән антлы таңдан һуң:
абау, дуҫым,
                    ҡалай ҡупайғанһың,
ҡалай олпат булып алғанһың!..

Күпме заман
                күрмәй йөрөгәнмен, —
булған имеш һиндә
                            мәғәнә:
донъя ҡуласаһын өйрөлтөргә
китеп бара түрә (вәт бәлә!) —

күрешергә хатта ваҡыты тар...
Ҡырҙан ғына уҙа баш һелкеп.
Ах мин, аңһыҙ, шуны белмәгәнмен:
күҙ өҫтөндә күркәм ҡаш итеп

ҡуйғандар бит кисә ҡорҙашымды...
Үрләткәндәр... инде ул — өҫтә...
Метеорҙы — ах был мут йәнлеләр! —
быҫҡыталар бәҫле ...тиреҫтә...

Бюрократлыҡ синхрофазатроны
плазманы бәйләп өлгөргән.
Ҡорҙаш өсөн инде мин — “элемент”
ҡотҡо һалып илгә йөрөгән...

## V

Хәҙер инде
хәнйәр һабына ла
(масштаб тар!) ҡулы үрелмәç.
Аяҡтары
икәү дөрләп янған
утлы-ҡуҙлы юлдан йөрөмәç.

Контораның биләй космодромын —
курьер көтә ымын ҡапҡала.
Ҡағыҙға ир Ерҙе төрөп илтә
ҡултыҡ аçтындағы папкала.

Шул папканан ситкә тайып ҡара —
түңкәрелер күктең көмбәҙе.
«Массалар»ға
һыу һәм һауа һымаҡ
тиреләлер түрә вәғәзе.

Өйрәтә ул
ҡалай йәшәргә лә,
нисек итеп хатта
ашарға.
Ниңә кәрәк
үҙ фекерең йөрөтөү
беҙҙең кеүек ҡыуыҡ баштарға!

Күптәр шуға тоя башланылар
үҙ мейеһен артыҡ йөк итеп:
"Беҙҙең өсөн уйҙы түрә уйлар —
ниңә кәрәк мейе йөрөтөп!"

Әллә инде шайтан алмаштырҙы
ҡорҙашымды, алды албаçты?
Киң түшенә миҙал ҡылып көйләй
ҡылыс итеп ҡайрар алмасты...

## VI

Көрәштәш дуç!
Ҡарғып "масштаблы",
ҡарғышына кемдең тарының?..
Өйөңдә лә инде ҡырлыҡтарҙан

айырмайһың топ-тос тарыны.

Секретарь ҡыҙ менән ҡыҙып китеп,
осорғанһың ҡотон ғаиләңдең.
Йыйылышта үҙем ярып һалдым
ярғанатлы йәмһеҙ хәйләңде.

Ҡырын ҡарап уҙҙың үҙ юлыңдан...
Ҡорҙашыңа арҡа күрһәттең.
Оноттоң шул бергә янғандарҙы,
йөрәктәрҙе ҡуша дөрләтеп.

Метеорҙар юлы — ир үтәр юл,
ситләп үтмәй әммә ваҡлығы;
селпәрәмә килеп шартлап китһен
йөрәгеңә ваҡлыҡ ҡаҡлығып —

сигенеү юҡ!
Сиген ғаләмдәрҙең
Фиҙакәрлек, Намыҫ билдәләй.
Намыҫыңды ниңә, ҡорҙашҡайым,
теҙ сүктерҙең түҙмер дөйәләй?..

## VII

...Алыштым мин
бер көн
мут йән менән
(базарком, — мут ҡомаҡ-йыртҡыс ул).
Ә һин
шул ҡараҡты
ҡағыҙ көйләп
һәм тел сөйләп,
яҡлап ҡырҡыштың...

Йыйылыштың бәйләп аң-тоңдарын
(түрә һүҙе терәк күптәргә),
алйыулаттың партиялаштарҙы –
үтәлмәҫлек эште үтәргә.

Ҡыҙғандырттың
«ғәйбәт ҡорбаны» тип
йылғыр ҡуллы ҡыҙылғолаҡты.
Ҡайҙа булды теге дөрләү юлың,
телер телең ҡайҙа олаҡты?!

Аңланым
тик
ҡалып һуңға быны:
усыңды шул мут йән майлаған!
Һатып алып хатта судъяны ла,
судһыҙ сығыу юлын яйлаған...

Метеорҙар юлы — боролмаç юл!
Борғосландың ләкин йыландай.
Әйтсе,
ҡорҙаш,
ҡайһы яҡҡа ауҙың?
Метеорҙар мутлыҡ ҡылалмай!

Әүерелдең, ахыры, ҡыу туҙанға,
ҡойҙоң ҡалта сатҡы-хәнйәрҙән.
Торомбаштай ыçлы түрәләндең!.. —
Һыҙлай йөрәк ошбу хәлдәрҙән...

Үҙең менән уртаҡ фронт тотҡан,
тиң көрәштәш булған кешене
алмаштырҙың шул бер баҙарҡортҡа —
был ярарлыҡ,
әйтсе,
эшме ни?!.

Бирҙең арҡа...
“Ябай массаларға
ем бирҙең, — тип, — етәк өçтөнән”.
Етәксе дуç!
Ни бирерһең икән
шул «масса»ға, ауһаң өс көндән?!

Шәйләмәйһең...
«мәңгелек түр»ҙә һин...
Уңдан һурып — һулға һүтәһең.
Партияңдың
Аҡыл,
Намыç,
Намын
номенклатур вәғәз итәһең!..

**VIII**

“Өс көнлөк”тәр генә икәнлекте
онотмайыҡ түрә түрендә!
Бейегерәк түргә тирткән һайын,
кем икәне кемдең күренә.

“Ҡорбашсы”лыҡ ҡылып,
массаны һин
әйләндермәк булһаң ҡурсаҡҡа,
тәгәрәрһең текә орбитаңдан,
тәгәрләрһең ҡалып борсаҡҡа!

“Демократ”лыҡ ҡылып уйнауыңдың
уйнашлығын масса айырыр.
Метеорҙар юлы торомбашты
ҡабул ҡылмаç! Кире ҡайырыр!..

Онотабыҙ шуны
ниңә бик тиҙ,
масса — Ғаләм, беҙ — саң икәнен.
Тик массаның утлы заңы булып
метеорҙар сирғып киткәнен.

Масса —
түгел тын һоло кеçәле.
Йә гер түгел
үле суйындай.
Миллион йөрәк
дарçлай ныҡ көсәйеп
«масса» тигән мөслө бойомда.

Масса мөсөн наҡыç тойма һин, ир,
«йөҙөк ҡашы —
мин!” — тип гел генә.
Масса —
һине ир иткән баһадир —
ул идара итә
Ер менән!

Аҙым һайын аҙан-сихәтләүең
ҡаҙаҡланһын папкаң эсендә.
Масса мейеһендә
секунд һайын
миллион фекер,
миллион төшөнсә! —
даһи тулай масса хисендә!

Көлкө һалма
хатта тауыҡтарға
сабый көләр вәғәз-һүҙ менән.
Алға ырғып,
төҙ йүнәлеш ал да
етәкләп тарт илде үҙеңә.

Ә аҡыллы һүҙҙе
(ул да кәрәк!)
төбә тыныс һәм ҡал исемһеҙ.
Аҡыл һеңер илгә ныҡ,
төпкәрәк,
һытһаҡ ҡына ҡыуыҡ зитын беҙ!

Булмамын мин хатта “етәк көсө”,
булмам хатта ағза парткомда, —
ләкин партиялаш иптәш өсөн
башты һалырға ла тартынмам!

Мин — коммунист,
эйе,
фронт тотҡан
ябай вәкил,
ябай һуғышсы.
Шуның өсөн
һәр бер ҡыңғырлыҡты
ҡыйратырға мең ҡат бурыслы!

## IX

Әйҙәсәле,
үпкә һаҡлашмайыҡ
телеп әйткән тура тел өсөн:
шалтырауыҡ өндәр ник ташлайһың
ил йөк тартҡан мәлдә —
кем өсөн?!.

Ә эштәрең һинең...
шөкөр түгел...
Боғаҙың көр...
мәгәр ҡырыңда
аҡ ҡыуланып оса билсән төгө,
ҡараһоло ҡарпып моронлай...

Сәселһә лә илгә «игелегең»,

һирәк шыта бойҙай,
сүп -- ҡуйы...
Уңыш даулап,
лозунгылар баулап
өйә кәбән түрәм йыл буйы...

Ә теле һуң, теле!.. —
әллә сөйлө?..
Сөйәлләнеп йәнде сыярлыҡ.
Башҡорт теле, тиһәң — урыҫ көйлө...
Урыҫ, тиһәң — урыҫ иларлыҡ...

Була теләк —
сыбыртҡылай телеп
ярыу зарур
әсе тел менән.
Ә һинең тел,
шамбы кеүек тертләп,
шамбылыҡтың боҫа ләменә...

Партияға
зауҡың аҡыл өҫтәп,
телең — яҡлау,
күҙең үткерлек
килтермәһә,
һиндәй партиецтан
мәғәнә бар илгә ни төрлө?..

Тәбиғәттән бүләк итеп алған
сифаттарҙың иң-иң ярһыуын
партияңа взнос итеп һалһаң,
сафта ҡалырға һин хаҡлыһың.

Шәхесеңә шыма һуҡмаҡ яйлап,
уңлы-һуллы әгәр янтайһаң —
дөрөҫ түгел,
Ленин юлын һайлап,
партиялы булыу артабан!

«Ах, Ленин юҡ... Ленин булһа мәгәр!..» —
Көрһөнөр ир
үргә күрһәтеп.
Мөмкин булһа әгәр, ул Ленидан
йөрөр ине үҙен күтәртеп...

## X

Ленин!
Ал хәнйәрле янар ҡояштарҙың
бер үҙендә яғып ул барын,
ал комета булып ярып үтте,
мәңгелеккә һалып ҡомарын.

Ваҡыт,
тиҙлек,
сикһеҙ арауыҡты
бөрөп тотто бергә усында.
Был титандың тартыу көсө дөрләй
ғаләмдәрҙең ярһыу пульсында.

Миллион-миллион янар метеорҙар
шул тартымға дөрләп ҡабына.
Ҡуҙы ҡыҙып
саң да,
ялҡынланып,
һыҙа юлын уның яғына.

Мин дә, бәлки, бары ут-саңмындыр,
осҡондор тик
дөрләр өлөшөм.
Көнөм түгел ләкин көлдөксәлә! —
Метеорҙар юлы — минең юлым! —
Дөрләп барырға гел тейешмен!

1970.

# ҺАНДУҒАС

## *1*

Һөйләйем мин һеҙгә, әҙәмдәр,
Бер хикәйәт, уны белгәндәр
Ярҙамлашһын бергә көйләргә —
Йөрөһөн ул телдән-телдәргә.

## *2*

Был төн — булмай торған хәл булған:
Тәхетенән ауған тәңрехан.
Имеш, быуа уны бер сал ҡарт,
Арыҫландай алғыр, уҫал ҡарт.
Аҡ һаҡалын урап биленә,
Тарта уны тамуҡ төбөнә...

Таң һыҙылғас дала ситендә,
Нур уйнағас ҡала өҫтөндә,
Манаралар осо алланғас,
Йүгергән хан сығып яланбаш.

Алты солтан сыҡҡан артынан,
Вәзирҙәре берҙәм ҡарпыған
Араларға шомдан хан башын —
Кейҙертергә ҡабат шан тажын.

Тәңрехан тик сапҡан ҡуяндай,
Аусыһынан ҡасҡан боландай —
Шом ҡатырған уның бәгерен...
Ҡыуып етеп ерҙең тәңерен,

Ҡаптыртҡандар тажын башына.
Таж аҫтында килеп һушына,
Аҡылына хаким ултырған.
Һүҙ әйтергә тамаҡ ул ҡырған.

Тик “шау!” иткән ҡапыл шул ваҡыт
Оло майҙан: күкте ҡуҙлатып
Хасил булған һары һандуғас!..
...Манаралар көнгә балҡығас,

Ҡош ҡанаты тилбер елпенгән,
Сыңрап ергә талир түгелгән.
Тылсым тиреп сыңрау хөрлөктән,
Көллө майҙан күккә күҙ теккән.

Баҡҡан ғәскәр юйып ажарын.
Оноткан ил ерҙә таж барын, —
Алты солтан хатта тел йотҡан...
Һыны ҡатып ошо ҡылыҡтан,

Һандуғасҡа төшә хан күҙе:
— Нимә ҡарай шанлы ғәскәрем?!
Аҫһын дарға тотоп былбылды!..

Былбылдың тик эҙе юйылды...

Хан, йотоп ҡан, шул саҡ йома күҙ.
Баҡһа асып, алда — таныш йөҙ:
Төштә уны быуған дәү, сал ҡарт,
Арыҫландай алғыр, уҫал ҡарт.

Урап билгә уйнай һаҡалын:
— Булһа әгәр тамсы аҡылың,
Эҙләмә, хан, күктән ғәйепте —
Ҡаршыңдалыр тора ғәйепле:

Тылсымына төрөп мең ҡабат,
Бирҙе миңә хоҙай моң, ҡанат!
Ерҙә — әҙәм, күктә — ҡош затым.
Талмаҫ аяҡ, һынмаҫ ҡанатмын.

Хаҡлыҡ ҡарт мин. Үҙем — Былбылмын.
Хаҡһыҙлыҡты һеҙҙең йолҡормон!..
Һөрөм һөрөп йөҙөн, хан ауа.
Һаҡаллы ҡарт күҙҙән юғала.

### *3*

Һарайҙы шом һарған ҡәберҙәй.
Башын эйгән солтан, вәзирҙәр:
— О тәңрехан! Көнгә тиң ата!
Ҡайғыраһың көйрәп ни хаҡта?

Беҙҙең әллә хеҙмәт етмәйме,
Илең әллә хөрмәт илтмәйме?
Үтәлмәйме әйткән эштәрең,
Тыңламаймы һәптән ғәскәрең?

Диуарҙарың әллә ауғанмы,
Һағыш шунан һуҡмаҡ һалғанмы?
Бөтөнөһөн тиреп бир, бөйөк!
Хәүефеңде беҙҙәр беләйек!

### *4*

Хан саҡ ҡына башын һелкеткән:
— Һеҙҙең хеҙмәт миңә бик еткән.

Ҡаты ҡулда ҡылыс елгәндә,
Килеп тора хөрмәт илдән дә.

Үтәләлер әйткән эштәрем,
Көтөп тора һәптән ғәскәрем.
Диуарҙарым бейек күктәрҙән,
Әммә... еге кейек үткәргән —

Шәйләнегеҙ быны үҙегеҙ.
Күрмәһәгеҙ — сыҡһын күҙегеҙ!
Буҙлап ниңә “Былбыл-Хаҡлыҡ” ҡарт
Ҡуймаҡ була миңә ҡаты шарт?

“Хаҡһыҙлыҡ” тип минең хаҡлыҡты,
Болғатмаҡсы ҡара халыҡты.
Ҡыйып килгән кемдән көйләп көс?
Тәңреханға тота кем ул үс?!

Кем ул һанай үҙен Алла тип?!
Ахмаҡ башҡа әнә балта, төп! —
Атап бирең: бөгөн донъяла
Хантәңренән башҡа кем Алла?!.

## 5

Ауған ергә солтан, вәзирҙәр:
— О ҡөҙрәтле бөйөк! Был ерҙәр
Үҙе шаһит: һиңә тиң Алла
Булғаны юҡ әле донъяла!

Хан теле тик телеп айнытҡан:
— Ҡоро ҡалаҡ мине ялҡытҡан!
Алла тиеп әгәр белһәгеҙ,
Дәлил ебе менән төйнәгеҙ:

Ниңә мин, хан, ерҙә ваҡытта
Ҡара халыҡ башын ҡалҡыта?!
Күҙләй күктән кемде илереп?
Сыңратып саз, ярым тилереп

Кем арбай ул унда ялпыны?
Йөрәгемде өтә ялҡыны —
Бармы рыя һеҙҙең һүҙҙәрҙә?
Әллә юҡһа ғәйеп беҙҙәрҙә? —

Килеп етһен шуға бер яуап.
Аҡыллыға булыр мең һауап.
Етмәй ҡалһа кемдең аҡылы —
Башы үтер балта арҡылы!

### *6*

Уйға сумған солтан, вәзирҙәр —
Тәхет таянысы — дәү ирҙәр.
“Былбыл” тиргә һис кем баҙмағас,
Һүткән шуҡ йән: “Ул бит табағас!” —

Һарайҙың был булған алйото...
Аҡыллылар шымған ҡан йотоп.
Һандуғасты тотоп аҫырға,
Шуның менән дауҙы баҫырға

Итһәләр ҙә, уҡтар үтмәгән.
Ә һандуғас өс көн килмәгән...
Өс көн буйы ирҙәр уйлаған,
Аҡылдарын бергә туплаған.
Килгәндәр, ти, уртаҡ фекергә:
Дөйөм бер һүҙ төйнәп илтергә.

### *7*

Баш һарайға кәңәш йыйылғас,
Дүңгәк менән балта ҡуйылғас,
Вәзирҙәрҙең иң-иң олоһо
Сығып сәскән фекер орлоғо:

— О ҡөҙрәтлем! Ерҙә бер Аллам!
Дәлил өсөн һинән нур алам!
Шул нур менән һыҙып күрһәтәм,
Күңелеңде үргә үрләтәм:
Баҡсы, ханым, ни бар дөм күктә? —
Тәңре үҙе ғәмһеҙ бейектә.

Ҡайҙа Көн, Ай, ҡайҙа һандуғас? —
Һине нурлап, һиңә дан ҡойғас,
Хөрмәт итеп төнгө йоҡоңдо,
Асманынан улар йолҡондо.

Хатта Былбыл! — бәйле тик һиңә:
Килһә килә “Аллам” тип кенә!.. —
Тигән вәзир. Һарай баш эйгән.
Хан күҙенән татлы йәш килгән.

### *8*

Тик ошо мәл, уттай бөркөлөп,
Күкрәп киткән ғорур бер көлөү.
Дер-ҡаҡшаған диуар, һарайҙар.
Барса баштар үргә ҡарайҙар:

Ишетелә үрҙән моң сазы,
Унда Былбыл — Хаҡлыҡ остазы!
Сиртелә лә һүнә серле йыр.
Һарай өсөн бүтән төрлө йыр...

Хан, йотоп ҡан, йәнә йома күҙ.
Баҡһа асып, алда — таныш йөҙ:
Төштә уны быуған дәү, сал ҡарт,
Арыҫландай алғыр, уҫал ҡарт.
Ике ҡатил — ике яғында,
Ә ҡулдары — балта һабында...

### *9*

— Кем һин бәндә, бында килгәндә
Онталманың нисек келәмдә? —
Тигән, ти, хан йөҙө сыйралып.
— Әйтһәм тағы, аума ҡыйралып:
Һин һөймәгән теге Хаҡлыҡ мин!
Һәм Былбылмын — моңло сафлыҡ мин!

Көлгән, ти, хан зәһәр, бот сабып:
— Ҡолом бит һин, һары ҡорсаңғы!
Көллөгөҙгә үҙем — тәңрехан!
Ерҙе-күкте айҡай минең заң!

Ә һин, меҫкен, тик бер саң ғына
Түшәлергә табан аҫтыма!
Шул көйөңсә “Былбыл мин” тиһең,
“Хаҡлыҡ” ләҡәбен һәм тылҡыйһың...

Ха-ха-ха-ха! — Күрең бер мәҙәк:
Ҡайҙан килмеш әрһеҙ берәҙәк! —
Ҡанатлымы, тиһәм — һаҡалбай.
Мөгөҙ, тиһәм — һөмһөҙ туҡалбай. —
Һин бахырға һурмаҫ ҡылысын
Анау торған иң хөрт һуғышсым!

— Уның ҡарау үҙең һурырһың,
Тишһәм әгәр һүҙҙең турыһын.
— Алай икән… — тигән, түҙеп, хан, —
Баҙап ҡара, ҡыйһаң, боҙоҡ ҡан:

Танының мы Аллаң тип мине?!
Диуарҙарым — донъя сигеме?
Минең һарай — көндөң күркеме?
Шулай икән, — ниңә бер көндө
Һары шәүләң, сирғып юғары,
Аша үтте изге диуарҙы? —

Барыһын да туғар йәшермәй!
Йома ҡалһаң әгәр, йә шөрләй,
Шәйлә анау дүңгәк, балтаны:
Яҙығыңдан ҡалыр ҡан табы!

— Һоғон, хаким, ҡоро ҡалаҡтан! —
Диуар менән үҙен ҡамаҡҡан
Бәндә әллә Алла буламы?
Булһа булыр бура ҡомағы!

Ялағайҙар вәзир һаналған,
Солтандары сүпкә сорналған,
Тура һүҙҙең мороно ҡанаған
Һарай көндөң күрке булырмы?
Булһа булыр ҡәбер ҡороғо!

Алты ҡитға аша ураған,
Нурын, йырын ергә сырмаған
Хаҡ ауазлы Былбыл-һандуғас
Диуарҙы сик һанап ҡалғыҡас —
Хаҡ-Былбылы ерҙең булырмы?
Булһа булыр сыуал ҡоромо!

## *10*

Хан, ағарып, ҡартҡа күрһәтә:

Ҡамтар, ҡатил, башын дүңгәккә!
Типкеләһен иләү шашынып
Туп урнына башын шаҡшының! —

Көр өн биргән ҡатил күкрәктән.
Тик һарайҙы ҡапыл тетрәткән
Сынйыр өҙгөс көлөү тауышы.
Ыласындың ҡанат ҡағышы
Төҫмөрләнгән был бер көлөүҙә,
Күк күк(е)рәп йәшен телеү ҙә —

Һарай һағы шомға сорналған.
Һаҡаллы ҡарт күҙҙән юғалған.
Тетрәнгән хан, һары һандуғас
Тәҙрә ватып күккә сорғолғас...

## *11*

Баш вәзир, ти, көскә хәл алып,
Тибрәткән тел: "Яһил был халыҡ!
Көн күрһә лә хан бар арҡала,
Хан яурыны аша айҡала.

Әлеге ҡарт бының сәбәбе.
Елгә осһон һүҙҙең кәбәге!
Тороп ҡалһын төптә саф алтын!
Ҡайырайыҡ ҡарттың ҡанатын —

Ҡулға беҙҙең төшһөн һандуғас!
Алтын ситлек сыңлап ябылғас,
Хаҡлыҡ ҡошо күндәм ҡаңғырыр,
Беҙ тигәнсә көйө яңырыр.

Ҡитғаларға китер хан даны,
Донъя таныр тажлы Алланы!
Бының өсөн беҙгә яу кәрәк!
Ҡуҙғалырға фарыз иртәрәк!"

Төшкән баҫа хандың батманы:
— Асың иртән ете ҡапҡаны!

## *12*

Ете яҡҡа ҡуба ете яу —
Алты солтан һәм хан бик уяу
Ете юлдан ҡырып баралар.
Алыҫая һаман аралар.

Етеһе лә ләкин бер заңда:
Ете ситлек аңдый бер “саң”ды —
Тотоп алған — булыр аллахан!
Күҙҙәр тонған — ағы ҡанланған:

Күккә баға, тентей ерҙе лә,
Үткәрмәйҙәр һис бер ирҙе лә —
Башын ҡырҡып һаҡал ҡарайҙар.
Былбыл көҫәп ҡарға һәрмәйҙәр,

Тотолмай тик һары һандуғас...
Тотор өсөн уны таң тыуғас,
Ете ғәскәр — ҡырғын юлында.
Алтын ситлек сиреү ҡулында.
Алты солтан, бөйөк тәңрехан
Ҡармай күкте, баҫып күҙен ҡан...

## *13*

Ете яҡҡа ҡупҡан ете яу
Ерҙе ҡырсып үтеп юл урау,
Хоҙайҙыңдыр булып ҡөҙрәте,
Юл остарын бергә сеймәлтте:
Ете юл бер сатҡа тоташты,
Осраштырып ете ҡорҙашты...

Ете юлдың еткәс сатына,
Тап була хан ғилләҡ картына:
Һаҡал — билдән, таяҡ таянып
Баҫып тора гүйә ҡаялыҡ,
Баҫып тора гүйә ур-кәртә —
Аҡылыңды йый ҙа бор тәртә!

Тик бормай хан, килә туҡталмай,
Ҡылысҡа ла ара күп ҡалмай.
Тайшанмай һис ҡартлас, тик тора:
— Боролоғоҙ тиҙ! — тип ҡысҡыра. —

Ҡубарһа яу ете мәмләкәт,
Етеһен тиң көтә һәләкәт.

Алмаһағыҙ асы аҡылды,
Күрмәçһегеҙ асыл, хаҡ юлды!

Солтандар күп, хандар етерлек —
Бөтәһе лә бәндә бер төрлө:
Таж һәм бүрек кенә айыра
Ер ҡортонан — шунда айырма.

Барыһы ҡол Тәңре-атаға,
Тәңре үҙе — Бөйөк Аллаға!
Бөйөк Алла күктә ултыра,
Бөтәбеҙҙең өçтән бойора.

Бөйөк Алланан мин илсемен —
Хаҡлыҡ-Былбыл шуға исемем.
Хаҡлыҡ-Былбыл ергә — бер генә...
— Һәй шуҡ ҡошсоҡ, башың бир миңә! —

Елләнеп хан һелтәй ҡылысын.
Сирғылтып тик әжәл ҡоросон,
Күкрәп китә шашҡын бер көлөү —
Әйтерһең дә, йәшен төртөлөү.

Хан — ханлығын ҡыла һуңғы ҡат:
“Ҡулға төшһөн Былбыл-Хаҡлыҡ ҡарт!” —
Яу әмере уçал яңғырай.
Ҡурҡышынан ҡуштан ҡалтырай...

### *14*

Тылсыммы был, әллә мөғжизә:
Ете ғәскәр йөҙгә — йөҙ килә
Ете юлдың хәтәр сатында.
Онотҡандар ҡорлоҡ хаҡында —

Ҡаршы яуҙар, имеш, осрашҡан...
Ҡылыс һура ете тарафтан...
Бер-беренә кинәт ете яу
Ябырыла, белмәй һис аяу.

Күҙе тонған алты солтандың,
Күҙе тонған һәм дә был хандың —
Бер-береһен улар танымай,
Ҡойола ҡан — дуңғыҙ ҡанылай:

Туған киçә башын туғандың,
Һаҡал төбөн юллап шыуғандың.
Хаҡлыҡ-Былбыл әммә тотолмай,
Ситлеккә лә кереп ҡотолмай...

Көн яҡтыһын ябып уҡ оса,
Тирмәләрҙе, ҡабып, ут ҡоса.
Ҡылыс һына тейеп ҡылысҡа,
Иреп аға хатта ҡорос та.
(Күҙе тоноп илде ил ҡыя...
Хаҡлыҡ-Былбыл булған зым-зыя...)

### *15*

Ауып бөтөп һәр йән, һәр ҡылыс,
Көн үҙәге ҡала тып-тыныс.
Алты солтан һәм хан берайҡан
Төкәлешә ете тарафтан,
Төкөшөүсе ете тәкәләй...
Етеһе тиң ҡынын һәрмәләй,
Тик юҡ ҡылыс һәм юҡ ғәскәр ҙә.
Емерелеп бөткән шәһәр ҙә...

Әллә инде тылсым баçыла —
Шарҙай булып күҙҙәр асыла,
Шаҡ ҡаталар танып бер-берен...

Күрә улар: ослап ер түрен
Ашҡан күккә — тап ҙур бағана! —
Аумай ҡалған сорғол манара.
Манараның алтын башында,
Ҡанат ҡағып Былбыл шашына.
(Манараның ете ишеге
Өндәп тора нәҡ күк тишеге.)

### *16*

Алты солтан менән алғыр хан —
Илдәр ҡырып шөһрәт арттырған:
Һәр береһе “бөйөк” булғандар –
“Хан – мин!” – тиеп иғлан ҡылғандар.

Етеһе лә башҡа таж кейгән!

Етеһе лә: “Алла — мин!” — тигән! —
Аулар өсөн Хаҡлыҡ-Былбылды,
Һайлағандар аҡтыҡ был юлды...

Ете яҡтан бәреп инәләр,
Ете һаплам барып менәләр.
Һәр береһе үргә ҡул һуҙа,
Тик ни ҡылды ергә был Хоҙа:

Саз да тымды, Былбыл-ҡош та юҡ.
Төшөр өсөн юллы тош та юҡ —
Ете баҫҡыс киткән ишелеп.
Упҡын ята аҫта тишелеп...

Күрә былар, — тағы ни хикмәт! —
Етеһен дә тота бит бикләп
Күк төбөндә устай бер майҙан!..
Изге әмер булып Хоҙайҙан,

Ҡап уртала ҡалҡа шул сал ҡарт —
Баш бирмәгән Былбыл -- уҫал ҡарт.
Ете сиргә текләп ул баға.
Үҙе ергә ымлап баш ҡаға...

## *17*

Ҡуш ҡулдарын ҡартҡа һонғандар,
Тотоп алыу өсөн был хандар.
Әйткән улар: “Шунда эш төбө:
Етебеҙ ҙә ерҙең кендеге!

Ете диуар ҡорҙоҡ был ергә —
Ҡалды фәҡәт күкте бүлергә!
Етә ине изге был минут —
О! — бөлдөрҙөң беҙҙе, Былбыл-мут!..

Күрҙең әммә тажлы ҡөҙрәтте,
Кемгә буйһонорға кәрәкте!
Һаҡалыңды һалып бер ситкә,
Керерһең, шәт, бер шәп ситлеккә!

Хаҡлыҡ булыуыңдан туҡтарһың,
Былбыл булып ҡына сыңрарһың:
“Тажлы хан ул үҙе — Хаҡлыҡ!” — тип!
Етебеҙ тиң ғәмгә баттыҡ тик —

Белмәйбеҙ һис хәҙер: таң тыуғас
Кем ситлеген һайлар һандуғас?
Саңҡыр сазы ҡай таж шанына?
Ҡай тәхеткә йәне табына?”

## *18*

Һаҡаллы зат көлә тағы ла:
“Таждарға тик ҡолдар табына! —
Һеҙ ине ул тәхет, таж ҡоло.
Ғорурлығы ерҙең, аҡылы —
Һеҙ “ҡол” тип ҡыл төйгән халыҡта[3]!..
Һыйманы ул һеҙҙең ҡалыпҡа —
Осто-китте ерҙән, ҡырсылып...

Йөрөр булһа елдән ҡыуылып, —
Ҡот ҡундырмаҫ халыҡ был ергә.
Хөр йәшәргә, йәки үлергә! —
Бына илгә яҙған ике юл.

Юҡ! Туҡтауһыҙ булмай булып ҡол! —
Әнә ята бының өлгөһө —
Буйһоноуҙың һуңғы билгеһе —
Ханға ҡалъя булған ете ил”...
Тажы ҡубып, һынды ете бил...

Көлдө лә ҡарт осто мөнбәрҙән,
Ҡанатланып шундуҡ өлгәргән!
Былбылланып күккә атлыҡты –
Тыйып, ҡыйып ҡара Хаҡлыҡты!
...Тупраҡ булды туҙрап ете таж,
Тәгәрләне ямға ете баш...

## *19*

Бәндәләргә булһын, тип, фәһем,
Был хикәйәт йәшәй, күрәһең.
Үткәндәрҙән — килер көндәргә
Йөрөп-ятыр телдән телдәргә...

1971.

---

[3] Борон заман, ҡол ҡасып китмәһен өсөн, табанын телгеләп, туралған ҡыл төйөү йолаһы булған.

# ҠЫҘЫЛ ЕҢГӘСӘЙҘӘР

*Тәнәйҙәргә.*

## *1*

Беҙҙең Урал биштә — биш йәштә,
Серле уның йөрөр юлдары.
Башын эймәй Урал тиктәҫкә —
Тота Урал башын юғары!

Гөрләп тора ҡала... Урамдар...
Ағиҙелдең текә яр башы...
Йылға аша сыҡһаң — урмандар...
Тыуған ерҙең көләс Ҡояшы

Көтә, көтә сихри сер һалып,
Алпан-толпан баҫҡан Уралын.
Йырлай бөгөн малай ҡыуанып:
“Эй Уралым минең, Уралым!”

## *2*

Атайҙарҙың бөгөн ял көнө,
Әсәйҙәрҙең бөгөн ял көнө —
Байрам, байрам бөгөн Уралға! —
Атлай Урал, атлай алҡынып.

Килеп етә улар бер өйгә,
Сыға унан ағай һәм еңгәй.
Бишәүләшеп киткәс йөрөргә,
Күңел дә шат, көн салт, юл ыңғай.

И матур ҙа инде еңгәһе —
Күҙләй, күҙләй Урал, күҙ йоммай:
Сөм-ҡыҙылдан — кейгән күлдәге,
Ике бите алма, йөҙө Ай.

“Ҡәйнешем!” — ти үҙе, етмәһә,
Суп-суп үбә битен Уралдың.
Ал итәген уйнап ел йәйһә,

Алһыу нурға мансый урамды.

...Урамдарҙың иңен айбарлап,
Килә атлап алсаҡ биш кеше.
Әйтерһең дә, улар — биш бармаҡ,
Ал йондоҙҙоң нәҡ биш мөйөшө!

### *3*

Барып инә бишәү музейға.
Ҡыҙыҡ бында, ингәс урамдан:
Мамонт әйтә: "Әйҙүк, беҙ өйҙә!" —
Аҙау тешен һона Уралға.

Ҡурҡмайбыҙ тик унан: ул — һүрәт.
Үлеп бөткән бахыр мамонттар...
Айыу тора тотоп ҙур көрәк —
Бал көрәргә әҙер алйотҡай!..

Барҙыр бында таштан имәндәр,
Ҡомташ булып ҡатҡан йыландар.
Былтайышып, түргә менгәндәр
Аҡмамыҡтай йомшаҡ ҡуяндар...

Музей буйлап еңгәй етәкләй —
Ал Ҡояштай алһыу итәге.
— Анау нимә, әйтсе, еңгәкәй?
— Башҡорт тирмәкәйе бит, йәнем!

### *4*

Ҡарап тора Урал ҡыҙығып:
Тирмә тигән — кейеҙ йорт икән.
Усағында көйрәй ҡыҙыл ут,
Һиртмәһенә бишек эленгән.

Бешә унда бер ҡыҙ көбөсәк,
Өҫтөндә — нәҡ еңгәй күлдәге!
Көбөсәктә бешә ҡымыҙ шәп —
Уралдың бар эсеп күргәне

(Барҙы Урал быйыл ауылға).
Матур икән эсе тирмәнең!

Күреп ҡалды Урал тағы ла
Бер “кәкере, оҙон нәмә”не.

Уртаһынан ялпаҡ юнылған,
Ике башы киртләп уйылған.
Нимә икән кәкере был ағас?
Ниңә икән һөйәп ҡуйылған?

Башы ҡата, ҡата Уралдың —
Ауылда ла быны күрмәне...
Белмәйенсә серен ҡоралдың,
Китә алмай ташлап тирмәне...

**5**

Етәкләп тә улды ҡарайҙар,
Һөйрәкләп тә уны ҡарайҙар.
Ҡупмай, ҡупмай Урал урындан.
Аптырайҙар атай, ағайҙар.

Тоя фәҡәт матур еңгәкәй
Уралды ни бында тотҡанын:
— Ҡәйнешкәйем, алып *көйәнтә,*
Һыу ташырға әллә туҡтаның?

Аңлай алмай Урал был эште:
— Һыу ташырға?... Кран ни өсөн?
— Ауылда бит йылға-инештән
Килтерәләр һыуҙы, ҡәйнешем!

— Ауылда мин булдым ҡәрсәмдә,
Ала ул да һыуҙы крандан.
— Элек, кран юҡта әсәң дә
Ташыған һыу күрше урамдан...

**6**

Күп эшләгән ул саҡ көйәнтә —
Килтерешкән беҙгә мул һыуҙы.
Урыны бөгөн — музей-төйәктә,
Ял итергә бына көн тыуҙы.

“Ваҡыт, — тине уға донъяһы, —

Әсәйҙәрҙең билен яҙырға!
Крандарға Иҙел йылғаһы
Торбаларҙан тейеш ағырға!

Бер крандан килһен эҫе һыу,
Бер крандан килһен һалҡын һыу.
Кәрәк икән — ҡойон ваннала,
Кәрәк икән — ҡыяр, шалҡан йыу!"

Әйткән йәнә йәмле донъяһы:
"Көйәнтәгә урын — музейҙа!"
...Ауылда ла бөгөн бормаслы
Кран ҡуйып йортто төҙөйҙәр!

## 7

Барыһын да Урал аңланы,
Китергә тик һаман теләмәй:
— Ҡалай итеп һыуға барғанын
Был көйәнтә ниңә һөйләмәй?

Матур итеп көлдө еңгәһе:
— Ҡара-ҡара, ҡәйнеш ни теләй!
Көйәнтә, кил, телгә кил әле!
Ҡәйнешемә һөйлә һин, һөйлә!..

Ятты менеп һары көйәнтә
Ал күлдәкле еңгәй иңенә.
Кирт-урттары тейгәс күнәккә,
Асылып та китте теле лә:

*"Мине иңләп, инәй-апайҙар*
*Йүгерә-йүгерә һыуҙар ташыған.*
*Таш атмаһын юлға малайҙар,*
*Ашығам мин, һыуға ашығам!*

*Минең менән инәй-апайҙар*
*Ағиҙелде өйгә килтергән.*
*Минән эсеп үҫкән малайҙар,*
*Минән эсеп ҡыҙҙар өлгөргән!*

*Минең менән инәй-апайҙар*
*Хушлашһа ла, иҫтән юймайҙар.*
*Ил ҡәҙерен белһен малайҙар,*
*Ил ҡәҙерен күрһен ҡыҙыйҙар!"*

Эй, йыр йырлай, йырлай көйәнтә,
Сыңғыр-сыңғыр, еңгәй иңендә;
Ал һағышлы моңдар көйләтә
Уралға ал әкиәт илендә...

### *8*

Музей ҡалды. Бишәү юл алды
Ағиҙелдең текә ярына.
Тарта һаман, тарта Уралды
Ҡыҙыл күлдәк әкиәт яғына!..

Ҡыҙыл ғына ҡыҙыл күлдәгең
Ниңә кейҙең, ниңә, еңгәкәй?
Көйәнтәне, терәп иңдәрең,
Ниңә һөйҙөң, ниңә, еңгәкәй?..

Ҡыҙыл ғына ҡыҙыл күлдәктәр
Төҫмөрләнә Урал күҙенә:
Көйәнтәләп менеп киләләр
Ағиҙелдең текә үренә.

Сыңғыр-сыңғыр килә йырҙары,
Сыңғыр-сыңғыр көлә ҡыҙҙары.
Ҡайтып инә имен өйҙәргә
Ағиҙелдең көмөш һыуҙары...

### *9*

Шулай Урал өндә төш күрә.
Ҡыҙыл төҫтө никтер хуш күрә.
Ағай, еңгәй киткән тәңгәлдән
Пырлап осоп барған ҡош күрә.

Ҡайҙа табан икәү юл алды –
Ағай, еңгәй китеп юғалды.
Атай, әсәй һәм дә Уралҡай –
Тик өсәһе генә бит ҡалды!..

Серле уға ағас араһы —
Әйтерһең, ҙур тирмә ҡоролған...
Ерҙе япҡан төндөң ҡараһы —

Ҡара күләгәлә дәү урман.

Шомло булып китте Уралға —
Күренмәй ал еңгәй күлдәге.
Ҡурҡһа ла ул ҡыймай һорарға...
Ағай ҙа юҡ... Ҡайҙа ул тағы?..

Юлды әллә килеп баҫтымы
Музейҙағы айыу һәм мамонт?
Көйәнтәһе һынып ҡайттымы
Әллә һыуға барған бар халыҡ?..

Алда, артта, янда ағастар —
Ҡарурмандан өсәү тик бара.
Битте сәпәй һалҡын ботаҡтар —
Ҡулын һуҙып атай юл яра...

Ҡысҡырмай тик Урал, ҡысҡырмай —
Егет тейеш түҙем булырға...
Килеп сыға улар, күп бармай,
Ҡояш ал нур бөрккән тапҡырға.

## *10*

Ҡояш кеүек атай һәм әсәй
Урал-улды алған етәккә...
Туҡта! Был ни?.. Юлда — еңгәсәй!..
Сат-йәбеште Урал итәккә:

— Әсәй, әсәй, алда — “бапаҡ” бит! —
Уй, үрмәләй!.. Ал ҡан — арҡаһы!..
Атай, атай, уны тапап кит! —
Аяғымдан килеп ҡапмаһын!

Көлдө һөйөп улын әсәһе,
Көлдө һөйөп улын атаһы:
— Еңгәсәйҙең килгән эсәһе,
Көтә уны өйҙә балаһы.

Ағиҙелгә елә туйтаңдап
Ҡыҙыл күлдәк кейгән еңгәсәй.
Шуның өсөн торған ул таңдан.
Тормаҫ ине, — ул бит ҙур әсәй!

Һәм Уралға шул саҡ тойола –

Еңгәкәйе бит был еңгәсәй!
Ҡыҙыл күлдәгенән таныла –
Тылсымланып икән ул йәшәй!

Ярҙа тороп ҡалған ағаһы,
Көйәнтәле йәрен оҙатып.
Их, күтәреп һыуын алаһы!
Йөк баҫмаһын иңен, һыҙлатып!..

— Күрсе, улым, ҡалай интеккән
Был матурҡай, — тине атаһы. —
Һыуҙар көйәнтәләп бейектән
Менгән бит ул, һәм бар ҡайтаһы...

Таштар ташлап барыр юлына,
Түктертмәһен һис кем саф һыуын!..

## *11*

Еңгәсәйҙе алып усына,
Һөйә атай уйсан, һаҡ улын:

— Күрсе, ниндәй матур күлдәге —
Ҡандай ҡыҙыл; бөрмә — билендә.
Ике төртөк — ике күнәге,
Көйәнтәһе, әнә, иңендә!..

Эй, йүгерә уста еңгәсәй,
Ҡарай Урал уға һөйөнөп:
— Был еңгәсәй — минең еңгәкәй,
Һыуға барған ҡыҙыл кейенеп!

Өҫтөндәлер ҡыҙыл күлдәге,
Көйәнтәне алған музейҙан.
Һүндергән дә газлы плитәне,
Сабып килеп еткән ул өйҙән!

Ятып ҡалған ағай диванда
Гәзиттәрен уҡып бөтөргә...
(Бөтөп ҡалһа һыуҙар кранда,
Еңгәй-еңгәсәйҙәр килтерә...)

Әкиәт тыуа малай күңелендә...
Әкиәте лә, бәлки, ысындыр.
Хыялланған Урал илендә

Алыҫтарға илтер тылсымдыр...

### *12*

Атаһынан алып “һыусы”ны,
Үҙ юлына Урал ебәрә.
Көйәнтәһе ниндәй тылсымлы!
Күнәктәре ҡалай тирбәлә!

Әкиәтме, әллә тылсыммы –
Өнөндә лә төшө Уралдың.
Алыҫтарҙан килгән йыр сыңы
Күңеленә улдың уралды.

— Һау бул, һау бул егәр еңгәсәй,
Күнәктәрең ҡайтһын туп-тулы! —
Һөйә улын атай һәм әсәй,
Еңгәсәйҙәй сөйөп был юлы.

### *13*

Ағиҙелдән ҡайта һыу инеп
Урал-малай, атай һәм әсәй.
Ултыралар пижам кейенеп,
Плитәлә тымығып бешә сәй.

Ҡояш кеүек, өҫтәл түңәрәк,
Ҡояш кеүек, икмәк түңәрәк.
Сынаяҡ та, туҫтаҡ, батмус та —
Бөтөн табын, тимәк, түңәрәк.

Түп-түңәрәк табын янында
Ултыралар өсәү — түңәрәк.
Бесәйбикә килде тағы ла —
Тимәк, теүәл дүртәү түңәрәк.

Ҡояш кеүек көләс балҡыйҙар
Дүртәүһе лә — өйҙә нур тулы.
Өйҙә булғас әсәй, атайҙар —
Үҫә улдар алсаҡ, көр булып.

Ҡуян ҡаны кеүек ҡыҙыл сәй
Сынаяҡҡа аға боҫ бөркөп.

Уралға ла әсәй яһай сәй,
Сәйҙә — ҡара шама бер бөртөк.

Ҡара шама... Сәйҙә бер бөртөк
Йөҙөп йөрөй күҙҙең алдында.
Күнәккә лә оҡшай был төртөк,
Көйәнтә лә һымаҡ ҡалғына...

“Ҡайҙа икән беҙҙең еңгәсәй,
Юғалғанмы әллә күнәге?
Ниңә ҡандай ҡыҙыл сәй, әсәй,
Аҡҡан мәллә ҡыҙыл күлдәге?..”

## *14*

Күҙ алдына килә Уралдың
Ҡара урман, бейек һыу яры.
Еңгәсәйҙәр менә һыу алып —
Уй, текә шул, текә юлдары...

Ҡуя Урал кинәт һулҡылдап,
Табын түрен кинәт моң баҫа.
Бесәй төшә ергә тупылдап,
Атай менән әсәй шым баҫа.

Ҡарайҙар ҙа бер аҙ аптырап,
Йыуаталар уйсан улдарын:
— Еңгәсәйең ҡайтҡан ялтырап,
Ағиҙелдең алып һыуҙарын!

Ул да хәҙер йылы өйөндә
Балаларын һыйлай сәй менән.
Балалары уның һөйөнә:
“Әсәй барҙа — тәмле сәй гелән!”

Донъялар был тыныс торғанда,
Көйәнтәләр аҡмаҫ, күнәктәр.
Еңгәсәйҙәр һыуға барғанда,
Балҡыр иңдә ҡыҙыл күлдәктәр!..

Тынысланып Урал, бал ҡабып,
Бөтөргәнсе эсә үҙ сәйен.
Карауатҡа ята ул талып,
Ҡосаҡлай ҙа “мыр-мыр” бесәйен.

Телевизор ҡарай өлкәндәр –
Зәңгәр уты күҙгә сағыла:
Вьетнамда йөрөй икәндәр
Көйәнтәле ҡыҙҙар тағы ла.

Ҡыҙыл икән ҡыҙҙар күлдәге,
Һәм көйәнтә икән – иңдәге.
Көйәнтәләп һыумы килтерә
Матурҡайҙар алыҫ илдәге?

Юҡ! Күнәктәр түгел – миналар
Көйәнтәләренә аҫылған.
Ағайҙарға алып киләләр
Ауыр йөктө ауыр, хаҡ юлдан.

Көбәктәргә һалып атырҙар
Миналарҙы яуыз дошманға.
Дошмандарын ҡырыр батырҙар,
Әйләндереп үрткә, көл-саңға!..

Ҡыҙыл еңгәсәйҙәр яңынан
Мина түгел -- өйгә һыу ташыр.
Вьетнамдың тыныс таңынан
Бәхет нуры ергә тоташыр!

…Йоҡо алмай улды бик оҙаҡ —
Төптө булмай торған хәл була.
Әсәкәйен генә ул тыңлап,
Йомолмаған күҙе йомола...

## *15*

Һары таңдан Урал бит йыуа —
Ҡасҡан икән ниңә йоҡоһо?
Атай менән әсәй сығыуға
Йыйыштырып ҡуйған койкаһын.

Бына низә икән мөғжизә:
Ҡарурманда һаман ул гиҙә.
Йәне менән — түгел ул өйҙә,
Ә пальмалар үҫкән джунглиҙа!

Тирмә үргән үргә бамбуктар —
Ер өҫтөндә ҡара төн ята.
Йоҡоһоҙ тик ҡоштар, маймылдар —

Туптар шартлап йәнде һыҙлата.

Самолеттар күктән ужарлай —
Бомба яуа йәшел ҡырҙарға.
Ауылдарҙы дошман ботарлай —
Һөрөм саңы ятҡан юлдарға...

Джунглиҙа дөнә бер үҙе —
Ут эсендә гиҙә Уралҡай.
Йәшел тышлы китап индерҙе
Джунглиға уны Уралдан...

Башын эйгән Урал китапҡа —
“Вьетнам” тип унда яҙылған.
Көйөп ауған бамбук ботаҡтар,
Лианалар ергә һығылған...

Шат һыу аҡмай йәшел арыҡтан —
Һыу башлаусы хужа өйҙә юҡ.
Һөрөм генә төтәй ҡаҙыҡтан —
Янып бөткән, бамбук өй ҙә юҡ.

Кемдең икән ғәзиз йорттары
Һөрөм һөрөп, ҡаплай күк йөҙөн?
Дөгөләктөң киткән һыуҙары
Әсеттереп дымлай кем күҙен?!.

— Көл иткән кем тыныс төйәкте,
Ҡом ҡылған кем арыҡ буйҙарын?
Көйәнтәләп тулы күнәкте,
Еңгәсәйҙәй һылыу ҡыҙҙары

Ҡайтмай ниңә Меконг-йылғанан?!
Был ил өсөн, әсәй, мин янам.
Көйгән бамбук, кипкән йылғалай,
Һыҙланам мин, атай, һыҙланам!.. —

Тип мөлдөрәй Урал күҙҙәре
Һәм китапҡа ике йәш тама...
...Китаптағы һүрәт үҙгәреп,
Килә унда бер бик йәш бала —

Көйәнтә, ҡуш күнәк иңендә,
Ҡыҙыл күлдәк кейгән бөрмәле.
Ул ҡыҙ һыуһыҙ ҡайтып килгәнгә,
Уралдың күҙ йәше бермә-бер

Тултырҙы ла ике күнәген,
Көйәнтәһе китте һығылып...
Ҡыҙый, ҡыҙый, Урал күҙ йәшен
Түгә күрмә юлда йығылып!..

Мөлдөрәмә алып ҡайтып ет —
Береһен һип анау янғынға,
Икенсеһен үҙән байытып һип —
Әйләнһен ул сөмгөл ағынға.

Ҡалҡып сыҡһын бында яңы өй,
Йәш бамбуктар ботаҡ ебәрһен.
Көйәнтәләр йыры — моңло көй
Яңғыратһын Меконг тирәһен!

### *16*

Әсәй менән атай тын тора
Китап асҡан улы янында.
Күҙ йәштәре тамды, тик Урал
Тынныслана алмай һаман да.

Ниңә икән бындай шомло хис, —
Йылға әллә тағы ҡорормо?
Ҡабынырмы ауыл тағы кис,
Бамбуктары төтәп торормо?

Ниңә, ниңә бындай шомло уй?..
Асма, Урал, асма был битте!
Аһ!.. — күрәмһең: етмәҫ һинең буй,
Йығыу өсөн яуыз бандитты!..

Дөрләй һүрәт: күктә ут юлы —
Ярып бара ҡара самолет.
Аҫта — ауыл, йылға саф һыулы —
Самолеттан ерҙе ялмай ут.

Көлөп бара, ҡарап шуларға,
Самолетта Джон-долларсы.
Ялланған ул ярты долларға —
Шуның өсөн булған бомбасы.

Бомба ташлай бамбук өйҙәргә,
Бомба ташлай зәңгәр йылғаға.

Бөрмә билдәр яна ерҙәрҙә,
Көйәнтәләр аға йылғала...

Шашып көлә Джон-долларсы —
Ярты доллар ҡайтҡас аласаҡ.
Ҡанлы күнәк тотоп, бомбасы
Баҡсаһына һыуҙар ҡоясаҡ.

Ҡуш күнәкле ҡыҙыл еңгәсәй
Килеп сыҡһа, тапап иҙәсәк.
Ҡарап торһа Джек-ул, әсәй —
Үҙен-үҙе маҡтап көләсәк...

## *17*

Аса Урал китап биттәрен —
Асҡан һайын йәнен ут ялмай.
— Ниңә, — ти ул, — Джон-эттәрен
Күктә килеш ғәҙел ут алмай?!

Атай менән әсәй, эйелеп,
Күрһәтәләр яңы һүрәткә:
— Төшкән Джон, әнә, кәйелеп,
Түҙә алмай ғәҙел ҡөҙрәткә.

Самолеты киткән һибелеп,
Парашютта Джон яҙлыҡҡан.
Ултырған ул, күктән төңөлөп,
Төтәп торған бамбук ҡаҙыҡҡа...

Уяу икән ватан батыры —
Һаҡлай уны йәшел Ер-әсәй.
Һалдат булған Вьетнам матуры —
Ҡыҙыл күлдәк кейгән еңгәсәй!

Көйәнтәһен ләкин һалмаған,
Көйәнтәһе һаман иңендә.
Көйәнтәләр йыры тынмаған
Ут-ялҡынлы Вьетнам илендә:

*“Мине иңләп, инәй-анайҙар*
*Йүгерә-йүгерә һыуҙар ташыған.*
*Ут атмаһын илгә янкиҙар,*
*Ашығам мин, юлға ашығам!*

*Минең менән инәй-анайҙар*
*Меконгыны өйгә килтергән.*
*Минән эсеп үҫкән малайҙар,*
*Минән эсеп ҡыҙҙар өлгөргән!*

*Минең менән инәй-анайҙар*
*Хушлашмаған: бергә атлайҙар.*
*Көйәнтәләп ҡыҙҙар, малайҙар*
*Патрон ташый – илде һаҡлайҙар!"*

Эй, йыр йырлай, йырлай көйәнтә
Ҡыҙыл еңгәсәйҙәр иңендә.
Һөйгәненә аҫыл бүләктәр
Көйәнтәләп илтә ҡыҙ төндә.

Сайпылмай тик ауыр "күнәге":
Тос ракета — һөйөү бүләге;
Тейер барып дошман башына,
Төшөр ауып Джон таш һымаҡ!..

### *18*

Ҡуя Урал еңел тын алып:
Ракетала ҡыҙыл йондоҙ бар.
Йондоҙҙарҙы әллә нурлаймы
Ҡыҙыл күлдәк кейгән был ҡыҙҙар?

— Ил имендә һыуға барғанда —
Көйәнтәле һылыу ул, әсәй.
Ере-күге илдең янғанда —
Ҡыҙыл һалдат икән еңгәсәй.

Бая бит шул сөйҙө ракета —
Осо ап-ал, ҡыҙыл йондоҙло.
"Ҡаурый"ҙарын һуҡты борҡота —
Бәреп йыҡты Джон-ҡоҙғондо.

Йыйып ала алмаҫ долларын —
Ярты доллар ҡайтмаҫ өйөнә.
Тишеп кергәс Джон салбарын,
Утлы ҡаҙыҡ һүнгән, тинеләр...

### *19*

Ҡояш бата. Элә аҡ шәмдәр
Шат электр ҡалам күгенә.
Балҡып китә иҙән, түшәмдәр —
Шәмдәлдәрҙән аҡлыҡ түгелә.

Баҡсаларҙан, Иҙел буйынан
Йырлай-йырлай ҡайта шат халыҡ.
Малайҙар ҙа туйған уйындан —
Телевизор ҡарай тын ҡалып.

Уралдар ҙа оло бүлмәлә:
Тартып тора зәңгәр экран.
Экранда... Вьетнаммы әллә?
Ниндәй һуғыш тағы мин күрәм?!

Емертәләр ниндәй ҡаланы?
Үлтерәләр ниндәй баланы?
Дөрләй-дөрләй алтын баҫыуҙар —
Дөгө, әллә бойҙай янамы?

Самолеттар бара ҡап-ҡара,
Яуа ергә ҡара бомбалар.
Ауылдарҙы дошман аҡтара —
Ҡаҙыҡтары төтәп ҡалалар...

Вьетнаммы әллә экранда?
Ер-күк тора ниңә тетрәп?!
Ҡара самолеттар осҡанда,
Йөрәккәйем һыҙлай иңрәп...

## *20*

Кино бөткәс кенә Уралға
Һөйләп бирҙе быны атаһы:
— Тотондоҡ беҙ, улым, ҡоралға —
Алып ҡалдыҡ һаҡлап Ватанды!

Күрҙең әле шуны кинонан...
Булды беҙҙең Ватан һуғышы...
Бомбаларҙан, пулдән, минанан
Иңрәй ине илдең һәр тошо...

Бөтөн халыҡ ҡарғып тормаһа,
Йыға алмаҫ инек яуызды.

Гитлер яуын алғас тырмаға,
Әжәл ҡасып беҙҙән, таң тыуҙы.

Һуғыштыҡ беҙ йөрәк ҡушҡанса —
Еңеү яулап аҡты ал ҡандар!
...Бомба ташлай бөгөн Вьетнамға
Кисә беҙгә атҡан дошмандар...

### *21*

— Атай, атай, ҡыйын инеме?
Ул дошман да Джон инеме?
— Фриц ине уның исеме.
Икеһенең тик бер есеме...

— Атай, атай, ниңә был — Джон?
Атай, атай, ниңә ул — Фриц?
— Икеһе лә, улым, хаҡ дошман.
Икеһе лә, улым, бер — фашист...

Ҡарамы ул, әллә аҡ тәнле,
Джонмы, йә Фриц исемле —
Икеһе тиң һатлыҡ-ҡол йәнле,
Икеһе тиң вәхши есемле.

Һатлыҡ йәндең була һәр төрө —
Ҡара тире, һары, аҡ тире.
Ә бомбалар бер үк — ҡап-ҡара,
Яра һалып ерҙе аҡтара...

— Атай, Джон кемгә һатыла?
— Донъяла бар, улым, Капитал.
Табына ул һары алтынға.
Уның өсөн кеше — һатлыҡ мал...

Ҡандалалай күпкән ҡорһағы,
Ҡан эсергә әҙер ул тағы.
Йыйып алып фриц-джондарҙы,
Ҡойоу юлын эҙләй ҡандарҙы.

Күрһәтә ул шаҡшы аҡсаһын
("Доллар" тиеп тәңкә атала),
Малдай ҡыуып әйҙәй барсаһын
Вьетнамға, йәки башҡаға.

Ҡыуанышып китә Джондар:
Ярты доллар хужа бирәсәк!..
Үртәлһә күп ҡала, ауылдар,
Бөтөн доллар бүләк итәсәк...

Джон өсөн ер һәм күк йөҙө —
Доллар төҫлө һары түңәрәк.
Ярты доллар өсөн ул үҙе
Әҙәм һуйып йөрөй мүкәйләп.

Уның өсөн ерҙә юҡ әсәй,
Көйәнтәле ҡыҙыл еңгәсәй.
Ләззәт тата һөрөм тәменән,
Ҡан есенән алйып ул сәсәй.

Йылғалар ҙа ағып тормаһын,
Һуҙып өйгә көмөш торбаһын.
Еңгәсәйҙәр, йөкмәп көйәнтә,
Йүгерә-йүгерә һыуға бармаһын —

Джон аңы шулай сейәлә.
Джон теле шулай көрмәлә:
“Көйәнтә лә һынһын, торба ла!
Еңгәсәйҙәр булһын төрмәлә!”

Ауыр быны аңлау Уралға —
Ерҙә ниңә Джон, Доллар бар?..
(Күп тотонмаҫ Джон ҡоралға —
Үҫә, үҫә ҡыйыу Уралдар!)

## 22

Офоҡтарҙы аллап таң ата —
Тыуған илдең матур ал таңы.
Һандуғастар һайрап уята
Йәйрәп ятҡан башҡорт ватанын.

Яңы көндө ҡотлай ауылдар,
Яңы көндө ҡотлай ҡалалар.
Радиолар һөйләй лауылдап,
Боҫло аҡ-һөт эсә балалар.

Өйбөрөнсә, шаҡып тормайса,
Тәҙрә һайын ҡояш-көн керә.
Ҡояш менән бергә сәй эсеү —

Күңелле лә инде бигерәк!

Атайҙар бар өйҙә, әсәйҙәр,
Балалар ҙа теүәл һәр өйҙә.
Тыныс тормош ҡороп йәшәүгә
Был донъяла, дуҫтар, ни етә!

Ялы ла бит әле ике көн —
Тыуған илем биргән ҙур бүләк!
Ҡайҙа барам тиһәң — юл иркен,
Булһын ғына хыял һәм теләк!

## 23

Сыҡты улар тағы урамға —
Кисәгеләй, йәнә биш кеше.
Кәнфит бирҙе еңгәй Уралға —
Бик ярата шул ул ҡәйнешен.

Урам тулып бара биш кеше —
Атай, ағай, Урал һәм әсәй.
Бишенсеһе — көнгә иш кеше —
Ҡыҙыл күлдәк кейгән еңгәсәй.

Урамдарҙың иңен айбарлап
Атлап бара алсаҡ биш кеше.
Әйтерһең дә, улар — биш бармаҡ,
Бер йондоҙҙоң нәҡ биш мөйөшө.

“ТИР[4]” яҙыулы яҡка ыңғайлай
Ҡыҙыл күлдәк — еңгәй-еңгәсәй.
Эйәрәләр атай һәм ағай,
Һәм, әлбиттә, Урал-ул, әсәй...

Мылтыҡ биреп, “ТИР”-ҙа аттырта
Кавалерист булған дәү ағай:
— Был мылтыҡтар атҡан тапҡырға
Үтә алмаҫ дошман-ҡомағай!

“ТИР” күгенә, ана, ҡалҡынған
Ҡайҙан килеп ҡара самолет?
Ялмау кәрәк уны ялҡынға —
Ҡара ҡоҙғон күктә булһын ут!

---

[4] “ТИР” — мылтыҡтан атып күнегеү урыны.

...Ҡолап төшә күктән дүрт ҡоҙғон.
Бишенсеһе — һаман һауала.
Мылтыҡ бирә атай: “Тот, улым,
Яҡты күген илдең ҡараула!”

Дер-ҡалтырап, Урал ҡул һала
Атай тоçҡап тотҡан мылтыҡҡа.
Күҙ алдында уның ҡуҙлана
Кисә күргән кино, китаптар.

Күҙен ыуып, тағы ҡараһа,
Ҡысҡырмай саҡ Урал: “Кил, әсәй!” —
Көбәк буйлап йүгереп бара ла
Көйәнтәле ҡыҙыл еңгәсәй!

Көйәнтәһе икән бамбуктан,
Күнәк түгел — элгән миналар!
Баçҡынсыны ғәҙел шул уттан
Ҡаплай алмаç һис бер ҡоймалар!

Еңгәсәйен һөйөп күңелдән,
Саҡма телен баçты бала ныҡ.
“ТИР” иленең бейек күгенән
Төштө ҡолап ҡара самолет!

Күҙ-ҡаралай һаҡлап сиктәрҙе,
Тейеш беҙ төҙ ата белергә.
Бөтә булған джон-фрицтарҙы
Ерҙән-күктән гүргә һөрөргә!..

## *24*

Ҡалам урамдарын айбарлап
Атлап килә алсаҡ биш кеше.
Әйтерһең дә, бергә биш бармаҡ,
Бер ал йондоҙ нәҡ биш мөйөшлө.

Бара улар баçып хаҡ көйгә:
Яҡтырыр көн Вьетнам илендә.
Көйәнтәләр күсер музейға
Ҡыҙыл еңгәсәйҙәр иңенән!..

Хаҡ уҡыусым! Ҡайҙа барһаҡ та,
Имен булһын илдәр, тип телә.

Һуғыш булһа — һына бармаҡтар,
Йондоҙ мөйөштәре кителә.

Тик, теләүҙән генә яралмай
Тыныслыҡтың татлы емеше.
Хеҙмәт, көрәш, атыш аша атлай
Тыныслыҡҡа табан хөр кеше!

Тоғро улы, ҡыҙы Ватандың
Ғәйрәтләнеп үҫһен һәр йортта!
Именлеген улар һаҡлаһын
Ер йөҙөнөң, ҡурсап ут-йоттан!

...Урамдарҙы бара айбарлап
Атай, ағай, еңгәй, ул, әсәй.
“Имен булһын илдәр!” — тип йырлап,
Йүгерә юлда ҡыҙыл еңгәсәй.

7.01.1972.

# ЯҢЫРТЫЛҒАН ИҪКЕ ЙЫР

## Пролог урынына (1979)

### I

Етмеш өсөнсө йыл яҙған инем
Бер поэма — тап ҡырҡ йәшемдә.
Океан артындағы ҡорҙашымды
Әрләгәйнем, буғай, мин шунда.

Вьетнамда һуғыш бөткән ине
“Янки”ҙарҙы еңгән ул йылда,
Тол ҡалдырып һалдат ҡатындарын
Колорадо[5], Меконг[6] буйында.

Вьетнамдар иңдән ҡанын йыуһа,
Ҡырсый ине АҠШ[7] бысрағын.

[5] Колорадо — Американағы йылға.
[6] Меконг — Вьетнамдағы йылға.
[7] АҠШ — Америка Ҡушма Штаттары.

“Бысраҡ һуғыш”ҡа ул ҡолағынан
Батҡайны шул, тамам бысранып.

Хәтеремдә: Аҡ йорт[8] әйләнәһен
Ветерандар һырып алғандар.
Түштәренән “бысраҡ миҙал”дарын
Ергә атып, тапай табандар.

Полктарҙы нахаҡ яуға ҡыуған
“Ҡарсыға”лар тапты ләғнәтен.
Миҙалдарҙан һарҡҡан ҡан-бысраҡҡа
Билдән батты Аҡ йорт дәүләте...

Ләғнәт орҙо ҡулһыҙ, аяҡһыҙҙар,
Ләғнәт орҙо хатта телһеҙҙәр;
Вьетнамдан ярты үлеп ҡайтҡан
Маңлай күҙһеҙ, күңел күҙһеҙҙәр.

Ә ҡайтмаған ирҙәр джунглиҙарҙа
Ҡәберҙәрҙән атты ләғнәтен.
Колорадо һыуы ҡайнап торҙо,
Меконгының йотоп нәфрәтен.

Һәм шул мәлдә Вьетнам тупрағында
Ләғнәт орҙо меңмең әсирҙәр.
Вьетнамды еңәм, тиеп килеп,
Еңһеҙ тороп ҡалған “шәп” ирҙәр.

Шунда ине минең тиҫтерҙәрем —
Полковниктар — “бысраҡ” яу заты.
Боғаҙына тиклем буҡҡа батты
Аҡшай күҙле АҠШ һалдаты...

## II

Дэвис Анджелла һәм Джейн Фонда[9] —
Ике йондоҙ ярғас күк йөҙөн,
Һүтер төҫлө ине был һалдаттар
Пентагондың[10] “бысраҡ” нигеҙен...

Мин уйланым: тынмаҫ ветерандар,

[8] Аҡ йорт — АҠШ президентының йорто.
[9] Дэвис Анджелла һәм Джейн Фонда — АҠШ-тың Вьетнамдағы “бысраҡ” һуғышына ҡаршы көрәшеүсе ғәййәр ҡатын-ҡыҙҙары.
[10] Пентагондың — АҠШ ғәскәрҙәренең баш штабы урынлашҡан йорттоң.

Ҡайтыр ярһып әсир һалдаттар.
Муйындарын борғас, “ҡарсыға”лар
Ҡабат ҡанат кирә алмаҫтар.

Колорадо-йылға Меконг менән
Сафлыҡ һыуы йәнә алышыр.
Ҡәберҙәрҙе ҡалын үлән баҫыр,
Яҙлыҡҡандар ҡабат ҡауышыр.

Һәм әсирлек-хурлыҡ «бысраҡ»тарын
Оноторға теләр тиҫтерҙәр...
«Иҫке яраларҙы яңыртмайыҡ, —
Тинем, — минең йырым иҫкергән!»

Шул яҙылып бөткән поэмамды
Һалып ҡуйҙым һалҡын архивҡа.
АҠШ дуҫтар менән был донъяны
Килтерербеҙ, тинем, тәртипкә...

## III

Күрәм ләкин шуны биш йыл үткәс:
«Ҡарсыға»лар кирә ҡанатын!
АҠШ-тағы аңыш ҡорҙаштарым
«Бысраҡ һуғыш» аша ала тын.

Һәм кинәнеп улар баға төҫлө
Ут сәсрәгән яҡҡа мут-бурҙай:
Вьетнамдың ҡанлы сиктәрендә
Ҡытай танкылары тыҡырҙай...

Емерелә ауыл һәм ҡалалар,
Сабыйҙарҙың башы сабыла.
Һәм шул утлы, ҡанлы картиналар
Аҡ йорт тәҙрәһендә сағыла...

Киҫәү һуҙып океан аръяғынан,
Болғаталар уттың күмерен.
Доллар ҡаршыһында юҡ тин тора
Кемдәрҙеңдер ғәзиз ғүмере...

Ут-ипкенгә ҡуйып «ҡарсыға»лар
Йылытҡанда бысраҡ устарын,
Ярһып ниңә ләғнәт ормайһығыҙ,
Тиҫтер американ дуҫтарым?!

Һүтеп ташлап нәфрәт тиҫбеләрен,
Тулдымы урт тәмле аштарға?..
Пентагон бит тағы тешен ҡайрай
Вьетнамға һеҙҙе ташларға!

Булдығыҙмы әллә полковниктан
Алтын уҡа ҡайған генерал?
Яңы быуын «йәшел берет»тарҙы
Ҡыҙыҡтырҙы мәллә «шәп ҡорал»?!.

Еңелеүҙең әсе әсирлеге
Аҡыл биргән ине ләбаһа!..
Хәтер архивтарын саң ҡаплаһа,
Халыҡтарҙан һорғоп ҡан аға...

Онотмайыҡ, тиеп, Меконгыны,
Һәләк булған һалдат башҡайын,
Архивымда ҡуҙҙай көйрәп ятҡан
Иҫке йырҙы ҡабат башлайым!

## Архивымдан иҫке йыр: Вьетнамдан табан тайҙырған американ ҡорҙашыма (1973)

### *1*

Бамбук яғып, джунглиҙа
Еймәк булдың ҡыр ашын —
Табан баҫтың Вьетнамға,
Американ ҡорҙашым...

Утыҙ икенсе йыл тыуған
Һин, мин — ике ҡитғала.
Гитлер билен һындырғанда
Дусар булдыҡ йотҡа ла.

Көрешмәһәк тә һис ҡасан,
Йөрәктәр тоташ ине.
Беҙҙе талпытҡан, ярһытҡан —
Иң изге һуғыш ине.

Һинең атай — Колорадо,

Минең атай — Волганан
Эльбағаса атлап уҙып,
Ҡулды ҡулға ялғаған.

Эльбаларҙа ике ватан,
Ике йөрәк осрашты:
Һинең атай, минең атай
Ҡосаҡлашып дуҫлашты.

Алып ҡайтты илгә улар
Ғәҙел яуҙың дауылын,
Океан аша күрештереп
Фермаларын, ауылын.

Хыялланды ике атай,
Дуҫлашһын, тип, уландар.
Ҡара-ҡаршы аҡмаһын, тип,
Колорадо, Волгалар.

Тулҡындарын океандың
Ҡаршы ярҙар ҡаҡмаһын.
Ҡитғаларҙың ҡанауынан,
Тиеп, Аллам һаҡлаһын!

Эйе, «һалҡын һуғыш» боҙҙо,
Ҡалҡып сығып боҙ тауҙай...
Әммә изге уйҙа ине
Эльбалағы атайҙар!

## 2

Һүҙ теймәһен атайҙарға:
Булды улар баһадир!
Ә уларҙың уландары
Һин — полковник,
Мин — шағир.

Атайҙарҙың хыялдары
«Үтәлеүгә» ирештек:
Күңел менән океан аша
Елеп үтеп күрештек.

Тик күрешеү тәңгәлебеҙ
Хәтәр ине — ут ине.
Күрешеүсе беребеҙ — ҡот,

Икенсебеҙ мут ине...

Һин, полковник, осоп килдең
Бомбалы «Б...» оҫкоста.
Мин ҡыҫҡарттым араларҙы
Толпар-атым Пегаста[11].

Эльба түгел, лотос-гөллө
Меконг һыуы арбаны.
Тик ул гөлгә һинең күҙҙәр
Прицель аша ҡараны...

Ҡурғаш төҫлө ине йөҙөң,
Өҫтән атҡан ҡарашың.
Бомба таҡҡан йөрәгеңде
Тартып торҙо парашют.

Кнопкаға баҫҡаныңда
Тешең киршәп йылмайҙың.
Тишеп төштө бомбаларың
Лотостарын тын сайҙың[12].

Ә ул тын сай буйҙарында
Моңло төн ята ине.
Донъяның бар пегастарын
Ҡыйғас ҡаш тарта ине...

Тулған Айҙай сөм күҙҙәргә
Донъя тулырлыҡ ине.
Полковник та, һәм шағир ҙа
Әсир булырлыҡ ине...

### 3

Ҡорҙаш-ҡорҙаш, атайҙарҙың
Эльбаларын юйғанһың.
Ҡыйғас ҡашлы һылыулыҡтан
Көстө өҫтөн ҡуйғанһың.

Һөйөүҙе лә, һылыуҙы ла
Алмаҡ булдың тик тартып,
«Көслөнөкө — донъя!» — тиеп,

---

[11] Пегаста — шиғриәт толпарымда.
[12] Сайҙың — йылғаның.

Йә ҡурҡытып, йә һатып.

Бына шунда һынды, һынды
Атайҙарҙан терәктәр.
Бомба шартлап сөйгән утҡа
Ҡаҡлығышты йөрәктәр.

Яраланған йөрәгемде
Ҡанлы ергә терәнем.
Парашютта килеп төштө
Һинең ҡурғаш йөрәгең...

Ҡотһоҙ күктән ҡон ялбарып,
Ҡулдарыңды күтәрҙең.
Әммә ерҙә ҡорттай ҡалып,
Күҙ алдында бүҫкәрҙең.

Һуҡыр инең сөм күҙҙәргә,
Ярым Айҙай пар ҡашҡа.
Ә баш эйҙең көбәктәге
Бер йомарлаҡ ҡурғашҡа...

Матурҙарҙан батыр тыуа,
Мөхәббәттән үс нығый:
Полковникты әсир ҡыла
Мылтыҡ тотҡан бер ҡыҙый...

Ах полковник, вах полковник,
Ҡурғаш йөрәк һин -- әсир!
Әсир итмәгәс йөрәгең —
Бер ҡорт ҡына һин, тәҡсир!..

Утлы ерҙән бара әсир,
Бахыр иткән хөр башын.
Парашютың тишек булған,
Американ ҡорҙашым!

Ашын ейеп джунглиҙың,
Еләйәсәк күп айҙар.
Шуның өсөн биргәнме ҡул
Эльбалағы атайҙар?!.

***4***

Көндәр үтте, айҙар үтте...

Әсирлектең ыу-ашын
Ашай-ашай, ирек көттөң,
Американ ҡорҙашым.

Колорадо буйҙарында
Туғандарың ҡан йотто,
Ниңә бомба бизнесына
Ебәрҙек, тип, алйотто.

Азиаттар кеше ашай,
Тип тә хатта ҡурҡтылар.
Күрешеүгә өмөттәрен
Тамырынан ҡырҡтылар.

Ултырҙы тик уландары
Дүрт йыл иҫән һәм имен.
Вьетнам дөгөһөн ейеп
Зауыҡланды «супермен[13]»...

Ашап туйғанһыңдыр инде
Джунглиҙың ҡыр ашын?..
Дүрт йыл буйы аҡыл йыйҙың,
Американ ҡорҙашым!

Дүрт йыл аша Эльбағаса
Атайҙар бит юл үткән.
Ә һин тишек парашютҡа
Дусар булдың нилектән?..

Көс юҡ түгел, бик күп ине
Һине илткән осҡоста.
Ниңә бындай мәсхәрәле
Булды юлың һәм ҡыҫҡа?

Әллә серек аэропорттан
Төбәлгәнме юл башың?..
Уйлан әле ошо хаҡта,
Американ ҡорҙашым!

### 5

Һинең хаҡта көтәм хәбәр
Гәзит-мәзит битенән:

[13] Супермен — кешенән дә өҫтөн кеше, әҙмәүер.

Вьетнамда һуғыш бөткәс,
Кемдәр азат ителгән?..

Полковниктар ҡайта илгә
Унарлап та йөҙәрләп.
Тик һин ниңә күренмәйһең,
Эштәр әллә бик һәләк?

Яҡшы яҡка боролһон, тип,
Көтәм яңы юл башың.
Үлтереүсе булһаң да шул,
Һин бит минең йылдашым.

Яҙмыш яҙып, булалманыҡ
Икебеҙ тиң баһадир.
Кеше булып ҡалһаҡ ине,
Һин — полковник,
Мин — шағир...

### 6

Туҡта, туҡта,
Гәзиттәр бит
Хәбәр һала яңынан:
Көтөү-көтөү әсир ҡайта
Тағы Вьетнам яғынан!

Пегасыма тартты ҡабат
Ҡанатланмыш тойғолар:
Ҡырҡ йәшлек ҡырҡ кеше улар —
Утыҙ ике йылғылар!

Беҙҙең тиҫтер полковниктар
Әсирлектән ҡотола.
Мәсхәрәле табандары
Вьетнамдан йолҡона.

Илтә конвой бахырҙарҙы —
Мөмкин түгел тыйылғы! —
Ҡырҡ йәшлек ҡырҡ вьетнамлы
Утыҙ икенсе йылғы!..

Аҙым һала ҡырҡ йәшлеләр
Планета биленә.
Килер ҡырҡ йыл Ер ғүмере

Яткан ирҙәр иңенә.

Донъя ниңә тиңһеҙ былай —
Тиң түгел ҡырҡ йәшлеләр?!
Ҡырҡ ҡуш күҙҙән оҫҡон осһа,
Ҡырҡ ҡуш күҙҙәр — йәшлеләр...

Ҡырҡ ҡуш табан баҫҡан һайын,
Ер йәшәреп тын ала.
Ҡырҡ ҡуш табан баҫҡан һайын,
Ер өтөлөп, ҡан ҡала...

Ҡырҡ ҡуш ҡулда — Ер теҙгене,
Ҡырҡ ҡуш ҡулда — үрт әҙе...
Ҡырҡ һәм ҡырҡҡа айырылған
Алты ҡитға ер йөҙө.

Волгаларҙың, Эльбаларҙың
Кемдәр күген түңкәргән?
Меконгыны ер йөҙөнә
Яра ярып үткәргән?

«Һалҡын һуғыш» тынһа, һулыш
Ут-һуғыштан ҡурыла.
Уйландыңмы, американ
Ҡорҙашым, шул турала?..

Һин дә, мин дә уйланмаһаҡ,
Был донъянан ни ҡалыр?
Именлек бит икебеҙҙең
Игелектән торалыр!

## 7

Ҡайттың тыуған тупрағыңа,
Американ ҡорҙашым.
Колорадо ярын ятып
Үпкәнһеңдер бер шашып.

Төрлө икән, эйе, юлдар,
Башланһа ла бер Ерҙән:
Шан данлаһа атайҙарҙы,
Һине ҡанлы кер бөргән...

Ҡара ҡанлы итегеңде

Йыу һин тыуған йылғала.
Балыҡ белһен, халыҡ белһен
Ҡан аҡҡанын донъяла.

Хәйер, һеҙҙең АҠШ-та бит
Төҫкә ҡарап һуялар.
Аҡ тән түгел яраларҙан
Һыу аға тип тоялар...

Туғыҙ грамм ҡурғаш хаҡы —
Ҡара-негр ғүмере.
Ҡыҙыл тәнле индейҙарҙың
Төтәй ҡара күмере...

Хәйер, ап-аҡ тәнлеләр ҙә
Һыныҡ эҙләй сүплектән...
Әллә үтә рәхәтлектән?..
Әллә доллар күплектән?!.

Тайғанында Вьетнамдан,
Әйттең: "Быны онотмам!"
Күҙең асып ҡара, ҡорҙаш:
Өйөңдә бит Вьетнам!..

«Бысраҡ һуғыш» туҙандарын
Һелкеп ташлар сағыңда,
Яңы ҡараш атһаң ине
Өйҙә тирә-яғыңа!

Донъялар бит өр-яңыға
Түңкәрелде ҡырҡ тапҡыр.
Бөгөн ерҙә — Намыҫ түрҙә!
Ерҙә бөгөн юҡ бахыр!

Пентагонда оя үреп,
Булһаң һин дә «ҡарсыға»,
Колорадо ярҙарынан
Илең ҡаны тамсылар.

Атайҙарҙың Эльбаһынан
Ерҙә шул саҡ ни ҡалыр?..
Ҡырҡ йәшлеләр быуынына
Етте ваҡыт уйланыр!

Колорадо буйҙарынан
«Ҡарсыға»лар осмаһын!..

Волга буйы «бөркөт»тәре
Ауламаһын дошманын!..

Ҡул ҡыҫышып күрешһен, тим,
Океан аша һәр ил, йорт!
Алты ҡитға — булһын ине
Туғанлыҡҡа аэропорт!

Бар бит беҙҙең Волгалар,
Бар бит беҙҙең Эльбалар.
Меконгыларҙа осрашмаһын
Беҙҙән тыуған балалар!..

## Эпилог урынына
## (1979)

### I

Яңыртылған иҫке йырҙы
Бөттөк көйләп ни ара!
Шул арала Ливанда һәм
Никарагуала яу бара.

Шул арала Афғанстан,
Курдистанда ут дөрләй.
Утлы ҡуҙҙар Африкала
Оло янғынға үрләй.

Вьетнам сиктәрен йәнә
Утҡа тота пушкалар...
Дөрләй илдәр... Самолеттар
Әжәл йөкмәп осалар...

Нахаҡлыҡтың көбәгендә,
Ҡанатында — бер тамға:
Пентагондың тырнаҡтары
Сыйған, батырып ҡанға...

### II

«Ҡарсыға»лар ҡарҡылдаша
АҠШ-тың Аҡ йортонан.
Ут йөрөтә илселәре

Ебәк итәк аҫтынан.

Ракета һәм танкылары,
Кәмәләре тоҫкаулы.
Донъяны ут-көл ҡылырға
Дәжжал тубы яҫаулы.

Майҙандарҙа маршлайҙар
Яңы «йәшел берет»тар.
Генералдар — маршаллыҡты
Матҡырға уй йөрөтә...

## III

Яңы хәбәр: Пентагонда
«Йылғыр корпус» төҙөлә.
Яндырыуҙы, үлтереүҙе
Кәсеп итмеш үҙенә.

Теләгән бер илгә уны
Була, тиҙәр, осороп.
Теләгән бер хөкүмәтте
Була, тиҙәр, төшөрөп.

Теләгән бер ил байлығын
Тартып алыу — теләге.
Донъяларға әҙерләнә
Ажар әжәл һемәге...

## IV

Хәбәр йөрөй... Ә һин ҡайҙа,
Американ ҡорҙашым?
Йылғыр башланыңмы әллә
Илле йәшлек юл башын?..

«Йылғыр корпус» тыуа әллә
Һинең ҡанат аҫтында?..
Онотма тик Эльбалар һәм
Меконгылар хаҡында!

Волга менән Колорадо
Барлығын да иҫтә тот.

Сыҡһа улар ярҙарынан,
Булмаясаҡ туҡтатып!

Тейә алмаҫ телең хатта
Әсирлектең ашына.
Етмәһен, тим, йылғырлығың
Үҙеңдең үк башыңа!

Ҡара-ҡаршы килмәйек, тим,
Һин — генерал, мин — һалдат.
Шағир килеш ҡалһам ине,
Һин дә ир булып ҡалһаң!..

Бынан һуң, тим, яңырмаһын
Теге шомло иҫке йыр.
Тыныслыҡ һәм дуҫлыҡ өсөн
Яңы йырҙар табылыр.

Ҡорҙашҡайым, ҡорҙашҡайым,
Маршаллыҡҡа ашҡынма.
Кеше булыу яҙһын беҙгә
Кешелектең хаҡына!

31.03.1973.
1979.

# БАШҠОРТ БРУНОҺЫ ЙӘКИ ДАРЫЛЫ ПОЭМА

## *Дары тураһында сәсмә фәлсәфә*

*Урал үҙе — үртле дары моҙғайы, тупрағыбыҙ хәтәр дары бөртөктәре: орандарын ора алмай гүргә кергән батырҙарҙың ҡомарының ҡомға ҡалып ыуалыуҙан дарыланған, патронланып тынҡысланған, таштай ҡатҡан йөрәктәре хасил иткән дарыларҙы!..*

*Кешеләрем, тыңлағыҙ: орор оран оролмаһа — брунолар ауыҙынан "Ер әйләнә!" тиеп хаҡлыҡ сорголмаһа, йөрәктә үрт, тынҡысланып, хәтәр дарыға әйләнә, ә шартлаһа донъя көлгә әүерелә... Хатта Урал батырҙың да орандары әйтелмәйсә ҡалып ергә күп күмелгән, шуға күрә Урал тауҙың йөрәк башы тәңгәле бит ылғый ғына дарынан... Шул дарылар ер аҫтынан ҡитғаларға ҡубарыла — вулкан булып планетаның төрлө остарында хәтәр аҡтарыла; дарыланған ҡулдар менән шул дарылар еҙ гилзәле патрондарға ҡыҫтап-ҡыҫтап тултырыла — гөрһөлдәүек дары шаңы, түгел беҙҙең боғаҙҙарҙан, — ҡорос көбәктәрҙән ярһыу аттырыла һәм патрондан сорғотолоп* ***үҙе*** *жыйлап оса кеше — кеше һынлы яҫауланмыш патрон йәки снарядтан шартлап ҡырт өҙөлгән йәҙрә... бит ул шул үк* ***кеше башы****... Әгәр, тимен, был донъяла кешеләрем "Ер*

*әйләнә!" тиеп һәр саҡ аяҡ терәп ҡаты торһа, Брунолығын үтәп изге оран орһа, намыҫының нахаҡ-дошмандарын ҡырһа, дарыланмаҫ ине, бәлки, йөрәктәре, патронланмаҫ ине бәйле ҡөҙрәттәре, ут ләүкетмәҫ ине әжәл көбәктәре... Кешеләрем, кешеләрем, дарылатмайыҡсы йәнле йөрәктәрҙе!..*

*Әммә... әммә... тотҡан берем, баҫҡан ерем — дары ғына, һулыш алған һауаларым дарылана...*

## *1*

Оҙон юлда бара каруаным —
Әҙәм ғүмере буйлыҡ текә юл.
Намыҫлылар үтә текәнән,
Текәләрҙә һирәк түтә юл.

Текәләрҙә күберәк сая юл —
Ҡылысланып һыртын ҡабартҡан.
Ут сәсрәтә сая аҙымдар —
Табандарҙы сағыл ҡуҙартҡан.

Көнөн бара каруан туҡтамай,
Төнөн бара каруан йоҡламай.
Сыңрап ауа ғүмер тәүлеге —
Көнөм-төнөм аға йылғалай...

Көнөм-төнөм аға йылғалай,
Текәләрҙе тетә ел ҡалай!
Баш осомда Айым, Ҡояшым —
Минең менән ҡуша юрғалай...

Уралымдың зәңгәр текәһе
Зәһәрләтә Күгем көҙгөһөн.
Төн ҡараһын ҡурған Ҡош Юлы —
Текәләге минең эҙлегем!

Биттәремде елдәр шыраулай,
Сәстәремде силдәр ҡыуарта..
Имән кеүек текә ҡырҡылған
Маңлайымда моңло һыр арта...

Баҫам ҡылыс-сағыл йөҙөнә,
Аҫта — упҡын, торам сайҡалып.
Арҡа терәр янда сағыл юҡ,
Күкте ҡармай ҡулым, айҡалып.

Унда — йыһан... Ҡояш һәм Айым —

Тотонорға йәтеш ҡулсалай.
Минән улар ләкин тоттортмай,
Һаман-һаман алға юлсалай...

Кәңгерләйем ҡылыс йөҙөнән,
Йөгөм ауыр... Яңғыҙ мин каруан...
Иңбашыма тынмаҫ выжданым
Ауыр Бруно[14] йөгөн туғарған.

Инквизиция утында
Янған, тиҙәр, бергә бар ғаләм...
Тик янмаған, көлгә осмаған —
Ҡалған икән Намыҫ Тәғәләм!

Быуын-быуын күпме бруно
Илткән уны, һалып иң башҡа!
Бруно барған, гәрсә булһа ла
Милләт башҡа, ҡитға, ил башҡа.

Бруно барған. Ә мин — ҡыл оста...
Ҡылыс йөҙөндә гел сайҡалам.
Аҫта — упҡын, тамуҡ-йәһәндәм...
Табанымды ялҡын-ут ялай...

Джордано нисек түҙгәндер...
Түҙгән ләкин — йөгөн бирмәгән:
Фани өсөн үртәп намыҫын,
"*Ер әйләнмәй,* тәҡсир!" — тимәгән!

"*Ер әйләнә!*" — тигән ул ғорур
Һәм көл булған тамуҡ утында.
"*Ер әйләнә!*" — Бруно оранын
Оранланы ғорур тоҡомдар!

Әммә... әммә... аҙмы Галилей
Ыҫпайлыҡтың булды өлгөһө:
"*Ер әйләнмәй,* тәҡсир!" — тип, уттан
Һыуға төшөүҙәре билгеле...

**2**

---

[14] Джордано Бруно — Италия философы һәм шағиры, бөйөк материалист. Уны сиркәү инквизицияһы 1600 йылдың 17 февралендә Рим ҡалаһының Сәскәләр майҙанында тереләй яндырып үлтерә.

Ерем ләкин һаман әйләнгән,
Ирҙәр янған, Намыҫ үлмәгән!
Мин дә янам! Табан — ялҡында...
Дөрләй инде, ана, күләгәм!..

Яна дөрләп, Урал, салғыйым,
Кемдән генә терәк алайым!
Аһ Туйгилдем[15]! Бруно-олатам!
Һин аңларһың мине, моғайын!..

Намыҫыңды һаҡлап кергәндә
Инквизиция утына,
*"Ер әйләнә!"* — тигән оранды
Уртлап менгәнһең һин уртыңа!

Табаныңды ялҡын ялмаған,
Салғыйыңды ялҡын талаған,
Ҡара сәсең утҡа алланған,
Әммә оранды ут алмаған:

*"Ер әйләнә!* Барыбер әйләнә!" —
Ләүкегән ут дөрләү уртыңдан.
Башҡорт-бруно илткән Хаҡ-Намыҫ
Ил иҫенә менеп ултырған.

Дары төтөнөнән күк Урал
Бруноларын алған монарға.
Ирҙәр янған — Намыҫ янмаған,
Яңы бруноларын һынарға...

### *3*

Ҡылыс-ҡылдан бара каруаным —
Брунолар үткән текәнән.
Бруно заңы зыңлай йөрәктә,
Бәғер битен сыйып күптәндән:

> *"Булһа булһын ауыр һәм болгауыр —*
> *Намыҫ юлы тик бер юл бит ул!*
> *Намыҫ аҡлығына иң бирмәгән —*
> *Ҡара хыянатҡа ҡол бит ул!*

[15] Көсләп суҡындырылған башҡорт Туйгилде Юлаҡовты, үҙ диненә кире ҡайтҡаны өсөн, 1738 йылда Екатеринбург ҡәлғәһенең үҙәк майҙанында тереләй утта яндыралар. (Русская старина, 1878/10, 309 — 313-сө биттәр.)

*Башҡортостан-илем — Намыҫ иле,*
*Урал батырҙың саф аҡлығы.*
*Йөрәгемдең ике яртыһында —*
*Ватан ҡайғыһы һәм шатлығы!*

*Иң башымда илтәм ил Намыҫын,*
*Үрт өтһә лә ҡара тапланмаҫ.*
*Халҡым өсөн кисәм ут кисеүен —*
*Табандарым таймаҫ, тайпылмаҫ!*

*Мин халҡыма тәрән тамыр йәйҙем,*
*Түгел ләкин уны имергә.*
*Тамыр йәйҙем, мәңгел йәншишмәнән*
*Йәнһыу алып илгә һибергә!*

*Мин халҡымдан үргә олон үрҙем,*
*Түгел ләкин уны ҡапларға.*
*Олон һуҙҙым, Көндөң аҡлығынан*
*Аҡ нур алып ерҙе паклларға!*

*Мин ҡулыма хәләл ҡәләм алдым,*
*Көнгә мансып, төнгә яҙырға.*
*Баштар китһә — китһен, Намыҫ ҡалһын*
*Ил шәмдәлен нурлап яныырға!"*

**4**

Йөрәгемдең ҡайғы, шатлыҡтарын
Ҡыл осонан илтә юл йыры.
Байраҡлатып Намыҫ паклыҡтарын,
Текәлектә гөлтләй ал нуры.

Ут дәрйәһен йыра Намыҫ-йөгөм,
Сикәләрҙе ялҡын ҡамсылай.
Юлым сикәләре — ике сағыл —
Дөрләп торған киршәү ҡайсылай!

Шағор-шоғор йөҙөн киршәй сағыл —
Билкәйемдән һығып ҡырҡырлыҡ.
Сигенмәйем! Ҡалҡыу иң башымда
Бара лаһа Намыҫ-Тоғролоҡ!

Иңем менән киреп айырамын

Сағыл-ҡайсыларҙың асаһын.
Дүрт яғымда сыңлай кереш-офоҡ —
Ярылырҙай гәлсәр касаһы...

Терһәк терәп бөгәм ҡаяларҙы,
Йыһан сыңын йәндән кисерәм.
Ут эсендә килеш айныйым һәм
Ут эсендә килеш иҫерәм...

Ишетелә шунда Серле бер өн:
— Ғорурһың һин үтә, тәнәкәй!
Ҡая артылдың да ҡая менден...
— Түбәнләктәр миңә кәрәкмәй!

— Көллө илең түгә тир түбәндә...
— Ә мин ҡаным түгеп юл ярам!
— Бараһыңмы илең елкәһендә?..
— Ил Намыҫын йөкмәп апарам!
Ятмай Намыҫ илдең итәгендә!..
— Сағылдарҙан бейек — Көн бары...
— Сағылдарҙан үҙең тәпәш булһаң,
Намыҫ тауын йөкмәп һин ҡара!

— Нимә теләй йәнең, тәнәкәйем?
— Торор ерем булһын үрҙәрәк!
— Үҙеңдән дә бейек дәғүәләрең...
Табаныңды терә ергәрәк!

**5**

Терәгәйнем, тулғап туланы
Ер кендеге — нурлы көндөгөм.
Утлығамын ерем һутынан!
Терәй түбәм йыһан төндөгөн!

Үҫәм, үҫәм, үрегеп мин үҫәм,
Сал сағылын уҙып Уралдың:
Урмандарҙа төбөм, ә түбәм
Галактикаларға уралды.

Кирәм күкрәк: кирем ҡоласым
Ҡуш офоҡто йыртып ҡанатты...
Аһ! — кем һуң мин?! Күҙем — ут алған,
Суҡышлымын, ҡыйғыр ҡанатлы!

Талпынаммы осоп китмәгә
Йыһандарға, ерҙе ҡалдырып!
(Галактикалар бит тап шулай
Ҡанат киргән ирҙәр алғыры!..

Күкрәктәрҙә күкрәү кәре бар,
Өнһөҙҙөр тик — ауыҙ ҡалыплы...)
Аһ! — кем һуң мин? Өнө тығылған
Сағыл мәллә, әллә алыпмы?!.

Бөркөт мәллә күккә ҡарпыған
Ҡармап алып йоморо Ер шарын?
Күрегеҙсе, гранит кендегем
Урал ҡаяһына ҡушарым!

Әллә өнөм, әллә төш кенәм —
Ярып төндө дөрләй һаҙағай.
Кендек төбөм береш-Ирәмәл
Йәйғорлана гәүһәр ҡаҙауҙай...

Ғаләм үҙе елә йыһанда,
Серле йомғаҡ һымаҡ тумарлап.
Галактика күҙе — Ер шарым —
Минең менән ҡуша йомарлаҡ!

Дарыланған йөрәк башымда —
Йөрәк башы Ерҙең — Уралым...
Бөйөклөгөн уның хозурлап,
Тере сағыл — дөрләп барамын!

(Үҙем — ерҙә, күҙем — йыһанда:
Төш тиһәң дә тылсым-төш инде!)
Һәм уйлайым: “Әйтсе, Илаһым,
Ниңә тектең ергә кешеңде?

Табандан да тартһа — тупраҡ,
Түбәмдән дә артһа — тупраҡ.
Туп(ы)раҡта үҫкән мин бахыр —
Өҙөлөргә торған япраҡ...

Килдем бөгөн, иртән китәмен...
Ҡала тороп фәҡәт Күк Урал.
Сағыллығым осор саң булып —
Саң ҡалынлыҡ ҡалҡыр тик Урал...”

### *6*

Ишетелде йәнә Серле өн:
— Тәнәкәйем, ниңә ярһының?
Һиңә әллә ерҙә эш бөткән,
Нимә көҫәп Күккә ҡарпының?

— Йөгөм ауыр — шуға ярһыным.
Күңелем көр — шуға ҡарпыным.
Ирмен тигән ирҙе һыйҙырмай
Ғүмер ҡыҫаһының тар ҡыны!

— Ай-һай, дәғүәң оло, тәнәкәй...
Урал данын йәнең көнләшә.
— Үгәй түгел — Урал улымын,
Минең аша Урал өндәшә!

Иңбашымда Урал Намыҫы —
Мин бит тейеш бейек илтергә!
Һәм хаҡым юҡ ошо юлымды
Тәнәйләнеп түбән үтергә!

— Уралдан да битәр бейеклек
Ниңә кәрәк? — тине Серле өн.
— Бөйөклөгөм күреп йондоҙҙар
Мине һөйһөн, минән көнләшһен!

— Арбармы һуң һине, тәнәкәй,
Уралыңдан өҫтөн итәғәт?
— Өҫтөнлөккә, Илаһ, ни етә!
Бөйөклөк бир тик бер, бер сәғәт!

Иҫәпкә ал илткән йөгөмдө,
Иҫәпкә ал хәтәр юлымды.
Аҙмы ирҙәр уны үтәлмай,
Илтә алмай йөгөн, йығылды!..

— Ярар, тәнәк, — тине Серле өн, —
Кендегеңде ерҙән өҙәйем.
Йондоҙлоҡҡа терәп түбәңде,
Күк-есемле хикмәт итәйем!

### *7*

Шул хикмәткә тарып сорғолдом
Күк-йыһанда сихри сәфәргә.
Уралымдың ҡарлы түбәһе
Ҡалды оҡшап башлы шәкәргә...

Балҡый шәкәр зәңгәр монарҙа...
Балҡып бәлләү-күктә мин йөҙәм!..
Йыһан йәйгән йәйғор һуҡмаҡтан
Бөйөклөккә ҡарай юл гиҙәм!

Ҡала аҫта, ҡала тыуған яҡ —
Ҡалҡҡан һайын, ерҙән мин өҫтөн.
Ғәжәп ҡалам ҡарап артыма:
Шул түбәндә микән мин үҫтем?!

Булмаҫ, булмаҫ: бынау бейеккә
Менгән есем аҫта яралмаҫ!
Булмыш затым — зәңгәр Күк заты,
Ергә ҡарап зиһен таралмаҫ!..

...Боҫто Ҡояш Ерҙең артына,
Зәңгәрлекте ҡара төн өңдө.
Ҡунаҡсала һары нәжәғәй
Һуңғы тапҡыр ҡанат елпенде.

Аҫта инде уйһыу үҙәндәр —
Күк шыршылар ҡалды бик түбән.
Аҡ шәкәрҙәй Урал маңлайын
Көҙгө итте “ем-ем” Етегән.

Ете йондоҙ бейей эргәмдә —
О! — был ниндәй тылсым, сихри мәл!
Ете үлеп, ете тыуһам да —
Ҡабатланмаҫ инде бындай хәл!..

Ете йондоҙ бейей айбарлы,
Бейейем мин ете уртала.
Йондоҙ нуры билгә урала,
Йор нур һурып һулыш туҡтала...

Ишетелде йәнә Серле өн:
— Мораҙыңа, тәнәк, ирештең.
Уралыңдан бейек булырлыҡ
Күк затына тамам керештең.

Бер генә тик тулап тын алма,

Бер генә тик сыңлап моң алма.
Уралыңдың моңон, һауаһын
Онот, онот! Хәҙер һин — Алла!

Уралыңдың һомғол һындары
Һүрәтләнер — уға алданма.
Һоҡланыуҙы — бәндә зауығын
Ҡалдыр, ҡалдыр! Хәҙер һин — Алла!

Килер, бәлки, кире ҡайтаһың,
Тупрағында аунап ятаһың.
Түбәндер тик һинән был, аңла.
Һин Уралдан бейек, һин — Алла!..

Күк көмбәҙе көлөп әүшәйҙе,
Ярты яҡҡа донъя ҡыйшайҙы.
Күрер күҙгә шөңгөр Уралым
Ер төҫтәрен һирпеп түш яҙҙы —

Йәнкәйемә һуңғы йыр булып
Ҡабатланды ерем бер мәле.
Елберҙәне йәшел ҡайындар —
Күлдәктәре бөрмә-бөрмәле...

Әсәм өнө кеүек Серле өн
Һуңғы тапҡыр микән өндәште:
  — Ризаһыңмы бөйөк ҡалырға?
Өҙмәнеңме бөйөк ниәтте?..

Ни тиергә ләкин белмәнем —
Тулыш ине нурға үҙәгем.
Күлдәккәйем хатта аҡ нурҙан...
Саф нур һулап нурҙа йөҙәмен...

Ер әйләнә, зырлап әйләнә —
Бер йомарлаҡ туп ул түбәндә...
Шул йомарлаҡ-тупты ҡомарлап,
Етегәндәр көлә эргәмдә...

Етегәндәр көлә эргәмдә,
Көлмәйем тик — бер мин көлмәйем...
Ҡолағымда һаман сыңлаған
Ерем өнөн генә өнәйем.

Ах был саңҡыу! Бөркөт саңҡыуы! —
Уралымдың бит был саф өнө!

Ярып үтеп ваҡыт, арауыҡ,
Йыһанда ла арбай ул мине!

Бишегенән бейек Күгемдең
Тәкмәсләргә түбән мин әҙер.
Уралтауҙың тыңлап саңҡыуын,
Сатнар инде, сатнар таш бәғер!..

Йыһан нуры тулы уртымды
Ерҙәгеләй кирә алмайым...
Орандарым ҡатҡан таңғайҙа —
Өнләп ауаз бирә алмайым...

Мин — тауышһыҙ... Аһ, мин тауышһыҙ!.. —
Ҡайҙа хөр саҡ?.. Оран орор саҡ?!
Йондоҙҙарҙың тик нур телендә
Аралашыу йәнде һурасаҡ!..

*8*

## Уралтауҙың саңҡыуы

Уралмын мин, эйе, Уралмын,
Яу килгәндә — илгә ҡоралмын,
Тыныслыҡта — тулы бурамын,
Уралмын мин, эйе, Уралмын!

Һәр ташымды — хатта һине лә
Көр иңемә алған Уралмын.
Йәнһеҙ суйырҙарҙы терелтә,
Йырлы итә торған Уралмын.

Яралттым мин һәммә йәндәрҙе,
Таралттым мин һәммә йәмдәрҙе.
Әммә *Кеше* тигән кешене
Яралтҡансы йәнем шәмәрҙе...

Ялым тарап елде быуаттар,
Ярҙарымдан аҙмы һыу аҡты!
Күҙем нуры — күкшелт күлдәргә
Күпме йондоҙ, Ҡояш, Ай баҡты...

Йәш һуғандай йәшел үләнем
Буй үҫтерҙе күпме, наҙ көтөп.

Текә шәмдәй шыршы, тирәгем
Ботаҡ ярҙы күпме, саз көтөп...

Шәкәрҙәй аҡ сағыл остарым
Аҙмы торҙо киңгәп, түл юҡтан.
Көтөкләнде киртләс һырттарым,
Тылсым көтөп көллө юҫыҡтан...

Күпме яҙҙар көҙгә әйләнде.
Күпме йәйҙәр ҡышҡа әйләнде.
Йән ҡундыр, тип, йәмле иңеңә,
Тылсым осо миңә бәйләнде.

Шул сихри мәл, төндә тулғанып,
Йондоҙҙарҙы ергә ҡараттым.
Туңған һыуҙарымды тулатып,
Шылтыр-шылтыр йырын яралттым.

Урмандарым иңен ураған
Таштай өнһөҙлөктө таралттым.
Япраҡтарҙың елгә туҙраған
Ҡыштыр-ҡыштыр йырын яралттым.

Үрҙәремдең үркәс бишеген
Бөргән һағыш һырын таралттым.
Шауҙыр-шауҙыр килеп ишелгән
Таштарымдың йырын яралттым.

Далаларым талып тилмергән
Сихыр торғонлоғон таралттым.
Бер-беренә бәрелеп йүгергән
Ҡамғаҡтарҙың туйын яралттым.

Мәңге хисһеҙ ҡатҡан Күк йөҙөн
Ерҙең ғәме менән ҡаралттым.
Өйөр-өйөр генә болоттар,
Ҡойма ямғыр, йәшен яралттым.

Күк күкрәтеп, ерҙе тетрәтеп,
Көндөң күҙен ергә ҡараттым.
Офоҡ дуғалатып тартылмыш
Ете төҫлө йәйғор яралттым.

Етмеш тылсым менән тоҡанып
Йоҡто ергә йәйғор-көйәнтә!
Ике осо, ҡыҙҙай осоноп,

Һәр ҡыуаҡҡа, ташҡа көй әйтә!

Шул көй менән тулып тылсымым,
Ҡуш усымды түбән ҡараттым:
Ер йөҙөнөң тере тылсымын —
Йәнлектәрен мең-мең яралттым.

Күккә һыҙып көмбәҙ тирәсен,
Ергә һуҙып һырттар киртләсен,
Тылсымыма буйсыл тирәмде
Яттар уҙмаҫ урға ураттым.

Тойһон өсөн тойғор есемен,
Тотһон өсөн тотҡор исемен,
Тотанағым итеп тоторға —
Терлектәрем төрөн таралттым:

Ялмамаһын өсөн ят бауыр
Туҙанымдың хатта бөртөгөн,
Үләнемдең хатта бер төгөн,
Һәр саңыма бағыу булырлыҡ,
Һәр ятына ағыу булырлыҡ
Бөтмәҫ бөжәктәрем яралттым.

Ҡайыҡлының тишеп ҡайығын,
Таныҡлының ишеп таныған,
Кимертергә — вайран итергә
Ҡомаҡ, көҙәнемде яралттым.

Ят яғылһа ялмау табырға —
Юл яҙҙыртып янға сабырға,
Ят йығылтып ҡына арырға
Ҡылый ҡуянымды яралттым.

Тороп баҫһа — ҡойроҡ болғарға,
Ҡыҙыл төҫөн төҫнәп уйнарға,
Аҡ тамағын теркәп буйларға
Төлкө-түләгемде яралттым.

Яу-йолмандың яҙып аҙауын,
Һындыртырға ҡарыш ҡаҙауын,
Бөлдөртөргә салыш һаҙағын —
Һылыу боланымды яралттым.

Ят ятҡанда арбап алырға,
Быуынына быҒау һалырға,

Остан-оҫҡа хәбәр ҡылырға —
Һармаҡ һайыҫҡаным яралттым.

Яу өңөлөп яурын һыҙлаһа,
Өң төбөнән ят күҙ быҙлаһа,
Яуыз өңдө тапап боҙмаға —
Тайыш айыуымды яралттым.

Ояһынан булһа сыҡмалы —
Яланда ял йыйнап ятмалы,
Аңшайғанды сағып йыҡмалы
Ҡайыш йыланымды яралттым.

Торам тиһә ҡалҡып ят бауыр,
Һыҡҡан һайын йылан-билғауыр,
Боғаҙ сәйнәп өҙһөн, тип, алғыр —
Бүре-бөрөгөмдө яралттым.

Кипһен өсөн ят һүл иңемдән,
Китһен өсөн ят төҫ күҙемдән,
Бөтһөн өсөн ят нам телемдән —
Ҡомһоҙ ҡоҙғономдо яралттым.

Хайуандарым, кейек, ҡоштарым —
Ерҙән алып ағас остарым
Мыжғып торор итеп яралттым.
Мыжғып йөрөр итеп таралттым,
Мыжғып үрсер итеп таралттым...

Киңлегемдән күңел көр ине,
Күгем менән Ерем бер ине.
Ситтә ҡасып Әжәл йөрөнө —
Ғүмер былбылдарын һайраттым!

Күҙ ташланым тирә-яғыма —
Тулып иңем терлек йүгерҙе.
Күҙ ташланым күкһел Күгемә —
Күк ҡанаттар килелеп өлгөрҙө...

Өнһөҙ ине ләкин үрҙәрем,
Һынағандай көстө юрамал.
Тылсым көттө, текләп күҙҙәрен,
Күк көмбәҙле һылыу Ирәмәл...

— Тылсымдарҙың тере тылсымы
Етмәй мәллә?.. Нимә бирәйем?!

— Бүләгеңдең бирһәң берҙәйен,
Ирәмәлең торор ирәйеп! —

Тине шулай миңә Ирәмәл...
Үҙем дә тап шуны уйланым...
Берәгәйле итеп бирергә
Тылсымымдың көсөн көйләнем...

Йөрәгемдең ҡанлы бәгерен
Ҡырҡып алып сөйҙөм бүләкте.
Ирәмәлем алды күтәреп
Тетрәп типкән тере йөрәкте —
Тыуҙы *Кешем* — Урал йөрәкле!..
("Башҡорт" тиҙәр ошо һирәкте...)

### *9*

*Кеше* тыуҙы, Кеше!..
Тылсымдың
Был һуңғыһы ине, моғайын...
Кеше әйтте:
*"Урал-атама*
Тиң булайым — *Башҡорт булайым!*

Донъя яратылған замандан
Заңын һалды башҡорт был ергә:
*"Башҡорт булып баҙғас тыуырға —*
*Башҡорт ҡалып тейеш үлергә!"*

Тыуыу менән Үлеү араһын
Башҡортлоҡтоң — дары тултырҙы.
Дары түшәп башҡорт йоҡланы,
Дары һулап башҡорт уй ҡорҙо.

Кешелеген һаҡлап ҡалыуҙың
Сараһылыр, бәлки, ул дары...
Тупрағында дары арттырып,
Һалды башын башҡорт улдары...

Дарыланып башҡорт йәшәне —
Йәне-тәне ылғый дарылыр.
БыҒау һалам тигән залимға
Башҡорт-дары шартлап-ярылыр!..

Йәне-тәне көсәй азатлыҡ!

Шуға рухы — дары шауҡымы.
Дары ерен баҫып кергәнде
Көл итәсәк дары тоҡомо!

Ере-Күге, эскән һыуҙары —
Үҙе кеүек ылғый дарынан!
Башҡорт йәнен булмай сүктертеп
Аҫыу, киҫеү, ут һәм дар менән!

***10***

## Көләүендәр

*Көләүенлек Ерәнсә-сәсәндән килә,*
*ә уға был -- Көндән бүләк ителгән.*
***Халыҡ һүҙе.***

Башҡорт йәне ярһый планетала —
Дарыланған һәр бер күкрәктә.
Урал күкрәүҙәре, Ерҙе урап,
Ҡитғаларҙың төбөн тетрәтә.

Тыя алмай уны ҡара ҡеүәт,
Йыға алмай ирҙе ҡылыстар.
*"Ер әйләнә!"* — тигән итальяндың
Оранында минең һулыштар!

...Ҡыңғырауҙар сыңлай ҡолаҡ ярып —
Ҡорамдарҙың изге алтыны:
Шанлы Римдың Сәскә майҙанында —
Инквизиция ялҡыны...

Сәскә түгел — утын өйә ҡулдар
Көл итергә тере ҡарыуҙы.
Ҡалҡып ялҡын-сәскә уртаһында,
Тора ғорур Ерҙең дарыһы.

"Кире ҡайт!" — тип, "Төҥөл!", "Тәүбә әйт!" — тип
Ялҡын йүрмәй йәнгә тәреләр.
Ғорур ауаз сорғой утлы ауыҙ:
*"Ер әйләнә!* Тотмай тәңреләр!"

Дары йәндең ҡара күҙҙәренә
Тәреләнеп ялҡын орона.

— Ха-ха-ха-ха! — Көлә дары ауыҙ. —
Төңөлмәйем! Сүкмәҫ Бруно[16]!

Киләсәктең көләс Гагарины
Еңһен өсөн тотҡор ер көсөн,
Ер йәҙрәһен үксә менән төйөп,
Дарыланып гөртләй был есем.

Төтөн түгел, Сәскә майҙанынан
Сәсрәй Күккә йыһан карабы.
Дөм өс быуат үткәс, шуны бағып,
Кешелегем ала һабағын!

Ә әлегә иҫке дәүер бара,
Бруно яна, нуры тарала...
Дары кәре, ерҙе урап йөрөп,
Сал Уралда ҡабат ярала:

Шул уҡ сиркәү... Шул уҡ шаулы майҙан...
Ләүкетәләр ялҡын тәреләр.
Дары йәнле башҡорт бруноһын
Баҫтырғандар утҡа тереләй...

“Ҡайт, Туйгилде!”, “Төңөл, Юлаҡов[17]!” — тип
Тәреләрҙән күҙгә ҡуҙ тама.
— Ха-ха-ха-ха! — Күккә осто дөрләп
Дарыланып тыуған буҙ бала...

Шул көлөүҙән шашып ҡалды ялҡын,
Үрт эсендә көлдө шашҡын ут.
Ер әйләнде һүтеп быуаттарын,
Көлөү дөрҙө, дөрҙө ашҡынып...

Ҡара төндә ҡап-ҡара майҙанға
Көлә-көлә аҡ нур түгелде.
Теҙ сүктеләр ҡарғап ҡара йәндәр:
Балҡый йондоҙ — Башҡорт Туйгилде!

Ер циркының бөйөк аренаһын
Арбаны был көлөү мәңгегә.
Көләүене булып цирктарҙың,

---

[16] Итальян философы һәм шағиры, бөйөк материалист Джордано Бруноны сиркәү инквизицияһы, аллаһыҙлыҡта ғәйепләп, 1600 йылдың 17 февралендә Римдың Сәскәләр майҙанында тереләй яндырып үлтерә.

[17] Көсләп суҡындырылған башҡорт Туйгилде Юлаҡовты, үҙ диненә кире ҡайтҡаны өсөн, сиркәү әһелдәре 1738 йылда Екатеринбург ҡәлғәһенең үҙәк майҙанында тереләй яндыра.

Шартлаясаҡ дары-йән күлә!..

## *11*

Бағам текләп күктән — йондоҙлоҡтан
Урал тауға, ерем түренә.
Аҡ түбәһе аҡыҡ Ирәмәлдең
Ареналай балҡып күренә.

Аренаһы ерҙең...
Түп-түңәрәк.
Ҡаралығы батҡан төбөнә.
Кешелектең
Хәүеф күҙе кеүек
Ҡарап ята заман Күгенә...

Фокусы беҙ һәр өс замананың —
Көн сатрашын тотҡан кешеләр.
Замандарҙың гөртләр дарылары
Аренаға беҙҙең ишелә.

Ирендәрҙе өтә дары-ҡымыҙ —
Елендә үк һаумал ут-дөрләү...
Биш ҡитғабыҙ — ерҙең биш тусҭағы
Дары ҡымыҙынан мөлдөрәү...

Ауыр баҫа усты дары гере,
Дары кәре үртәй йөҙөмдө.
Көләүендәр илткән көләкәслек
Бирһен Хоҙай! Итһен түҙемле!

## *12*

Оркестрҙар! Көмөш ҡыңғырауҙы
Бер ситкәрәк алып ҡуйығыҙ!
Күк күкрәтә тартып фанфарҙарҙы,
Ер тетрәтә дөмбөр һуғығыҙ!

Көр шаңдауҙа ярһып яңғыраһын
Кешелектең аҙым алышы:
Көләүендәр сыға аренаға!
Еңелмәҫкә тыуған яу — ошо!

Көләүендәр сыға аренаға,
Быуаттарға баҫып аҙымын.
Күҙе менән, көлөп, ҡыйып үтә
Ҡатилдарҙың ҡанлы ҡаҙығын.

Көләүендәр сыға аренаға —
Таш төрбәләр ҡалған ишелеп.
Тимерйәндең[18] тимер аҙымында
Килә алҡып ярһыу Кешелек!

Ҡара йәндәр йәбен йәмшәйтергә
Йөҙөндәге ғорур нур еткән.
Көлөштәре дары гөрһөлдәтеп,
Һулыштары боҙҙо иреткән.

Иңдәрендә йөкмәп алып сыҡҡан
Быуаттарҙан быуған ярһышты.
Тимер йәнен төйнәп ул үтәгән
Әжәл менән мәңгел алышты.

Ғәййәрлек һәм ғәҙел үткерлекте
Көләүендәр һатып алмаған.
Үҙҙәре лә улар һатылмаған —
Теле менән ялҡын ялмаған!

Оркестрҙар! Алтын арфаларҙы
Бер ситкәрәк алып ҡуйығыҙ!
Күк күкрәтә тартып фанфарҙарҙы,
Ер тетрәтә дөмбөр һуғығыҙ:

Тимерйәндең алтын ҡалағында
Алҡын-ялҡын уйнап Аҡ килә.
Ҡалаҡ һабын ҡабып тотҡан килеш,
Нахаҡлыҡты еңмеш Хаҡ килә!

Аҡ йомортҡа уйнай шуҡ ҡалаҡта,
Зыр-әйләнә — хәс тә Ер шары!
Кешелеккә шулай глобусты
Көләүендәр биргән сығарып!

Замок һайын кенәз зауыҡланып,
Үҙ кендеген Ергә ҡаҡҡанда,
Йөкмәп илткән Ерҙе көләүендәр,
Күсәренән ҡабып аҡ таңда.

---

[18] Тимерйән — Башҡорт милли циркының көләүене.

Тимерйәндәй, улар өйөрөлткән
Күҙ алдында көйләп Ер шарын.
Алып осҡан ҡалаҡ-Галактика
Осһоҙлоҡтан Ерен, кешеләрен...

Эйе, беләм: Тарих дарыларын
Төйгән йыйып уйын циркы ла.
Бындағы һәр номер өнө менән
Ер илай һәм шашып Ер көлә...

## *Нәүбәттәге номерҙарҙың береһе — XVI быуат башы*

*“Немец аяғы баҫкан ерҙә осраясаҡ һәр гереро кешеһе — ҡоралдымы ул, әллә ҡоралһыҙмы, маллымы, әллә малһыҙмы — урынында атып үлтереләсәк. Ҡатын-ҡыҙмы улар, бала-сағамы — мин береһен дә ебәрмәйәсәкмен, мин уларҙы кире һөрәсәкмен һәм бөтәһен атырға бойорасаҡмын. Геререларға быны мин, фон Трота, ҡеүәтле империя Германияның бөйөк генералы, иғлан итәм!”*

*“Француз һалдаттары үҙҙәре үлтергән һәр алжирҙың башы хаҡына аҡсалата бүләк ала. Баштарҙы киҫеп килтереү кеүек мәшәҡәттән арыныу өсөн, үлтерелгәндәрҙең ҡолаҡтарын ғына ҡырҡып алып тапшыра башланылар — был эш еңелгә төшә. Шуға бәйле рәүештә, һалдаттар араһында ҡара баҙар сәскә ата — епкә теҙелгән әҙәм ҡолаҡтары менән сауҙа итәләр. Бер пар ҡолаҡ 10 франкы тора”.*

*“Португалия тажы мәртәбәһенә океан арты биләмәләре яуларға сыҡҡан* ***мәрхәмәтле*** *Васко да Гама, Ғайса пәйғәмбәребеҙ рухына* ***изгелекле эш*** *ҡылып, христианлыҡ юлынан мәхрүм ҡалмыш көфөр негрҙың ҡолаҡтарын үҙ ҡулдары менән ҡырҡып ташланы, урынына ҡарпыш эт ҡолаҡтары тегеп ҡуйҙы”.* ***(Африка тарихынан.)***

Мин — көләүең.
Мин — “ниггер”,
Ҡара тәнле мин.
Ҡара Африкамда тыуып,
Ҡарығып үҫкәнмен,
Көнгә бешкәнмен.

Ҡара ер егенән сығып,
Көнгә ҡалҡҡанмын.
Һөттәй ап-аҡ күңелемде
Төпкә япҡанмын.

Һөттәй аҡ күңелем минән
Ерҙе һөйҙөрә.
Ер ҙә һөйөп-һыйпағанға —

Сәсем бөҙрә.

Эсемдәге ап-аҡлығым
Күҙҙән күренә:
Төндәй күҙ ҡарам лотостай
Аҡҡа төрөнгән.

Ауыр саҡта, ташып барған
Аҡлыҡ көлдөрә:
Ауыҙымда утыҙ ике
Аҡ теш мөлдөрәй...

Аҡлығымды аҡ донъяға
Көттөм туғарыу.
Ҡолаҡ ҡуйып тыңланым күк
Диңгеҙ шауҙарын.

Көттөм оҙаҡ аҡ донъяның
Тәүге илсеһен.
Ап-аҡ һутлы банандарҙы
Уға әрсенем.

Ҡалҡты кинәт күк диңгеҙҙән
Һоттәй аҡ елкән.
Йүгерҙем ярға: аҡ донъя
Миңә тип килгән!

Күк якорҙә аҡ елкәнле
Карап сайҡала.
Ап-аҡ йөҙлө аҡ ҡунаҡтар
Ярға ташлана.

“Хуш килдегеҙ, аҡ донъяның
Аҡ илселәре!
Һеҙҙе көткән аҡ күңелем
Асылыр мәле!”

Аяҡ баҫты аҡ тән ярға,
Ажарын ҡорҙо.
Аҡ тештәрем ҡойоп, ергә
Һуғып осорҙо.

Аңлай алмай, ҡарашымды
Аҡ ҡулға борҙом.
Аҡ ҡулда ал ҡаным ҡара
Янғанын күрҙем.

Йоҙроҡ ҡара, Күк көмбәҙе
Суйындай ҡара:
Йәпләштерә һуҡҡас мине,
Хахылдап тора.

Күк диңгеҙ төҫлө күҙҙәре
Йәнемде һуйҙы.
Күҙемдең ап-аҡ лотосын
Таяғы ҡойҙо...

Ятам бына яр башында
Тешһеҙ ҙә күҙһеҙ.
Ҡандарымды ялап шаулай
Зәп-зәңгәр диңгеҙ.

Диңгеҙ шауы алып килә
Йыраҡ көйҙәрҙе.
Ҡанлы ҡолаҡтан аулайым
Ғәзиз өндәрҙе.

Тоям ләкин: аһ, ғазап мәл! —
Бысаҡ ышҡыла.
Аҡ ҡул ышҡып, бер-бер артлы
Ҡолаҡ ҡырҡыла.

Һелкенә алмайым, ятам:
Кәүҙәм быҒаулы.
Хахылдап көлә аҡ тәнле...
Һәм эт сыңлауы...

Ҡолаҡтарҙы минең тағып
Китә меҫкен эт.
Ә мин ҡалам эт ҡолаҡлы —
Бына был кәмит!..

Хахылдай ҙа арҡам буйлап
Ҡамсы сыйылдай.
Эт ҡолағым менән тоям:
Дауыл яҡынлай...

Тойғор икән эт ҡолағы —
Миндә эт көнө.
Айырамын кешене һәм
Бүре, төлкөнө.

Аҡ тиреле йыртҡыстарҙы
Үтәләй күрәм:
Ҡара ағыу уртлап улар
Еремә кергән!

Дауыл яҡынлай... Мин бығау
Сынйырын тартам.
Амилькар Кабрал булып бер
Ҡалҡырға ятам.

Гвинея-Бисау илен
Бөтә ер күрер.
...Мин — көләүен, мин — Африка,
“Этҡолаҡ ниггер”...

## *14*

## *Нәүбәттәге номерҙарҙың береһе — XVI быуат уртаһы*

*“...испандар тереләй ҡулға төшкән мыҡты кәүҙәле йәш индейҙарҙың барыһының да ике ҡулын терһәктән өҙә сабып, ҡанлы сабындыҡтарын эйәләренең ҡулбаштарына баулап аҫтылар ҙа әйттеләр: “Йә, барығыҙ, был баулы хаттарҙы ҡатындарығыҙға илтегеҙ”... Испандарҙың тағы ла бер сәйер ғәҙәте бар ине — үҙҙәре ҡылған вәхшилектән улар ләззәт таптылар, ә һәр береһе йыртҡыслыҡта бер-береһенән уҙҙырырға, кеше ҡанын ҡойоуҙың яңы ысулдарын уйлап табырға тырышты. Шулай, мәҫәлән, улар ҡорбандарының аяҡ остары ергә тейер-теймәҫ торорлоҡ һәм муйындағы дар элмәге лә ахырғаса тартылмаҫлыҡ итеп ҙур, ләкин бейек булмаған дарҙар төҙөнөләр һәм шунда бер юлы, изге ҡотҡарыусыбыҙ Ғайса пәйғәмбәр һәм уның ун ике апостолы хөрмәтенә, бер юлы ун өсәр кешене аҫтылар; һуңынан шул аҫыулы, әммә һаман да тере кешеләрҙең иңендә испандар ҡылыс менән үҙҙәренең нисек йылғыр эш итә белеүҙәрен, көстәрен һынап ҡаранылар. Улар бахырҙарҙың күкрәк ситлектәрен сабып ярҙылар, эске ағзаларын тышҡа ҡойҙолар; башҡалары шундай уҡ батырлыҡтарын бүтән юл менән башҡарҙылар. Шунан һуң, язаланған, әммә һаман тере ҡорбандарына ут төрттөләр: индейҙарҙы кәүҙәләрен ҡоро һалам менән сырмап үртәнеләр — кешеләрҙе тереләй яндырҙылар. Ә берәү... ике йәштәрҙәге ике баланың боғаҙын яйлап ҡына хәнйәр менән салды, ә шунан һуң сабыйҙарҙың икеһенең тиң баштарын өҙөп, ташҡа бәрҙе... Испандар... ҡарттарҙы ла, сабыйҙарҙы ла, бала табып ятҡан ҡатындарҙы ла йәлләмәне”...* ***(Бартоломео де Лас Касас. Индейҙар тарихы.)***

Дар ағасы дерелдәйҙер,
Мин тыныс торам.
Аяҡтарым осо менән
Үләнде борам.

Бөгөләлер үлән башы
Ел бөккән яҡҡа.
Ә мин — Кеше. Бөгөлмәнем.
Иң хәтәр саҡта.

Тыуған ерем үләндәрен
Тапаған аяҡ
Ҡыяҡ остарына инде
Тейәлер саҡ-саҡ.

Йолмаҡ булып үлән һымаҡ
Минең тамырҙы,
Муйынымдан быуып испан
Ерҙән айырҙы.

Индей булып индем дарға
Мин — көр көләүен!
Дары кәре ҡайнай ҡанда —
Шуны беләмен.

Салынмай Ҡояш саҡкыһы
Ҡылыс сабыуҙан,
Ялҡын төрбәһенә төрөп
Утҡа яғыуҙан.

Мин ул сабый — өҙҙө, атты
Ташҡа башымды.
Ярылғас таш ҡап-уртаға,
Испан шашынды...

Дар ағасы дерелдәйҙер,
Мин тыныс торам.
Таш ярығы аша күреп,
Башымды борам

Киләсәккә... Таштан унда
Шәүлә һуҙылған.
Ҡара шәүлә тәнен ярып
Аҡ нур һыҙылған.

Ҡара шәүлә-ҡорттоң башы
Франко аталыр,
Икенсе шәүлә — Пиночет,
Ҡорттар балталы.

Ит сабалыр ике балта

Бер үк тумарҙа.
Икеһе тиң гүр ҡорттары
Булып тыуғандар...

Ташты яра һуҡҡан баш бит
Мин ул, көләүен!
Лас Касастың өнө менән
Өндәп көләмен!

Дарыларым таралалыр
Быуаттар уҙып.
Ҡанлы балталарҙың йөҙөн
Ҡайырып-боҙоп.

Аренаға сыға икәү
Беҙҙең аранан:
Ибаррури Долорес һәм
Луис Корвалан!

Араларында — аҡ ташҡын
Нурҙан ҡойолған.
Марти, Лорка, Альенделар
Ҡорға йыйылған.

Юлдар оҙонайған һайын,
Ташҡын киңәйә.
Минең һында һынланалыр
Башҡорт-кинәйә...

Башҡорт... дарға аҫкан дары —
Дары һаман да...
Һалам өйөп ут һалдылар
Бына табанға...

Башҡортто бахыр итмәксе,
Бахыр, ут төртөп.
Дары-башым шартлар әле,
Сәғәтем етеп!

...Башым ярған таш ярығы
Аша көн күрәм.
Мин — башҡорт, мин — дары улы,
Дарҙан ут бирәм!

## *15*

## *Нәүбәттәге номерҙарҙың береһе — XVIII быуат башы*

*“Рогервик, 1775, ноябрҙең 29-ы.*

*Юлай Аҙналин һәм Салауат Юлаев тураһында мәғлүмәтнамә.*

*Был ике яуыз бында Мәскәү Губерна канцелярияһы указы буйынса килтереп ябылған. Пугачев сволочь яуызлыҡтарында ҡатнашыусылар, сыбыртҡылап ярылғандар, танауҙары, ҡолаҡтары ҡырҡылған, маңлайҙарына ҡыҙҙырып утлы тимер баҫылған”.*

*“10 гинуар. Мәскәү, Болотная майҙаны. Приговор: бур Емельян Пугачевҡа үлем язаһы бирергә йәғни уның кәүҙәһен тереләй дүрткә тураҡлап, башын ҡаҙыҡҡа элергә, ҡалған өлөштәрен ҡаланың төрлө урындарына олаҡтырырға һәм тәгәрмәс аҫтына һалырға, ә һуңынан шул уҡ урындарында яндырырға”.* ***(Рәсәй тарихынан.)***

Мин ул урыҫ!
Мин ул башҡорт! —
Көләүене Россияның!
Көллө халҡым ҡаршыһында
Кеселекле баш эйәмен.

Янды ла ул, туңды ла ул,
Балта менән һәм сабылды.
Ә шулай ҙа көлөр саҡта
Көләүендәре табылды!

Уйын түгел көләүенгә
Бөйөкләнеп килеүҙәре.
Еңел түгел бөйөк халыҡ
Өнө менән көлөүҙәре.

Ҡурғаштың да иң ажары
Кереп тулды өн юлына.
Эсле-тышлы янған саҡта
Олпат булып ҡара ғына!..

Эсле-тышлы янған саҡта
Тыныслыҡты һаҡла ғына.
Күҙең ҡара көйгән хаҡта
Аҡлыҡты тик яҡла ғына!..

Ажар еңеп, башҡаларға
Ажарланып баҡма ғына.
Үҙ хаҡлығың — хаҡлыҡ тиеп,
Ер хаҡлығын ҡаҡма ғына!..

Уйын түгел көләүенгә
Бөйөклөктө күтәреүе.
“Көләүен”дәр — көллөһө лә
Бөйөк, тиеп үткәреүе.

(Көләүендән — клоундар
Ҡурпылаған был заманда
Хаҡ Көләүен дарылығын
Һаҡлай фәҡәт Хаҡ һаман да!)

“Көслөнөкө — донъя!” — тиһә,
Ҡыйын, ҡыйын түңкәреүе.
Аҡыл көсөн баш хаҡына
Ситкә ҡаҡмай үткәреүе.

Башты һалып айбалтаға,
Хаҡлыҡ ҡотон ҡотҡарыуы.
Үҙ хаҡлығың итеп илдең
Йөҙ хаҡлығын атҡарыуы...

Шуға күрә батшаларҙың
Тейҙем тере теңкәһенә.
Нисә быуат менеп яттым
Лобный майҙан түтәһенә!

Йондоҙланып — биш йәпләнеп,
Балта кәрен тойҙо кәүҙәм.
Балҡып яҡут йондоҙ тыуҙы
Минән ауған киçәктәрҙән...

Сабып дүрткә, дүрт тарафҡа
Атты ҡатил ҡанлы тәнде.
Белмәне тик көллө тәнем
Ылғый дары, үрт икәнде.

Баштарына башняларҙың
Ҡундым яҡут йондоҙ булып.
Түгел яҡут! Мин — дары-ут!
Шартлармын бер кәрем тулып!..

Дүрт ҡибланың дүрт мөйөшөн
Атып бәрер дары кәүҙәм...
Көләүендәр дарыланып
Күтәрелер ул тетрәүҙән!..

...Тиң иткәне өсөн мине

Урыҫ менән тиң янырға;
Эсле-тышлы янғанда ла
Көләүен булып ҡалырға;

Көләүендәрен донъяның
Бер туған итеп танырға;
Ҡоллоҡ артыҡ һаналғанда
Артмай, көләүен ҡалырға

Тыуҙырғаны өсөн мине,
Баш эйәмен Россияға.
Минең һымаҡ булып тыуһын
Көләүендәр был донъяға!..

## *16*

## *Нәүбәттәге номерҙарҙың береһе — XVIII быуат башы*

*"...төп ҡараҡ һәм бунт башлыҡтары булған башҡорттарҙың бөтәһен дә рәхимһеҙ рәүештә язалап үлтерергә; ғәйептәре ҙур булмаған ҡалғандарының хеҙмәткә яраҡлыларын көнсығышты яулау полктарына тәғәйенләргә, ә утыҙ йәштән олораҡтарын Рогервикка ауыр эшкә һөрөргә. Уларҙың ҡатындарын һәм еткән ҡыҙ балаларын Ҡазан татарҙарына һәм башҡа яҡ татарҙарына һәм ғәйре динлеләргә кейәүгә бирергә, уларынан һәр ҡатын һәм ҡыҙ өсөн драгунга яраҡлы ат йәки аҡсалата ун һигеҙ тәңкә алырға, ул ҡатын һәм ҡыҙҙарҙы татарҙарҙан һәм ғәйре динлеләрҙән башҡа бер кемгә лә, бер сәбәп менән дә бирмәҫкә, сөнки императрица ғалиә йәнәбәләренең бөйөк мәнфәғәте шулай бойора... Уларҙың ҡалған сабый балаларын Рәсәйҙең алыҫ ҡалаларында маңҡортлаштырыу өсөн, теләгән берәүгә таратып бирергә, һәм ул ҡараҡтарҙан тороп ҡалмыш мөлкәтте һәм мал-тыуарҙы иҫәпкә алып, һатып, аҡсаһын императрица ғалиә йәнәбәләренең ҡаҙнаһына һалырға... Генерал-лейтенант Урусов беҙҙәргә, ҡараҡлығы ҙур булмаған һәм егерме йәштән уҙған башҡорттарҙың танауҙарын ҡырҡып, сыбыртҡы менән ярып, ҡатындары һәм балалары менән ҡуша үҙебеҙгә итәғәтле старшиналарҙың күҙәтеүе аҫтында торорға кәрәктер, тиһә лә, мин уны, генерал-лейтенантты, түбәндәгегә инандырҙым: әйтелгән ҡараҡтар Башҡортостанда ҡалһа, уғата бунт һәм ҡараҡлыҡ ҡыласаҡтар, шуға күрә уларҙың тамырын тамам ҡоротторға кәрәк"...* ***(Генерал-майор Л. Соймонов хәбәрнамәһенән.)***

*"1740 йылдың яҙ башынан алып 24 сентябренә тиклем:*

*1702 башҡорт дөмөктөрөлгән;*
*ҡулға төшкәндәренән 432 кеше язалап үлтерелгән;*
*1862 кеше әсир алынған һәм ҡоллоҡҡа оҙатылған;*
*135 кеше көнсығышты яулау полктарына һәм флотҡа тәғәйенләнгән;*
*796 кеше, танауын ҡырҡып һәм сыбыртҡы менән ярып, ҡатындары, бала-сағалары менән ҡуша итәғәтле старшина Бирҙеголдоң күҙәтеүе аҫтына тапшырылған.*
*Бөтәһе 4927.*

*Тартып алынған: 39 дөйә, 1987 йылҡы малы, 1060 еткән ҡыҙ (мишәрҙәргә һәм итәғәтле башҡорттарға ҡатынлыҡҡа бирелгән), — бөтәһе 3086; 2903 һыйыр малы, 2110 һарыҡ, — өҫтәгеләрен дә бергә ҡушҡас, бөтәһе 8099. Йәнә 8 дөйә, 841 ат, 196 һыйыр казактарға хеҙмәт хаҡына бирелгән...*

*Ошо 1737 — 1740 йылдар араһында башҡорттарҙан:*
*18134 кеше үлтерелгән, 3236 кеше әсир алынған һәм Рогервикка ауыр эшкә оҙатылған, 5983 кеше урыҫ алпауыттарына ҡоллоҡҡа һатылған, байтаҡ кешенең ҡолаҡтарын, танауҙарын ҡырҡҡандар. Дөйөм юғалтыу 28190 кеше тәшкил иткән"...* ***(Рәсәй тарихынан.)***

*"...башҡорттарҙан теләһә ниндәй сит ил дошмандарына ҡарағанда ла нығыраҡ һаҡланырға... улар халҡы шул тиклем дә ҡатылыҡ һәм уҫаллыҡ менән һуғарылған, ә үҙҙәре әленән-әле һаман туҡтауһыҙ үрсей ҙә үҫә... Шуныһы ҡурҡыныслы: хәҙер инде яһаҡтан ҡасып китмеш* ***бик күп урыҫ кешеләре лә*** *үҙҙәрен* ***башҡорт итеп*** *иғлан иттеләр... Гәрсә хәҙерге башҡорт халҡын йыуашайған һымаҡ күрһәк тә, ләкин уларҙы тулыһынса буйһондоролған тип тә әйтеп булмай әле; ошо көнгәсә, бер ниндәй ҙә указдарға ҡарамай,* ***Россиянан ҡасып китмеш кешеләрҙе үҙҙәренә ҡабул ҡылалар...*** *Сит илдәр менән һуғышмаған, ҡулдарыбыҙ буш булған бер арала был халыҡтың һанын берәй сәйәси ысул менән яртылашҡа кәметһәк, ә ҡалғандарына тәүҙә улар күтәрә алмаҫлыҡ яһаҡ һалып, һуңынан ул яһаҡты бер туҡтауһыҙ арттыра барһаҡ, бик тә шәп булыр ине... Был Хоҙайға дошман халыҡты Хоҙай Тәғәлә ярҙамында боғаҙынан бөрөп алғас, бара-тора уларҙы шундай хәлгә килтереп еткерергә лә булыр ине: унда йәшәгән мәлгүндәрҙең береһе лә, үлем язаһы ҡурҡынысы аҫтында, үҙҙәрендә бер генә лә мылтыҡ әҫәре тотмаһын һәм ситтән бер кем дә, шул уҡ үлем язаһы ҡурҡынысы аҫтында, уларға бер ниндәй ҙә мылтыҡ һәм дары алып килмәһен"...* ***(Рәсәй империяһында башҡорт мәсьәләһен иң шәп хәл ҡылыу ысулдары тураһында Ҡазан губернаторы А.П. Волынский төҙөгән хитапнамәнән.)***

Башҡортмон шул,
Бына башҡортмон —
Башҡорт ере тапҡан көләүен!
Ҡарайым да тыуған еремә,
Ҡанлы йәштәр менән көләмен...

Иламайым, эйе, көләмен!
Көләүенгә илау тиң түгел!
Был донъяның барлыҡ күҙ йәшен
Һыйҙырырлыҡ минең киң күңел.

Был донъяның барлыҡ нәфрәтен
Урғылтырлыҡ минең ут күңел.
Был донъяның һөйөү ләззәтен
Сорғолторлоҡ минең шат күңел.

Көләүендәр ерҙә уҙғанды
Берәм-берәм уҙҙым бер үҙем.
Көләүендәр бер ҡат түҙгәнде

Бергә алып, мең ҡат мин түҙҙем.

Ситләмәне мине ут һәм һыу,
Ситләмәне мине баш ҡырҡыу.
Барыһын да барлап үткәнгә,
Бөгөн ерҙә мин ир -- башҡортмон!

Күҙем булды бик йыш бәйләүле,
Өнөм булды бик йыш тығыулы.
Әммә бәй һәм тығын аша ла
Донъя менән булдым бер юллы!

Тамаҡтарға ҡурғаш ҡойолоп,
Балтырҙарҙы бығау көрмәне.
Әммә ҡурғаш, бығау аша ла
Һөрлөгөүгә ирек бирмәнем.

Танауымды ҡыҫып ҡыпҫыуыр,
Беләктәрҙе упты йот сынйыр,
Әммә ҡыҫҡыс, сынйыр аша ла
Дуҫтарыма етә алдым йор.

Көләүенлек рухын илдәрҙең
Йөрәк дарыһынан таныным.
Үҙ дарымды биреп уларға,
Улар дарыһынан байыным.

Көләүенлек заты бер, тиеп,
Хаҡиҡәткә килдем был ерҙә.
Әҙер инем бөтә Рәсәйҙең
Көләүене булып үлергә!

Әҙер инем бөтә Ватандың
Көләүене булып тыуырға:
Ун етенсе йылда Питерҙа
Таж-тәхетте йәнсей һуғырға!

Шул юлымда башҡорт ҡалдым мин,
Затым — дары, үҙем — көләүен!
Салауат һәм Пугач затында
Бөтөнәйеп, йәшәп киләмен.

“Аҡ батша”лар заты Соймонов —
Ҡалды ул да йәшәп килергә...
Төрлө төҫкә кереп елергә,
Йөрәгемде минең телергә...

Салауат һәм Пугач затында
Рәсәй көләүене — мин торам.
Килер циркта отоу хаҡына,
Елер циркта уйнап отторам;
Ҡатилдарҙан башым ҡырҡтырам,
Ҡолаҡ-танауымды йолҡторам...

## *17*

Тарих циркындағы циркачмын шул –
Көлөп терелтеүсе көләүен!
Ер шарының ҡотло йоморҡкаһын
Ҡалағымда алып килмен!

Табанымда гөртләй Ер дарыһы —
Йәҙрә кәрен иңгә туғара.
Даулы һыным һынлап һынмаҫтарҙы,
Аренаға дары сығара!

Барабандар “дөм-дөм”... --
“Дөп-дөп” итеп
Һуға инде әллә йөрәгем?!.
Илем биналаған йорт нигеҙен
Ҡыуаныска килә төрәһем!

“Дөп-дөп” ҡаға
Дары дөргән балға
Сыуайҙарҙы ергә батырып.
Йөрәк-балғам дарым кәрен ялғап,
Үҙем сыуай ҡағам, ахыры!..

Ниргәләрен һалыр ике ҡулым,
Асамайын ҡуша ҡаушарыр.
Аҡ сыуайлы ниргә һәм асамай
Күк ҡабағын ергә аушарыр!

...Шәжәрәләр “сыуай”, “асамай”ҙы
Бер “асабай”-һүҙҙән сығара.
Шунан килә “самый”, “особый” һәм
“Сама”, “аҫаба”, тип туғара...

Тимәк, урыҫ менән аҫабалар
Бер тамырҙан тыуып-тарынған.
Шуға Пугачев һәм Юлаевтар

Яурын терәп барған яурынға!

Һәм замана “самай”-асамайын
Үҙ һындары аша беркетеп,
Ете быуын сыуай, ниргәләрҙе
Торғоҙғандар дары-йорт итеп:

**Е**
**в м**
**е е**
**а л**
**л ь**
**Ю я**
**н**
**т П**
**а у**
**у г**
**а а**
**л ч**
**а е**
**С в**
**Сәйетйәғәфәр Разин**
**Алдар Болотников**
**Килмәк Булавин**
**Күсем Сусанин**
**Аҡай Кудеяр**
**Баҫман Коловрат**
* *
* *
* *
* *
* *
* *
* *

Беҙҙең йорт был! Бына күрәһегеҙ —
Ергә батҡан ете быуыны.
Ете быуын-сыуай сикәһендә —
Ниргә, асамайҙар булымы...

Бер ҡараһаң — йорт ул йор ҡыйыҡлы,
Бер ҡараһаң — осло ракета!
Дарылары барлыҡ быуындарҙың
Унда дөрләй! Күкте көргөтә!..

Туғанлыҡтың ошо дәү ҡорона

Ҡулын һуҙып дошман ҡараһын!
Сәсрәгәнсе татыр ул бер юлы
Быуаттарҙың ҡөҙрәт-дарыһын.

Азатлыҡтың бөйөк милләттәре
Яуҙа — яуҙаш, йортташ еңеүҙә.
Шул берлекте мәңге беркетергә
Сыуай булһын йәнем минең дә!

Фиҙалыҡ бит бирә Ер тойғоһон —
Туған миңә бөтөн кешелек!
Планетамдың дөрләр дарылары
Күңелемә керә ишелеп...

## *18*

Фанфарҙарҙың баҡыр боғаҙҙары,
Моңһоулыҡты ярып тулатты.
Күҙем асһам, донъям сумған нурға —
Аренабыҙ йәнә яп-яҡты.

Тимерйән бит — уйын көләүене —
Осмаҡ булып Айға маташа.
Ракетаның төбөн дары менән,
Эй, тынҡыслай, бына тамаша!

Көргөүесен айҡап көргөгәндә,
Һуғып йыға һабы күптәрҙе...
Тәкмәс атҡан көләс көләүендәр
Көндө нурға мансып күтәрҙе!

Эй, көләбеҙ ҡарап көләүенде,
Бармаҡ төртөп көлә ул беҙҙән.
Карабына инеп бикләнә һәм
Тәҙрәһенән ҡулын шуҡ иҙәй.

Арбап һүнә төндө люстралар,
Тәрән тынлыҡ ергә тоташа.
Байҡанырҙың[19] утлы сәғәтеләй,
Секунд һанап йөрәк маташа...

Бына, бына, карап моронона
Морон һуҙып көлөр Тимерйән.

[19] Байҡаныр – космодром урынлашҡан ер (Ҡаҙағстанда).

Ни күрәбеҙ: уйын ракетаһы
Ут ләүкетә! Тамам тилергән!..

Килтерегеҙ йылғыр пожарникты,
Һемәктән һыу һибеп һүндерһен!
Тик күрәбеҙ: төптә ҡаты шартлау
Һәм һауаға оса Тимерең!

Тар көмбәҙҙә көлгән тулы Айға
Ракетаһы барып ултыра.
Тимерйәнде ҡотлап ил ҡул саба,
Дары ыҫы залды тултыра...

Көр көлөүе үрҙән көләүендең
Һәм Көн булып ергә төшөүе
Ҡапҡа аса яңы номерҙарға!
Дөрләй цирк – дары көшөлө!..

*19*

## Аренала — айыуҙар

**I**

Цирк ҡарап кинәнә
Йөҙ йәшәгән инәйем.
Уның әйткән һүҙҙәрен
Кинәнеп мин һөйләйем:

"Абау-абау, был ни эш,
Тағы ниндәй күренеш?
Аҡҡош булып айыуҙар
Бейеп йөрөһөн имеш!..

Айыуын да күп күрҙем,
Бүреһен дә күп күрҙем,
Үҙем айыу ауларҙай
Уландар ҙа үҫтерҙем;

Айыу менән алышып
Үҙе күргән инәң был;
Ауыҙының салышын
Үҙе бөргән инәң был;

Тереләтә айыуҙы
Алып ҡайтҡан инәң был;
Төрөлдәтеп төрбәгә
Илтеп япҡан инәң был;

Айыу аңын арбатып,
Ҡурай тартҡан инәң был;
Аҙаҡ айыу бейетеп
Йөрөп ятҡан инәң был.

Ә шулай ҙа күрмәнем
Быың ише кәмитте:
Аҡкош булып бейергә
Айыуға ла көн етте!"

Дөрөҫ, инәй, бик дөрөҫ,
Мин дә тәүгә күрәмен!
Аҡкошланып талпына
Айыуҙары Бөрйәндең!

Йөҙ йәшәгән инәйем
Бер аҙ уйлап алды ла:
"Әкиәттәр һөйләүе
Ҡыйын хәҙер донъяла..."

"Ниңә, ниңә, инәйем?
Әкиәттә бар хикмәт!"
"Кеше — үҙе әкиәт,
Кеше — үҙе ҙур хикмәт!..

...Әкиәт түгел, өнөмдә
Күрҙем Аҡъял батырҙы.
Ер аҫтарын аҡтарып,
Ҡара алтын арттырҙы!..

Һәүбән, байҡап һыу аҫтын,
Диңгеҙ малын ҡайтарҙы.
Бөгөн беҙҙең табында —
Ете диңгеҙ аштары!..

Хатта Зөһрә-ҡыҙҙы ла
Барып алдыҡ беҙ Айҙан!
Кеше булған кешегә
Илем асты киң майҙан.

Ерҙә көткән көнөбөҙ —

Үҙе оло хазина.
Дуҫлыҡ тигән табыштан
Йөҙҙәргә нур яҙыла!

Урыҫ, башҡорт, йә сыуаш
Ҡыймай бөгөн бер-берен.
Барынан да бағыулы
Беҙҙә кеше ғүмере.

Кеше, көндәй көләреп,
Үҙе әкиәт булған да!
Ҡыйын, ҡыйын әкиәт
Һөйләүе был заманда!..”

“Ниңә, ниңә, инәйем?!
Һөйлә, һөйлә әкиәт!”
“Әкиәттән ҡалған, тим,
Айыуғолаҡ-әкәмәт...”

“Кем ул?” — тигәс, инәйем
Төшөндөрҙө ҡыҫҡаса:
“Айыуғолаҡ” әкиәтен
Һөйләй ине ҡоҙаса...

...Бер бабайҙың әбейе,
Солоҡ соҡоп йөрөгәндә,
Тәрән өңгә батҡан, ти,
(Бында түгел — Бөрйәндә!)

Тотоп алған әбейҙе
Өңөндәге ҡарт айыу.
Бисәлеккә ҡалған, ти,
Әбей — булған бик ҡыйыу...

Улы тыуғас айыуҙан
Бик ҙур айыуғолаҡлы,
Ай үҫәһен көн үҫеп,
Егет булған ул затлы.

Айыу өңөн тарһынып,
Көнгә егет тартылғас,
Һөйләп биргән әсәһе
Донъя, халыҡ хаҡында.

Айыуғолаҡ кешелек
Хисен тойоп нурланған.

Алып сыҡҡан әсәһен
Өңдән, ҡара урмандан...

Бар тик айыуғолаҡтар –
Бәндәлеген белмәгән!
Кеше булып тыуһа ла,
Айыу өңөн өнәгән...

Кеше йәнле кеше, тим,
Өңдә ятып сыҙармы!
Цирктағы айыуҙар
Һалды ғәжәп уйҙарҙы!

Әллә, тимен, улар ҙа —
Кеше-айыуғолаҡмы?
Тышы йөнтәҫ булһа ла,
Эсе нурлы, күңелаҡмы?..

Сөнки борон-борондан
Айыуҙарҙы күп күрҙем,
Әммә быңдай бейеүҙең
Күргәнем юҡ төхөрөн”...

Эй инәйем, инәйем,
Кинәнесле инәйем,
Әйткән тапҡыр һүҙеңә
Нимә генә тиәйем?!

Чайковский балетын
Бейей беҙҙең шат ҡыҙҙар.
Улар ғына етмәһә —
Бөрйәндәге айыуҙар!

Рәхмәт һеҙгә, тайыштар,
(Ҡыйын “тайыш” тиеүе!..)
Матур икән, бик матур
Йәш аҡҡоштар бейеүе!

Һеҙҙең килеп бейеүҙе
Көтә, тиҙәр, париждар.
Бөрйән балын бөркөтөп
Ҡайтыр әле тайыштар!

Кеше түгел, айыу ҙа
Йөрөп бөгөн данлана.
Табан имеп ятыуҙы

Һөймәй беҙҙең замана!

Ә бар бәғзе бәндәләр
(Бармаҡ төртөп әйтмәйем),
Сыға алмай өңөнән,
Имеп ята тәпәйен.

Ала ләкин умырып
Илдең бөлеш телемен.
“Халҡым өсөн хеҙмәт!” — тип
Даулай тәпәй имеүен.

Үҙ күлдәге — иңендә,
Өңө — күлдәк тышында.
Уның өсөн бар донъя —
Ҡорһағының эсендә.

Шулай ҙа ул: “Илем!” — тир,
“Беләһеңме, кем мин?!” — тир.
Айыуғолаҡ-шаҡшыны
Таныу ситен, ситендер...

Тыҡрыҡ һайын тертәңдәп
Йөрөп ятыр ил һәрмәп.
Айыуғолаҡ тимәҫһең,
Трибунанан өн бәрһә!

Айыуғолаҡ уфтаныр,
Планетаны ҡайғыртып.
Тар өңөн тик биләүләр,
Йоҡлар өңөн шаңғыртып...

## II

Был донъя бик ҡыҙыҡ, сәйер нәмә:
Бар хакимы уның, бар хамы.
Айыу тынын өрөп, тәпәй һурып
Һамҫып ята быуат тарханы.

Өңө икән имен — донъя бөтөн,
Хет аҡылдан илдәр яҙһындар!..
Терәр өсөн артын, тик ҡабартып
Өң төбөнә ырғыт ҡаҙмендәр...

Кәрәк түгел уға ил дарыһы,

Быуындарҙың даулы көрәше.
Килер көндөң майлы ҡалъяларын
Күңелендә алған өләшеп...

Күрәгәнән оло туҫтаҡ йолор
Һәм мыйығын борор — "уҙаман"!..
"Ҡымыҙ, ҡаҙ һәм ҡыҙ!" — тип, мәсьәләне
Глобалләп ҡуйыр "бик таман".

Тархан мәгәр сәйәсәттән хәбәр —
Елдең тоя ҡалай иҫкәнен!
Үрмәләһә өңө ауыҙынан,
Ҡарпыштарын ҡаплай һиҫкәнеп.

Кейә галстуклы аҡ яғаһын,
Аҡ манжетка еңен ҡайыулай.
Ал флажок болғап баш осонда,
Заман таҡмағында аҙымлай...

Ил хәстәрен күргән уҙамандай,
Тар маңлайын һырлап ебәрә.
Йөрөһә лә ыҫлап ил майҙанын,
"Бәйнелмиләл"[20] йырлап ебәрә...

Ҡулға хатта ҡыҙыл кирбес ала,
Илтеп һала күркәм нигеҙгә.
"Массаларҙың ярһыу ярышында —
Йөрәгем!" — тип өндәү нигеҙләй...

Әммә тархан — төптән ҡала тар-хам,
Алдан йөрөй шәхси файҙаһы.
Уның өсөн фәҡәт һыйлы табаҡ
Ил күкрәткән төҙөү майҙаны.

Дөп-дөп ҡаҡҡан сыуай балғалары
Бифштекс туҡмай тарханға.
Төшөм көҫәй кеше кеҫәһенән,
Байраҡ сөйөп сафта барғанда...

Өлгөр өйә йылғыр шиғарын ул:
"Минең яҙмыш — илем яҙмышы!"
Күҙе менән шаҡып һәр сикәне,
Ҡарбуз һымаҡ һайлай таныштты.

[20] "Бәйнелмиләл" — Коммунистар партияһының гимны "Интернационал".

Баллы баҙ һәм келәт мөдирҙәрен
Ятлап ала ҡырын иҫәпкә.
Артҡы ишек юлы маһирҙарын
Өйөрә ул бәҫле бер сәпкә.

Ҡолаҡ ялап, әйтә йәнен майлап:
“Халҡым өсөн фиҙа беҙ, терәк!
Батырҙың да ләкин бар тамағы —
Тити-мити, бал, май, ит кәрәк!..”

Иртәгәһен “батыр” йөрөп ятыр
“Жигули”ын ҡыуып елтүбән.
Артҡы ишектәрҙән инеп сығыр,
Сумка аҫып, бөгөлөп мөкиббән.

“Бәйнелмиләл” һуҙған көйө менән
Рәхмәт һуҙып асыр муҡсаһын.
“Илем!” тип түш төйгән ҡулы менән
Төрөп тығыр тауыҡ, сусҡаһын.

Ҡуйынына һаумал ҡымыҙ йомор,
Кеҫәһенә — һары апельсин.
Универмаг артҡы ҡапҡаһынан
“Дефицит”ты һөйрәр “ил өсөн”...

Ҡайтып керер ҡырын һуҡмағынан:
“Бисәкәй, — тир, — мә, йыйғ тиҙерәк!
Халҡым улы булған өсөн миңә
Тити-мити, бал, май, ит кәрәк!..”

Был донъя бик ҡыҙыҡ, сәйер нәмә:
Бар хакимы уның, бар хамы.
Көнөн күреп, йөрөй тынын өрөп
Егерменсе быуат тарханы.

Миллиондар бөйөк ватанымдың
Көрәш юлын үҙенә иш иткән.
Ә был бәндә хатта бәҙрәфенә
Керә, тиҙәр, артҡы ишектән!..

Егерменсе быуат небоскребын
Өң яһаған айыу үҙенә.
Ләкин модный нейлон яғаһынан
Ҡарпыш ҡолағы ныҡ күренә...

## III

Айыуғолаҡ, заманса,
Небоскребын төтәтә.
Ил бәлешен умырып,
Үҙ ҡорһағын бөтәйтә.

Телевизор һәм сервант,
Бүлмә һайын гарнитур.
Электр — көй, кер йыуыр,
Тешкә тиклем таҙартыр.

Шүрлектәрҙә китаптар —
Ленин, Маркс томдары.
Ләкин үҙе был өңдән
Ҡарай алмаҫ юғары.

“Халҡыма нур-йондоҙ!” — тип,
Һәрмәр өңө һөрөмөн.
“Илем өсөн диңгеҙ!” — тип,
Лайға төртөр моронон...

Кешем — алғыр аҙымын
Айға баҫҡан заманда
Айыуғолаҡ өң төбөн
Ыҫлап ятыр һаман да.

Өңөн уҙып өнәмәҫ
Донъяларҙың киңлеген.
Күк ҡабағы иҫәпләр
Үҙ өңөнөң төндөгөн...

Шунан уҙып ни килһен
Уның зәғиф аңына?..
Сәхрәләй киң Ватанда
Ул тар өңөн һағына.

Ватан өсөн ҡалҡандай
Ҡуйыр саҡта күкрәген,
Айыуғолаҡ көй көйләр:
“Эй өңкәйем, бергенәһең!..”

Планета моңона
Борғанда ил йөрәген,
Айыуғолаҡ һаман шул:
“Эй өңкәйем, һингенәһең!..”

Набат сыңлап Сонгмиҙа,
Бөтә донъя тетрәнер,
Айыуғолаҡ бер көйгә:
“Эй өңкәйем, һин генә бер!..”

Хунта һуҡҡас Чилиға,
Биртенер Ер билкәйе,
Айыуғолаҡ бер көйгә:
“Эй өңкәйем, өңкәйем!..”

Битен сирткән себендә
Күрәлер төп яуызды.
Уның өсөн Арена —
Түңәрәк өң ауыҙы...

Өң убаһы аша ул
Тоймаç донъя офоғон.
Үҙ күлдәген, үҙ өңөн
Көçәп йөрөп буçлығыр.

Һәм ундай йән йәшәүе —
Әкиәткә лә тиң түгел.
(Айыуғолаҡ-айыу ҙа
Ташлап киткән өң төбөн!..)

Ул йәндең һәр номеры —
Үткән этап, үле сәм.
(Хатта тайыш табандар
Бейейҙәр бит бөгөнсә!)

Оло донъя ҡайғыһы —
Уның ҡайғыһы түгел.
Уға кәрәк “дефицит” —
Затлы келәм һәм мебель.

Ундайҙарға бөтөн Ер —
Өңөнөң тар һуҡмағы.
Ҡылған ҡылыҡ артында —
Ҡарпыш айыу ҡолағы...

***20***

## Аренала — башҡорт аттары

## I

Тәнәйҙәрем, апай, ағайҙарым,
Илайыммы, әллә көләйем?!
Күрегеҙсе, цирк сихырынан
Инәм йөҙө ниндәй мөләйем!

Онотҡан ул ауыр үткәндәрен,
Ата-баба йөгө — ҡайғыһын.
Ҡараған да ҡатҡан аренаға,
Йәне-тәне һөйөп тай шуғын.

Эйе, тайҙар. Ҡолон түгел, тайҙар! —
Ҡалҡҡан икән буйға һәр ҡолон.
Аренаны нурлап, сыҡҡан һөйрәп
Ергә еткән ялын, ҡойроғон.

Тыпыр-тыпыр суйыр тояҡтары
Осҡонлата уйын майҙанын.
Дары циркы! Былдай ял-яурынлы
Дарыларҙы ҡайҙан һайланың?!

Ҡолаҡтары — киршәү ҡорос ҡайсы,
Морондары өрә ут ҡына.
Һарымһаҡтай аҙау тештәренән
Кешнәгәндә ялҡын йолҡона.

Күкрәктәре — Урал ҡаялары,
Арҡалары — арал-һырт кеүек.
Күҙҙәренең баҡыр ҡыҙылынан
Бүреләрең боҫор ҡорт кеүек.

Ат солтаны Солтангәрәйевкә
Арғымаҡтар ипле һырт биргән.
Аҡбуҙаттың туры тоҡомдарын
Әллә инде табып килтергән?!

Һуҙылып-һуҙылып саба турыҡайҙар —
Тере ялҡын, ялҡын майҙанда!
Ялҡын-ялдар дөрләй, дөрләй, дөрләй
Түп-түңәрәк ҡулса-ҡаҙанда.

Дары циркы! Буйсан байталдарҙы
Ҡайҙан табып, алып ҡайттығыҙ?
Шүлгәндәрҙән сабып килде микән
Аренаға ярһыу атығыҙ?!

## II

Яуап бирә шаңдап аренаның
Түп-түңәрәк төбө, көмбәҙе:
“Быуаттарҙың тәрән төпкөлөнән
Быуын-быуын сабып киләбеҙ!

Менде беҙҙе үҙе Урал батыр!
Мүйтән, Майҡы, Сура, Баҫмандар...
Сәйет, Алдар, Аҡай, Алғушайҙар,
Миңлебаев, Кинйә, Салауаттар,
Муса, Сөләймән һәм башҡалар...

Күп инек беҙ юлда, бик күп инек —
Ут тояҡлы дары заттары.
Ҡылыс берсә һыбай башын ҡыйһа,
Берсә ҡырҡты беҙҙең баштарҙы...

Ҡырҡылһаҡ та, ҡороп ҡырылманыҡ —
Үҫте менеп беҙҙе батырҙар!
Беҙҙең менән киткән Салауаттар —
Муса батыр булып ҡайтырҙар!..

Елдек оҙаҡ йөкмәп ил улдарын —
Оҙон булды уҙыр аралар.
Ошоғаса Зәки һәм Әмирҙәр,
Хажиәхмәттәр һәм Әүхәҙиҙәр
Беҙҙе менгән килеш баралар...
Һулҡый-һулҡый ҡанлы яралар...

Эй елдек беҙ, елдек, беҙ елдек,
Берсә еңдек, берсә еңелдек.
Дауҙа тулап, яуҙа ҡолонлап,
Дарылыҡты һаҡлап беҙ килдек!

Бәйгеләрҙә бейеү бәхете
Иш булһа ла, беҙгә аҙ булды.
Дағалары утлы тояҡтың
Ылғый дарыларға ҡағылды...

Етер өсөн ошо бәйгегә,
Хәтәр юлда хәтһеҙ йонсоноҡ.
Йота алмай сынйыр сыңлауын,
Күптәребеҙ ҡалды тонсоғоп...

Тыуғас ҡына ҡыҙыл-һыбайлы,
Һалды беҙгә хөрлөк эйәрен.
Ҡыҙыл йондоҙ таҡҡан шлемы
Барҙы ярып заман елдәрен.

Октябрь, тип заман атаны
Өҙгән көнөн сынйыр-ҡоршауҙы.
Бында бөгөн килеп еттек беҙ,
Сабып үтеп Питер, Варшауҙы...

Бында килеп етеү юлының
Ауырлығын тик беҙ беләбеҙ.
Планетаның дары циркында
Башҡорт дарыһы — беҙ еләбеҙ!

Беҙҙең артта — йылдар, быуаттар,
Янған ауыл, ауған ҡалалар.
Порт-Артур һәм Париж, Берлиндар,
Беҙ һыулаған диңгеҙ, йылғалар...

Беҙҙең алда — йылдар, быуаттар,
Ҡалҡыр ауыл, торор ҡалалар.
Тояҡтарҙан беҙҙең ҡубынып
Тороп ҡала ҡотло дағалар!

Иңдә беҙҙең — һомғол һыбайлы,
Дары циркында ул сыныҡҡан.
Атлы халҡы булып ҡитғаның,
Аренаға дөрөп ил сыҡҡан!

Уралының алмас ҡылысын
Ҡылды яра ҡырҡып уйнатҡан...
Тояҡтарҙың сәсрәү дарыһы
Донъяларға балҡый йыраҡтан!..”

Аға, аға һыуҙай был заман!
Саба, саба аттар йән-фарман!
Урыҫ биргән һыныҡ ҡылысын
Айҡап үтә Муса[21] ҡаһарман...

Үтә, үтә, үтә Уралдан

---

[21] Муса Мортазин. Ул 1920 йылда Сөләймән Мырҙабулатов етәкселегендәге башҡорт ихтилалын ба¤тырыуҙа әүҙем ҡатнашып, хәҙерге Усалы районындағы бер һуғышта, үҙе үк яҙыуынса, урыҫ хөкүмәте бүләк иткән көмөш һаплы ҡылысы менән туғыҙ башҡорттоң башын сабып ауҙара, ләкин һуңғыһын сапҡанында ҡылысы төбөнән һына.

Саҡма тояҡ аттар теҙелеп.
Елеп үтә егет... Ҡыҙҙарҙың
Үҙәктәре ҡала өҙөлөп...

Һыу алырға төшкән икән ҡыҙ,
Сыңғыр-сыңғыр сеңләй сиһләге...
Их егетем! Ҡала өҙөлмәй
Тулып бешкән ҡурай еләге!..

Толпар үтә, тала көйәнтә...
Егет китә, ҡала һөйәркә...
...Аренала — беҙҙең һылыуҙар! —
Яңы номер йәнде көйрәтә...

### *21*

## Аренала — башҡорт ҡыҙҙары

### I

Сыңғыр-сыңғыр сиһләк йырҙары,
Семәрләнеп тора һырҙары.
Йырлай-йырлай һыуға баралар —
Һылыу ҙа һуң илем ҡыҙҙары!

Көйәнтәләр гөллө-алмалы —
Иңгә генә ипләп һалмалы.
Ваҡ-ваҡ баҫып һыуҙан ҡайталар —
Ситектәре сәмсә-ҡаймалы.

Мөлдөр-мөлдөр мөлкөй һыуҙары,
Нурланалыр йылға буйҙары.
Кемдә генә икән уйҙары,
Көҙгә генә микән туйҙары?..

Һығыла-һығыла һырлы көйәнтә,
Һарыла, һарыла һомғол һөйәркә:
— Һыуҡайындан ауыҙ иттер, — тип
Сығып баҫҡан юлға, кейәнкә...

— Егет, егет, ебәр, бирмәйем!
Көтә өйҙә һиҙгер инәйем.
Һыуһаһаң бик, һыуға төшә тор —

Һыуҡайымды илтеп киләйем!

Юҡ, ебәрмәй егет, ебәрмәй...
— Ҡуйсы, егет, атам бик әрләй!
— Әрләгәндәр — китһен әрләнгә!
Һин ҡал бында! — тиеп битәрләй...

— Юҡ, ҡалмайым, ҡала алмайым —
Ҡарап тора ана ағайым.
— Ағайыңдың күҙе ҡылыйҙыр —
Тик бер генә уртлап алайым!

— Уртлаһаң бер, унда ни ҡала...
Ҡарттай етеп килә бит ана!
— Ҡарттайыңдың аты аҡһаған!
— Һыу бөткәнме әллә донъяла...

— Һыу бөтмәгән, йәней, донъяла,
Һинең силәк кенә йән һала.
— Ана килә ҡустым ҡысҡырып,
Абау-абау, йөҙөм ояла...

— Килеп етһә ҡустың ҡысҡырып,
Кәнфит китер тешкә ҡыҫтырып.
— Кескәй һеңлем күрһә нимә тир?..
— Тымыҙырбыҙ хушбуй тоттороп!

— Бүҫкә ҡайтһа һыуҙан силәгем,
Күтәрәлмәм ғәрҙең күмәген:
Атай, инәй, ағай һәм ҡусты,
Һеңле күҙгә ҡарай күрмәһен...
Ҡарттай темеҫкенеп йөрөмәһен...

— Атайыңа эйәр һәм ҡамсы
Бүләк булыр күҙгә баҡҡансы.
Инәйеңә — яулыҡ һәм камзул,
Ағайыңа — дуҫлыҡ һонған ҡул!

Ҡыҙыл һаплы бәке — ҡустыңа,
Еҫле һабын — һеңлең усына
Һәм намаҙлыҡ — ҡарттаң теҙенә!
Күҙҙәренең яуы алынһа,
Күҙ һалмаҫтар силәк эсенә!

— Абау-абау, егет, кит инде...
Силәгем бик бейек бит инде.

— Бейеклек тиң миндәй бейеккә!
— Йәнем... янам... етте, етте инде!..

Ирен менән ирен игелә,
Силәктәр сайпыла, түгелә...
...Йөҙ йәшәгән ғәзиз инәйем
Бер илай ҙа үҙе, бер көлә...

Инәй, инәй, ниңә илайһың?
Йәшлегеңде әллә уйлайһың?
Матур үткән һеҙҙең йәш ғүмер —
Күреп шуны туя алмайһың?!

Аҡкан тормош шундай тәбиғи...
ФТР[22]-һыҙ, шауһыҙ тирмә-өй...
Көйәнтәләп һыуға йөрөгәс,
Ҡыҙҙар ифрат һомғол булған, ти.

Һыуҙары ла татлы бик, бик, ти...
Аңҡымаған хлор, нефть, ти...
Аҡ тирмәлә ирҙәр йыр көйләп,
Ғүмер һөргән ҡымыҙ эсеп, ти...

Танһыҡ булып китте шулары,
Шарт-шорт килгән ошо заманда...
Инәй, әллә кире әйләнеп
Ҡайтайыҡмы һеҙҙең байманға?..

ФТР-ҙан биҙгән ейәнен
Тыңламаны шул саҡ инәйем —
Ауыр һулап тик ҡул һелтәне...
Күҙҙәр минең китте киңәйеп:

Цирктың аҡ экран-йөҙөндә
Дары һыҙҙы инәм уфтауы.
Башҡорттарҙың Битыр батшаға
Хатын бөрктө дары-ут тауы:

*“...Ә ул һеҙҙең указда... ошондай әмер яҙылган: беҙ башҡорттарга вә гәйре дин кешеләренә яңы яһаҡ һалырга; бөтә балаларыбыҙҙың йән исәбен алырга ла һәр төрлө түләмдәр түләттерергә; ҡыҙҙарыбыҙҙың туйы өсөн дә ҡалым аҡсаһынан өсәр һум алырга; билгән ерҙәребеҙҙәге солоҡтарҙы, өйөбөҙ эргәһендәге умарталарҙы, агай-энелә булган мунсаларҙы яҙып сыгып, улар өсөн дә беҙҙән оброк алырга; беҙ билгән Агиҙел, Эсем, Өфө һәм башҡа йылга, күлдәрҙә быгаса яһаҡ түләп киленгән балыҡ тотоуга*

[22] ФТР — фәнни-техник революция.

*өҫтәмә оброк һалырға; шуның өҫтөнә беҙ тағы, шуларҙы иҫәпкә алып яҙып йөрөүсе өйәҙ түрәләренең тамағын туйҙырыу өсөн, һәр кешенән көн һайын икешәр гривна аҡса, йәнә лә ике подъячиға икешәр алтын, һәр һалдатҡа берәр алтын йыйырға... Шунан һуң ул әмерҙә... беҙ ҡолдарығыҙ үҙҙәренең үлгән кешеләрен ҡырҙағы зыяратҡа түгел, ә... мәсет ихатаһы эсендә ерләһендәр, мәйеттәрҙе ерләгәндә мәсет эргәһендә муллалар менән бергә поптар ҙа булһын, уларға мәйеттән хәйер-саҙаҡа бирелһен, тиелгән... Харам үлгән йылҡы тиреһенән унар тәңкә, ҡолон тиреһенән унар тәңкә аҡса йолорға... Мейестәребеҙҙе, ...балыҡ тотоу ауҙарын, тирмән-мөтәүкәләребеҙҙе, күпер, мәкеләребеҙҙе иҫәпләп-яҙып сығып, уларҙан да оброк алырға... Александр түрә ауыҙынан шундай әмерле... яҙыуҙы ишеткәс, беҙ уға, ундай эште үтәргә беҙҙең хәлебеҙҙән килмәҫ, ...тип бәхәсләшә башланыҡ... Ошонан һуң беҙҙе йәшелсә баҡсаһына индереп бикләтте, тирә-яғыбыҙға айбалта, мылтыҡ менән ҡоралланған һалдаттар ҡарауылын ҡуйҙы, баҡсаға бик күп атар туп сығартты ла, беҙҙе ҡурҡытыр өсөн, уларҙан оҙаҡ ваҡыт аттырҙы. Шул саҡта беҙ белмәгән ниндәйҙер эсемлек килтереп, беҙ ҡолдарыңа шуны сихәт өсөн түгел, михнәт өсөн көсләп эсерҙе. Бығаса беҙҙең һис ниндәй харам эсемлек эсмәгән кешеләребеҙ ул эсемлектән үлеп тә ҡуйҙылар: Нуғай юлындағы Сахай ауылынан Ҡармыш Сахаев туғыҙ иптәше менән үлде. Ә иҫереп ҡолап, йоҡлап ятҡан кешеләрҙе мыҫҡыл иттеләр, ятҡан кешеләргә ут төрттөләр... Александр Сергеев: "Һеҙ әле Мәскәүгә ялыу менән йөрөйһөгөҙ икән", — тигән дә... Ҡадир менән Өҙәйҙе аҫтырған, ҡалған күп иптәштәрен сыбыртҡылап ярҙырған... Бер кем дә Мәскәүгә бер нәмә хаҡында ла ялыу менән йөрөмәһен өсөн, оҙаҡ ваҡыттар дауамында бөтә яҡҡа сапҡындар ебәреп, орандар һөрәнләтте. Мәскәүгә ниндәй ҙә булһа эш хаҡында ялыу менән киткән кешене тотоп алып аҫасаҡбыҙ, ә бисә-сәсә, бала-сағаларын һөргөнгә ебәрәсәкбеҙ, тип яnaны... бөтә юлдарға ҡарауыл ҡуйып бөттө... Зөйә янындағы ауылдарҙы нык талағандар, күп ауылдарҙа һуғыш ҡупҡан, ҡатын-ҡыҙҙы, бала-сағаны әсир алып киткәндәр. Шундай ҡот осҡос ҡыҫыу, йәберләү, талауға сыҙай алмайынса, рәхимһеҙ ғәскәр кешеләренән ҡасып, ҡышҡы сатнама әсе һыуыҡтарҙа үҙ өйҙәребеҙҙән сығып киткәс, беҙҙең бисара ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ, бала-сағаларыбыҙ өшөп-туңып күп ҡырылды"...*

*Көләүендәр тулай манежда,*
*Сайпылдыртып ҡыҙҙар силәген.*
*Ике бөртөк тамсы төшкәндәй —*
*Дүнән менән тилбер дүнәжен...*

*Сыулап-сыулап ҡыҙҙар көлгәндәй,*
*Егеттәрҙең өҙөп үҙәген.*
*Ике бөртөк күҙйәш тамғандай —*
*Дүнән менән тилбер дүнәжен...*

*Егет баштар ергә ауғандай,*
*Һыҡтандырып ҡыҙҙар йөрәген.*
*Ике бөртөк ал ҡан тамғандай —*
*Дүнән менән тилбер дүнәжен...*

*Береһе — көн, береһе — төн булып,*
*Тултырғандай йылдар күнәген.*
*Быуаттарға йылдар һеңгәндәй —*
*Дүнән менән тилбер дүнәжен...*

*Ҡара ҡулын әжәл һалғандай,*
*Быумаҡ булып илем үңәсен.*
*Бер-береһен ҡыуып барғандай —*
*Дүнән менән тилбер дүнәжен...*

*Эй һеҙ йылдар, тилбер уйындар,*
*Баш бирмәүсе дүнән, дүнәжен!*
*Түгелттегеҙ кемдең күҙҙәрен,*
*Тултырҙығыҙ кемдең күнәген?!.*

## II

Ә мин һаман Күктә... төптә, төптә...
Шуҡ йондоҙҙар бейей эргәмдә.
Серле өндөң серле сихриәте
Өнөмдө төш ҡылып биргән дә,

Ятам ҡарап етенсе ҡат күктән
Еремдәге циркын тарихтың.
Эй Хоҙайым! Ерҙән айырҙың да
Уралымдан мине зар иттең!..

Шарт-шорт атып дары пистолетын,
Көләүенем төндән атлыға.
Тимерйәндең осло түбәһендә
Буденовка!.. Ерҙе шат даға

Туҡылдата! Башҡорт аттарында
Елә, елә ҡыҙыл һыбайҙар!
Күҙ алдымда турап иҫкелекте,
Ҡылыстарын айҡап-болғайҙар!..

Ҡыҙыл байраҡ киреп бара алдан
Ал йондоҙло ғорур көләүен.
Дер-һелкетә Урал орандары
Дары дармандары дөрләүен.

Һәм ни күрәм?.. Әллә киләсәген
Йәберләнгән ерҙең, донъяның?! —
Ҡыҙыл ғәскәр яуын һурҙы ялҡын,

Аренаны тылсым сорнаны...

Пистолеттан шарт-шорт атып ҡалды, —
Уйын ғына икән, -- көләүен...
Тимерйәндең танып шуҡлыҡтарын,
Күҙ йәштәрем үтә көләмен...

## III

Күнәктәрен ҡуя башҡорт ҡыҙы,
Көйәнтәһен һала иңенән.
Елән түгел инде: ҡыҙҙың һыны —
Космонаттар һөйгән кейемдә!

Иңдәренән илдең дары ҡыҙы
Быуаттарын алып ташланы.
Ашъяулыҡҡа төрөп ап-аҡ ҡалас,
Көләс көнгә асты ҡапҡаны.

Ғаләмдәрҙең сөмгөл төпкөлөнә
Һуҙа юлын ерем ҡаласы:
Йыһан карабының рулен тотоп
Сәфәр сыға башҡорт балаһы!

Үртле космодромы Ирәмәлдең
Дары төйөп карап осора.
Их, мине лә йыһан бушлығынан
Алып ҡайтһын ине, осрап!..

Юҡһа, яңғыҙ — Күктә өнһөҙ-һанһыҙ,
Ҡайта алмай ергә ҡаңғырам.
Ауһам ине кире Уралыма,
Булһам ине уға саң ғына!..

И Илаһым! Өҙ һин был төшөмдө!
Йондоҙлоҡтан тамам ялҡыным!
Анау килгән йондоҙ-карабында
Башҡорт ҡыҙы — иң-иң яҡыным!..

Елә йондоҙ... Күктә — йәш, һылыу ҡыҙ,
Йондоҙ ҡыҙы дары еренең!
Илтеп биреп Күккә Ер һөйөүен,
Сөмөрөр ул Көнгә иренен!

Их, буй етмәҫ Урал һылыуына —

Йөрьәттәрем ерҙә ҡалғандар...
Көләүендәр уртлап алыр силәк
Бейек икән, бейек, туғандар!..
.................................................
Абау йәнем! Ергә тарта тәнем!
Йондоҙҙарға һис иш түгелмен!
Ҡапланайым Уралҡайҙарыма—
Күктә күмһеүҙәрҙән төңөлдөм!..

Ишетелде шул саҡ ҡолағыма
Илаһымдан килгән бер тауыш.
Ерсән түгел, күксән тауышымды
Шул тауышҡа иттем мин ҡауыш:

## 22

***Серле өн:***

Һыҡтанаһың ниңә, улҡайым,
Ергә һыймай инең түгелме?..
Бейеклеккә йәнең ашҡынып,
Төйәкләнең үҙең Күгемде!

***Мин:***

Яҡшы тоймайым һис үҙемде...

***Серле өн:***

Бейеклегең, тимәк, аҙыраҡ.
Күгемдең мен өҫкө ҡатына! —

(Күтәрелдем тағы ҡуҙрап)...

***Серле өн:***

Уралыңдан бейек бөйөклөк —
Һиндә хәҙер! Өнөң — нур-шәфәк!
Урал телең ине — ер теле,
Ҡалды һинән ул ваҡ мәшәҡәт!

Күҙ һал, тәнәк, тирә-яғыңа:
Балҡый нисек гәүһәр йондоҙҙар!
Улар теле — һалҡын нур теле.
Улар гел шат, улар моңһоҙҙар!

Күк телендә өнһөҙ өндәшеп,
Ишет тәбрик, үҙең тәбриклә.
Бынан һуң юҡ һинең нәфрәтең,
Бынан һуң юҡ һинең йәберең дә!.. —

Тине шулай миңә Серле өн...
Бөйөклөктә ҡалғып мин ҡалдым!
Айырылып Урал саңынан,
Йондоҙ заңы менән уралдым...

Ниндәй хөрлөк! Күҙҙәр ҡамаша:
Йондоҙ менән йондоҙ ҡайнаша!
Ерҙә ҡалған ығы-зығылар —
Тамаша тик миңә, тамаша!

Йондоҙ менән йондоҙ парлаша!
Йондоҙ менән йондоҙ һайраша!
Ерҙә барған ығы-зығылар —
Тамаша шул бары, тамаша!

Үҙ тиреһен һөйгән кейектәр,
“Иң мыҡтымын!” — тигән сибектәр,
Тик ҡорһағын төйгән һөлөктәр —
Көлкө генә, көлкө бейектән.

Ҡара менән Аҡтың ағышы,
Нахаҡ менән Хаҡтың алышы,
Ялҡын менән Тулҡын сабышы —
Бейектән тик ваҡлыҡ-байғышлыҡ.

“Уралым!” тип яуға барыуҙар,
“Урамым!” тип боҫоп ҡалыуҙар,
“Ораным!” тип ҡоҫоп айныуҙар —
Бейектән тик утһыҙ яныуҙар.

Ағастарҙың ауып уфтауы,
Үләндәрҙең һынып һыҡтауы,
Сүп-саңдарҙың осоп сиҡтауы —
Бейектән тик ҡолаҡ сыңлауы...

Илау, көлөү — нимә? Белмәйем...
Иламайым йәки көлмәйем...
Өндәшһәм дә — өнһөҙ өндәшәм,
Таңғайыма ҡатҡан телкәйем...

Көллө йыһан — ғорур өнһөҙлөк.
Шул йыһанда, өнһөҙ, мин — кендек...
Серәкәйҙәй сеңләп үтһәсе
Тик бер генә ҡуңғыҙ-әргендек!..

Тамағымдан һыҡтау һурылтып
Сәнселһәсе тырпай бер үлән!
Дауамланһа бындай бөйөклөк,
Аллалыҡта алйып мин үләм!..

### 23

Яр һалаһым килә йыһанға,
Туҡмаҡлатып телем төйҙәһен!..
Бағамын да үрҙән Уралға,
Ҡурайланып сатнай үҙәгем.

Тауҙарыма үрелеп ҡарайым,
Һыуҙарыма һонолоп ҡарайым.
Сыр-сыуынан йәнем тилергән
Кейек-ҡоштоң затын барлайым.

Маңлайымда — йондоҙ заңдары,
Табанымда — ерҙең моңдары...
Юҡ, булмайҙыр, булмай донъяла
Уралдан да ҡарғып юғары!

Мәңгел хөрлөк, мәңгел тантана —
Үҙе икән ҡайғы, бойоҡлоҡ.
Күккә генә икән төҫ бирә
Ер ғәменән төңгән бөйөклөк.

Һағынамын ҡорттай сағымды:
Һәр ҡортонда ерҙең — һағыш бар.
Аһ илаһым, сепей саҡтарым,
Сеп-сеп итеп сыҡҡан тауыштар!..

Ҡайҙаһығыҙ, сырлап көлгән саҡ,
Ҡайҙаһығыҙ, сеңләп илау, зар?..
Бөйөклөктән арныт, Илаһым,
Есемемә кире алып бар!

Туған миңә ерем туҙаны —
Ҡуйыныма керһен йомраны!
Балағымды бөрһөн йыланы! —

Ҡотҡар, ҡотҡар мине, Илаһым!

Уралымдың саңын һулайым,
Үләненән тәпәш булайым,
Туҙанында ятып аунайым, —
Ҡотҡар, ҡотҡар, Илаһ ҡынайым!

"Урал" тиер телем бар ине,
Моңон тирер өнөм бар ине,
Илап-көлөр көнөм бар ине, —
Ҡотҡар, ҡотҡар — шунда булайым!..

*Серле өн:*

Үҙең даулап алған бөйөклөк —
Ваҡлыҡтарҙан затың арсалһын...

*Мин:*

Теләмәйем! Ҡайтар еремә!
"Урал!" — тиеп телем асылһын!

*Серле өн:*

Бер ваз кискәс ерҙән, — Аллаға
Бәндә булып тура ҡайтыу юҡ...

*Мин:*

Бер таш ҡына итеп кәйелдер —
Уралыма төшәм атылып!

*Серле өн:*

Ха-ха-ха-ха! Быны булдырам!
Тау башына йәтеш — таш ҡына!
.......................................................
Йондоҙлоҡтан төшәм тәкмәсеп
Төнгө Күк көмбәҙе аҫтына...

Эйе, ташмын, ташмын, ташмын мин –
Таш түбәлә ятам -- өнһөҙ таш.
Әммә тоям Урал һулышын –
Уралыма тоташ мин, тоташ!

Таш күҙҙәрҙән йәшмә йәш тама,

Таш йөрәктә һүнмәҫ үрт яна:
“Бер таш ҡына булып Уралда
Ятыуы ла — бәхет, тантана!..”
..................................................
Таш йөрәктән яҡут ҡан тама,
Таш күҙҙәрҙә ялҡын-ут яна.
Таш боғаҙҙы киреп, гәлсәр өн
Саңҡыр сәғәт көтә, туплана:
Тере өн бар тамаҡ-тупһала!

...Ҙур суҡышын терәп ҡаяға,
Тырнаҡтарын көрмәп ҡаяға,
Ирәмәлдең ирәү башында
Бөркөт ята. Бөркөтташ ята...
Тамағында өнө шашына...
Тауыш бирсе, Илаһ, Ташыңа!..
..............................................

## *24*

Ятам өнһөҙ... Урал ҡыразында...
Таш йөрәгем тибә күкрәгемдә.
Ер тын йоҡлай.
Күкте моң баҫҡан.
Әйләнәмде дөм-төн уратҡан,
Ерҙе ҡармап ҡара ҡаҙандай.
Йондоҙҙар ҙа хатта баҙалмай
Күҙ һалырға “ҡаҙан” төбөнә.
Һөрөм ҡалҡҡан Урал Күгенә...

Һөрөм һарған суйыр йөҙөмә —
Быуаттарҙың ҡара һөрөмө.
Үлеме мин, әллә тереме?
Күҙҙән ҡасҡан донъя сереме.
Баҫҡан әллә ғаләм сереме?..

Тештәремде ҡыҫһам — Ер шартлар.
Күҙҙәремде йомһам — Күк ялтлар.
Сағылланып ҡатҡан йоҙроғом —
Көтәм микән Урал бойороғон?..
..................................................

Әйләнәмде монар уратҡан.
Ҡаҙанланып ята Уралтау,
Убып Күкте монар төбөнә.

Был ҡаҙанда — үткән быуаттар
Юшҡын юшай ҡая егенә.
Был ҡаҙанда ҡубыр дауылдар
Орлоҡтары бүртеп күбенә.
Был ҡаҙанда йыһан тибенә,
Һыя алмай ҡоршау-көбөнә...

Эй Уралтау, мәғрур Уралтау,
Эй Уралтау, ғорур Уралтау,
Күҙҙәремә һыла төнөңдө,
Тамағыма төйнә өнөңдө —
Шүлгәндәргә барып тоташһын,
Йыһандарға ҡарғып олғашһын, --
Хәттин ашҡан саңҡыш-телеңде!

Шул төн аша асыҡ күрәйем
Мәңге янар яҡты көнөмдө!
Таңғайымдан ҡуптар телемде!..
Өнөмдө, ау, шаңғырт өнөмдө!..

Мине бында тартып килтерҙең,
Күкрәгеңә ҡарпып мендерҙең,
Аяғымды гүргә һеңдерҙең,
Маңлайымды Күккә тейҙерҙең,
Эй Уралтау, мәғрур Уралтау!

Күҙҙәремдең күмер ҡараһын
Күккәябың яғып, Уралтау.
Ҡаштарымдың күмер ҡараһын
Төпкә ябың яғып, Уралтау.

Урай-урай ҡара сәсемде
Ҡарурманың итең, Уралтау.
Ҡором кеүек ҡара тәнемде
Ҡара ереҫ итең, Уралтау.

Мәңгелектең сихри ҡылына
Йөрәгемде сиртең, Уралтау!
Ташбөркөтөң иткән улыңды
Тас башҡортоң иткел, Уралтау!

## 25

## Ташбөркөттөң саңҡыуы

Урал төнө! Ғәзиз төнкәйем!
Миңә ҡырҡ йәш, һиңә — миллиард.
Шул миллиард йыллыҡ юлыңда
Күрәм һымаҡ һине тәүге ҡат.

Ҡарын төбөң — ҡара нурыңды
Асып ихлас, миңә ҡараттың.
Ятһынмаһын өсөн төнөңдө,
Күҙҙәремде минең ҡаралттың...

Урал төнө! Булдың төйәгем
Күҙем асылмаҫ уҡ сағымда!
Һинең менән яттым ҡарайып
Нисәмә ай әсәм ҡарынында!

Урал төнө! Изге сәғәткә
Тайярланың мине тыумыштан:
Кендегемде киҫеп, әләгәндә
Ҡара ҡулың һинең йыуышҡан!

Ҡунған һайын өйгә серле кис,
Ҡара төнөң мине биләгән.
Бишегемдә ҡарыһүҙеңде
Ҡара күҙле әсәм көйләгән...

Ҡара төҫөң, Урал, — Ай төҫөң!
(Аҡлығын Ай ала Ҡояштан.
Аҡлыҡ бит ул — төҫө Шүлгәндең:
Шүлгәнем — Көн, Урал — Ай-ҡашҡа!) --
Һанағандыр шулай бабалар!
Бабаларҙан миңә миф ҡалған.
Бабаларҙы ситкә ҡаҡмағыҙ,
Бабаларҙың бабы, тип, ялған!

Ҡырҡ йәшемдә, ҡырҡҡа төрләнеп,
Ала алдым ошбу аҡылды.
Аҡылһыҙҙар ҡалды алданып,
Алданғандар ҡырҡҡа ҡырҡылды.

...Ҡырҡ йыл буйы көндө ҡара төн
Алмаштырған хайран итмәккә.

Таң асҡан күҙ — кисен йомолған
Ҡара төнгә сәфәр китмәккә.

Ҡара ергә орлоҡ күмелһә,
Аҡ Ҡояшҡа орлоҡ талпынған.
Аҡ мейестең ҡара эсенән
Ҡотло ап-аҡ ҡалас алынған.

Урал төнөн ҡара тимәгеҙ,
Аҡлыҡ өсөн килә ул ҡара.
Тиккәме ни уның аҡ көнө
Ҡара төнгә атын туғара!

Ҡара ҡашлы Шүлгән-әсәйҙән
Баш тартырға тота кем иҫәп?!
Урал-атам, Шүлгән-анайым –
Айырылмаҫ көн-төн игеҙәк!

Урал төнө! Баҡҡан ул мине
Әсәм талып ауған мәлдәрҙә.
Улы итеп, иткән урайлы,
Сырмаған һәм мең-мең ғәмдәргә.

Ҡырҡ йыл — ҡурсап улын үткәргән
Ҡырҡ аҡ аша — ҡырҡ дөм-ҡаранан.
Ҡырҡ һауапты ҡарғып ҡырҡ яҙыҡ,
Күңелемде ҡырҡ моң арбаған.

Бәғзе көлгән саҡта — илатҡан,
Бәғзе күҙ йәш һыҡһа — көлдөрткән.
Ҡырҡ ҡарашлы ҡулсыр ҡараһын
Бер ҡарашлы ҡылып өлгөрткән...

Урал төнө! Һиңә мең ҡөҙрәт! —
Аҡ күңелем һиңә ялғанды.
Ҡараң үтә һинең таныйым
Айырмаһын хаҡтың, ялғандың!

Быуын-быуын үткән ҡырҡ ғүмер —
Һинең аша миңә ереккән.
Ҡараң һинең — саф күҙ ҡарамда
Күҙем ағы менән береккән.

Аҡ һәм ҡара — миндә ике нур,
Ғүмеремдең изге талабы.
Аҡ намыҫым — күҙем алмаһы,

Уралҡайым — күҙем ҡараһы!

Күҙ ҡараһын аҡтан ҡайырған —
Әүерелер үҙе ҡараға.
Өҫтөндәге ҡара күлдәге
Аҡ күренер ундай ҡарғаға...

Һуҡырлыҡтан шундай — һаҡлаһын!
Быуын-быуын биреп мең ҡорбан,
Таныр булдыҡ аҡты, ҡараны,
Күҙле булдыҡ дөмә һуҡырҙан!

Ҡара төндән ҡарпый яралғы,
Тыуа ҡара әсә ҡарынынан.
Ҡара-дөмдән имгән һөтөбөҙ —
Донъялыҡта аҡтыр барынан!..

Ҡара ерҙең ҡара ҡуйынын
Гүр тиһәк тә, төңмәҫ хаҡ әсә —
Гүр төнөнән шытып сыҡмаймы
Ер балҡытып ҡалҡҡан аҡ сәскә?!

Аҡты ғына булһа маҡтауҙар,
Йә ҡараны ғына ҡарғауҙар —
Бәндәләрҙең хаҡы һуҡыр тин:
Иблеслеккә улар ҡорбандар!..

Кемдәр әгәр аҡты — ҡара, тип,
Ҡараны — аҡ, тиеп баралар —
Бына шунан сыға “ҡара”лар.
Асылалар ҡанлы яралар!

Ҡайырһағыҙ аҡты ҡаранан,
Күҙ ҡараһын аҡ күҙ-алманан —
Нимә ҡалыр? — Ҡалыр “ҡара” йән,
Юл һораусы йәнһеҙ ҡолғанан...

Күләгәһен юйған тән — үле,
Төн ҡараһын юйған көн — етем.
Ер менән Күк — мәңге ҡушала,
Көн менән Төн — мәңге бер бөтөн!..

Урал төнө! Ғәзиз төнкәйем!
Миллиард йыл йыйғас моңоңдо,
Күҙем асып ҡырҡҡа еткәндә
Илатырға булдың улыңды?..

Илат, илат, ғәзиз төнкәйем,
Серҙәреңә йәнем ҡауыштыр!
...Аҡ һәм ҡара битле Айымды
Тирбәлтә төн, миңә таныш йыр:

*Ила, балам, ила бишегеңдә —*
*Илар сағың һинең яңы әле.*
*Мамыҡ юрған араһында кескәй*
*Ҡуҙ киҫәге булып ян әле.*

*Был донъя ул — бик ҡатмарлы улъя:*
*Илай унда ҡай саҡ ҙурҙар ҙа.*
*Ә һин, балам, бөтә күҙ йәшеңде*
*Илап бөтөр ошо юрғанда.*

*Бел һин: илең, башы кәйелһә лә,*
*Баш эймәгән тормош еләнә.*
*Ғорур егет, батыр егет итеп*
*Күрергә ул теләй һине лә.*

*Ила, балам, илар саҡтарыңда*
*Күҙ йәштәрен йомоу йүн түгел.*
*Илама тик ир еткәс һин, улым,*
*Илаған ир — илгә тиң түгел!*

Күҙем асам: ир еткәнмен инде,
Ҡырҡ йәшлеккә күҙ йәш — ҡот бирмәҫ!
Ҡоро көйө көйһөн керпектәрем —
Ир башына аҙмы ут теймәҫ!

Күҙем йомам: ап-аҡ Ай йомола,
Ялмап ала йәнде серле төн.
Йөрәгемде ҡосҡан төнөм менән
Урал төнө — теүәл бер бөтөн!

Күҙҙәрем төн — Урал төнө... Ул тын.
Ишетелә таныш моң бары.
Күҙ ҡарамдан сыҡҡан ҡараларға
Аҡ күҙ алмам һала юлдарҙы.

Миллиард йыл — ҡара миллиард уҡ —
Теҙелешеп оса аҡ юлдан.
Минең улар зыңғыр керешемдән
Минең ҡырҡ йыл аша атылған!

Оса, оса, оса уҡ сылбыры —
Тыңлай донъя осҡор уҡ көйөн.
Оса, оса, оса...
Сеү! — сылбырҙы
Сыңратты сың — серле бер төйөн.

### *26*

Һыртарҡаһын Урал кинәт турайтты,
Урайланып, сер төйөнөн уралтты.

Ҙур уйһыулыҡ — сәхнә хасил уртала,
Сер төйөнөм шул сәхнәлә бутала...

Бутала ла сылбыр-сылбыр сиселә.
Сәхнә буйлап фигуралар теҙелә.

Әйтерһең дә, сатраштағы таш һындар —
Аллаларға тәғәйенлек уйындар...

Йөҙҙәрендә борғой йылдар туҙаны —
Ҡом күсәме, әллә ғүмер уҙамы?!.

Ер әйләнә, уйын бара сәхнәлә,
Күрер күҙгә был — бик серле мәсьәлә:

Таштарҙы ла сәмләп уяттырыр ул —
Донъяның ҙур амфитеатры был!..

Ҡарай уны иҫе китеп Ер, Йыһан.
Сал сағылдар ҡарай-ҡарай ҡалғыған...

Йондоҙ-күҙҙәр баға дөм Күк-аралдан:
Аҫҡан ғаләм ҙур театр Уралда!..

Сылбырҙары сыңлай — сәхнә әйләнә,
Әйләнә лә фигуралар йәнләнә.

Килеп сыға йор йән — балыҡ ҡанатлы,
Үҙе — балыҡ, үҙе — йөрөм-аяҡлы:

Быуаттарҙы сәхнә аша үткәреп,
Дәүер сылбырында килә һөйрәлеп...

Сыға сыйнап, һалып ажар һәм йәбер,

Динозавр, әллә ихтиозавр!..

Барлап тормай тейеш түгел, тейеште:
Бер һоғоноп йота балыҡ-кейекте...

Йот-аждаһа аҙа ажар сәсмәгә,
Уның менән дәүер дулай сәхнәлә...

Бөтөрә тик йот-ажарҙы яңы дау:
Лап-лоп баҫып килә мамонт — тере тау...

Ер әйләнә, эй, әйләнә, әйләнә...
Әйләнгәне һайын донъя йәмләнә!

Урал һыртын яба кейек, ҡоштары,
Урал күген ҡаға моң-тауыштары!

Сыға шытып һутлы йәшел үләндәр,
Утлап уны ҡыуаныша мең йәндәр!..

Әйләнә тик, Ерем һаман әйләнә,
Йылдар йылға сылбырланып бәйләнә.

Ята мамонт тауҙай ҡалҡып уртала:
Бер сибек йән ҡаршыһына туҡтала.

Тора баҫып — шундай үҙе аяныс:
Ике аяҡ ҡына уға таяныс...

Яурынында — ҡырыҫ тарпан тиреһе,
Йөҙҙә — Шүлгән мәмерйәһе һөрөмө...

Саҡҡылтып ут яна ике ҡара күҙ...
Мамонт менән Әҙәм килде йөҙгә-йөҙ.

Күреүҙәре икән быны имәнес
(Бәғзеләргәлер ул, бәлки, кинәнес):

Аждаһаны тапап үткән “тау” тора,
“Тау” ҡаршында себендәй бер яу тора...

Ҡалҡыналыр “тау”ҙың яҫы табаны,
Әҙәм заты яйлай суйыр балғаны!

“Тау”ға тарып осҡон сәсә таш балта:
Әҙәм тора, “тау”ҙан бер ус саң ята...

Иçе китеп ҡарай әҙәм ҡулына:
Баҡыр балҡый суйыр балта урынына!

Яурынынан осҡан тарпан тиреһе,
Ап-аҡ елән — нәҡ аҡ Айҙың сиреге!

Урал иңен япҡан кейеҙ тирмәләр,
Саф баҡырҙан сыңлап тора тирәләр!

Аҡ тирмәнән гөжләй ҡурай тауышы —
Тирмәләрҙең, тирәләрҙең һағышы...

Тирәләрҙә йот-ят күҙҙәр айҡала...
Сыңлай сүкеш — ҡыйғыр ҡылыс тапала...

Аренаға сыға ҡотһоҙ ҡорал, яу...
Йыһан ярып саңҡый бөркөт – Уралтау...

*27*

## Уралтауҙың саңҡыуы

Уралмын мин, эйе, Уралмын,
Уртаһында ерҙең торамын.
Дүрт яҡтан да килгән дуçтарҙы
Дуç итергә әҙер урамым.

Дүрт ҡибланан өргән елдәрҙе
Иңем киреп тойған Уралмын.
Дүрт тарафтан дөргән валдарҙы
Валсыҡтарға бүлгән ҡоралмын!

Туғыҙынсы валдар тауышын
Дәүер-дәүер буйы ишеттем.
Күбектәрен ҡаҡтым кирегә,
Електәрен йәнгә иш иттем.

Яландарым мең-мең баçҡындың
Һөйәктәре менән тулғандыр,
Ҡылғандарым — һурып елеген,
Ҡанын эсеп бүрткән йыландыр...

Табан майлап ҡасып өлгөрһә,

Ҡурҡышынан йәне елберҙәп:
“Башҡорт — башҡырҡ[23]! Башҡорт — ҡырағай!” —
Тип үт һыҡҡан йыйын берәҙәк...

Башҡортмон мин, эйе, башҡортмон!
Урал, башҡорт – улар берәгәй!
Тик үҙебеҙ булып ҡалайыҡ,
Башҡаларҙан бер ни кәрәкмәй!

Дошманыма — эйе, дошманмын,
Ҡырағайға — булдым ҡырағай:
Арыҫландай ажғыр илбаҫар
Булды бында йыуаш ҡоралай...

Күҙе тонған ҡомһоҙ килмешәк,
Тамам ҡылып һөмһөҙ юлын шәп,
Йәтеш юйҙы башын муйындан...
Шуның өсөн ҡылыс ҡойолған!
Һағауылға Башҡорт ҡуйылған!
(Башҡорт тигән ҡала ҡоролған!)

## *28*

..................................................
Әллә Урал, әллә ҡорал
Сағылдарҙы сағыулата.
Ирәмәлдең түбәһендә
Тотолоп таш төрбәһендә,
Күктән төшкән бөркөт ята...
Таш хәленән өркөп ята...
Таш өнлө ташбөркөт ята...
Уралының, Уралының
Өн өрөрөн көтөп ята...
Ташбөркөтө көтөп ята...

## *29*

Юҡ, түгелмен ерҙән елгән!
Иңем менән ерҙә ел ярам.
Йөрәгемә кереп ярһыған —
Ерҙе һаҡлап алған мең ярам!

Илтәм Намыҫ — тимәк, илтелә

[23] Башҡырҡ — баш ҡырҡыусы.

Иңбашымда Күк һәм Еребеҙ!
Ерҙе яҡлап ирҙәр Күк ашҡан,
Күкте һаҡлап гүргә керербеҙ...

Әммә ала күҙ йәш алҡымдан...
Үңәсемә өнөм тығыла.
Туйгилдем, әйт, әллә уртымда
Дәүер дарылары йыйыла?!

Брунолар анты борондан
Хәтәр йәҙрә булып ҡойолған.
Уртты киреп йәҙрә атылған,
Һыҡҡан саҡта палач муйындан...

Йәҙрәләнеп тыуҙым – ташбөркөт,
Ятам көтөп тыуыр өнөмдө.
Уралымдан алам тынымды,
Уралымдан алдым йәнемде.

*“Ер әйләнә!”* — тиеп ярһырға
Хәтәр сәғәт һуға миңә лә.
Тик нишләйем?! — Сыҡмай ораным...
Тамағымда өнөм төйнәлә...

Кем һуң мин? Кем?! Минме оранһыҙ?!.
Оранһыҙҙар була ҡоралһыҙ.
Ҡоралһыҙҙар ҡала Уралһыҙ.
Башҡорттан ни ҡалыр Уралһыҙ?!.

Эй Хоҙайым, Урал батырым,
Иңбашымда — Намыҫ-Хаҡлыҡтыр!
Оранымды ташҡа ҡатыртҡан
Гөнаһымдың кәрен яҙлыҡтыр!

Үтер инем әрһеҙ үрмәләп
Уралымдың һәр дүрт ҡиблаһын —
Оранымды ғына оранлар
Өн-тауыш бир миңә, Илаһым!..
..................................................
Шылтыраны шымған шишмәләр...
Болоттарҙы борғоп ел бәрә.
Күк күкрәне... Йәшен йәҙрәһе
Таш маңлайҙа килде селпәрә.

Һәм тереллдем телһеҙ ташбөркөт,
Өнөм тыуҙы аңҡау төбөмдә.

Шомло төшөмдән ҡырт арынып,
Ятам саңҡып – телле бөгөндән!

Сағылдарҙың төбөн сатнатып,
Хәтәр ауаз ерҙе тулатты:
Күптән таныш теге Серле өн
Һиҫкәндертте суйыр ҡолаҡты.

Ярып үтте ташым төйөрөн,
Һыҙлап типте йөрәк-бәғерем:
“Белерһеңме инде, тәнәкәй,
Илеңдәге көнөң ҡәҙерен?!.”

Өнө таныш, эйе, Серле өн,
Тик күргәнем юҡ һис килбәтен.
Күккә мине ерҙән сорғолтто,
Мәңгелектең асты ғибрәтен…

“Кем һуң, кем һин?!” — тинем ҡалтырап.
Дүрт ҡиблам тиң китте ялтырап:
“Мәңгелек Ҡарт — үҙе буламын.
Был нам, күрәм, һиңә ятыраҡ?”

***Мин:***

Юҡ, ят түгел! Һине беләмен
“Урал батыр” тигән Дәү Йырҙан.
Йәншишмәнең һыуын һин эскән,
Әжәл һинән һыртын ҡайырған...

***Мәңгелек Ҡарт:***

Эйе, шулай, мин — Ҡарт Мәңгелек.
Урал батыр хатта — үлемле...

***Мин:***

Бөркөтләнеп бая саңҡыған —
Урал батыр үҙе түгелме?

***Мәңгелек Ҡарт:***

Урал батыр ине...

***Мин:***

Ҡайҙа ул?

***Мәңгелек Ҡарт:***

Саңҡылды өн мәңгел уртымдан.

***Мин:***

Үлемле лә Урал, мәңге лә?!.

***Мәңгелек Ҡарт:***

Бының серен һора Ҡартыңдан.

***Мин:***

Низә сере?

***Мәңгелек Ҡарт:***

Шунда, тәнәкәй:
Намыҫ илтте Урал иңендә!

***Мин:***

“Аҡлыҡ”, “Яҡшылыҡ” бар Дәү Йырҙа?..

***Мәңгелек Ҡарт:***

Барыһы бер улар бөгөн дә!

Хаҡлыҡ, Аҡлыҡ, Паклыҡ, Яҡшылыҡ —
Алған төрөп Намыҫ уларҙы.
Иңбашына һалып Намыҫты
Урал батыр илтә юғары!

Йәнҡаралыҡ, ялған, яманлыҡ —
Хыянатҡа улар һыйына.
Шүлгән үҙе илтә йәмғеһен,
Һырныҡтырып балаҡ буйына...

***Мин:***

Дәү Йырҙан мин тағы беләмен:
Урал батыр үлгән, Шүлгән дә...

***Мәңгелек Ҡарт:***

Үлгәндәр һәм мәңге тереләр —
Икеһе лә бара эргәмдә...

Йәншишмәнән эскән мин Ҡартың —
Мәңгә үле, мәңге теремен...

***Мин:***

Аңламайым...

***Мәңгелек Ҡарт:***

Мәңгелеге мин
Урал халҡының һәм еренең!

Күрәһеңдер: һәр көҙ үләндәр
Ҡыуара һәм япраҡ ҡойола.
Әҙәм балалары быуыны
Бер-бер артлы гүргә уйыла.

Әммә үлән-япраҡ ҡыуарыу —
Яҙғы йәшнәүҙең саф бөрөһө.
Быуын ғүмерҙәрен туғарыу —
Яңы быуындарҙың көрлөгө!

Ер әйләнә һаман, әйләнә --
Быуындарҙың уҙа сылбыры...
Шул сылбырҙың сыңрау йыры ул —
Йәншишмәнең мәңгел урғылы...

Саф һаҡлаһын өсөн сыңрауын,
Үткәрәмен шуны йөрәктән.
Сәсәнмен мин һәр бер быуынға
Мәңгелек йыр көйөн өйрәткән!

***Мин:***

Сәсәндәр ҙә, тимәк, үлемһеҙ?

***Мәңгелек Ҡарт:***

Донъяла бар мәңгел бер Сәсән.
Ҡаршыңда ул! Мәңге был ергә

Йәншишмәнең йырын мин сәсәм!

***Мин:***

Ә башҡалар? Һабрау, Ҡарастар?
Улар әллә төптө булмаған?!

***Мәңгелек Ҡарт:***

Булған, булған! Әммә барыһы
Уртым аша минең йырлаған.

Тыуған улар, үлгән — йыр ҡалған.
Яңы сәсән йырҙан йыр алған.
Мәңгелек Ҡарт ҡалған мәңгегә.
Ҡалғандарын йырҙан гүр алған...

***Мин:***

Тимәк, улар иҫке бер йырҙы
Ҡабатлаусы фәҡир йырсылар?..

***Мәңгелек Ҡарт:***

Әйтмәç инем. Улар — каруанды
Ишәйтеүсе сая юлсылар!

Бер ҡулында булған ҡылысы,
Бер ҡулында булған уҡ осо —
Ҡул тейҙермәй ҡағыҙ-ҡәләмгә,
Йырын сәскән сәсән ғаләмгә...

Ҡаяларым минең, юлдарым,
Урмандарым, аҡлан, һыуҙарым,
Даламда һәр уба, ялпы таш —
Мәңгел йырлы китап ул тоташ!..

Һәр сәсәнем йөрәк ҡылына
Сиртеп, сыңрау яңы юл яҙған.
Йырҙы яңы иткән шул бер юл
Ғүмер талап иткән уларҙан...

***Мин:***

Ә һинән ул талап итмәйме?

*Мәңгелек Ҡарт:*

Нисәмә мең юл бар Дәү Йырҙа? —
Шуныңса мең тапҡыр үлдем мин.
Һәм терелдем шунса тапҡырҙар.

Шунса тапҡыр һәр бер быуынды
Беректерҙем яңы быуынға.
Шунса тапҡыр ерем кендеген
Берештерҙем яңы тыуымға!

Кендегеңде бына һинең дә
Ошо төндә ергә бәйләнем.
Шуға күрә үркеп үҫтең һин
Һәм иңләнең донъя ғаләмен!

***Мин:***

Ҡулымда бар минең ҡәләмем...

***Мәңгелек Ҡарт:***

Эйе, һин дә — сәсән затынан...

***Мин:***

Аһ! — тик бер юл минән ҡалырмы?..

***Мәңгелек Ҡарт:***

Бер юл шиғар — ҡиммәт алтындан,
Яҙһа әгәр уны Намыҫ-ҡул!
Хыянатҡа әгәр булһаң ҡол...

***Мин:***

Юҡ, юҡ! — илтәм Намыҫ-кар(а)уан!
Текә юлдан шуға бараман!..

***Мәңгелек Ҡарт:***

Хе-хе-хе-хе! Ундай "текәлек"
Булһын ине ҡай бер ирҙәргә!
Алда әле иңрәп илтерең
Намыҫ-Хаҡты ысын үрҙәргә!

Һин тапаған был һырт-текәлек —
Намыҫлылар өсөн ябай юл.
Брунолар менгән бейеклек
Алда әле! Шуға абай бул!..

Тоғро ҡалып Намыҫ ҡорона,
Булһаң Туйгилде йә Бруно,
Урал батыр, тимәк, үлмәгән!
Дауам итә Урал йыры ла!

Хыянатҡа әгәр тәкмәсһәң,
Серәкәйҙәй һаҙға йәпләшһәң,
Шүлгән һиндә, тимәк, терелгән —
Йәншишмәгә әжәл үрелгән!..

Урал батыр үргә ҡалҡына —
Әҙәм күңелдәре сағылы.
Шүлгән заты һүлдә тулҡына —
Бәндә күңелдәре һаҙлығы...

Табаныңды ялҡын ҡурғанда:
“Сүгәм һаҙға!” — тимәй һин ҡара!
Маңлай менән сағыл ярғанда:
“Сигәм артҡа!” — тимәй һин ҡара! —

Тыуыр шунда һинең батырлыҡ
Урал бөрккән йәнһыу-тамсынан.
Урал батыр үҙен бөрккән ул,
Тыуыр өсөн һиндә яңынан!

Мең-мең Туйгилде һәм Брунолар —
Урал улар меңгә төрләнгән.
Зат, ил — башҡа. Әммә Урал — бер,
Намыҫ һәм бер — түгел керләнгән!
Бөтә донъя илтә Намыҫты...

***Мин:***

Хыянатҡа ла тик урын бар...

***Мәңгелек Ҡарт:***

Намыҫлы һәр әҙәм — Урал ул,
Хыянатсы — Шүлгән борондан...

Үҙәгеңдә үҙәк — Уралың,

Таймайынса атҡар йөгөндө.

***Мин:***

Улайһа, ник оран-урт йомоҡ?
***Өн бир миңә, өн бир, бир инде!..***

Оранлайым ярып донъяны,
Сайҡалдырып ерем-күгемде!
Мәмерйәләй киреп уртымды,
***Оранларлыҡ өн бир, бир инде!..***

***Мәңгелек Ҡарт:***

Кирелмәй үк торһон мәмерйәң —
Өлгө алып күр һин тауҙарҙан:
Өнһөҙ-тынһыҙ улар яурындан
Күпме дәүер йөгөн ауҙарған!

Алтын тулы эсе — Уралтау,
Ялҡын тулы төбө — Янғантау,
Береһе лә "эһ" тип әйтмәгән,
Өн әйтмәүҙән кәре ҡайтмаған!

Ә һин түҙалманың сәғәт тә...

***Мин:***

Өйрәнмәгән бындай ғәҙәткә...
Эсем тулы ялҡын — алығыҙ,
Хисем тулы алтын — алығыҙ,
Алығыҙ ҙа оран ороролоҡ
***Өн ҡөҙрәте генә һалығыҙ!***
Күпме кәрәк — шунса алығыҙ!..

***Мәңгелек Ҡарт:***

Ха-ха-ха-ха! Ҡолаҡ һалығыҙ:
Ҡормаҡ була, имеш, был сауҙа!..
Борсаҡ һипмәй генә тор әле,
Һалып ҡара йоҙаҡ аңҡауға!..

Ҡапҡанланып уртың ҡатҡанда
Ороп ҡара ерҙең оранын!
Брунолар фәҡәт шул юлда
Заңландырған заман Уралын!

Оран бит ул — Намыҫ ҡоралы!
Тейешле һин уны орорға —
Донъя һиңә йәҙрә атһа ла!..
Тейешле һин тымып торорға —
Донъя, ҡубып, дөмбөр ҡаҡһа ла!..

***Мин:***

Алла талаптары ҡуяһың?..

***Мәңгелек Ҡарт:***

Ҡуям, тәнәкәйем, еңмешем!

***Мин:***

Тәнәкәйгә — Алла талаптары?!

***Мәңгелек Ҡарт:***

Эйе, тәнәк, сөнки һин — ***Кешем!***

***Мин:***

Кеше, кеше... Бары тик кеше...
Ә аллалар — Алла һәм бөйөк!

***Мәңгелек Ҡарт:***

Ха-ха-ха-ха! Һинән — кешенән
Бөйөгөрәк, тимәк, һәр кейек?!

***Мин:***

*Алла*, тимен!..

***Мәңгелек Ҡарт:***

Ә һин “алла”ларҙың
Кем булғанын элек беләһеңдер...

***Мин:***

Улар — унда, анау Күк түрендә...

***Мәңгелек Ҡарт:***

...ерҙәге бер, бәлки, селәүсендер?!.

***Мин:***

Тәүбә, тәүбә...

***Мәңгелек Ҡарт:***

Тәүбә ҡылырға, мин
Ҡара менән Аҡты бутамаған!

***Мин:***

Аллаларға тел тейҙереү — яҙыҡ!

***Мәңгелек Ҡарт:***

“Алла”ларҙың ләкин күбе ялған...

***Дәү Хоҙай*** бар бөйөк! Өҫкө ҡатта...
Донъя-Ғаләмде бит ул яралтҡан.
Уйлап тапҡан әҙәм балалары
Ерҙең “алла”ларын тик аҙаҡтан...

***Мин:***

“Уйлап тапҡан”?...

***Мәңгелек Ҡарт:***

Эйе, ерле юҡтан...
Белгең килһә шуны, тәнәкәйем,
“Алла”ларҙың ғибрәт шәжәрәһен
Күҙ алдыңдан барлап үткәрәйем,
Миңә — барлау ҡабат, һиңә — һабаҡ...

***Мин:***

Ал балсыҡтан — Әҙәм-атабыҙҙы,
Ҡабырғанан — Һауа-әсәбеҙҙе
Хасил ҡылмыш Бөйөк Аллабыҙҙы...

***Мәңгелек Ҡарт:***

Хи-хи-хи-хи! — "...күрә алабыҙҙыр!.."
"Тел көрмәлеп, саҡ тын алабыҙҙыр!.."
Ха-ха-ха-ха! —

Күкрәп был көлөүҙән
Ҡая таштар ситкә ҡайырылды,
Күҙ алдына килде Тигеҙ Үҙән,
Ҙур мәмерйә унда хасил булды —
Шүлгән-Таштың төпһөҙ урт-ауыҙы...
Телеэкран һымаҡ, ҙур планда
Һүрәтләнеп, дәүер-дәүер шыуҙы...

## *29*

Һәй, тамаша! Көсө ФТР-ың
Ҡайҙа ғына килеп ҡулын һалмай!
Ултырамын Уралтау уртында,
Сихри кадрҙарҙан күҙем алмай.

Бына Таш Йорттоң[24] киң мәғәрәһе,
Бер туташтың капрон ойоғолай,
Шыуып үтте минән — дәү туннелгә
Инәмен тап туташ аяғылай...

Янға килә, шылып, бабаларҙың
Ташҡа һүрәтләнмеш януарҙары.
Тик йән көйә: стоп-кадр оҙаҡ
Һәм тауыш юҡ... Фәлән алғырҙары! --

Ҡайҙа режпом[25]? Оператор нишләй?!
Эш өҫтөндә әллә эскән, тәре?!.
Иң ҡыҙыҡлы саҡта өҙөп тороу —
Зәңгәр экрандарҙың һөнәрҙәре! —

Әйтерһең дә, фатир креслоһында
Ултырамын — ярһып аяҡ төйәм.
("Кресло короле" тип юҡҡа әйтмәй
Беҙ-ирҙәрҙе ярты донъя, беләм)...

Һәм ана шул төйөп һелкетеүҙән
Оператор кинәт иҫкә килә:
Ура! Бабаларҙың экранында

[24] Таш Йорттоң — Шүлгәнташ мәмерйәһенең.
[25] Режпом — режиссер ярҙамсыһы.

Һын терелә, тауыш ишетелә!

Ҡояш Ҡото[26] төшә Аҡ-Әсәнгә[27],
Ялҡын ялмап ялын, ҡойроғон.
Әйтерһең дә, Ер һәм Күк ҡауыша,
Ҡушылдырып ут, һыу буръяғын.

Уй, ҡурҡыныс: йөҙә Ҡот балығы!
Бешкәк кеүек бешә Аҡ-Әсәнде!..

***Мәңгелек Ҡарт:***

Тәнәкәйем, тәүге "алла" былар:
Береһе — ут, бере һыу есемле.

Йәнә күрең: һыуҙа — ҡамыш кәмә,
Йүкә көпө кейеп ишә бабаң...
Өҫтөнә ул менгән Аҡ-Әсәндең,
Айғолағын Ҡоттоң матҡып алған...

Ишкәк менән туҡмап бер "алла"һын,
Икенсеһен ярға ул сығара.
Ҡабырғаһын һүтеп "Алла-Ҡот"тоң,
Билдәмәһен ҡаҙанға туғара...

Әкиәткә ҡалды ике "алла"...
Алла эҙләй йәнә бабаң ана.
Башын бәреп шөңгөр йылға-йылан
Борғоланмыш Тауға ул туҡтала.

Күрә, ята бына тормош башы:
Тау-ир — таба, Әсә-йылға баға —
Йәшәй имеп уны һәр тере йән,
Табынырға мөмкин бына быға!..

Һәм йыланды "Әсә-йылға" итеп,
Динозаврҙы "Тау-Атаҡай" тип,
Икеһен тиң "алла" яһай бабаң,
"Әсәй-Атаҡай[28]", ти һуңға табан... —

Мәңгелек Ҡарт өҙҙө шунда һүҙен,
Ҡан ҡапланы сөнки донъя йөҙөн:
Киндер күлдәк кейеп алған бабам

---

[26] Ҡояш Ҡото — Ҡот, хәҙер уны "кит", (кит балығы) тибеҙ.
[27] Аҡ-Әсән (аҡ әсәм, аҡ әйәм) — Океан.
[28] Әсәй-Атаҡай — Ажи-адахай (Аждаһа).

Һөңгөһөнә аждаһаны алған...

Ҡаҙанға ит булды ике “аллам”...
Аждаһанан бары һөлдә ята...
Аһ, үкереп килә Маман-Ата[29]!
Сөйлө морон тауҙарҙы ҡуҙғалта!..
Табандары таштарҙы ҡуҙлата!..

Ҡурҡышынан, күрәм, бабам, бахыр,
Тубыҡланып ергә маңлай ора.
“Аллаҡайым! Аллаҡайым!” — тиеп,
Маман-Атаһына ул ялбара.
Һәм ни ғилләː үҙе ҡаҙған ямға
“Мамонт-алла”ны ла ул ауҙара...

Байрам итә, бына, көллө ырыу:
Ҡалъя — ҡалын, табын күрке арыу...
Ана шулай “алла” артлы “алла”
Бабам ҡаҙанынан үтеп барыу...

Мамонттан һуң бизон сират ала,
Зубр, тарпан, болан буғаһы ла...
Әйүптән[30] һуң бабам таңға ҡала:
Үҙенән ҙур ғәйре юҡ донъяла!..

Ана Алыб[31] — тәпәш әҙәмеңдән,
Дүрт аяҡлы, тәне ергә ләпәш,
Әммә тырнаҡ! Әммә аҙаулы теш!..
Абау-абау, аллалыҡҡа йәтеш!..

Көнө килә — бабам йөкмәп елә
“Алла”һын... һәм... унан тире иләй...
Алыбтан һуң — Бүре-Әсә[32], Балыҡ[33] —
Барыһы ла тунлыҡ вә яғалыҡ...

Хатта Әскәр-Абый[34] жыйлап үтә...
“Алла”лыҡтың тамам ҡото китә...
Һеңешәме әллә Күк ҡөҙрәте?!.
Их, күрмәҫкә ине был ғибрәтте!.. —

---

[29] Маман-Ата — мамонт, Әсәй-Атай, тигән һүҙ.
[30] Әйүптән — Айыуҙан.
[31] Алыб — Лыб, Лев йәғни Арыҫлан.
[32] Бүре-Әсә (барәсә) — барс; юлбарыҫ — сүл барсы.
[33] Балыҡ — волк, күк бүре.
[34] Әскәр-Абый — скарабей йәғни тиреҫ ҡуңғыҙы (боронғо Мысыр мифындағы хоҙай”.

Мәңгелек Ҡарт шул саҡ ниҙер әйтте
Һәм туҡталды шомло тамаша.
“Алла”ларын тамам ейеп бөтөп,
Бабам ғына тора тау-ташта...

*Мәңгелек Ҡарт:*

Шәжәрәне күрҙең, тәнәкәй:
Бер ос — Күктә, бер ос — тиреҫтә...
Ике осон бөргән бабайың
Тора баҫып, ана, бейектә.

Ярты һыны Күккә олғашһа,
Кендегенән ергә батҡан ул.
“Алла”ларын табып, юғалтып,
Инде килеп үҙен тапҡан ул!

Урал батыр булып етешкән
Әҙәм һынлы уның ҡәғбәһе.
Ярты һыны — Хоҙай затынан,
Ярты һыны — Әҙәм бәндәһе.

Шуға күрә терәп ул тора
Ерҙең йөҙөн, Күктең көмбәҙен.
Намыҫ илтһәң — Урал-хоҙайһың,
Тәнәкәйем, тимәк, һин үҙең!

Онотма тик ике затыңды:
Ерҙе, Күкте берҙәй ныҡ терә.
Шунда ғына Урал яңыра,
Шунда ғына оран өлгөрә!

Аллалыҡты ғына алһа ир,
Табандары Ерҙән айырыла.
Бәндәлеккә генә ҡалһа ир,
Ике ҡулы Күктән ҡайырыла.

Ике заттың ялҡын һәм боҙон
Тоташтырһа ғына йөрәгең,
*“Ер әйләнә!”* — тиеп әйтерлек
Урал оранын мин бирәмен!

*Мин:*

-- Тыумыштан уҡ әҙер мин быларға!

***Мәңгелек Ҡарт:***

-- Тимәк, әҙер туңыу, яныуҙарға?!

***Мин:***

-- Эйе, әҙер!

***Мәңгелек Ҡарт:***

-- Был күренер хәҙер
Тәржемәи хәлең көҙгөһөндә!

...Ут ҡабынып экран йөҙлөгөндә,
Күҙ алдыма килде үткәндәрем —
Шымғаным йә һөрән һүткәндәрем...

Оятымдан, берсә, йөҙ ҡыҙарҙы,
Берсә, ҡурҡыштан сәс үрә торҙо...
Ай-һай, еңел түгел барлауҙары
Ҡыл осонда ғүмер-араларҙы!

“Иңбашымда Намыҫ илттем мәңге!
Тик Хаҡлыҡҡа булдым мин өҙәңге!” —
Тип ярырға тамаҡ — иртә икән...
Толпар тиклем толпар илтә икән
Көндөң үҙен алтын эйәрендә,
Дүрт тояҡлы, ныҡлы үнәрендә
Һөрлөгөп үк ләкин китә икән...

Аһ дуҫтарым, керһеҙ түгел мин дә...
Күпме бушҡа йоҙроҡ йомарланған!..
Телеп һалыр саҡта тел тешләнгән,
Ҡом “дары”нан ҡөҙрәт ҡомарланған...

Юҡ-юҡ, етте! Кәрәк түгел барлау!
Илтһен инде экран башҡа яҡҡа!..
Шалт-шолт! Елп-ялп! — Тарих техникаһы
Яңы (о)сорҙо һынлай экран-ташҡа...

“Ҡыҙыл яу»ға керҙе инде донъя —
Атайҙарҙың килде заманаһы
Таш Йорт йөҙлөгөндә тасуирланып...
Йәш егеттәр үтте хозурланып —
Атай ҡорҙаштары командаһы!

Сәнкем[35] мәҙрәсәһе кейеҙенә
Аяҡ бөкләп, Ҡөрьән юлы аша
“Капитал”ды улар уҡығандар...
Ырымбурҙа булған ҡәғбә ташы —

Ғәййәр большевиктар ойошмаһы...
Шулай минең атай-олатайҙар
Курс уҙған ҡыҙылдарға табан —
Белеп үҫтек быны беҙ, малайҙар...

Һәм беҙ белдек: булыр шағир Төхфәт[36] —
Беҙгә яҡын Рәдүт ауылынан,
Күрше Мырҙабулаттан — Сөләймән[37],
Әхәт[38] — Яңауылда үҫкән улан,
Атам Әҙеһәм, олатайҙар Хисам,
Мусай[39], Ғариф[40], Ғөбәй[41] һәм Ҡаһарман,
Хәмзә, Сәлим, Суфияндар[42] менән
Ҡыҙыл гвардия ойоштороп,
Аҡ ғәскәргә ҡаршы бергә барған...

Шанлы юлда шәһит китте улар...
Исемдәре — изге ядкәрҙәрҙә...

***Мәңгелек Ҡарт:***

Туҡта, тәнәк, ниңә тик бер исем
Ҡабатланмай мәрмәр дәфтәрҙәрҙә?..

Мырҙабулатовың булды ҡайҙа,
Ҡыҙыл Каширинға әтрәт илткәс?..

***Мин:***
Ул 1-енсе Ҡыҙыл Армияла
Политъяугир булды, көнө еткәс.

---

[35] Сәнкем — Сәнкем-Биктимер, авторҙың тыуған ауылы.
[36] Төхфәт — шағир Төхфәт Сенәкәй-Рәдүди.
[37] Сөләймән — Сөләймән Шаһингәрәй улы Мырҙабулатов, граждандар һуғышы ҡаһарманы, Башҡорт АССР-ының тәүге халыҡ комиссарҙарының береһе һәм 1920 йылғы башҡорт ихтилалы етәксеһе.
[38] Әхәт — Ғәбдел-Әхәт Ғәбдел-Сибәғәт улы Сәйет-Батталов — Көньяҡ Башҡортостандағы башҡорт Ҡыҙыл гвардия етәксеһе, Башҡорт АССР-ының беренсе милиция башлығы, шағир Һибәтулла Салиховтың 4-се быуын тоҡомо.
[39] Мусай — Хәмзә Мусаев, һуңынан Өфөлә Ҡыҙыл профессура вузы ректоры.
[40] Ғариф — Ғариф Бесәнсе улы Сәйфетдинов, һуңынан БашЦИК яуаплы хеҙмәткәре.
[41] Ғөбәй — Ғөбәйҙулла Тажи улы Ураҙов, граждандар һуғышы ҡаһарманы, Көнбайыш фронтта Муса Мортазин бригадаһының полк комиссары, 1920 йылдың июненән — Башревком сәркәтибе.
[42] Суфиян Ғәзиз улы Солтанов — әсәһе яғынан шағир Әбелмәних Ҡарғалының 4-се быуын тоҡомо.

Шәреҡ халҡын туплап ҡыҙыл тыуға,
Шәһит[43] менән бергә фронт тотто.
Ленин саҡырыуын алған частәр[44]
Күреп-тыңлап китте был башҡортто.

***Мәңгелек Ҡарт:***

Ярлынан да ярлы башҡорт ине,
Күкрәккәйе ине бик дауыллы...

***Мин:***

Башчекаға нигеҙ һалыусылар
Башлығы тап шул Сөләймән булды.

Зәки Вәлидовтар йәш дәүләтте
Үрт эсенә ташлап ҡаскан саҡта,
“Башҡортостаным!” — тип ҡоралланып,
Ялпы халыҡ яуға сапҡан саҡта,

Урал тауы, һүнмәҫ вулкан кеүек,
Ялҡындарын ләүкеп дөрләгәндә,
Башҡортостанымдың дошмандары
Үрт һибергә утҡа теләгәндә,

Бәғзе берәү ҡаскан хөкүмәтте
Юҡтап сәсен йолҡҡан, лаф орғанда,
Бәғзеләре яңы хөкүмәттән
Ҡалъя көтөп танауын борғанда,

Һуҡыр сәйәсмәнлек хаталары
Хаҡһыҙлыҡҡа тиклем барып етеп,
“Аңһыҙ массалар”ҙың йәнен өтөп,
Милли хәрәкәткә[45] тарығанда,

Ошо башҡорт, яңы тыуып килгән
Башчеканың яугир етәксеһе,
Ике ялҡын уртаһында ҡала,
Үҙ башы һәм үҙ йөрәге менән
Эш итергә ғәййәр тейеш була...

---

[43] Шәһит — Шәһит Хоҙайбирҙин.
[44] 1919 йылда Ленин саҡырыуы буйынса Петроградты Юденичтан ҡурсаларға барған ҡыҙыл башҡорт ғәскәрҙәре.
[45] Милли хәрәкәт — Башҡортостандағы 1920 йылғы ҡанлы ихтилалды хатта большевиктар үҙҙәре лә “башҡорт халҡының милли-азатлыҡ хәрәкәте” тип танырға мәжбүр булды.

Етәкселек бәҫен йөкмәп ала
Ихтилалдың... Туплай үҙ янына
Баш бирмәгән яуҙы — ил ҡаймағын!
Көрәш дөрләй! Иләү ялҡынлана!

Таный Мәскәү ошо ихтилалда
Үҙе белгән ҡыҙыл яугирҙәрҙе—
Петроградта, Польша фронтында
Совет өсөн ҡан ҡойған ирҙәрҙе...

Йөрөй улар хәҙер “банда”ларҙа...
Бындай хәлгә башҡорт ниңә төшкән?!
Кем дуҫ ҡалыр, булғас улар дошман?!.
Нисек ҡарар Шәреҡ бындай эшкә?!.

Ә Сөләймән, ябай ялпы улы,
Ошо ерҙең ярлы ерекмәне,
Ерекмәнсә ябай уй йөрөтә:
Тороп ҡалһа илем теге ярҙа,
Нимә ҡалыр яуланған иректән?!.

Үҙ йөрәген ҡыҙыл мандат ҡылып,
Вулкан уртаһына уҙа чекист.
Дөрләп торған ялҡын араһынан
Хаҡлыҡ ҡулын илгә һуҙа чекист.

Башҡорт милләтенең исеменән
Хаҡиҡәтте егет ярып һала:
Хаталар ҙа, бәғзе уңыштар ҙа
Йәшерелмәй, үҙ урынын ала.

*Ысын* Советтарҙың маҡсаттары —
Ярлы халыҡ маҡсаттары икән.
Урал урмандары даулағанды
*Ысын* Советтар ҙа яҡлай күптән!

Башҡорт дәүләтенең хоҡуҡтарын
Тапанылар “большевик”тар — дөрөҫ...
Ҡайтарырбыҙ кабат хоҡуҡтарҙы,
Тыныс көрәш ҡалыбына кереп... —

Бына шуны тоя хәтәр ыҫтан
Башчеканың тыныс өгөтөнән.
Ышанмай ҙа булмай: уның менән
Фронттарҙа аҙмы юл үтелгән!..

Дуҫҡайҙарым, тоям мин ошонда
Етәксенең бөйөк миссияһын:
Масса менән бер йән, тән булыуҙан
Килә торған һирәк көс кейәһен!..

Һәм һөҙөмтә: "бандит" ыҫтандары
Һуҡыр дәжжаллыҡтан ҡотҡарыла.
"Контр"лыҡҡа илткән юл бикләнеп,
Ҡыҙыл тыу төбөнә тупланыла.

Ғәжәп хикмәт күрә ҡыҙыл Рәсәй:
Баш бирмәүсе "януар" йүгәнләнгән —
Ҡыҙыл Армияның частәренә,
Ҡыҙыл штабына ул әйләнгән!

Тулыһынса платформаһында
Советтарҙың килә хәтәр ғәскәр...
Ҡыҙыл хәрби комиссар Мортазин —
Парламентер — бара һөйләшеүҙәр...

Дарьяланып ағыр ил ҡандарын
Ағыҙмайса, имен көн яулана!
Уйлайым мин: нишләр ине Урал,
Башчека ир башҡа юл һайлаһа?..

Тәүәккәллек, ай-һай, кәрәк саҡта,
Уттан ситкә шылһа ул тәүәккәл?
Бер кем дә бит ғәйепләмәҫ ине,
Маҡтар ине хатта мәркәз әүәл:

"Принципиаль чекист булды, — тиеп, —
Айырҙы ул аҡты, — тип, — ҡаранан.
Баш күтәргән совет дошмандарын
Ҡырып һалды шанлы йән-ҡаһарман!.."

Тарих өсөн ҙур ҙа булмаҫ ине,
Ул булмаһа, сорлап аҡҡан ҡан...
Унын ҡарау үҙен Лубянкала[46]
Йәнсемәҫтәр ине аҙаҡтан...

***Мәңгелек Ҡарт:***

Ник йәнсеттең?!

---

[46] Лубянка — ВЧК-ның Мәскәүҙәге төрмәле бинаһы.

***Мин:***

Мин бит юҡ та инем
Уны алып киткән заманда[47].
Унан ҡалған “Большевик” колхоздың
Бураҙналарын беҙ ярғанда:

“Сөләй, Сөләй, Сөл-Сөл, Сөләймән...” — тип
Сыйнар ине һабан тәгәрмәстәр...

***Мәңгелек Ҡарт:***

Ә һин, тәнәк, нисек сыйнаманың?..
Аптырайм... Үрә тора сәстәр!

***Мин:***

Яҡлай алмаған ул үҙен... Әжәл
Алып киткән, Хаҡлыҡ көтмәҫтән...
Ярты быуат тулып үткәс кенә
Сер асыла төштө тиктәҫтән:

Шул төбәктең хөкөм ҡулы етмәй
Тороп ҡалған “синфи дошман”ы
Үҙе ҡылған ысын бандитлыҡты
Япҡан уға: “Мин, — тип, — ҡуштаны”...

Йылдар аша инде мин аңлайым:
Колхоз төҙөү еңел булмаған.
Башлап йөрөгән тәүге рәйестәрҙе
Кулак обрездары юллаған.

Обрездан да булған хәтәрерәк
Ялған “ҡыҙыл”дарҙың ялаһы.
Шул ялаға батып аҙмы янған
Аҡ күңелле башҡорт балаһы...

Заманында уны бит Мәскәүҙә
Вәкил итеп тиккә тотмаған
Башҡортостан[48]! Даһи баш осонда
Башын эйеп тиккә тормаған[49]!

---

[47] Сөләймән Мырҙабулатовты 1930 йылдың декабрендә беҙҙең Сәнкем-Биктимер ауылынан ҡулға алалар.

[48] С.Ш. Мырҙабулатов 1922 — 1927 йылдарҙа баш ҡалабыҙ Мәскәүҙә ВЦИК ҡаршыһында Башҡорт АССР-ы вәкиллегендә эшләй.

Мин аңлайым: Ленин баш осонда
Ярлы улы илен уйлаған.
Илгә ҡайтып иген игеүҙән дә
Изгерәк юл уға булмаған.

Һәм ғариза биреп хөкүмәткә,
Ҡайта ергә, ерһеп, игенсе.
Үҙ усынан муллыҡ орлоҡтарын
Сәсеүҙәрен ергә күрһәмсе!

Күргән уны минең олатайҙар,
Күргән уны минең атайым.
Ул һалдырҡкас ауыл һайын мәктәп,
Мәсет айы ҡалған янтайып...

Бына шунан, буғай, башланғандыр
Күрә алмаусылар ялаһы...
Мәктәп ҡала. "Большевиг"ы ҡала.
Бәлә ала Хаҡлыҡ балаһын...

**_Мәңгелек Ҡарт:_**

"Бәлә"... Тимәк, нәфрәт түгел һиндә?

*Мин:*

Кемгә?

**_Мәңгелек Ҡарт:_**

Һаман аҡланмаған исемгә[50].

**_Мин:_**

Эйе, шулай...

**_Мәңгелек Ҡарт:_**

Ҡурҡмайһыңмы, тәнәк?

**_Мин:_**

[49] 1924 йылдың ғинуарында Мәскәүҙә В.И. Ленинды һуңғы юлға оҙатҡанда Башҡортостан вәкилдәренең береһе сифатында С.Ш. Мырҙабулатов та уның башы осонда матәмле ҡарауылда тора.

[50] Был юлдарҙы яҙғанда "халыҡ дошманы" С.Ш. Мырҙабулатовтың яҡты исеме аҡланмағайны әле.

Кемдән?

***Мәңгелек Ҡарт:***

Күрше-күлән ишенән...

***Мин:***

Мин ышанам: әжәл ҡул һалмаһа,
Сығыр ине ул йән аҡланып.

***Мәңгелек Ҡарт:***

Ышанғас һуң?! Ҡырҡта, ярылып ҡырҡҡа,
Ҡапҡаларын ниңә ҡаҡманың?!

***Мин:***

КГБ-ның, Лубянканың мыни?..

***Мәңгелек Ҡарт:***

Кремлдең хатта таштарын!
Ҡырҡлығыңда, ҡурсап Хаҡлығыңды,
Ҡылды ҡырҡҡа ярыр саҡтарың!

***Мин:***

Ай-һай, ҡартлас... Ҡырҡта, тигәс тә һин...
Батырға ла, тиҙәр, йән кәрәк...
Һиңә мәғлүм: фатир алыу ҡыйын...
Фатир көттөм, булдым иплерәк...

***Мәңгелек Ҡарт:***

Ә хәҙер һуң? Йәшең илле буйлай...
Ҡағып өлгөр кәрәк ҡапҡаны!

***Мин:***

Яңғыҙ ҡарға ҡарғып ҡысҡырыуҙан
Ҡар китәме?!. Һаулыҡ ҡаҡшаны:

Склероз... йөрәк... подагра...
Ҡалдырайыҡ быны тарихҡа.

Намыҫты ла, ҡартлас, илтеп була
Хәлдән килерлерәк тарафҡа...

***Мәңгелек Ҡарт:***

Уныһы хаҡ... Әйҙә, беҙ улайһа
Еңелерәк яйҙы ҡарайыҡ.
Күрәһеңме, яҡты бер тәңгәлдә
Оло оро тора ҡарайып?

Яңы быуын һорау билдәһе ул
Һәм үпкәһе ҡартлас быуынға:
Үҙең әйткән Муса Мортазиндың
Кем икәнен белмәй тыуымдар...

Әйтсе инде: яраҡ хәлме ошо?!
Шағир-шоғор булып бөттөгөҙ,
Кемде генә герой итмәнегеҙ,
Тик был ирҙе урап үттегеҙ.

Ә бит барҙы Урал күкрәгендә
Хәтәр яуҙарҙың да хәтәре.
Мелеховтар[51] ғына ише түгел
Быңдай бәғзеләрҙең эштәре!

“Тымыҡ Дон”дай әҫәр тыумаҫ, күрәм,
Һеҙҙән, склероз ирҙәрҙән...
Һис юғында ниңә, очерк яҙып,
Документаль әҫәр бирмәҫкә?!

***Мин:***

Эйе шул, тим...

***Мәңгелек Ҡарт:***

Тиһең, тиһең, тиһең...
Төйәһегеҙ һыуҙы килелә!
Теге — “аҡланмаған”... Ә был бит һуң
Аҡланыуҙан да аҡ ине лә?!

***Мин:***

Ә шулай ҙа йөрөй төрлө һүҙҙәр...

[51] М.А. Шолоховтың “Тымыҡ Дон” романының төп геройы Григорий Мелехов.

*Мәңгелек Ҡарт:*

Һин һуң мөнәсәбәт ҡылдыңмы
Ул һүҙҙәргә: хурлаһалар — яҡлап?
Йә булмаһа, ҙурлаһалар — ваҡлап?
Телең тешләп әллә ҡалдыңмы?..

*Мин:*

Ил нишләһә, мин дә ҡылдым шуны —
Булып булмай илдән өҫтәрәк...

*Мәңгелек Ҡарт:*

Эйе, шулай... Төбәк “хаҡлығынан”
Аша атлау өсөн көс кәрәк!

Ә бит белдең: унан юғарыраҡ —
Юғалмаҫлыҡ Урал Хаҡлығы!
Муса батырын да юғалтмай, ул
Ғәҙел яуҙың күрҙе паклығын.

Ә һин шуны белә-күрә тороп,
Тын күлеңдә тынлыҡ һаҡланың...

*Мин:*

Һаҡламаным! Мин дә тыбырсындым!

*Мәңгелек Ҡарт:*

Серәкәйҙәй — ҡанат ҡаҡҡаның...

*Мин:*

Елгә ҡаршы төкөрөүҙән генә...

*Мәңгелек Ҡарт:*

Утҡа ҡаршы ирҙәр түш кирә!
Ә һинең бит ут торманы алда —
Ғәйбәт буталған тел-теш кенә!..

*Мин:*

Унынһы хаҡ...

***Мәңгелек Ҡарт:***

Тимәк, һин беренсе
Тотонаһың зарур ул эшкә?!

***Мин:***

Өлгөрөрбөҙ... Тәүҙә әйләнһен, тим,
Өҙөп кенә ҡабыр емешкә...

***Мәңгелек Ҡарт:***

Ха-ха-ха-ха! Булдың йәнгә яфа!
Көшт! —

Ҡиблалар китте әйләнеп...
Экран юлы кире тағатылды...
Әйтерһең дә, кемдер, енләнеп,

Тышҡа олаҡтырып мине, тартты
Мәмерйәнең ойоҡ башынан...
...Дөһөрҙәп таң ата, өнөм ҡайта!..
"Ха-ха-ха-ха!" — Шаңдау шашына,
Йән керетеп бөркөтташына...

## *30. Көн*

Төштәр төндөгөнән төңөлдөм мин —
Балҡып ята алда Уралым!
Нур йылғаһы йырған аҡ ярҙарҙай
Пак Өфөмдөң шаулы урамы.

Күк сағылтҡан сағыу тәҙрәләре —
Көнгә баҡҡан зәңгәр экран.
Ер шарының фәҡәт шатлыҡтары
Ҡунһын ине унда, йылтырап!

Йорттар ҙа бит тере йән эйәһе —
Тойоп йәшәй илем яҙмышын.
Үҙенеке итеп күтәрә ул
Планетаның шатлыҡ, һағышын.

Салт сағыла зәңгәр экрандарҙа

Океан артындағы күҙ йәше.
Ишетелә йөрәк һуғыуҙары
Күрше ҡитғалағы ерҙәштең.

Полисмендар уны быуған саҡта,
Тамағына тылҡып оранын,
— Демо-кра-тияааа! — тип сәсрәп сыға
Боғаҙ йыртығынан бруноның...

Күр: Азатлыҡ статуяһы бит —
Оло күсәк тотҡан полисмен.
— Демо-кра-тия! — тип күсәк һуға,
Орандарҙы йәнсеп янки-Сэм...

— Демо-кра-тия! — шул лаф ороуын
Күсәк көсө менән нығыта.
Төңөлмәгәндәргә пуля ата,
Төңөлгәнгә доллар ырғыта...

Ҡитғаларҙың алып боғаҙынан,
Тамағына тимер келәп төйә...
Сеү! Бөгөн бит Планетам үҙе
Оран ора:
— Демо-кра-тияааа!..

— Демо-кра-тияааа!.. Демо-кра-тияааа!.. —
Миллиондарҙың берҙәм ораны
Спиралдәй ерҙе әйләндереп,
Планетаның билен ураны.

Параллелдәр буйлап теҙелешкән
Кешелектең утлы урттары.
Шулар оранының типкеһенән
Әйләнәлер мәңге Ер шары

Реактивлы бөтмәҫ ҡеүәт алып...
Кәрәк, кәрәк ергә брунолар!
Ни эшләрбеҙ утлы урт быуылһа,
Үрт ҡалмаһа оран оранлар?!

Брунолар илткән ил Намыҫы
Планетанан китһә тәкмәсеп?!.
Осҡон ғына Ергә етер төҫлө,
Осһон өсөн саңы ут сәсеп...

Плазма-оран урай планетаны —

Хәтәр ҡөҙрәт бәйҙән ысҡынған.
Атмосфера үҙе — шартлар дары,
Ә һәр ауаз — утлы осҡондай.

Оран менән һөрән төкәлешә —
Замананың ике тараны:
*“Ер әйләнмәй!”* — тиеп әйттертмәксе
Инквизиция һөрәне...

*Ер әйләнә!* — *Ләкин* Ер әйләнә,
Ваз кисһә лә мең-мең Галилей!..
Сеү! Экранда, оло күҫәк тотоп,
Тора баҫып һөрән-ҡан иле.

Бөтә Америка ҡитғаһына
Таныш һыны, күҫәк-ҡоралы...
Сеү! — Кешелек-синхрофазатрондың
Елә ләүкеп плазма-ораны:

— Демо-кра-тияааа!..
— Демо-кра-тияааа!..
— Долой Плуто-кра-тияааа!..
.........................................................

Зәңгәр экрандарҙың күҙен бағып,
Тыңлай Ғаләм, тыңлай Ер уны...
...Кремлдә илем кәңәш ҡора —
Ҡыҙыл фирҡәмдең ҙур форумы.

Бөйөк Конституция бында
Ил алдына һалып ҡарала —
Демократияның Төп Ҡануны
Заман дарыһында ярала!

Йәйғор уйнай ҡыҙыл трибунаның
Башаҡ ҡайған Герб йөҙөндә.
Ун биш республикам йөҙ халыҡты
Ҡауыштырып һөйләй бер телдә.

Ғәҙеллектең теле менән, буғай,
Һөйләй Генеральный секретарь.
Башаҡ көсөн бөйөк трибунамдың —
Икмәк еҫен тоя ер-күктәр!

Әйтелһә лә ябай проза менән,
Шиғырҙарға тиңһеҙ был өндәр!..

Икмәк һәм йыр кеүек, Ер шарына
Йылы илтә илдән был телмәр:

*...“Хәҙер совет кешеһе*
*үҙенең бер ваҡытта ла эшһеҙ булмаясағына,*
*үҙ һәләтлектәрен һәм таланттарын*
*ҡулланыр эш урыны буласағына,*
*ауырып киткән хәлдә*
*япа-яңғыҙ ҡалмаясағына,*
*ҡартлыҡ көнөндә*
*тәьмин ителәсәгенә,*
*балаларының яҙмышы өсөн*
*тыныс буласағына*
*ышана.*
*Ләкин былар*
*беҙ өлгәшкәндәрҙең,*
*шуның өҫтәүенә,*
*беҙ ынтылғандарҙың*
*бөтәһе лә түгел әле...”*

Ни тиклем дә ябай, тәрән хаҡлыҡ! —
Ябай була нигеҙ таштары.
Демократияның хаҡ нигеҙен
Ҡойоу беҙҙең илдә башланды!

Һәр ватансы азат кризистарҙан,
Эшһеҙлектән, аслыҡ, ҡоллоҡтан!
Һәр ватансы хаҡлы — яҡты көнгә,
Дәртле хеҙмәт, ал-ял, муллыҡҡа!

Һәр ватансы — тулы хоҡуҡ тауы,
Зар тулҡыны йыға алмаҫлыҡ!
Ике йөҙ ҙә етмеш миллион[52] сағыл
Ҡая булып ғорур беҙ ҡалҡтыҡ!

Сағылдарҙан хасил Урал тауы,
Тотҡан юлым — дуҫлыҡ, тыныслыҡ.
Конституциям тәьмин итә
Беҙгә Икмәк менән Ҡылысты!

Урал батыр кеүек, иңбашымда
Ил Намыҫын илтер хаҡым бар.
Уртымдағы үртле оранымды
Ҡеүәтләрлек батыр халҡым бар!

[52] СССР халҡының йән иҫәбе.

Күҙҙәр беҙҙең айҡай алыҫтарҙы,
Күҙҙәр беҙҙең күрә яҡындан!
Сағыл төбөн төртһә Ер дарыһы,
Түбәләрҙе Ҡояш ялҡынлай...

### *31*

Мәскәүемдең дәртле куранттары
Һанай ваҡыт — Ерҙең сәғәте.
Хистәр дауылыма сыҙай алмай
Сығам өйҙән.
Нурҙар сәсрәтеп,

Сваркалар гөжләй ил иңендә.
Бөтөн илем — бөйөк төҙөлөш.
Ил йөрәге — тоташ электрод —
Баҙырлата йәйғор һибелеш.

Яҡут йондоҙҙары ватанымдың
Нур-сатҡылар менән уралған.
Бына ниңә көллө ҡитғаларға
Яҡты бөркә беҙҙең урамдан!

Демократтар илткән имен көндөң
Саф һауаһын һулай Ер шары.
Ватансыһы булып кешелектең,
Тыуа Ватанымдың улдары.

Ошо илдә үҫеп бил турайттыҡ,
Ғорур ҡараш аттыҡ күктәргә.
Беҙҙең иңдәр инде планетаның
Күк көмбәҙен берҙәм күтәрә.

Кирелһәк беҙ — донъя бейегәйә,
Яҡыная алыҫ арауыҡ.
Һөрөм-һөрән көндө япмаһын тип,
Ер офоғон киреп барабыҙ!

### *32*

Дөп-дөп ҡаға балға аҡ сыуайҙы —
Кerә бетон ергә төпкәрәк.

Нигеҙ булып ап-аҡ бағаналар
Теҙеләләр — йортҡа төп-терәк.

Шартлап керә ергә аҡ сыуайҙар,
Бәргән һайын балға елтерәп.
Әйтерһең дә, ҡаға минең йөрәк,
Дары шартлауынан тетрәп.

Пүлсәрләнеп быуын-быуын бата,
Заманалар ҡаҡҡан сыуайҙар.
Шулай ғорур кереп киткән ергә
Беҙҙең нигеҙ — атай-бабайҙар!..

Һеңешкәнгә ергә сыуайланып,
Мең-мең быуын ата-бабалар,
Биналанып көнгә ҡалҡа бөгөн
Беҙҙән тыуған алсаҡ балалар!

Әнә, күрәм, керә минең быуын —
Ап-аҡ һыны ергә ҡағыла...
Башҡорт менән урыҫ — ике эштәш —
Тирләп-бешеп йортто һалыуҙа...

Бер нигеҙҙә тора улар ҡалҡып,
Ҡул ҡыҫышһа — бер ҡуш асамай.
Бындай йортто дауыл ала алмай,
Ер тетрәүҙән был йорт ҡаҡшамай!

Бер-бер артлы өҫтәп яңы ҡатты,
Күтәрелә — йәшел түбәле!..
Һалдат пилоткаһы кейгән мәллә
Йорт ҡынабыҙ, күрсе, күр әле!

Дүрт ҡиблаға балҡый күк күҙҙәре,
Подъездары иркен ала тын.
Фронт һыҙыҡтарын байҡамаҡҡа
Окоптанмы сыға һалдатым?!

Тыңлап алды: бүртенгәндәй бөрө,
Сихри тынлыҡ бөркә ҡиблалар.
Түбә менән нигеҙ бар килгәндә
Имен була икән донъялар!

...Наҙ мәлйетеп, Ерҙең йәҙрәһенән
Сыуай буйлап йылы эркелде.
Һалдат пилоткалы алсаҡ йорттоң

Күҙҙәренән саф нур бөркөлдө.

Егерменсе быуат аҙағының
Ерҙе ҡотлап тыуған ораны,
Ураҡ-Сүкеш сыңын бәүелдереп,
Ләйсән еле булып ураны:

— Де-мо-кра-ти-яяя!
— Де-мо-кра-ти-яяя!..
-- Долой плутократия!..

### *33*

Брунолары бөйөк кешелектең
Һис ҡасан бит тынғы тапмаған.
Дары менән дөрләп орандары,
Ерҙе-күкте мәңге айҡаған.

Хәтәр булған дары уйындары,
Түҙгән нисек, тим, ир муйындары?..
Эйелеп ус ҡара тупраҡ алам —
Тупраҡ түгел бит был, ылғый дары!..

Эйелеп бер суйыр ярсыҡ алам —
Суйыр түгел, әҙәм һөйәктәре!..
Ағып ятҡан анау шөңгөр һыуым —
Быуындарҙың ҡанлы күҙ йәштәре!..

Күкрәк киреп һулыш алған һауам —
Дөрләп торған дары төтөндәре.
Шуны һиҙмәй, көнгә хисап бирмәй
Йөрөгәнмен икән мин элгәре...

Бөгөн күрәм: Ерҙең йәҙрәһенә
Сыуайҙарым төбө ныҡ терәлгән!
Планетаның мәңге сарсауҙары
Оран булып бырғый ер тетрәүҙән!

Оран аша Ерҙең йәҙрәһенән
Ҡояш йәҙрәһенә сорғолабыҙ.
Беҙ — коммунист! Утлы спирале
Булып көндөң, Ергә сорналабыҙ!..

Шуның өсөн бөйөк замананың
Талабына лайыҡ был көр оран.

Көйләп урай Ерҙең күсәренә
Ул оранды беҙҙең киң, төҙ урам!

## 34

Туҡта, шағир! Фекер тупла, шағир! —
Шартлай нимә океан артында?..
Полисмендың һөрөм-һөрәне бит
Күсәренә Ерҙең тартыла.

Сыбыртҡылап тартҡан ул бруноның
Алҡымынан, быуып оранын.
Үҙ һөрәне менән һөрһөтмәксе
Ҡитғаларҙың нурлы урамын.

Саф елдәрен ерҙең тағатырға —
Спиральгә ҡаршы спираль.
Бөйөк оранды ул һөрән менән
Алмаштырмаҡ өсөн үс ҡора...

Зәһәр Хиросима тамуғынан
Һөйрәп алған утлы киҫәүен
Ер уртына тығып болғамаҡсы
АҠШ-полисмендың иҫәбе...

Тәне сатнай Ерҙең шул киҫәүҙән,
Селпәрәмә килә Күк йөҙө.
Киҫәүләнеп Айҙа төтәп тора
Амстронгтың юл-эҙе:
— Америка — азат донъя!
— Беҙҙә иң шәп демократия!
— АҠШ илтә демократия!
Ә мин әйтәм:
***Дерьмо-кратия!..***
***Дөмә-ҡара-төйәк!***
***Дөмә-ҡара-төйәк!***

## 35

Демократия!
Ниндәй татлы һүҙ был — демократия!..
Уның елек майын һурып ташларға
Хыялланған күпме плутократия...

Демократия!
Яһилдарҙы тетрәндергән
Демократия!
Юҡһылдарҙы кинәндергән
Демократия!
Галактика һынын осҡор спиралләп,
Ерҙе-күкте әйләндергән Демократия,
Ҙур хәрефле, Нур хәрефле Демократия!..

Күҙәнәк һәм атомдарҙан протонланып,
Тышҡа урғып сыҡҡан Демократия!
Планетаның азатлыҡҡа сарсауын
Фаш иттергән ысын Демократия!

Хатта плутократтарҙы ла, таҫма теллəп,
Майлы ҡайыш ҡылған Демократия!
Һинең татлыларҙан татлы төшөнсәң
Телдән төшмәҫ, ысын Демократия!..

Осоп барған ҡоштар саңҡып ҡысҡыра:
— Демо-кра-тия!
Елеп барған күк боландар ҡысҡыра:
— Демо-кра-тия!
Хатта өнһөҙ аҡ балыҡтар ҡысҡыра:
— Демо-кра-тия!

Ергә ингән селәүсендәр ҡысҡыра:
— Демо-кра-тия!
Ҡайын тәлгәштәре сыңлап ҡысҡыра:
— Демо-кра-тия!
Үлән ҡыяҡтары йырлап ҡысҡыра:
— Демо-кра-тия!
Телеграф-сымдарҙа ел ҡысҡыра:
— Демо-кра-тия!
Күктә Ҡояш, Ай, йондоҙҙар ҡысҡыра:
— Демо-кра-тия!
Хатта сеңле серәкәй ҙә сең һала:
— Демо-кра-тия!
Хатта плутократия ла лаф ора:
— Де-**моЯ**-кратия-Я-Я-**Я!..**

Егерменсе быуаттың еҙ борғоһо
Боғаҙынан һине борғой, Демократия.
Сөнки һине юҡһыныуҙан Ер һәм Күк
Критик мәлдә ярһый, Демократия.

Бруноларҙың булып йөрәк дарыһы,
Ләүкейһең һин ерҙә, Демократия.
Кешелектең йәҙрә энергияһын
Туплайһың һин бергә, Демократия.

Синхрофазотроны Ерҙең, урғылтып,
Ҡотло итһен һине, Демократия.
Икмәк һәм дә ҡылыс һымаҡ, халыҡҡа
Хеҙмәт ит һин мәңге, Демократия.

Полисмендың "күҫәк демократияһы"н
Утҡа осор алып, Демократия.
Бының өсөн һүтеп ташла һин Ерҙән
Дәжжал спирален, Демократия.
Бостон фрак, аҡ бирсәткә кейеп, тим,
Дар ҡормаһын ялған демократия!
Плутократия!

## *36*

АҠШ-та юҡ көләүендәр... —
Клоундар
Көлгә аунай, итек ялай — демократия.
Полисмендың аяғына һарылып
Ятыу йәтеш ҡалай — демократия!
Полисмендың күҫәгенең шәүләһен
Ерҙән үбеп шаулай "демократия":
    — Тулы дерьмократия!..

Бруноларҙың боғаҙынан быуыусы
Боғалаҡты ҡосоп:
    — Дерьмократия!
Ҡан баҫҡан күҙ, осло аҙау тештәрен
Үрнәк ҡылып:
    — Дерьмократия!..

*Америка, Америка,*
*Ҡалдың ҡайһы көндәргә?!*
*Әллә, тимен, индейҙарҙың*
*Ҡарғыштары ебәрмәй?..*
*Шуға мәллә уландарың*
*Намыҫтарын йығалар?*
*Көлдә аунап, һүлдә ҡайнап,*
*Һумалаға сумалар,*

*Һөрән алып сығалар:*
*— Америка, Америка —*
*Иң шәп демократия!*
*Иң шәп демо-кра-тия!..*

*Эшһеҙ ҡалған, эш табалмай,*
*Нисәмә йыл интегә —*
*Иң шәп демократия!*
*Урамда сүп сүлмәгенән*
*Икмәк эҙләп бил бөгә —*
*Иң шәп демократия!*

*Йорттан яҙған, һорап ярҙам,*
*Уҙғынсыға ҡул һуҙа —*
*Иң шәп демократия!*
*Йоҡлай кисен эскәмйәлә*
*Йәки һалҡын болдорҙа —*
*Иң шәп демократия!*

*Юлдан яҙып, сыға юлға*
*Юл баҫырға, һуйырға —*
*Иң шәп демократия!*
*Бығауланып, таш ҡапсыҡҡа*
*Ултыртыла ун йылға —*
*Иң шәп демократия!*

*Юл баҫырға сыҡмағаны*
*Сыға Брукленд-күпергә —*
*Иң шәп демократия!*
*Осоп баштүбән упҡынға,*
*Нөктә ҡуя ғүмергә —*
*Иң шәп демократия!*

*Был юлдарға баҫмағаны*
*Башын баҫып уйлана:*
*"Ҡайҙа демократия?!"*
*Флаг күтәреп, Аҡ йорттоң*
*Ҡапҡаһына юллана:*
*— Даешь демократия!*

*Ҡушыла уға башҡалар,*
*Урам тулып атлайҙар:*
*— Беҙҙә демократия!*
*Ҡаршы алып полисмендар,*
*Күҫәк менән һыйлайҙар:*

*— Иң шәп демократия!*

*Күҫәк киҫмәгән килкегә*
*Газлы бомба ташлайҙар:*
*— Иң шәп демократия!*
*Каучук пүлдәр һөйәктәрҙе*
*"Һындыртмайса" ҡапшайҙар —*
*— Иң шәп демократия!*

*Туҡтамаһа, һыу пушкаһын*
*Аттыртырға башлайҙар:*
*— Иң шәп демократия!*
*Ҡурғаш ямғырҙар яуҙыртып,*
*Ғәзиз башты ашайҙар:*
*— Иң шәп демократия!*

*Йыйып илтә үлектәрҙе*
*Иркен тамуҡ баҙына:*
*— Иң шәп демократия!*
*Клоундар көлөн ҡоя*
*Ҡанлы асфальт ташына:*
*— Иң шәп демократия!*

*Америка әмер итә:*
*"Бруноларҙың көнө бөтә!"*
*— Иң шәп демократия!*
*Тыумай унда көләүендәр,*
*Итек ялай клоундар,*
*Полисменга хеҙмәт итә:*
*— Иң шәп демократия!*

*Доллар емен түгеп була —*
*"Бруно"ларын бөгөп була —*
*— Иң шәп демократия!*
*Бөгөлгәндә, иң башынан*
*Ил Намыҫы ҡолап ҡала:*
*— Иң шәп демократия!*

*Намыҫынан яҙған ирҙәр*
*Селәүсенгә оҡшап ҡала:*
*— Иң шәп демократия!*
*Селәүсенгә оҡшағандан*
*Клоундар хасил була:*
*— Бына демократия!*

*Көллө илен клоундай*
*Көлдөрөргә ниәт ҡыла:*
*— Бик шәп демократия!*
*Бөгөлмәгән, көлмәгәнгә*
*“Һуңғы сара” гына ҡала...*
*— Һәй, шәп демократия!..*

## *37*

Оркестрҙар! Алтын арфаларҙы
Бер ситкәрәк алып ҡуйығыҙ!
Күк күкрәтеп тартып фанфарҙарҙы,
Ер тетрәтеп дөмбөр һуғығыҙ!

Көр шаңдауҙа ярһып яңғыраһын
Кешелектең оран тауышы:
Демократтар сыға аренаға!
Еңелмәҫкә килгән яу — ошо!

Ергә кермеш ҡырҡмыш сыуайҙарҙан
Сәсрәп сирткән осло атҡы-нур
Профилен сыйып кешелектең,
Ҡылыс йөҙөләй ҡырт сағылыр!

Демократтар сыға аренаға,
Быуаттарға баҫып аҙымын.
Күҙе менән ҡыйып-киҫеп үтә
Ҡатилдарҙың ҡанлы ҡаҙығын.

Ғәййәрлек һәм ғәҙел үткерлекте
Демократтар һатып алмаған.
Үҙҙәре лә улар һатылмаған —
Теле менән ялҡын ялмаған.

...Туйгилденең ҡара күҙҙәренә,
Йәнен йолоп, ялҡын орона.
Ялҡын йотоп оран ора Урал:
“Төңөлмәйем! Сүкмәҫ Бруно!”

Меҫкен йәндәр! Яна сатана, тип,
Сутаналар утҡа йыуана.
Ҡитға буйлап ләкин атлап китә
Көлгә ҡалды тигән “диуана”...

Аҙымы киң — аша быуаттарҙы,

Самолетһыҙ милдәр елгәрә.
Утлы Ерҙә[53] төтәй табандары,
Анд[54] боҙлоғон иңе түңкәрә.

Ап-аҡ Намыҫ илтә Анд иленә:
Хеҙмәт халҡы, ырыҫ ал инде! —
Керә балҡып Хаҡлыҡ һарайына
Ҡарҙай аҡ күлдәкле Альенде[55].

Аҡ-һөт ҡоя ҡулы сабыйҙарға,
Аҡ нур сәсә йөҙө ҡарыйҙарға:
"Килһен бәхет ҡара, тар өйҙәргә!
Хөкөм керһен алтын һарайҙарға!"

Полисмендың ләкин дәү күҫәге
Андтар аша аңдып һелтәнә.
Аҡ күлдәкле заман бруноһына
Яза әҙер: дөрләй ут әнә!

"Ҡайт, Альенде!" "Төңөл, Сальвадор!" — тип,
Ут өҫтөнә утлы ҡуҙ тама.
Төңөлмәгән ҡитға демократы
Нур балҡытып дөрләй уртала.

Полисмендың ялай итектәрен
Селәүсене илдең — Пиночет[56].
Илгә илһам — Бруно орандары!
Пиночеттар һөргән һөрән — сит!

...Оран менән һөрән киршәлеүҙән
Ҡитға билен дәһшәт ялмаған...
Планетам бөгөн — Күкте ярып
Ялҡынланып барған алмалай...

## *38. ШӘҮЛӘЛӘР*

### I

...Йондоҙҙарҙың күҙен ҡамаштырып

[53] Утлы Ерҙә — Америка ҡитғаһының көньяҡ (Чили) ярында.
[54] Анд — Көньяҡ Америка ҡитғаһы буйлап һуҙылған бейек тау.
[55] Альенде — Сальвадор Альенде, Чилиҙың халыҡ һайлап ҡуйған президенты, ул фашистар хунтаһы ҡулынан һәләк булды.
[56] Пиночет — Чилиҙағы фашистар хунтаһының башлығы.

Елгән саҡта заман атында,
Ҡара башлы ҡәбер ҡорттары ла
Яҡты юлға беҙҙең тартыла...

Кисәгенең мәйет ағыуынан
Күрә башлай шул саҡ ер йәбер.
**Франко** тип кәрлә исемләнеп,
Герниканы ҡылды гүр-ҡәбер...

**Муссолини** булып мус тупланы
Абиссинияны һуйырға.
Ҡәбер ҡорто **Гитлер** намы менән
Үрмәләне йөрәк-бауырға...

Башҡортостанымда Тәфтиләү тип,
Вьетнамда ҡанлы "ҡарсыға" тип,
Индонезияла Сухарто тип
Ҡара башлы был ҡорт аталды.
Башҡорт ҡасабаһы Сейәнтусы,
Лидице һәм Хатынь, Орадурҙан,
Сонгмиҙарҙан ҡәбер-гүр ҡалды...

Фашизмдың суйыр тырнаҡтары
Быумаҡ һаман Ерем алҡымын.
Таш быуатҡа атып Кешелекте,
Юймаҡ була күктең балҡыуын.

Сантъягола, яҡты Ҡояш түгел,
Ҡара шәүлә баға күҙҙәргә.
Чили халҡын суйын төйҙәһендә
Иҙмәк булып приклад киҙәнә.

Лас Касастың яҙма тарихтары
Ҡайтты өндә индей еренә.
Фашизмдың ҡулы бөтәбеҙҙең
Бөгөнгөһөн быуып үрелә,
Киләсәген һуйып үрелә,
Ошо хаҡта хәбәр бирелә:

## *Нәүбәттәге номерҙарҙың береһе — XX быуат аҙағы*

*"Сантъягоның эшселәр биҫтәһенә хунта һалдаттары баҫып инде, кешеләргә һунар ҡылынды. Күмәк бала атаһы Хорхе Сибайлоны өйөнән һөйрәп сығарҙылар, тукмарға керештеләр. Хорхе Сибайлоның береһенән-береһе бәләкәсерәк ун бер балаһы менән ҡатыны һалдаттарҙан мәрхәмәт һорап ялбарҙы, сабыйҙары атаһының салғыйҙарына йәбешеп иланы. "Яҡшы, беҙ һеҙгә мәрхәмәт күрһәтәбеҙ", — тине*

*һалдаттар һәм сабыйҙарының күҙе алдында Хорхе Сибайлоны автоматтарҙан атып үлтереп, ҡанлы кәүҙәһен канауға ырғыттылар"...* **(Бөгөнгө Латин Американы тарихынан.)**

*"Һалдаттар йөклө ҡатынды күреп ҡалды. Улар унан: "Табырың кем — малаймы, ҡыҙмы?" — тип һоранылар. "Белмәйем", — тине ҡатын. "Белмәһәң, һин уны хәҙер белерһең!" — тине һалдаттар. Улар ҡатындың ҡорһағын ярып ебәрҙеләр ҙә дерелдәп торған бала яралғыһын йолҡоп алдылар. "Белдеңме инде хәҙер?" — тинеләр һалдаттар, ҡатынды һәм яралғыны утҡа аттылар"...* **(Бөгөнгө Көньяҡ Африка тарихынан.)**

**..........................................................................................................................**

Ҡайҙа ғына булһын фашист-ҡоҙғон —
Тырнаҡ эҙе уның барыбер.
Үләт үткән ерҙә үлән үҫмәй,
Бүртә унда фәҡәт гүр-ҡәбер.

Муссолинимы ул, Франкомы,
Пиночетмы — фашист барыбер.
Ергә һибеп шаҡшы шыҡылдарын,
Кешелеккә ҡаҙа гүр-ҡәбер.

Килер көндө әсә ҡарынынан
Йолҡоп быуған фашист үләте
Штык менән ергә Кешелекте
Ҡаҙаҡламаҡ була, теҙләтеп.

Теҙләнмәй тик Кешем, юҡ, теҙләнмәй,
Уйнай алмаҫ ҡанлы рулет!
Саф Альенде булып ҡалҡа донъя —
Тыпырсына хурлы Пиночет!

Дүрт салғыһын киргән тере мәйет
Һулаһа ла ерҙе ағыулап,
Тотҡан юлы уның — ҡәбер төбөн
Тоташтырмыш текә, тар юлаҡ...

Ерҙең изге һәр бер саң бөртөгө —
Хунта шартлар дары-мина бит!
Ҡалтыранһын ҡурҡып фашизмдың
Ҡара башлы ҡорто Пиночет!

## II

Табут йөҙә индей ерен иңләп —
Инктарҙың Король юлынан.
Киртләс-киртләс ҡырлы мавзолейҙар

Баҫҡысланып Күккә һонолған.

Сал тауҙарҙы бөгә матәм маршы —
Ерҙең улы ята табутта.
Уның бөйөклөгө ҡаршыһында
Башын эйеп ҡатҡан Ваҡыт та...

Бабаларҙың изге ташын ҡанлап,
Азатлыҡтың уҙа короле —
Хаҡ Көләүен керә Пантеонға!
“Но пассаран!” уның пароле!

“Винтовкаһын яугир Сталинградтың,
Үлһәм, бергә һалып ерләгеҙ![57]” —
Тип йырлаған дары шағирының
Ҡуҙ йөрәген услап киләбеҙ!” —

Бейек Андтың дары ҡырлаһында
Инк иле аҙым туҡтата.
Океандан — арғы океанғаса
Компас уғы булып һын ята.

Шкалаһы Ерҙең дарыланыр,
Уҡ төбәлгән яҡҡа кирелеп.
Чили бөгөн — дары-Неруданың
Ҡаты ҡыҫҡан утлы ирене!..

## III

Донъя яралғандан алып
Ҡояш нисә ҡалҡты икән?..
Ҡай астроном астрономик
Был цифрҙың осон һүткән?!

Ә Шағир бит белә тәүге
Ҡояш тыуған замандарҙы.
Пулемет таҫмаһына ул
Ҡояштарын теҙеп барҙы...

Күңеленән уның ата
Патронланған ҡояшлы йыр!
Ҡояштарҙың ҡулы-ҡулға
Йөрәгендә тоташалыр!

---

[57] Чилиҙың бөйөк шағиры Пабло Неруданан.

Ил пүлсенән йөрәк башы
Пуля-ҡояш булып оса.
Шәүләләрҙе киҫеп йыкһа,
Йондоҙҙарым күҙен аса.

Дарыларҙан дөрләп бара
Киләсәктең ҡояштары.
Һаҡланығыҙ һуғылыуҙан, --
Йөрәк башым тулы дары!..

Планетам! Шағир үткән
Тупраҡкайың — ылғый дары!
Суйын көмбәҙ баҫа төшөп
Шартламаһын Ерем шары!..

## IV

Тыныс өң юҡ бөгөн ер йөҙөндә,
Тәпәй һурып айыу ятырлыҡ.
Аяҡ баҫҡан һайын дары гөртләй,
Хеҙмәткә һәм яуға саҡырып!

Бараммы мин милли театрға,
Керәмме йә Башҡорт циркына,
Меридиандары Ер шарының
Бикфорд-шнур булып төртөлә...

Өҫтәлемә ҡағыҙ һалам ап-аҡ,
Ҡәләм алам шиғыр яҙырға.
Ҡағыҙ битен ләкин йөрәгемдең
Дарылары гөртләп яндыра...

Сәхрәләргә сығам ял итергә —
Ағиҙелем аға аҡ һыулы.
Ярҙарында ләкин дары дөрләй,
Аҡ йөҙөндә — Ерҙең ҡан юлы...

## V

Гүзәл илем — тиңһеҙ гөлбаҡсалай —
Былбыл һайрай, наҙлай гөлдәрем.
Йөрәк ләкин мәңге тыныс түгел:

Планетамдың зарлы илдәрен

Свастика һөмһөҙ тапағанда
Үҙ өңөнә ятыр ни йән ҡыйып?!
Һәр бер сикәне ул киҫеп үтә
Ҡараҡ бритваһы һымаҡ сыйып...

Айыу йоҡоһона талыр заман
Ҡалды тороп тик өң-өйҙәрҙә.
Бошмаҫ йән дә тыныс йоҡлай алмаҫ —
Башы уның дары-мендәрҙә!..

Бындай саҡта
Беҙҙең һәр бер оран
Континенталь ракетаға тиң.
Кем ул унда ҡасып ситтә ята,
Тырнаҡ сиртеп ҡылын ҡыбырлата:
"Триң-триң-тиң..."

Айыуғолаҡ ҡына буш боғаҙҙан
Буш моңдарын тылҡый, триң-тиң...
Бөйөк Кешем!
Идеяһыҙ йәшәү — фашизмға
Хеҙмәт итеү менән бер үк, тим!

Туғандарым! Ҡомһоҙ капиталдың
Суйын көбөн дөргән яугирҙәр!
Дарыланып дөрләһендәр яуҙа
Һеҙҙең менән минең йән бергә!

Миллилекте тойған туғанлыҡты
Киҫә алмаҫ әжәл — баш ҡырҡым!
Бруноһы барлыҡ Кешелектең
Булып барам — дары-башҡортмон!

## VI

Ике йөҙ илле миллион
Йылдар элек йәшәгән
Тарбаҡ-торбаҡ йән эйәһе —
Үрмәксегә оҡшаған...

Тарбаҡтары тарамышлы,
Тырнаҡтары ағыулы.
Ҡаяу ҡаҙап һура ҡанды,

Үлемесле сағыуы...

Ике йөҙ илле миллион
Йыл үткәс тә — бик яман:
Тарбаҡ-торбаҡ дүрт салғылы
Үрмәкселер шул һаман...

Салғылары — ***Муссолини,***
***Гитлер, Франко, Пиночет*** —
Туйыналар кеше турап,
Ҡанығалар ҡан эсеп.

Көндө-төндө ҡаралата
Былар ҡойған ҡара эҙ.
Салғысылар шәүләһенең
Тамғаһына ҡарағыҙ:

```
      Г И Т
          Л
          Е
          Р
        *         Т
          М       Е
А Н К О * У*П И Н О Ч
Р         С
Ф         С
          О
          Л
          И Н И
```

“Свастика” тип әйтәләр
Ошо ҡотһоҙ ҡараны.
Үрмәксеһен үрмәләтмәк
Фашизм – гүр ҡарағы.

Әммә “Асаба-Астаҡ[58]” ул
“Свастика” тигәне.
Гитлер-фашист урлап алып,
Үҙ тамғаһы иткәне.

Әммә башҡорт биҙәге ул,
Йән биргән Көн-Биддә ул.
Йәнбикә һәм Йәнбирҙене[59]

---

[58] Асаба-Астаҡ – Аҫаба-Иштәк йәғни башҡорт тигән һүҙ, “свастика” һүҙе шунан килеп сыҡҡан.
[59] Йәнбикә һәм Йәнбирҙе – башҡорт еренә тәүбашлап аяҡ баҫҡан, башбабаларыбыҙ Урал менән Шүлгәнде тыуҙырған тәүбабаларыбыҙ.

Йәнләндергән ғилләә ул!

## VII

Свастика, Свастика,
Тапҡан һине бабалар!
Донъя Ҡуласаһы итеп
Баҡҡан һине донъялар!

Свастика, Свастика,
Тормош биреп тыуғанһың:
Бабаларға көндөң, төндөң
Әйләнеше булғанһың,
Бәйләнеше булғанһың!

Аҡ-ҡараны, көндө-төндө
Табыштырған билдә һин!
Баҡыйлыҡ һәм фанилыҡты
Ҡауыштырған ғилләә һин!
Тормош тигән төймә һин!

Свастика, Свастика —
Башҡортомдоң билдәһе!
Фашист ҡорто урлап уны
Ҡылды әжәл ғилләһе...

Свастика, Свастика —
Салғы, имеш, дүрт йәпле...
Ҡара ҡанын ҡойоп ерҙең,
Ҡарғый фашист-үрмәксе...

Илен һуя, ерен һуя
Салғылары әйләнеп.
Ҡан эсендә доллар ҡоя,
Капиталға яйланып.

Бер үк үле әйләнештә —
Ҡанлы, йәшле был кәмит:
Берҙәй Гитлер, Муссолини,
Франко һәм Пиночет...

Булһа Урал – булмаҫ улар!
Урал – дары моҙғайы!
Дарылыҡта шартлап үҙе

Фашизмдың хоҙайы!

Башҡорт-улын баҡҡан Урал
Балҡыуынан арынмаç!
Бөркөт-башҡорт саңҡыр мәңге!
Ҡарғаланып ҡарлыҡмаç!

## VIII

Һиçкәнегеҙ, туғандарым, һиçкәнегеҙ,
Шаҡшы шәүлә көрмәмәксе Ер шарын...
Дүрт тарафҡа дүрт салғыһын тырпайтып,
Турамаҡсы тереклектең ҡомарын...

Баçҡан берен, ерен ҡара көйҙөрөп,
Дүрт табанын ҡарпышлатып ҡармалай...
Салғыларҙан салдыртырға Хаҡлыҡты,
Нахаҡлыҡтың үҙе бит ул үрмәләй!..

Аҡ һәм Ҡара, Көн һәм Төн – бер бөтөндәй,
Уралым һәм Шүлгәнем дә -- бер бөтөн.
Ҡара шәүлә ләкин теләй, яçҡына
Төнгә генә ҡалдырырға ер йөҙөн.

Көләүен дә, Илауын да – игеҙәк,
Йәшәп ҡара илап ҡына, йә көлөп!
Ҡуш икәүҙе бер-беренән айырһаң,
Ереҥ-Күгеҥ төшөр ине кителеп!

Берәгәйле ҡалһын Көн-Төн мәңгегә,
Поэмам да булһын үртле-дарылы!
Дарыланып, ҡарыуланып Ер-Күкте
Иңебеҙҙә тоташтырып барылыр!

7.09. — 19.12.1973.
7.09.1975.

# АШҠАҘАР

Арҡа ла ерҙең, ай, кәкүге
Осоп ҡына ҡулыма ҡунһасы...
**Башҡорт халыҡ йыры "Ашҡаҙар".**

## *1*

Бала саҡтан иләҫ күңелемде
Болоҡһотто бер йыр — "Ашҡаҙар".
Олатамдың ҡурай һағышынан
Әҫәрләнә инем шул ҡәҙәр.

Оләсәйем йырлаһа ҡушылып,
Ағыла ине сабый йәштәрем.
Бәләкәстән, баллы балауыҙҙай,
"Ашҡаҙар»ға тулышып йәшәнем.

"Ашҡаҙарҡай буйы бөҙрә-бөҙрә,
Ағып ҡына бара һарҡыуға..."
Күңелемдең йыртып аҡ күлдәген,
Ағылдым мин ошо аҡ һыуға.

Әллә ерҙә, әллә күктәрҙә шул
Сихри моңда йөҙҙөм өҙлөкһөҙ.
Шашып көлгән шатлыҡ көнөмдә лә
Күкрәгемдә торҙо ҡыҙ үкһеп:

*"Йәнкәй-йәнәш китте, ай, һунарға,*
*Ашҡаҙарҡай буйына шәшкегә,*
*Э-эй... Ашҡаҙарҡай буйына шәшкегә.*
*Шәшкеләргә китеп вафат булды,*
*Башҡынайым ҡалды йәш кенә,*
*Э-эй... Башҡынайым ҡалды ла йәш кенә"...*

Йылдар ғына түгел, быуаттарҙы
Һиҫкәндертеп иҫте ул үкһеү.
Ашҡаҙарҙың моңло һылыуҡайы,
Ғүмерлеккә иттең йөрәкһеү!..

Күпме дәүер инде кемһәләрҙең
Күңелдәре һиңә тартыла.
Башҡорт тупрағының һандуғасы
Һайрауынан төндәр йыртыла.

Аҙашҡандар шунда табышалар,
Сихыр сирен еңә Саҡ-Суҡтар...
Мин дә бына, тотоп сал башымды,
Йыр уртларға ҡайтам сит яҡтан...

Ашҡаҙарҡай буйлап йөрөгәндә
Һары ҡамыш башын иҫәпләп,
Һандуғасы өҙөлөп бер һайраны,
Башҡайымды ғына иҫәрләп.

Йондоҙ балҡып сығыр төҫлө ине,
Йөрәккәйем шартлап ярылһа...
Быуаттарҙың икһеҙ ағылыуын
Тойҙом кескәй йылға ярында.

Мәңгелеген йырға һалыр өсөн,
Аҡыҡ ҡына һүҙҙәр һайланым.
“Ашҡаҙар”ҙың әммә үҙ һүҙенән
Артыҡ һүҙҙәр таба алманым...

## *2*

Ерҙәге бер моңло маяҡ булды
Һөйгәндәргә был ер — Ашҡаҙар.
Ашҡаҙар ауылын бер күреүҙән
Тулап типте йөрәк шул ҡәҙәр!

Ябай ғына башҡорт ауылы был —
Исемкәйе йырға яҙылған.
Ҡаршыһында ҡалҡҡан Йыр тауында
Үлемһеҙлек йыры һыҙылған...

Үлемһеҙлек... белеп әйтәмме һуң,
Белмәйенсә әллә һөйләнәм?..
Үлемһеҙ тип белгән йырыбыҙҙың
Тамырына балта көйләнгән...

Арҡыс-торҡос таҡта ҡағасаҡ ул
Яңағына тәҙрә, ишектең, —
Ошо ауыл “перспективаһыҙ”
Тигән ҡотосҡос һүҙ ишеттем...

Ҡара мунса ташы һымаҡ был һүҙ
Бәғеремде ҡанға батырҙы.

“Ауыл бөтә икән...”
Йыр тауына
Сабыр өсөн балта йөҙ борҙо...

Ҡорос ялтлай һалҡын...
Ә һабынан
Тотоп күтәрҙе кем балтаны?
Үҙебеҙ бит!
Беҙҙең телдән бит ул
“Перспективаһыҙ” аталды!..

“Ашҡаҙар”ҙы тыңлап үҫкән улдар —
Илерҙекме әллә ашҡынып?
“Аҡыллы” һүҙ — “перспективаһыҙ” —
Йөрәктәргә йөрөй баш булып...

Ашҡаҙарҡай буйын буйлай-буйлай,
Илай төҫлө бөгөн көй үҙе:
“Һандуғаслы тауҙың тыуырҙары
Оноталар әллә һөйөүҙе?..”

Юҡ, һөйгәндәр генә хәл итмәй шул
Киткәндәрҙе, һөйөп, шәшкегә.
*“Шәшкеләргә китеп вафат булды,*
*Ғәзиз башым ҡалды йәш кенә...”*

### 3

Ашҡаҙар ауылын арбап,
Зәңгәрләнеп таң ата.
Күк йөҙөндә нурҙар уйнап,
Тәбиғәтте уята.

Йондоҙҙар йома күҙҙәрен,
Йоҡларға иткән һымаҡ.
Ай ҡаса кәмә аҫтына,
Йылға битендә уйнап.

Ҡаҫмаҡланып ҡыуаҡтарға
Аҫылына аҡ томан.
Ҡыяҡтарҙың күҙҙәренән
Мөлдөр-мөлдөр бал тама.

Шыбырҙашып серләшәләр
Аҡтирәк япраҡтары...

Күкүк саҡырып шаңғыртҡас
Ашҡаҙар аръяҡтарын,

Сыбыртҡыһын һөйрәп Ғәни
Сыға ишек алдына.
Иртәнге саф һалҡын һауа
Өшөттөрөп ҡағыла.

Арлы-бирле ырғып ала,
Йоҡоһон ҡыуыр өсөн.
Урам буйынан йүнәлә
Һулап муйылдар еҫен.

Көтөүгә мал ҡыуалайҙар
Ялан аяҡ малайҙар.
Табандары сәңгегәнгә,
Һикергәләп ҡарайҙар...

Йомортҡа әрсеп барыусы
Ауыл көтөүсеһенә
Күҙ ҡыҫып йылмая Ғәни:
“Тумыр минең өсөн дә!

Аша, туған, витамин “А”
Күп, тиҙәр, йомортҡала.
Беҙ — хеҙмәт яугирҙәре бит,
Кәрәк ныҡ булырға ла!”

Килеп етә МТФ[60]-ға —
Һәүкәштәр эргәһенә.
Ҡолаҡ һала күнәктәрҙә
Һөттөң гөбөрҙәүенә.

Ҡарауылсы Хәсән ағай
Мылтығын алып тоҫҡай
(Шаярталыр): “Туҡта! Кем бар,
Нишләрһең атып йыҡһам?!”

“Ул саҡ, — ти Ғәни, күрһәтеп
“Һөңгөлө” һылыуҙарға, —
Тура килер “һөңгө”ләрен
Осаң менән ҡайрарға!

Һыйырҙарым — йән киҫәгем,

[60] МТФ (молочно-товарная ферма) — һөтсөлөк һыйыр фермаһы.

Белмәйһеңме ни, ағай?!”
“Бөттө баш! Киске һауынға
Күп һөт алып ҡайт, дауай!”

Ағыла көтөү ҡапҡанан,
Ашығып, ташҡын һымаҡ.
Һауынсы ҡыҙҙар Ғәнигә
Ҡалалар яулыҡ болғап.

Колхоз көтөүсеһе Ғәни —
Муллыҡ уның ҡулында...
Донъялар һил, имен кеүек
Ашҡаҙар ауылында.

Табындарҙа бал-май ғына,
Ҡот тулы келәттәрҙә.
Алтын алҡа — ҡолаҡтарҙа,
Еҙ сәғәт — beләктәрҙә.

Йылғаһы ла йырлай кеүек,
Йыр тауы ла көр кеүек.
Әммә ләкин күңелдәрҙе
Иҙә низер, эркелеп...

Көн битендә ҡара таптай,
Китмәй тора был тойғо.
Хатта ҡыҙҙар көлөүен ул
Юшҡынлатып, тут ҡойҙо...

### *4*

Персей тигән егет алып килде
Ашҡаҙарға ауыр ул һүҙҙе.
Яҙ башынан уның буровойы
Ер аҫтына һуҙҙы мөгөҙҙө.

Үҙйөрөшлө заман машинаһы —
Үҙе бара кәрәк еренә.
Тимер вышкаһын да үҙе терәп,
Бырау бора ерҙең төбөнә.

Үҙ моторы уның үҙендә шул,
Теләй икән — тая ҡубынып.
Персей йөрөй шуға күкрәк киреп,
“Үҙем — баш һәм түш!” — тип ҡабынып.

Ә шулай ҙа таный төп хужаһын:
“Райбашҡарма ағай Ашҡаҙар
Етәкселек итә минең менән!
Ҡыҫылмаһын эшкә башҡалар!”

(Район башҡармаһы рәйесе шул
Йыр исемле түрә – ҡырыҫйән...
Ашҡаҙарҙың булып Ашҡаҙары,
Булалманы илгә ырыҫйән...).

Таяна ла ҡырыҫ түрәһенә,
Эре яра Персей ярмаһын:
«Ауыл урынында карьер булыр!
Башҡа ерҙә былбыл *ҫайраһын!*»

«Саян»дарҙың сая теленән дә
Һаҡлай белә Персей рәйесен:
«Ашҡаҙар ағағыҙ янып-көйөп
Йөрөй ошо һеҙҙең ер өсөн!»

Килтерткән ул бында буровойҙы,
Быраулатып тауҙы барларға.
Йыр тауының ап-аҡ таштарынан
Заман төҙөлөшөн башларға!

Шуға күрә эре сиртә Персей —
«Перспективалы» хеҙмәте!
Быраулаусы автовышкаһының
Арта ғына бара ҡөҙрәте:

Йыр тауының, йырып йәшел һыртын,
Йөрәгенә батты һерәйеп.
Һары былбылдарҙың ҡотон алып,
Шырау кеүек тора ҡарайып...

### *5*

Персей үҙе гүзәл егет ине —
Алсаҡ күңелле һәм йор һүҙле.
Был тирәлә ғүмер булғаны юҡ
Ундай “зәңгәр-зәңгәр-күк” күҙле!

Был тирәлә ҡыҙҙар күргәне юҡ
Аҡ ромашкасәскә — аҡ сәсте.

*“Һаумыҫыҙ!”* — тип тик бер көлгәйне ул,
Тештәренән ап-аҡ нур сәсте.

Зевс менән гүзәл Данаяның
Улы булып Персей тыуғандыр.
Ашҡаҙарға килеп күренгәнсе,
Өфөләрҙе нурлап торғандыр.

Өйрәнгәндер тәрән ер ғилемен,
Геологтар булып китергә.
Ҡыҙҙар йөрәк геологияһын
Өлгөргән ул бик йор сиртергә.

*“Жаным!”* — тиеп бәрхәт тауыш менән
Өҙәлер йәш ҡыҙҙар үҙәген.
Өҙөлгәндең һалыр иңдәренә
Аҡ ромашка-сәстәр күбәһен.

*“Жаным!”* — тиһә, хатта бағаналар
Ауып китер, тиҙәр, салҡана...
Ни эшләтер, ҡара күҙгә ҡапһа
Күктәй зәңгәр күҙҙең ялҡыны!..

### *6*

Бына ошо Персей Өфөһөнән
Килде бында ерҙе борорға.
Эргәһенә эркелгән халыҡҡа
Ҡарар ҡылды телмәр ҡororға.

“Ер майымы, әллә алтын бармы?” —
Тип һорауҙар тапты яуабын:
“Ошо тауҙы күккә аҫыу өсөн
Аҫтына сым-арҡан һаламын!”

“Был тауҙа бит тыуған “Ашҡаҙар”-көй —
Исеме лә уның Йыр тауы.
Күлен күккә аҫҡан шайтан кеүек
Ҡаласаҡмы ошо йорт-ауыл?!.”

“Ҡалмаясаҡ”.
“Ҡайҙа буласаҡ ул?”
“Күсенәсәк башҡа яҡтарға”.
Тамырына балта сапҡан һымаҡ
Тәьҫир итте был һүҙ ҡарттарға:

“Сәбәбе ни?!” —
Балта һағағына
Ҡаршы ҡалҡты күкрәк-ҡалҡандар.
“Сәбәбе шул:
Перспективаһыҙ
Тип ауылды һеҙҙең тапҡандар”.

“Райсоветҡа барып етәсәкбеҙ,
Ашҡаҙар бар унда яҡларлыҡ!”
Персей көлдө:
“Унан ҡайтырһығыҙ
Ағас аттарға ла атланып —

“Перспективаһыҙ” тигән хөкөм
Ашҡаҙарҙың сыҡҡан үҙенән!” —
Үлтереп тә була, терелтеп тә
Был донъяла тик бер һүҙ менән...

Йәше, ҡарты кире таралышты,
Шомло шойҡан йөкмәп Персейҙән.
Ашҡаҙарҙың муйын тәңгәленә
Шом-балтаны ҡайҙан, кем сөйгән?!.

## 7

Ысыҡлы үләндәр ярып
Йөрөүе, һәй, күңелле
Таң менән иркен сәхрәлә
Яңғыҙ. Шулай түгелме?!

Туған тәбиғәт ҡосағын
Йәйеп ҡаршылай һине.
Тирә-йүнде күҙәтәһең,
Тауҙар башына менеп.

Төн йоҡоһонан уянып
Биҙәнеүен донъяның
Үҙ күҙең менән күрәһең,
Хыялдарға сумаһың...

“Ем-ем” итә ел иҫкәндә
Саф ысыҡ тамсылары.
Һайрай һары һандуғастар —
Ашҡаҙар йырсылары.

Баш осонда көләс Ҡояш
Алтын сәстәрен тарай.
Һабантурғайҙар, осоноп,
Суҡышын нурға ҡайрай...

Ғәни көтөүен тәбрикләп
Көллө донъя гөр-килә.
Әммә Ғәни күңеленә
Күңелһеҙ ғәм эркелә.

Күҙәүһеҙ көҙөк энәләй,
Йөрәгенә сәнселеп,
Йөҙәтә йәнде, ниңәлер,
Аҡ ромашка-сәс егет...

Бая ғына буровойҙан
Ҡулын болғап ҡалғайны.
Ә кисә, ти, Зифаларҙан
Бал, май һатып алғайны...

Ҡыҙҙы: “Үҙең бал да май!” — тип
Тилерткән дә, тинеләр.
“*Жаным!*” — тип ҡаяуын ҡайһа,
Исәрләнер ул, йүләр...

Муйыл күҙҙәре Ғәниҙең,
Ҡором һөрткәндәй ҡашы
Төбәлә ауыл яғына,
Йөрәге тибә шашып...

Етмәһә, Йыр тауын да бит
Харап итмәксе, тиҙәр.
Ҡайҙан килеп сыҡты әле
Былдай бәлә-илгиҙәр?!.

## *8*

Ғәни эстән янып шулай
Ҡаршылайҙыр һәр кисте...
Ашҡаҙар ағай ғәйепле —
Райсоветтың рәйесе!

Перспективаһыҙ, тиеп,
Ашҡаҙарҙы ул тапҡан.

Йыр тауының итәгенә
Буровойҙы ҡайтарҡан.

Нефть түгел, алтын түгел,
Эҙләйҙәр башҡа нәмә.
Ашҡаҙар ауылы иһә
Уларға — тишек кәмә...

Ғәни, киреп яурындарын,
Күбәташты күтәрә.
Тешен ҡыҫып, таш тоҡомон
Тау аҫтына түңкәрә.

Таш йөрәкле түрәләрҙе
Ҡуптарһаң икән шулай!
Аң-белем алмайса тороп,
Уларға тейеп булмай...

Их, иртә туҡталған Ғәни,
Ситләшкән уҡыуынан!
Егет һиҙенә: Персей ҙә
Күбәташ тоҡомонан...

## *9*

*Ашҡаҙар* тип, Гөлзифа тип ҡушты
Кинйә улын, ҡыҙын Аҡназар.
Уҡымышлы булған өсөн, үҙен
“Зирәк” тип ҙурланы башҡалар.

Нығ ҡушамат булып тороп ҡалды
Аҡназарға Зирәк ләҡәбе.
Уның аша аңлы аҡ донъяға
Асты тәҙрә ауыл мәктәбе.

Ғүмер буйына ул — уҡытыусы.
Дәрес бирҙе әсә теленән.
Сафлыҡ әйҙәп йылға-Ашҡаҙарға,
Терәк булды тыуған иленә.

Дәресендә уның тәҙрәләрҙән
Һандуғастар осоп инә ине.
Зирәк йәндең ҡунып яурынына,
Сыңғыр-сыңғыр йырын тирә ине.

Ҡуҙҙай күҙле кескәй ул һәм ҡыҙҙар
Был мәктәпте мәңге яратты.
Һандуғастай һайрар әсә телен
Ауыҙында улар һайратты.

Синыфтарын Зирәк алып менде
Ҡусҡылланып ҡалҡҡан Йыр тауға.
Нисә быуындарға бәйән итте:
“Ошо ерҙә мәшһүр йыр тыуған!”

Заманалар башҡа булған ул саҡ,
Хан һәм бейҙәр баҫҡан төйәкте.
Баҫҡаҡтарын бороп ҡайтарғандар,
Арбаға бал, шәшке тейәтеп.

Татлы балың, аҫыл шәшке тиреҥ
Етмәй ҡалһа — ҡылыс тураған...
Һылыуҙарҙың атлас аҡ тәндәрен
Баҫҡынсының тәне хурлаған...

### *10*

*Ҡамалыбуй* тигән сая егет
Буйһынмаған хандар заңына.
Баҫҡаҡтарының ул һөйәктәрен
Әйләндергән һөңгө саңына.

“Ашҡаҙарҡай буйы — шәшкеле һыу,
Шәшкеләре шәп!” — тип йырлаған.
Иң шәп ҡыҙын илдең, *Аҡһылыуын*,
Ғүмерлеккә һөйөп туймаған.

Ашҡаҙарҙың йылтыр шәшкеләрен
Һалмаҡ булып йәре иңенә,
Сығып киткән сая һунарға ул,
Йоҡа боҙҙоң баҫып биленә.

Кәләшкәйе — наҙлы Аҡһылыуы
Тороп ҡалған ҡарҙай ағарып.
Шул китеүҙән ҡайтмай Ҡамалыбуй —
Аты ғына ҡайта ҡар ярып...

Аҡ бурҙайы иһә өс көнбуйы
Хан юлына ҡарап абалай...
Ашҡаҙарҙың ҡара ҡаранына

Ҡайғы кергән ҡара тамғалай...

Шәшкеләргә киткән Ҡамалыбуй
Шәшкеләрен ала алмаған.
Йәшләй генә ҡалған Аҡһылыуын
Көнө-төнө хәсрәт ялмаған.

Аҡ бурандар уҙған ҡотороноп,
Ашҡаҙарҡай ҡатҡан аҡ ҡарға.
Аҡ бурҙайы менән аҡбуҙ аты
Шыңшып, кешнәп көткән аҙбарҙа...

Аҡһылыуҙың ҡарҙай ҡатҡан һыны
Яҙға тиклем сәңкей күк боҙҙай.
Умырзаяларға күҙйәш түгеп,
Йырсыларын илдең ул йыйнай.

Йыр тауына улар күтәрелә,
Ҡамалыбуй атын етәкләп
(Йөрәктәрҙе өҙөр көй сығарған
Йәнгә атты бүләк итмәккә.)

Йыр тауының текә Йыр ташына
Ултыралар, моңға күмелеп.
Ҡайғыһына лайыҡ көй арнайҙар,
Илатырҙай илде түгелеп...

Эй, йырлайҙар илдең моңлолары,
Үҙәктәргә үткес йырлайҙар.
Аҡһылыуҙың туңған йөрәккәйен
Иретергә улар уйлайҙар.

Йырлап бөтә һуңғы йыраусы... тик...
Аҡһылыу тик... һаман боҙ кеүек...
Аҡбуҙҡайы кешнәп ебәрә лә
Бер һандуғас һайрай һыҙылып.

Күрә халыҡ: табын уртаһында
Һары ҡошҡай сыңрап тирбәлә.
Аҡһылыуҙың туңған күҙҙәренән
Йәш урғылып, һыҡтап ебәрә.

Үҙәгенән сыға һыҙылып моң —
Үҙәктәрҙе генә өҙөрлөк!
Шул көйкәйен йырлап йүнәлә ул,
Ярһыу Ашҡаҙарға йөҙ биреп.

Көллө халыҡ, юйып иҫ-аҡылын,
Аҡһылыуҙы янлап эйәрә.
Сихырланған килеш килә улар
Упҡын ҡайнап торған эргәгә.

Текә ярҙан һыуға йыр ағыла,
Тулҡындарға китә тағылып:

*"Ашҡаҙаркай һыуҙың яры бейек,*
*Йәбешеп сығыр инем, талы юҡ,*
*Э-эй... Йәбешеп сығыр инем, талы юҡ.*
*Ҡысҡырыр ҙа инем, тауышым юҡ,*
*Ҡул болғар ҙа инем, яулыҡ юҡ,*
*Э-эй... Ҡул болғар ҙа инем, яулыҡ юҡ"...*

Һыны ҡатып тыңлай ауылдаштар,
Үкһеп илай ауыл ҡарттары.
Сөмөкәйгә сумған ҡыҙ артынан
Тәгәрләшә Йыр тау таштары...

Күк типһәнгә китә арғымағы,
Күк үләнгә боҫа аҡ бурҙай.
Шунан бирле йыры Аҡһылыуҙың
Ил йөрәген арбап ер урай...

## *11*

Бына шундай дәрес бирә ине
Йыр тауында Зирәк Аҡназар.
Нисә быуындарҙың йөрәгенә
Тамыр йәйҙе моңло «Ашҡаҙар»!

Һөйҙө улар ауыл-Ашҡаҙарҙы,
Иман итеп тыуған еренә.
"Ашҡаҙар"ҙы йырлап сығып китте,
Йырлап ҡайтып инде иленә.

Һәр берене ғорур әйтер булды:
"Донъяла бар ауыл — Ашҡаҙар.
Ашҡаҙарһыҙ ситтә үткән көнөң
Бәғереңә осло таш ҡаҙар!.."

### *12*

Аҡназарға *ләҡәп* -- Зирәк булды,
Ил ҡәҙерен һөйөп һаҡланы.
Быуындарға тере ядкәр итеп,
*Ашҡаҙар* тип улын атаны.

“Елдәр иҫер, яңы улдар үҫер,
Йөрөр ләкин исем — *Ашҡаҙар!*
Сихри йырҙы, ерҙе иҫкә алыр
Улым исеменән ҡашҡалар!” —

Тип кинәнде эстән Зирәк-ата,
Йырҙай һөйөп улы исемен.
Зирәкләнеп үҫкән малайында
Тыуған ерҙең тойҙо есемен.

Ул күргеһе килде кинйә улын
Үҙенән дә ҡотло, ныҡ зирәк.
Уҡыу йәше етер-етмәҫ уны
Баш ҡалаға илтте күҙ терәп.

Интернатҡа бирҙе уҡытырға —
Тап ҡаласа малай уҡыны.
Каникулға ҡайтҡан саҡтарында
Шартлатып сит телдә туҡыны

Зирәклеген ата-әсәһенә...
Ихлас улар улға ҡыуанды.
“Әсә теле ҡасмаҫ! Фән телендә
Сыныҡһын!” — тип Зирәк йыуанды...

### *13*

Ысынлап та, фәнгә сая булды —
Алтын миҙал менән Ашҡаҙар
Баш ҡаланың иң ҙур вуз ишеген
Уҙҙы, абынғанда башҡалар.

Шунан ҡыҙыл тышлы диплом алып,
Ҡарар итте илгә ҡайтырға.
“Ашҡаҙарҙың иләҫ-миләҫлеген
Күмәсәкмен, — тине, — аҡ нурға!”

“Хватка”һы, ай-һай, ҡаты ине —
Тиҙ үк тойҙо шуны ҡашҡалар.
Ә бер йылдан һайлау — райсоветҡа
Рәйес булып уҙҙы Ашҡаҙар.

Тотондо ул янып яҡшылыҡҡа —
Аң-белемен илгә бирергә.
Районды ул тейеш күтәрергә,
Көнгә ҡарай күкрәк кирергә! —

Гәзиттәрҙә сыҡты фекерҙәре,
Эфирҙарҙа ерҙе ураны.
Унның эш планы булып ятты
Мәскәү түрәһенең ораны:

“Хыял етмәҫ агроҡаласыҡтар
Төҙөргә беҙ тейеш күп ҡатлы!..” --
“Һүнгән” ауылдарҙы бергә ҡушып
Дөрләтергә эҙләй форсатты.

Ләкин Аҡназар, ҡарт уҡытыусы,
Улы өсөн ҡуя һыҡтанып:
“Һүнгән” ауылдарҙың ҡәберенә
Ашҡаҙарҙы илтеп тыҡҡан ул...

Нисек итеп быға ҡулы барған —
Тамырына балта сабырға?
Зирәклектәр әллә артып киткән,
Үҫкән кеүек артыҡ ҡабырға...

Таш ҡала ла бында ғәйепһеҙҙер,
Үҫкән өсөн улда таш йөрәк.
Ауылда ла брак сығып ҡуя,
Суйыр тәрбиәгә баш терәп...

Ярай әле кинйә ҡыҙы ипле —
Үҙе һымаҡ, үргән ауылға.
Пенсияға киткән Аҡназарҙы
Алмаштырҙы Зифа хаҡ юлда.

Үҙе һымаҡ, һайрап уҡыта ул
Балаларға әсә телкәйен.
Ул уҡытҡан улдар, ҡыҙҙар уңыр,
Хур итмәҫтәр телен, илкәйен.

*Ашҡаҙары-улы* ғына шырау —
Кереп батҡан бәғер итенә.
Ниңә үҙе һайрап уҡытмаған
Улын — ҡартлас шуға үкенә...

...Төндәр буйы уфтай уҡытыусы,
Үҙгәреүен уйлап улының.
Таш ҡалала ҡатып өҙөлгәндәй
Иң нескәһе йөрәк ҡылының...

***14***

Ғишыҡ тотҡайны йәштән үк
Ғәни тилбер һылыуға.
Аяҡ аҫтына һалам тип
Йөрәген, килде уға.

Аяҡ аҫтына ҡыҙ ләкин
Йөрәген һалдыртманы.
Йәлләне, буғай, егетте —
Йөрәкһеҙ ҡалдыртманы.

"Мә, уҡы, — тип һондо китап, —
Килерһең миңә шунан.
Һөйләшербеҙ рәхәтләнеп,
Телгә байыраҡ булһаң".

Китапты уҡығас, егет
Һылыуға сәләм бирҙе.
"Һөйләшәйәк рәхәтләнеп,
Телем байыны!" — тине.

Йылмайып көлдө лә һылыу
Әйтте егеткә йәнә:
"Ин уҡыуға. Аң үҫтергәс
Килерһең, — тине, — миңә".

Һәм киске уҡыуға егет
Керҙе ғариза яҙып.
Дәрестән ҡайтып барышлай,
Килде һылыуға сабып.

"Урта мәктәптә уҡыйым,
Аңым үҫәлер, — тине. —
Һөйләшергә рәхәтләнеп

Ваҡыт етәлер?” — тине.

Тапты ҡыҙ тағы сәбәбен:
“Булһын уҡыуың тамам.
Шунһыҙ беҙгә рәхәтләнеп
Һөйләшеү теймәç һаман”...

Йөкмәтте шулай Ғәнигә
Бик ҡыҙыҡлы вазифа
Алһыу йөҙлө, муйыл күҙле
Уҡытыусы ҡыҙ — Зифа...

### *15*

Йылтыр етен сәсле Персей тора
Көтөү ағылыуын күҙәтеп:
“Һумалалай ялбыр яллы егет
Өҙәлер күп ҡыҙҙар үҙәген...

Мыҡты уның ҡандай яурындары —
Йыр тауында ҡалҡҡан ҡаялай.
Ҡара күҙле ҡара ҡаштарының
Ҡалынлығы булыр аялай.

Сыбыртҡыһын болғап шартлатҡанда
Ҡабаҡтары күктең ҡалтырай.
Шул сыбыртҡы осо ялмағандай,
Тәкмәс атып китер ялтыр Ай...

Алып килеп Өфө һылыуҙарын,
Баҡтыртырға ине батырҙы!
Яҙырҙар ҙа ине һуштарынан...” —
Шулайыраҡ Персей уй ҡорҙо.

Һоҡланды ул ихлас көтөүсегә,
Көнләп ҡуйҙы хатта Ғәниҙән:
“Тыумағанмын бында мин ни өсөн,
Төçөн алып ҡара, саф ерҙән!”

Һәм уйланы Зифа тураһында,
Үҙ янына ҡыҙҙы яҡҡырып.
“Их, үбәһе ине ауыҙынан,
Ерҙе-күкте, төндө шаштырып!..”

Тормошто мул татып үçкән Персей

Һәм үткән күп утты, һыуҙарҙы,
Бының ише әммә һутлы сейә
Ирендәрҙе күргән булманы...

Уйлай китһәң, ваҡыт өйләнергә,
Ғаилә ғәмәлдәрен тартырға.
Һөнәр, эш юҡ ҡулынан килмәгән —
Геолог та үҙе, шофер ҙа.

Кәрәк икән — тимер йәбештерә,
Бирә ҡороп вышка-маҙарын.
Кәрәк икән — үҙе пиротехник,
Аҙ ватманы Урал тауҙарын.

Белореттан — Шишмә тимер юлын
Ҡаяларҙы ярып үткәрҙе.
Шул уҡ саҡта күпме һылыуҙарҙың
Ҡаяларын һүтеп түңкәрҙе...

Райсоветтың ҡаты ҡул рәйесе
Эшкә уны белеп саҡырған.
Йыр тауының төшөп төбөнәсә,
Тейешле ул серен асырға!..

### *16*

Һәм Ашҡаҙар намлы шул түрәнең
Етер килеп уға фарманы.
Йыр тауының дөрөп үҙәгенә,
Ғөрәфәтте шартлау ярғанын

Торор күреп өнһөҙ һыу-Ашҡаҙар —
Тау түбәһе, ырғып, баш ҡаҙар...
Ә шулай ҙа перспективаны
Күрә белә пред. Ашҡаҙар!

Йәшәү рәхәт бындай түрә менән —
Ҡарай белә тура алыҫҡа!
Персей уйлай: нисек Ашҡаҙарҙың
Шул һеңлеһен ҡармап алырға?..

Зифа уға хәләл ефет булһа,
Булыр ине пред. ҡайнаға.
Ҡайнағаны бында терәк ҡылып,
Тайыр ине улар ҡалаға.

Зифа уҡытыр, ул эшләр ине
Берәй ғилми йортҡа тағылып.
Бай төбәктән өйгә ит, бал, майҙар
Торор ғына ине ағылып...

Ә был Ғәни...
Булһа-булмаһа ни
Уның өсөн Зифа, йә башҡа!
Сәсен бәйләп берәй һауынсыға,
Ҡәнәғәт буласаҡ тормошҡа...

Шундай ерсән хыял көйләй Персей,
Буровойҙың тыңлап борғанын.
Башҡарманан көтә Ашҡаҙарҙы,
Көткән кеүек яҡын туғанын.

## *17*

Был донъяның мең-мең серҙәре бар —
Сисеп кенә түгел бөтөрлөк.
Туҙан остоғо ла хатта ерҙең —
Мөғжизә ул хайран итерлек.

Ғүмер буйы арбай мөғжизәләр
Тыуып ҡына үҫкән был ергә.
Бер мөғжизә булып килә кеше,
Мөғжизәләй керә ҡәбергә.

Киткән йөрәктәрҙе килерҙәргә
Бәйләп тотҡан сым бар — мөғжизә.
Ошо алтын сымдың моңон тартып
Аҡ һыу аға, шаян ел гиҙә.

Ошо алтын сымда тамаҡ ярып,
Һандуғастар сәсрәп һайрайҙар.
Һабантурғайҙары ошо сымдан
Сорғолошоп, суҡыш ҡайрайҙар.

Ошо сымға тейһә килеп йөрәк,
Күкрәктәрҙе ярып моң сыға.
Аҡһылыуҙар тапҡан “Ашҡаҙар”ҙар
Мәңге үлмәҫ өсөн юл сыға...

### *18*

Уҙған саҡта Ғәни Йыр тауынан,
Таң-иртәлә күрҙе мөғжизә:
Йыр ҡойола сыңрап Йыр ташынан —
Сихри сымдың сыңы ил гиҙә!

Тынып тора хатта буровой ҙа...
Әйтерһең дә, сихри йыр тыңлай!
Будка эсендәге Персей әллә
Ошо йырҙан ятып һулҡылдай?..

Көтөүенән ҡалып, хайран ҡылып
Баҡты Ғәни тауҙың түбәһен:
Йөҙәрләгән сағыу-һары йондоҙ
Сорғоп күккә, тартты үҙәген.

Ҡанатлы шул тере йондоҙҙарҙан
Һабантурғай йыры ҡойолдо.
Уралдың бар моңло турғайҙары
Йыйылғандай бында тойолдо.

Ә уртала, текә Йыр ташында,
Талир сыңын тирҙе һандуғас.
Күкте сөңмөш еңмеш турғайҙарға
Ер -- ҡеүәтен тиртте, ул булғас.

Әллә ниндәй ҡупты мөғжизәлек —
Йыр тауында таштар терелгән!
Ҡусҡыл үләндәрҙең ҡулҡайҙары
Бер-берeһен ҡосоп үрелгән!

Тау үҙе лә ырғый төҫлө ине,
Шатлығынан шашып, күктәргә:
Турғайҙары менән ҡуша уны
Үлмәҫ моңо ерҙең күтәрә!..

### *19*

Будкаһынан сыҡмыш Персей-ирҙе
Алды Ғәни ымлап саҡырып.
Йыр ташына төртөп күрһәтте ул,
Мөғжизәнең үҙен баҡтырып.

Һушы китеп ауыр төҫлө ине
Персей ошо мәлдә Ғәнигә.
“*Һаумыҫыҙ*”, — тип ләкин мөңрәне лә,
Тора бирҙе баҫып бер көйгә.

Тойманы ул Йыр тау сихриәтен —
Сыңрау моңло сымды, ғәжәйеп!
Изге ерҙең иңрәп-сыңрауын да
Ишетмәгәс... Кемдә һуң ғәйеп?!

Тотонғайны Ғәни, аптыраштан,
Төртөп бармаҡ тауға, һөйләргә,
“*Жаным!*” — тине лә ул ҡул һелтәне. —
*Һанайҫыңмы* мине йүләргә?!”

Тиртеп Ҡояш офоҡ ҡабағынан,
Манды нурға күкте шул ваҡыт.
Тағы тылсым: сорғол турғайҙарҙы
Нурҙарына алды Көн тартып...

Шылды Персей вышка ышығына.
Көтөүенә Ғәни тартылды.
Яңғыҙ ҡалған Йыр тау һандуғасы
Сутылданы һаман, талпынды...

Йырлы йөрәктәрҙе бер-беренә
Бәйләп тотар сым бар — мөғжизә.
Мөғжизәле сымдар моңон тартып
Ил һыуҙары аға, ел гиҙә...

## *20*

Көтөүенән ҡайтты Ғәни был көн,
Алмашсыһын ҡушып, иртәрәк.
Ишек ҡаҡты килеп Зифаһына:
“Мөғжизә бар! Шуға һин кәрәк!”

Бирҙе һөйләп серен Йыр тауының,
Тейеш уны беҙ, тип, һаҡларға!
Ҡыҙыл галстуклы йәш дуҫтарын
Теҙҙе Зифа тығыҙ сафтарға.

Һәм эркелеп Йыр тау итәгенә,
Мөғжизәне улар ҡараны.
Сорғол ҡоштар тиргән урғыл йырҙар

Балаларҙың йәнен арбаны.

Тәбиғәттең ысын дуҫы улар —
Ант иттеләр тауҙы һаҡларға.
Сал сәстәрен сайҡап, Аҡназар ҡарт
Фатихаһын бирҙе сафтарға...

### *21*

Күп китап уҡыны Ғәни,
Күк үләндәргә ятып.
Тоҡсайында том-том байлыҡ
Йөрөй тулап һәр ваҡыт.

Иркенләп тик мауығырға
Теймәй иркенлек уға:
Ҡамасау артынан яңы
Ҡамасау килеп сыға.

Томорала, “безләп”, һыуға
Йүгерәләр һыйырҙар.
Ғәни ҙә йүгерә... Ваҡыт
Етмәй ҡала уҡырға.

Һулауҙа иһә һауынға
Киләләр һауынсылар.
Ғәни ярҙамынан башҡа
Эшләй аламы улар?!.

Шәм яғып әммә өйөндә
Ултыра, ҡайтҡас, Ғәни.
Алмаһа яңы мәғлүмәт
Көн һайын — тынмай йәне...

Геология фәндәрен
Өҫтәүенә аҡтара.
Бик тәрән тау ҡатламдарын
Ятлап таңды аттыра.

Персей менән һөйләшергә
Теләй ул, әмәл табып.
Йыр тауын аҫмаҡсы булған
Арҡанға үҙе “ҡабып”,

Табандары тейер-теймәҫ

Торһон ине шул егет!
Күрер ине Зифа мәгәр
Елгәнен кем ел егеп...

Уйнарға ла сыҡмай инде —
Ултыра һаҡлап мөйөш.
Аптыраша әшнәләре:
“Ғәни, был һинең ни эш?!

Йәш ваҡыттың бел ҡәҙерен,
Уйнап-көл, тигән ҡарттар.
Юҡһа, клуб эргәһендә
Етешмәй беҙҙең сафтар!”

Ҡыҙҙар ҙа уҙалар көлөп:
“Ҡайҙа һин, егет, әллә
Яҙылдыңмы монахлыҡҡа?..
Яҙылма, беҙҙе йәллә!..”

## 22

Персей, ятып буйҙаҡ будкаһында,
Әйләнә лә генә тулғана.
Күҙ алдына ҡуйып Зифаҡайҙы,
Татлы хыялланып уйлана:

*“Ал сейәләй сихри ирендәрҙе*
*Алды икән кемдән был Зифа?!*
*Алма-алһыу, моңһоу биттәренә*
*Килде икән ҡайҙан мул сифат?!*

*Ҡара ҡамыштарҙың ҡараһынан*
*Яндырып та бағa күҙҙәре.*
*Ынйы кеүек тештәр араһынан*
*Һайланып та сыға һүҙҙәре.*

*Ашҡаҙарҙың ҡара ҡаранылай*
*Һыҙылып та киткән ҡаштары.*
*Ашҡаҙарҙың тере шәшкеһеләй*
*Йылтырайҙыр толом-сәстәре.*

*Елгә иңен киргән аҡтирәктәй*
*Һығылалыр һомғол билкәйе.*
*Күлдәк тиртеп, сәскә-томбойоҡтай*

*Бүртенәлер бәллүр түшкәйе...*

*Ашҡаҙарҙың һыуын эскәнгәлер,*
*Селтерәп тә сыға тауышы.*
*Шул тауышты тик бер ишетеүҙән*
*Күңелкәйем моңло, һағышлы...*
*Харап итә мине -- байғышты..."*

## 23

Бергә үҫкән Ғәни генә ҡыҙҙы
Итә ине иләç-миләçкәй.
Ул уҡыған мәктәп тәңгәленән
Үтә ине егет һирәкләп...

Берәй китап һорап алған була,
Уҡығанын йәки килтерә.
Балаларҙы һөйөп, икеһе лә
Бер-беренә ҡарап тилмерә.

Телдәре тик тирмәй теләктәрен —
Йөрөй, ситләп, яҡын тирәлә...
Китә инеп Зифа синыфына,
Ҡыңғырауҙан көмөш тирә лә.

Өҙөлгәндәй тына еҙ ҡыңғырау,
Икеһен тиң итә яманһыу.
Ниңә икән йәшләй һөйөүселәр
Йә йөрәкһеү һәр саҡ, йә моңһоу?..

## 24

Зифаға тик һуңғы ваҡыттарҙа
Һыуынғандай Ғәни тойолдо.
Каникулға тиклем түҙергә лә
Үкһергә, тип, ҡыҙый йыйынды...

Иңке-тиңке килеш йөрөгәндә,
Балаларҙы сыҡты ул алып
Экскурсияға Йыр тауына...
Буровой янында туҡталып

Күҙәттеләр бырау әйләнешен,

Ҡатламдарҙан керен[61] сыҡҡанын.
Аҡ ромашка сәсле Персей үҙе
Уҡытыусы ҡыҙҙы ҡотланы

“Перспективалы яҙмыш” менән...
Ҡыҙҙы, имеш, үҫеш көтә шәп!
“*Жаным!* — тиеп баҡты зәңгәр күҙе, —
Был төбәктән һеҙҙе көнләшәм!”

“Төбәк түгел — тыуған ерем минең!
Исеме лә уның Ашҡаҙар!”
“Ашҡаҙарға ҡарап алданһындар
Перспективаһыҙ башҡалар!

Ағайың да, ана, аҡыл еккән,
Киткәс сығып ошо ауылдан.
Исемем Ашҡаҙар, тип тормаған —
Иҫкелеккә ҡаршы яу булған!

Перспективалы ауылдарҙың
Төҙөгән ул үҫеш картаһын.
Районды беҙ уның менән бергә
Киләсәккә табан тартабыҙ!

Бөтәсәктәр былай ваҡ төбәктәр —
Үҫәсәктәр агроҡалалар.
Тәпәй баҫҡандан уҡ асфальттарҙа
Йөрөйәсәк беҙҙең балалар!

Шуның өсөн бына мин һәм ағаң
Тырышабыҙ бында икәүләп!
Ике-өс көндән күрең: был буровой
Йыр тауынан төшөр мүкәйләп!

Шуның өсөн анау “Йыр ташы” тип
Һеҙ йөрөткән суҡай ҡаяны
Шартлатырмын тәүҙә! Буровойым
Перспективаны һайланы!

Мүкле йәндәр генә сат-йәбешеп
Ята сыбыртҡыға, кәшәргә[62].
Ә һеҙ тыуған башҡа йырҙар өсөн!
Баш ҡаланы биҙәп йәшәргә!”

---

[61] Керен — керн, бырау кергән ерҙән алынған тоҡом.
[62] Кәшәргә — мал аҙбарына.

Яуап бирҙе көләп беҙҙең һылыу,
Ә күңеле булды болоҡһоу.
Персей күҙҙәренең зәңгәрлеге,
Аҡ ромашка — аҡ сәс болото

Һүрелмәçлек ҡалды күҙ алдында...
“Керен” уға Персей тотторҙо:
“Миллион йыл элек аҡҡан һыуҙың
Булалыр был ҡырсын тоҡомо!

Миллион йыл типкән йөрәгемде
Шаштырырлыҡ хәлдә һеҙ бөгөн!
Ташты ла һеҙ хатта иретерлек!
Ут-ялҡында дөрләй ер-күгем!..”

Зифаның тик кермәй ҡолағына --
Осто елгә егет буҙлауы.
“Ах, Йыр ташын икән шартлатмаҡсы!..” —
Йөрәгенә үтте һыҙлауы...

Аҡ керенде — һалҡын таш ҡатламын
Йөрәгенә ҡыçты Гөлзифа...
Ҡыҙ артынан ҡалды ҡарап Персей:
*“Ох какой çын! Какой бил зифа!..”*

## 25

Унынсыны “тунай” егет,
Онотмай көтөүен тик.
Бошона: наҡыç һауыны
МТФ һөтөнөң, тип.

Шул һөттө арттырып алға
Сығыу юлдарын эҙләй...
“Зав. МТФ” көтөүсенең
Эҙләнеүҙәрен һиҙмәй

Йөрөй буркаһын бөркәнеп,
Арғымағын юрттырып,
Буденныйға оҡшайым, тип,
Сал мыйыҡтарын бороп.

Кавалерист булған ағай
Һуғышында Ватандың:
“Шайморатов ғәскәрендә

Арғымаҡҡа атландым!”

Кәйефе килгән саҡтарҙа
“Егет” булып та ала.
Ҡындан ҡылысын һурғандай
Һелтәнеп, һөрән һала:

“Кавалерия, по коням!” —
“Ат”ҡа атланып саба...
Иртәгәһен, ах-вах килеп,
Мунсала тәнен саба...

Бирсәләрҙән “тауыш бирә”
Унар суйын ярсығы.
Ауған мыйығын йүнәтә
Ирҙең түҙмер ҡарсығы...

Сәй эскәндә самауырға
Көҙгөләй текләп ҡарай:
“Ысынлап та Буденныйға
Оҡшап барабыҙ, малай!”

Ә малдар туйына алмай,
Һөт һауындары артмай...
Ихлас хеҙмәте Ғәниҙең
Ҡаҙаныш булып ҡайтмай...

Уңышһыҙлыҡтың, уйланып,
Сыҡты осона егет.
Кисләтеп ҡайтҡас, мыйыҡлы
Мыҡтыға әйтте килеп:

Көтөүҙе ҡырҙан ауылға
Ҡыуабыҙ, ағай, ниңә?
Алты саҡрымды һыйырҙар
Ер саңын еҫкәп килә

Иртә-кисен... Шул сәбәпле
Туйына алмай һыйыр”.
“Һе! Әләйһә яландарҙы
Ауылға яҡын, — ти ир, —
Тарттырайыҡ!..”

“Күсерәбеҙ
Ҡырға ферманың үҙен!
Йәйләтеп шунда малдарҙы,

Ҡайтырбыҙ алып көҙөн".

Теңкәһенә был һүҙ ләкин
Ағайҙың килеп тейә:
Эш юҡтан эш арттырыусы
Ҡустыларҙы кем һөйә!

Етмәһә, МТФ беҙҙән
Китә, тигән хәбәр бар.
Перспективаһыҙ ҡалып,
Бөтә, тиҙәр, Ашҡаҙар!..

Китәм-бөтәм тип торғанда,
Йәйләүе кәрәк ниңә?
Етмәһә, парлы мунсаға
Яҡын булғыһы килә...

## *26*

Моңло-моңло, уйлы ҡайта һылыу
Буровойлы Йыр тау янынан.
Персей биргән затты — аҡ керенде
Тотоп-тотоп ҡарай яңынан.

Аҡ күңеле һымаҡ Аҡһылыуҙың,
Аҡыҡ ҡына икән Йыр тауы.
Шул аҡлыҡтан микән "Ашҡаҙар"ҙың
Йәнкәйҙәргә үтеп сыңлауы...

Шул аҡлыҡты, тимәк, буровойҙың
Ҡаралығы бороп тишәсәк.
Сыңрап сыҡҡан аҡ моң урынынан
Ҡара һөрөм сорғоп китәсәк...

Карьер асып ауыл урынында,
Аҡ таштарын ҡырға ташырҙар.
Ситкә ситнәтелгән ауылдаштар
Ҡайғыһынан алйып-шашырҙар...

Зәңгәр күктән сыңрап йыр һурыусы
Һабан турғайҙары таш ҡатыр.
Ауып төшөп йырҙар бишегенән,
Йөрәктәргә ҡара таш батыр...

Мөмкинме һуң быны кисерергә?!

Күреү кәрәк сара һуңламай!
Зифа эште ағаһы Ашҡаҙар
Башлап йөрөүен дә һанламай...

Ғәни, Ғәни! Терәк фәҡәт Ғәни!
Кәрәк уны йәлеп итергә!
...Осрашалар икәү һәм күрәләр:
Икеһе тиң бер үк фекерҙә!

## *27*

Ғәни иһә көн элгәре
Тарыған был ҡайғыға.
Һаҡлап ҡалырға Йыр тауын
Йөрөткән эш яй ғына:

Комсомолдың ялҡындарын —
Тиҫтерҙәрен йыйнаған.
Йөрәгендә һәр береһе
Уртаҡ фекер төйнәгән:

Ауылдаштар араһында
Аңлатыу-эш башларға.
Маҡсаттары — буровойҙы
Тауҙан алып ташларға.

“Ташларға, тигәс тә, тура
Аңламайыҡ, егеттәр.
Шыма төтөн йөрөтөргә
Тейеш беҙҙең кеүектәр.

Шул шырауҙың әрнетеүен
Күңелдәргә тойҙортоп,
Күтәрәйек мәсьәләне,
Дөйөм йыйын йыйҙыртып.

Ауыл халҡы исеменән
Сығартайыҡ бер ҡарар.
Халыҡ һүҙе — хаҡлыҡ һүҙе,
Уға ҡаршы кем барыр?!

Райбашҡарма рәйесе бит
Үҙ кешебеҙ, етмәһә!
Их, Ашҡаҙар ағайыбыҙ
Изге эште йөкмәһә!..

Олаҡтыртһа буровойҙы
Лайыҡлыраҡ бер ергә!
Ашҡаҙарҡай һәм Йыр тауҡай
Тейеш түгел үлергә!" —

Шулай ҡушты Ғәни. Берҙәм
Хупланылар егеттәр.
Башланды эш... Өйҙән-өйгә
Йөрөнөләр өгөтләп...

Һәм Йыр тауы тарафына
Күҙле йоҙаҡ ҡуйылды:
Алмашлашып пионерҙар
Аңдынылар ҙур юлды...

## *28*

Әммә теге ғәме лә ҙур —
Тынғы бирмәй Ғәнигә:
Ҡалай ҡылып һыйырҙарҙы
Күсерергә йәйләүгә?

Йосоп ағаның ишеген
Шаҡылдатты күпме ҡат.
Мыйыҡ бороп ҡына ләкин
Һөйләшә бит мыҡты ҡарт...

Бирмәй һырт ағаң: "Борондан
Йөрөнө ҡайтып көтөү!
Әммә көр булды мал-тыуар,
Мул эйҙе һыйыр һөтөн!"

"Борон хәҙерге баҫыуҙар
Булмаған — ялан ятҡан!
Ауылға тиклем һыйырҙар
Күк үлән ялмап ҡайтҡан".

"Ҡусҡыл үлән юл аңына
Үҫтертәйек, булмаһа?!."
"Их һин ағай, кире бөткән
Бүкән булғанһың даһа!.."

...Иртәгәһен һауынсылар
Түрәгә яу һалалар.

“Һыйырҙың һөтө — телендә!” —
Тип маҙаһын алалар...

Ҡайтһа өйөнә, бисәһе
Ҡуймай самауыр уға:
“Көтөүҙе ниңә йәйләүгә
Ҡыуалатмайһың, ҡоҙа?!.”

Кис булһа, тәҙрәне ҡағып
Асып ебәрә елдәр.
Йәштәр, елдәргә эйәртеп
Йырҙарын, былай тиҙәр:

*“Агай бөркәнгән буркаһын —*
*Итәге-салгыйы юк.*
*Ферма малдары ябыга,*
*Ә уның кайгыһы юк.*

*Йосоп агайҙың мыйыгы*
*Ярты метрга үҫкән.*
*Мыйык ашатып малдарҙы*
*Көрәйтмәк була микән?!.”*

Белмәй нишләргә ағабыҙ,
Бөрсәләй һикеренә,
Эйәреүсе табылмай тик
Мөдирҙең фекеренә.

Көллөһө тиң тарта ҡырға,
Һүҙ берләштергән һымаҡ.
Саба Ғәнигә ағабыҙ,
Сығынсы аттай тулап:

“Ятма ҡотортоп халыҡты
Етәкселеккә ҡаршы!
Туҡмайһың тимер таяҡлап
Унһыҙ ауыртҡан башты!”

Ҡаушамай егет (белә бит
Ғәҙәтен түрәһенең):
“Һәленгән аҫҡа мыйығың, —
Ти уға, — күрәмеһең?”

Көҙгөнө алып өҫтәлдән,
Ағай ҡулына һона:
“Мыйығыңды төҙәйт. Төҙәт

Ебәргән хатаңды ла!”

Йосоп ағай, ҡырт боролоп,
Өндәшмәй сығып китә.
Ҡыуыла көтөү йәйләүгә,
Әммә... дау барып етә

Ауыл Советына. Унан —
Райондың йәптәренә:
“Тәрбиә эше етешмәй
Ашҡаҙар йәштәренә!

Үҙбелдекле ҡыуҙыртҡандар
Малдарҙы аҙбарынан.
Унырһы ғына етмәһә,
Йәбешеп тауҙарына,

Яңылыҡҡа ҡаршы улар
Сыҡмаҡсы була, тиҙәр.
Иҫкелеккә сат-йәбешеп
Ятмаҡсы ғына, тиҙәр.

Йыр тауынан буровойҙы
Ауҙартмаҡсылар икән.
Райүҙәкте таш карьерһыҙ
Ҡалдыртмаҡсылар икән!..

Сәйәси аң аҡһай, тимәк,
Боҙоп заман талабын.
Балта саба тамырына
Кемдәр агроҡаланың?!.

Райбашҡарма рәйесенә
Тейә килеп таш-хәбәр...
Таштай ҡатып, сыға юлға
Ҡаты түрә Ашҡаҙар...

## *29*

Ғәни ул көн ветеринар менән
Мал дауалай ине йәйләүҙә:
Уҡыраға ҡаршы һуғыш асып,
Креолин менән эшләүҙән

Ауа яҙҙы арып һәм тонсоғоп

(Шундай зәһәр һаҫы ул дарыу...)
Һәүкәштәрҙең хәлен ҡурсағанда
Мөмкинме һуң ҡулды ҡаушарыу?!

Тик, кис булғас, һыйыр йәйләүенә
Килде “төтәп” бер йәш сапҡынсы.
Хәле бөтөп, шуны һөйләп бирҙе
Йыр тауына ҡуйған сос һаҡсы:

Персей тауҙы иртән шартлатасаҡ,
Йырыбыҙҙың етеп башына.
Шуның өсөн бөгөн әҙерләнә
Перспективалы машина!”

Персей әйтә: “Тиштем тау күкрәген,
Дары ҡабы унда төшәсәк.
Ә шунан һуң... тауҙың соңҡаһында
Йәшен уты сәсрәп китәсәк!..”

Тау шартлаһа, ағай, һандуғастан,
Һабантурғайҙарҙан ни ҡалыр?!.” —
Йәшүҫмерҙең йәшле күҙҙәренән
Өҙөлгәндәй булды эс-бауыр...

“Бар, ос! — тине Ғәни. — Ауыл халҡын
Йыр тауына йәһәт йыйығыҙ.
Артыңдан уҡ мин дә ҡайтып етәм —
Иҫән ҡалыр йырлы тауыбыҙ!”

Эштәрен ул ҡушып алмашына,
Велосипедына атланды.
Йыр тауының тартып тылсымдары,
Тоймай ҡалды нисек ҡайтҡанды...

Ашҡаҙарҙа — тыуған ауылҡайҙа —
Серем итә халыҡ эштән һуң.
Клуб янындағы аҡланлыҡта
Сыңлай ине гармун бик ярһыу.

Тура шунда килеп төштө Ғәни —
Ҡыҙған ине йәштәр уйыны.
Йыуынмаған, кейенмәгән килеш
Тәү күрәләр ине кис уны.

Креолин еҫе аңҡыуынан
Бөлдө ҡыҙҙар, ҡаплап танауын.

"Ветврач!" тип кемдер ирештерҙе,
Гармун белде сыйнап уйнауын...

Тура барып Ғәни гармунсыға,
Ҡулы менән баҫты күректе:
"Бәлә килә, дуҫтар, Йыр тауына!" —
Тип өҙҙө ул моңло берлекте.

Бейеүселәр шундуҡ туҡтанылар,
Өйөрөлдө йәштәр бер тирә.
"Кем ул унда бәлә һалып йөрөй?!" —
Тип екерҙе Персей, түш кирә.

"Һин һалаһың икән ул бәләне,
Бырауыңа баулап Йыр тауын!"
"Фу! — тине лә: — Ассенизатор! — тип,
Персей тотто нәфис танауын. —

Үҙ эшеңдә бул һин, бар, тай, *жаным*,
Йөрөмәсе бында буталып!"
Гармун тағы сыйнай башламаҫмы,
Берсә ярһып, берсә туҡталып!..

Ни арала ҡубып Персей тайҙы,
Һиҙҙертмәҫтән, Йыр тау яғына.
Әшнәләре ләкин тороп ҡалып,
Ыҙғышырға итте яңынан.

"Ташлағыҙсы шундай ваҡлыҡтарҙы!" —
Тип уйынға ине бормаҡсы,
Тертләп китте Зифа: Йыр тауының
Түбәһендә дөрҙө бер сатҡы...

"Апай, апай, тауҙы шартлаталар!" —
Тип ҡысҡырҙы бер һаҡ-пионер.
Иҫтәренә килде шунда йәштәр...
Ғәни кеүек дөрләп бермә-бер,

Ташландылар шомло сатҡылыҡҡа,
Гранаталай йөрәк тотошоп.
Әйтерһең дә, рота яуға бара!
Әйтерһең дә, Ватан һуғышы!..

**30**

Райсоветтың етеҙ газигында
Елә үҙе — рәйес Ашҡаҙар.
Арттан саба тейеш кешеләре —
Милиционер һәм башҡалар...

Ауыр уйға һала Ашҡаҙарҙы
Ауылына шулай ҡайтыуы.
Уйлап ҡараһаң бит, халыҡ өсөн
Яна-көйә эшләп ятыуы...

Дөрөҫ, Ашҡаҙарҙы күсертергә
Исемлеккә үҙе терkәне:
Ауылдаштар агроҡалаларҙа
Йәшәйәсәк белеп көн тәмен!

Дөрөҫ, Йыр тауына буровойҙы,
Алдан күреп, үҙе ебәрҙе.
Бороп төшөп, Персей асыҡланы
Тау йәшереп ятҡан серҙәрҙе:

Буш әкиәт кәҫен алып атһаң,
Көтә унда оло хазина.
Бер шартлатыу ғына етә беҙгә
Кереү өсөн байлыҡ баҙына.

Ситкә күсеп ауыл ултырасаҡ,
Оло карьер унда буласаҡ.
Йыр тауынан сыҡҡан аҡ ҡырсындан
Йырлы юлдар район һуҙасаҡ!

Быға тиклем илде ни йүнкетә?
Тик бер оло сәбәп — юлһыҙлыҡ.
Космос тиҙлекле был заманала
Юлһыҙлыҡ ул — ике ҡулһыҙлыҡ!

Аҡ ҡырсын юл илтер селтәрләнеп
Райондан һәр төбәк, ауылға.
Ауыл менән ҡала араларын
Тоташтырыу бәйле ҙур юлға.

Ауыл теләгән һәр мохтажлығын
Заман юлы аша тултырыр.
Игенсе һәм малсы теләй — өйҙә,
Теләй — ҡалала кис ултырыр.

Һәм етешкән икмәк, ит, һөттәрҙе

Тоҡтарламай юлдар елдерер.
Шул уҡ юлдар шаулы ҡалаларҙың
Мартен малын бында килтерер.

Таш һәм асфальт юллап китмәҫ йәштәр —
Тыуған ерҙә ныҡыр тамыры.
Юҡһа, йәштәр китеп бөтә, тиеп,
Көйөнәбеҙ күпме ҡаңғырып.

Юҡ, һыйҙырмай беҙҙе иҫке иҫәп,
Яңыса беҙ тейеш йәшәргә!
Иҫкелектең ниңә тайы типкән
Ашҡаҙарҙа ятҡан йәштәргә?!

Комсойошма (хәйер, үҙ һеңлем бит!),
Партойошма насар эшләйҙер.
Пенсионер атам — ҡарт коммунист —
Әкиәткә һөрһөп йәшәйҙер.

Шулай булмаһа һуң, йәш быуынды
Алмаҫ ине ғөрөф шауҡымы.
Идеяға беҙҙең аяҡ сала
Ҡамалыбуй-феодал ҡатыны!..

Әллә булған, әллә булмаған ул,
Әллә батҡан, әллә батмаған.
“Ашҡаҙар”ҙы йырлап булмаймы ни,
Әкиәткә уны таҡмаһаң?!.

### *31*

Бына шулай бара янып рәйес,
Ауылҡайы өсөн йән атып.
Ашҡаҙарҙың йыры, легендаһы
Киҫкән кеүек ҡыйғыр ҡанатын...

Килеп инә ауыл осона ир,
Ҡартласының туҡтай өйөнә.
Аҡназарҙың балҡып тәҙрәләре,
Улы ҡайтыуына һөйөнә.

Ҡарт яугирҙең ләкин аҡ күңелен
Ашҡаҙарҙың өнө ҡарайта:
“Атай, ниңә һыртта шау-шоу бара? —
Йыр тауында халыҡ ни айҡан?”

“Унығын һин үҙең беләһеңдер,
Улым, — тине тыныс Аҡназар. —
Һиңә ҡаршы бөгөн ағыласаҡ
Хатта эскән һыуың — Ашҡаҙар!

Йыр тауына хаслы ҡул һалыуҙы
Бая ғына үҙем ишеттем.
Һәм уйланым: Белмәй тирбәткәнмен
Кинйә улым ятҡан бишекте!..”

## *32*

“Атай, атай! Һин бит ҡарт коммунист! —
Ашҡаҙарҙан ҡара тир бәрҙе. —
Аҡыл һүҙе әйтеп тыйыу кәрәк
Тәртә типкән йүнһеҙ-йүләрҙе!”

“Һин ул тәртә!.. Быңдай мурт тәртәне
Үҙем дә мин тибеп һындырам.
Юлға бырғып йырҙы тапатырға
Бер кемгә лә ирек ҡуйҙырмам!”

Ашҡаҙарҙы бынан күсертеүҙең,
Йыр тауынан юлдар һалыуҙың
Күпме миллион һумлыҡ илгә файҙа
Бирәсәген — заман талабын

Күпме генә тылҡып аңлатырға
Тырышһа ла улы Ашҡаҙар,
Атаһы ныҡ торҙо. Үҙгәргәйне
Танымаçлыҡ булып Аҡназар...

“Йәштәрҙең һин, — тине, — таш, асфальтҡа
Бәйләмәксе икән йөрәген.
Әммә, өҙгәс уны Йыр тауынан,
Таш йөрәктең ниңә кәрәге?!.”

...Ахырыһы, район исеменән
Рәйес улы унан һораны:
“Йыр тауына менеп, йор һүҙ менән
Туҡтат һин, коммунист, боланы!”

“Бола башын кәрәк туҡтатырға —
Ул һин үҙең! — тине Аҡназар. —

Әкиәт тип һанға һуҡмағаның —
Хәҡиҡәт ул! Үлмәҫ Ашҡаҙар!”

### *33*

Ҡара янып сығып китте рәйес:
“Атай, көтәм һине шулай ҙа!”
Милиционерға ниҙер әйтте
Йыр тауына менгән ыңғайҙа.

Ә тау башы мәхшәр килә ине:
Персей буровойын уратып
Шаулай йәштәр... Бырау вышкаһына
Сым таҡҡандар, эште ҙурайтып...

“Сымдан тартып бөтә ауыл менән,
Ауҙарабыҙ!” — тиеп янайҙар.
Оҙон сымға килеп тотонғандар
Йәштәр, ҡарттар, хатта малайҙар...

Өҫтәүенә, һорап тормайынса,
Йыр ташын бит Персей шартлатҡан...
«Объект әҙер!» тип, райсоветҡа
Рапорт биреү эшен шәпләткән...

Ашҡаҙарҙың күреп килеүен, ул
“Бола башлығы”на боролдо:
Һиҙмәй ҡалды Ғәни, Персей ҡулы
Яғаһына уның бөрөлдө.

Шытырҙаны күлдәк... Ғәни, ярһып,
Йәберсеһен һелтәп осорҙо...
Ауыҙ-морононан ҡаны борҡоп,
Персей йәһәт тороп ултырҙы.

Тап шул мәлдә милиционерҙың
Ҡулы ятты Ғәни иңенә:
Машинаға уны елтерәтте,
“Әйҙә, киттек!” кенә тине лә...

### *34*

Ҡупты шау-шоу...

Зифа ағаһына
Илай-илай килде йүгереп:
“Ҡанунһыҙлыҡ!
Персей башлап һуҡты!
Барығыҙ тиң быны күрҙегеҙ!”

“Ярар, һеңлем, барғас аңлашырбыҙ! —
Сырай һытты ҡыҙға Ашҡаҙар. —
Бөтәгеҙ ҙә тиҙ үк таралығыҙ!
Персей дәүләт эшен башҡара!”

“Юҡ, китмәйбеҙ!
Тартып ауҙарабыҙ
Йыр тауынан һөмһөҙ тимерҙе!” —
Сеңләп сыҡҡан Зифа һөрәненә
Төркөм-төркөм халыҡ йүгерҙе.

Иң алдағы сап-сал башты күреп,
Иркен һулыш алды Ашҡаҙар:
Кире уйлап, улы өсөн һыҙлап
Килә, буғай, атай Аҡназар...

“Атай, әйтсе!”
“Әйтәм! — тине ҡартлас. —
Мин торамын ҡыҙым яғында!”
“Аполитик һүҙ был!” — тигәс берәү,
Абайланы рәйес алдында

Оҙон мыйыҡ аҫкан “завферма”ны...
Урталыҡҡа тартып сығарып,
Бирҙе фарман:
“Булһаң кавалерист,
Хәҡиҡәтте, ағай, әйт ярып:

Ашҡаҙарҙы ҡасан ҡаҡҡаны бар
Райбашҡарма — Совет власы?”
“Ҡаҡҡаны юҡ!”
“Һеҙгә түгелме ни
Төҙөләсәк агроҡаласыҡ?!”

“Беҙгә, эйе. Агроҡаласыҡты
Теләйбеҙ тиҙ төҙөп керергә!
Матур йорттар, таш юл файҙаһына
Немедленно тауҙы бирергә!”

“Һәй афарин! Ҡандай аҡыллы баш

Йосоп ағай!” — тине Ашҡаҙар.
“Аҡыллы баш түгел, ә суйыр таш —
Һинең кеүек!” — тине Аҡназар...

Ағас аяҡлы бер ағай ҡарпып,
Буровойға төрттө таяғын:
“Был дәжжалды тартып ауҙармаһаҡ,
Беҙҙе лә ул ашар май яғып!..”

“Шыр әкиәт!” — Көлдө Персей унан...
“Әкиәттән дөрә хәҡиҡәт!
Йыр тауының гүзәл әкиәте
Һуғышта ла бирҙе көс-ҡеүәт!

Власҡа мин ҡаршы һөйләмәйем,
Әйтәм ләкин ярып тураһын:
Фронтта йот-фашист кәүҙәләрен
“Ашҡаҙар”ҙы йырлап тураным!

Иләкләнеп кәүҙәм киҫелһә лә,
Ярсыҡтары тейеп минанын,
Тере ҡайттым, тере Йыр тауының
Сыңрау тылсымына инанып!”

“Дөрөҫ, ҡорҙаш! — тине сал Аҡназар
Сығып баҫты халыҡ алдына. —
“Аполитик һүҙ” тип хәҡиҡәтте
Буяп булмай дегет затына.

Мортазиндың һыбай ғәскәрендә
Байраҡсыһы булып мин барҙым.
Муйынымды казак шашкалары
Сапҡанда ла яугир мин ҡалдым.

Ҡаҡ түбәмде кулак суҡмарҙары
Ярғанда ла дөрләп мин яндым.
Күкрәгемде фашист пулялары
Йырғанда ла яугир мин ҡалдым.

Нисә быуын өсөн сәс ағартып
Салланһам да, яугир мин ҡалдым.
Ошо ерҙең сөнки тупрағынан
Дәрт алдым да моң-йыр мин алдым.

Тыуған ергә туған йырҙар менән
Тоташҡандыр йөрәк тамырым.

Шул нескә сым, елгә елтерәтмәй,
Тотоп тора илем бәғерен!

Өҙһәк әгәр сымын Ашҡаҙарҙың,
Күтәрмәç ер шомло тетрәүҙе.
Үҙ күкрәгем үтә быраулағыҙ
Йыр тауының йәшел күкрәген!” —

Шулай тине лә ҡарт ергә ауҙы.
Сыңлап китте шунда моң-сымдар.
Йыр тауына, гүйә, килеп менде
Ашҡаҙарҙан ҡупҡан тулҡындар...
.....................................................

Иртәгәһен күрҙе көллө халыҡ
Аллап тауҙы хаҡ таң атҡанын.
Шом-бырауы һыныҡ буровойҙың
Тау аçтында аунап ятҡанын...

Райүҙәктә иһә Ғәни, Зифа
Ҡаҡты иртүк райком ишеген.
Партияның райком секратары
Бюро йыйып эште тикшерҙе.

Ни булғанын унда һөйләмәйҙәр...
Ашҡаҙар-ир сыҡҡан бойоғоп.
Рәйеслектән уны бушаттылар,
Баш ҡаланың үтәп бойороғон.

Шылдырҙылар ирҙе башҡа яҡҡа —
Булды шулай район әхүәле.
“Йорттан сүп-сар сығармағыҙ!” — тигән,
Тапҡыр икән урыç мәҡәле...

Ауылда һуң? Ауған буровойҙы
Оҙаттылар кире, һөйрәтеп.
Хәбәр сыҡты район гәзитендә,
Осҡан үҙе, текә үрҙән, тип...

Персей китте әллә Персияға,
Әллә тап Өфөнөң үҙенә...
Ошонан һуң, тиҙәр, аҡ Йыр тауы
Аҡ төшөргән зәңгәр күҙенә...

Йыр тауының ҡотон ҡотҡарырға
Өйбөрөнсә аҡса йыйҙылар.

Йыр ташының ҡупҡан ярсыҡтарын
Бетон ҡойоп ҡабат ҡуйҙылар.

Ашҡаҙарҙан сыҡҡан һынсы-рәссам
Баш ҡаланан ҡайтты “аһ” ороп.
Йыр ташына сихри Аҡһылыуҙың
Мәрмәр һынын ҡуйҙы баҫтырып...

## *35*

Ҡыр-урмандар биҙәнәләр
Күҙ матур буяуҙарға.
Баҫыуҙа йомартлыҡ күлә,
Шатлыҡ уйнай тауҙарҙа.

Донъяла туҡлыҡ... Күр оса
Һауала кейек ҡоштар.
Һәр ҡайҙа тора яңғырап
Ҡыуаныслы тауыштар.

Байрам итәләр ауылда,
Ҡунаҡтар саҡырышып.
Яусы ебәрә егеттәр,
Бер-беренән ярышып.

Еткән ҡыҙҙар ҙа ауылда
Бөтөп баралар тамам.
Ә Зифа беҙҙең күңелһеҙ —
Яңғыҙы йөрөй һаман...

Ғәние, бөтөп сыҡһа ла
Синыфтың унынсыһын,
Күп итеп иген алһа ла,
Ебәрмәйсе яусыһын...

Тап килгәндә лә һиҙҙертмәй
Тәрән хистәрен уға.
Йөрәгемде бирәм, тимәй
Элеккеләй, һылыуға.

Ҡыҙ, көтә-көтә егеттең
Тәҡдимен, арып бөттө.
Иптәштәре арҡылы ла
Серле һүҙен еткертте...

“Һыуынды микән әллә? — тип,
Ҡурҡынып ҡуйҙы үҙе, —
Ваҡытында сара күрмәй
Оҙайтҡан өсөн һүҙҙе...”

Ләкин егете шат, ғәмһеҙ
Яһаны уға визит.
Өҫтөндә — яңы костюмы,
Ҡулында — китап, гәзит.

“Жыу!” итеп китте йөрәге
Зифаның, быны күреп:
“Тапҡанһың йөрөр ваҡытты
Аҡыл-маҡыл күтәреп!”

“Йөрөмәй нишләйем? Үҙең
Мәжбүр иттең уҡырға...”
“Кем ҡушҡан һиңә, уҡып та,
Һуҡыр-муҡыр булырға?”

“Һуҡыр тип... һуҡыр түгел мин...”
“Эш, улай булғас, ниҙән?
Йоҡлап йөрөмәҫ инең бит
Уйымды минең һиҙһәң!..”

“Шуға ла килдем шул инде,
Һөйләшер өсөн яйлап...”
Зифаның ҡаҡты йөрәге
Әллә нәмәләр уйлап...

Хыялдар күленә сумды
Мөлйерәп, йомоп күҙен...
Әйтмәҫе борон ишетте
Ғәниҙең әйтер һүҙен...

Уятып уны йоҡонан,
Мут дауам итте егет:
“Теләнем йөрәк хисемде
Сисергә һиңә теҙеп...

Йөкмәттең ләкин миңә һин
Бурыс артынан бурыс.
Бығаулап тоттом йөрәкте —
Аҡылым булды ҡорос.

Ҙур рәхмәт: һинең арҡала

Таныҡлыҡ алдым ҡулға.
Тар һуҡмағымды ҡалдырып,
Төшәмен оло юлға.

Бөгөндән йәғни үҙемә
Йөкмәнем яңы бурыс.
Бығаулап ҡуйҙым тойғомдо,
Аҡылым тағы ҡорос!

Һыйырҙарымды ҡалдырып,
Өфөгә тиҙҙән китәм:
Вузда уҡып сығыу минең
Изге бурысым икән!..”

...Күңелһеҙләнде ҡыҙыбыҙ:
“Хисләшеү булыр ҡасан?
Егет түгелһең, йәшереп,
Хисеңде алып ҡасһаң!..”

Егет йөкмәтә был юлы
Ҡыҙына вазифаны:
“Кер һин дә Башпедвузға, — тип
Өгөтләй ул Зифаны... —

Техникумың менән генә
Бара алмаҫһың йыраҡ.
Тыуған ауыл мәктәбенә
Юғары белгес кәрәк!

Уҡып сығайыҡ бергәләп
Юғары уҡыу йортон.
Шунһыҙ беҙгә рәхәтләнеп
Хисләшеү тейməҫ буйтым”, —

Ти ул, Зифаның күҙенә
Үтенес менән ҡарап...
Егет ҡарашында — һорау,
Иркәләү, һөйөү, талап...

## *36*

Йыр тауынан төштө икәү,
Тағалтып йөрәк һүҙен.
Шундай матур булып атты
Хушлашыу таңы бөгөн...

Йыр тауының итәгендә —
Йәштәр ултыртҡан туғай.
Зәңгәр шыршы ылыҫына
Ҡунып талпына турғай.

Сут-сут һайрай һандуғасы
Иңендә Аҡһылыуҙың.
Ғүмер һанай кәкүктәре
Яҙ башынан көноҙон...

Шәшкеләре Ашҡаҙарҙың
Йөҙөп уйнай һыуында.
Яңы бишектәр тирбәлә
Ашҡаҙар ауылында...

Изге сәфәргә икәүҙе
Оҙата ауылдаштар.
Аҡ юл теләйҙәр сал ҡарттар,
Аҡ яулыҡ болғай йәштәр.

Моңһоу ниңәлер бөтәһе
Автобус ҡаршыһында:
"Күрешә алмабыҙ инде,
Ҡайтмаҫһығыҙ һеҙ бында, —

Тиҙәр ҡарттар...
"Тартмаҫ һеҙҙе,
Уҡығас, ябай ауыл", —
Тиҙәр йәштәр...
"Таш ҡаланан
Йолҡмаҫ хатта ел-дауыл..."

Йылмая Ғәни ихластан:
"Дуҫтар, һис ҡайғырмағыҙ.
Вузға дәреслектәр алыу
Өсөн генә барабыҙ.

Ситтән тороп тамамларға
Булдыҡ ҙур уҡыу йортон —
Һәүкәштәремде йөрәктән
Ташлайым нисек ҡырҡып?.."

"Мин дә уҡыусыларымдан
Яҙа алмам, ти Зифа. —
Тыуған ергә тамыр йәйеп

Үҫеү — беҙҙең вазифа!

Ошо ерҙә, дуҫҡайҙарым,
Илде лә байытайыҡ,
Күңел хазиналарын да
Арттырып нығытайыҡ.

Һәр ауылдаш — булһын ғалим
Үҙенең хеҙмәтендә!"
Ғәни ҡосаҡлай Зифаһын —
Бәхетле бына кемдәр!

Автобус ҡуҙғалыр алда
Яр буйына киләләр.
Ашҡаҙарҙың һыуын сайпып,
Ҡыуаналар, көләләр.

Һыҙыла күңелдәрендә
Йыр тауының моң сымы.
Шул моң-сымдар илтә имен
Сәфәр сыҡҡан юлсыны...

Яңы һалған ҡырсын юлдан
Машина йор ҡуҙғала.
Йыр тауы ла имен тора,
Таш түшәлде юлға ла:

Яҡындағы рудниктарҙан
Сыҡҡан отвалдар күпме!..
Шул таштарҙан юлдар һуҙып,
Артты райондың күрке!

"Агроҡала"лар ҡалһындар
Әкиәт донъяһында!..
Йыр тауҙары әйләнмәһен
Иблестең улъяһына!

Аҡһылыуҙың аҡ күңеле
Һыҙһын мәңге: "Ашҡаҙар..."
Ҡамалыбуй шәшкеләрен
Ҡурҡытмаһын башҡалар...

Һары һабантурғайҙары
Күктән мәңге тирһен йыр.
Мәрмәр һынға һандуғаскай
Ҡунып сыңратһын талир...

Сихри моңдан типһен сеңләп
Йөрәге һәр ҡыҙ, улдың!..
...Күҙләп бара Зифа, Ғәни
Сағыу төҫтәрен юлдың.

Еләә автобус — күкрәге
Киңлектәр бара ярып.
Тоташҡандар Ашҡаҙарға
Донъяның офоҡтары!..

12.03.1957.
1981.

# ДАУЫЛ ПЛАНЕТАҺЫ

*Быуат калейдоскобы.*

## I

## 1900 — 1914

### *1*

Был егерменсе быуат...
Туплы-ҡылысլы быуат.
Ут-ҡурҡынысլы быуат...

Ҡитғалары дәғүәле,
Океандары оранлы,
Бәндәләре ҡораллы, —
Ҡомарлана ут, булат...

### *2*

Өйөрмәләр Ерҙе ураткан.
Ҡитғаларҙы ҡойон тураҡлай.
Тауҙар ауа,
Ярҙар ишелә.

Биш ҡитғаның ҡанлы түшендә
Һерәйешеп тора кешеләр.

### 3

Төрлө төҫкә керә флагтар —
Милләттәрҙең керә төҫөнә.
Ерҙең билен ҡармай Капитал,
“Милли” флаг бөркәп иңенә.

Рәсәй әләменең аҫтынан
Йырткыс томшоҡ төртә таш һымаҡ;
Бирсәткәле батша бармағы —
Ҡарағоштоң кәкере тырнағы.

Британ штандартын биҙәгән
Лавр япраҡлы суҡ сәскәлә
Арыҫландың аҙау тештәре
Һалҡын нурын сағып киршәлә...

Герман барондары бураһын
Ҡара ҡурғаш-борсаҡ тултырған.
Кайзер Вилгельмдең тәхете
Пушка лафетына ултырған...

АҠШ байрағынан, аҡшайып,
Гангстерҙың айҡай йот күҙе;
Һәр йондоҙо — пушка ауыҙы,
Йотор кеүек ялмай ер йөҙөн...

Өрәкләнеп, һелтәп мөгөҙөн,
Ҡанға күҙе тонған Капитал
Аҡ донъяға ҡара тамға һала:
— Һуҡ!
— Йыҡ!
— Тала!
— Кеше — түгел кеше, ә ҡандала!

Төҫтәр төрлө,
Ләкин шөғөл берәү:
Көслөнөкө — донъя,
Туптар — терәү!

## II

## 1914 — 1917

“Көслөнөкө — донъя!
Туптар — терәү”!.. —
Көбәктәрен бора пушкалар,
Доллар һуғып уттар осалар...

Ҡитғаларҙың сәсрәй ал ҡаны,
Ҡанға мансый дәжжал донъяны.

Ерҙең йөҙөн кисҙә окоптар,
Унда — Фред, Иван, Яҡуптар...

Билдән батып ал ҡан эсенә,
Ата улар, ата үс менән.

Белмәй ләкин кемгә атҡанын...
Кем эскәнен ерҙең ал ҡанын...

Әйҙәй яуға “милли” флагтар,
Флагтарҙан алтын юлаҡтар

Һуҙылалар алтын муҡсаға.
“Браво!” — Капитал мут ҡул саба...

## III

## 1917

Егерменсе быуат, Егерме!
Дауылдарың Ерҙе елдерҙе!..

Ун етенсе йылдың елдәре...
Һиҫкәнә ер, ярһый илдәре.

“Икмәк!”, “Ирек!”, “Ер!” — тигән
Ҡомастарҙы даулы ел киргән.

Ленин аңы айҡай донъяны:
“Ҡорасаҡбыҙ тормош өр-яңы!

Кеше булыр ерҙә төп терәү,

Йығa aлмaç уны һис бирәү!"

Ҡитғaлaрҙы туплaп-aйбaрлaп,
Ер шaрынa кирҙе aл бaйрaҡ:

"Хеҙмәтйәнгә ерҙә бер дошмaн —
Эшләмәйсә тешләп тулышҡaн!

Штыктaрҙы вaҡыт борорғa,
Ҡорһaғынaн уның бырғырғa!

Ҡaнын ҡоçоп ауһын Кaпитaл!.."
..."Аврорa"нaн сорғоп aтты тaң...

## IV

## 1917 — 1945

## *1*

Ал бaйрaғын кирeп aтты тaң.
Сик үткәрҙе ерем яңынaн —

Ғәҙеллек һәм Дуçлыҡ сиктәре.
Ситкә сикте сикһеҙ төндәре.

Тыуҙы күкрәп илдә колхоздaр,
Домнaлaр һәм гигaнт зaводтaр...

Ҡырҡ беренсе йылдa ҡуҙғaлғaс --
Йортобоҙғa әжәл-ут һaлғaс

Кaпитaлдaн шытҡaн шaҡшылaр
(Фaшист ҡорто тигән вәхшиҙәр) —

Ҡылыстaрҙaн беҙҙең турaлды.
Ер шaрындa һындaр турaйҙы!

Күкте терәп ҡaлҡты Кешеләр —
Прометей һәм Урaл ишеләр!

Булды шулaй, булды бaрыһы.
Ғәмдең тыуҙы ләкин яңыһы...

*2*

Ҡарурмандар, джунглиҙар
Уяналар сәсәп йоҡонан:
Ер биленә һөрөм сорнап
Атом бәшмәктәре йолҡона —

Күккә ҡара шәүлә һуҙып,
Ҡәберенән көрмәй Капитал...
Ҡыл аяғын Ергә урап,
Ҡанын эсә, сәсәй йотоп ҡан...

Йәнә “милләт байраҡтары” —
Шәп кәфенлек шашҡын ҡитғаға...

Ҡитғаларҙың, ҡотлоларҙың
Йөрәгенә көбәк тоҫҡала:
— Бирелегеҙ!
— Сигенегеҙ!
— Теҙ сүгегеҙ!
— Сукмәһәгеҙ — булыр бөтөүегеҙ!
— Юҡ көнөгөҙ! —
Көбәклеләр һөрән һала,
Һөрәндәре йәнде ала...

“Аҡ йорт”тарҙан ҡара тарала,
Ҡараларҙан фашист ярала —
Капиталдың ҡәбер ҡотҡоһо...
Ерем тертләй, Ерем йоҡоһоҙ...

Ҡаяланып ҡалҡа биш ҡитға.
Бишеһе лә сыйрап теш ҡыҫҡан.
Ерҙә — фашист, ҡәбер ҡотҡоһо!..
Ерҙә — хәүеф, Ерем йоҡоһоҙ!..

## V

## Кеше килде

*1*

“Джунглиҙа Джон хужа,
Диңгеҙҙәрҙә — дредноут!” —

Ҡанун шулай... Дредноуттар
Көбәгенән дөрләй ут...

Шул ҡанунды ҡамыр ҡылып,
Кирә күкрәк ҡитғалар.
Аһ, нишләрбеҙ, ҡитғаларҙы
Тағы утҡа тотһалар?!

Хаҡ байраҡты, Хаҡ байраҡты
Ҡанға атып йыҡһалар?
Яҙ йырҙарын, яҙ йырҙарын
Ерҙән мәңге йолҡһалар?..

## 2

Ҡапыл сыңрап
Сынйыр өҙә
Яҙ еләндә Ер иңе:
Кирелеүен баһадирҙың
Кире бөгөү мөмкинме! —

Октябрҙа ҡеүәт биргән
Ҡөҙрәт көндән эркелде,
Ергә терәк, тиң килде:
Ысын Кеше — Ир килде!

Бер ҡараһаң — төндәй ҡара,
Бер ҡараһаң — ут-ҡыҙыл,
Берсә Көндөң һарыһылыр,
Берсә ап-аҡ йондоҙ ул;

Бөтөн йәйғор төҫөн йыйған,
Ҡитғаларҙы ҡотлап янған
Ысын Кеше — йондоҙ ул,
Ғорур Кеше — тиңһеҙ ул!

Ер һиңкетеп баҫты табан,
Ҡитғаларҙы тулатты:
— Ергә — Хаҡлыҡ яҙы мәңге!
Туғанлыҡҡа юл астыҡ!

Яҙ еленә күкрәк киреп
Алды һулыш һәр ҡитға:
Яҙлыҡмаҫ Ер, эшсән йоҙроҡ
Ер яҙмышын ныҡ тотһа!

### 3

Егерменсе ярһыу быуат,
Ҡитғаларҙы ҡуҙғаттың!
Ярһыу оран ороп, Ерҙең
Яраларын ҡуҙлаттың...

Мөмкин түгел инде тыйыу,
Тотоу Ерҙең ал таңын!
Ярты донъя тәбрик ҡыла
Алһыу таңдар атҡанын!

Ярты донъя юлға сыға
Ҡаршыларға ал таңды.
Ярты донъя ҡаршы уға —
Капиталға ялланды...

Айҡап дөрә океанды
Яҙ ярына биш карап.
“Броненосец Потемкин»ға,
“Аврора»ға иш карап!

Ал байраҡлы биш крейсер —
Бөгөн эшсән биш ҡитға!
Һынмаç Хаҡлыҡ колоннаһы
Бара бөйөк походта!

## VI
## Дауыл аша

Кешелектең изге орандары
Ер талабы булып яңғырай.
Эшсән синыф, йәҙрә-йоҙроҡ төйөп,
Хаҡлыҡ фронтында яу ҡора!

Хәкиҡәттең алыш һыҙығына
Сыҡты сорғоп яугир һәр ҡитға.
Азатлыҡтың алһыу байраҡтары
Планетаның йөҙөн яҡтырта.

Ҡуҙрау-ҡыҙыл ҡанлы биш ҡитғабыҙ
Хаҡлыҡ фронтында дауыл яра.
Шытып сығып дауыл орлоғонан,

Планетабыҙ бөрө яра!
Тормош бара! Көрәш бара!

1981.

## БӘҒЕР ТАУЫШЫ

### *1*

Аэропорттан елә лимузин,
Мине илтеп ҡалам яғына.
Ун йылдан һуң ҡайтып киләмен.
Үҙем биҙәм... үҙем һағынам...

Илем — торғон, үҙем “ултырғын”, —
“Таш ҡапсыҡ”та оҙаҡ ултырҙым.
Волчок[63] үтә ҡарап донъяға,
Ҡара йылдар һанын тултырҙым.

Саңға осто йәнем волчоктан,
Күкрәгемдә ҡалды валсығы.
Ике күҙем — ҡара ҡуш тишек, —
Бәғеремдең бағыр волчогы...

Бағамын да ҡалғып ҡанаймын:
Ҡалды икән ҡайҙа ғәмһеҙ саҡ?!
Волчок үтә керә үткәнем,
Дуҫ-иштәрем ишла, һанһыҙ саҡ!

### *2*

Волчок үтә керә йәшлегем —
Сағылып та ҡала дүрт дан-йөҙ:
*Азат, Яузат, Тимер* һәм *Терәк...*
Терәге — мин! Нығ дүрт баҡан беҙ!..

Дүрт сая йән! Алтын баҡандар!..
Ҡайырҙы ел әммә дүрт яҡҡа...
Аҡыл йыйғас волчок артында,

[63]Волчок — төрмә камераһы ишегендәге күҙләүек-тишек.

Ҡайтам быуна... һыныҡ-мурт-хата...

Хаталыҡты илтә лимузин...
Ҡанат киреп көтә аҡ ҡала.
Аҡ түгел, юҡ! Һыймай волчокка,
Ҡара шәүлә-йорттар сайҡала.

Күҙ сағылтҡыс донъя аҡлығы —
Аҡ салма тик ҡара мәкергә!
Мине бит ул тибеп атҡарҙы
Ҡара волчоклы таш ҡәбергә...

*3*

Аҡ ҡала, тип, эйе, килгәйнем,
Ап-аҡ күлдәк кейеп, ауылдан.
Ап-аҡ күңелемде шар-асып
Йөрөнөм шул шаран-аҡ юлдан...

Ағиҙелдең аҡлап пак ярын,
Муйылдарҙың ағы ҡабынғас,
Йөрәгемә төртөп суҡышын,
Аҡ йыр ҡойҙо ап-аҡ һандуғас:

“Ана, ана, хәләл аҡҡошоң —
Шалҡан муйын, толом, бил нәҙек!
Алтын тешен сағып йылмая...
Алтын алҡа, алтын беләҙек”...

Уйламағыҙ, шайтан балҡышы
Алйытҡан, тип, мине -- Терәкте.
Юҡ! Зәп-зәңгәр күктәй күҙҙәре
Һүреп керҙе тиле йөрәкте.

Аҙау алтын... тимәк, ҡарт бисә,
Тип шәйләү ҙә булыр яңылыш.
Машинала ауып имгәнеп,
Теш ҡуйҙыртҡан һылыу — шунда эш...

*Сильва* ине наҙлы исеме --
Операнан, йәнде тилерткән...
Ауазында -- Кальман моңҡайы --
Һандуғастай һайрай был иркәм!

Табыштыҡ та алйып ҡауыштыҡ...

Аҡыл -- арттан быңдай минутта...
Кәләшемдең һалҡын аҡылы
Яңдыралыр мине гел утта...

Һул һуҡмаҡтан байман бағына
Килгән егет, тип тә әйтмәгеҙ.
Фатир-матирҙарҙы уйламай,
Никах сиратынан үткәнбеҙ.

Алып ҡайтты Сильвам "сельва"ға –
Гөл-баҡсалы йорт, хан һарайы.
Эте сыҡты өрөп... Көтмәгән
Көтөктәрҙең йөҙө ҡарайҙы.

Мәгәр мине тәүге күреүҙән
Көлгән ҡайным: "Һабан үгеҙе"...
Әсәһе лә ҡыҙын тиргәгән,
Рисуай ҡылма, тиеп, нигеҙҙе.

Аңларға ла быны кәрәктер:
Нәзәкәтле ғаилә борондан!
Бәрәкәтле кейәү көткәндә,
Кемде һөйрәй Сильва урамдан!..

Ҡаса-боҫа йәшәп йөрөнөк...
Һөйөү беҙҙең мәгәр саф ине.
Сильва-йәнем булғас гөманлы,
Бүлмә таптым эҙләп...
Ах, мине

Ҡылыр өсөн тамуҡ киҫәүе,
Торған икән ҡәйнәм һағалап:
Өй кейәүе булып керергә
Мәжбүр ҡылды — еңде был талап...

Ҡалдым шунан көн-төн тамуҡта,
Ожмахәтле булып тыумағас.
Баҫҡан һайын ҡыйыш баҫамын —
Уңып булмай икән, уңмағас...

Ташсы һөнәремде ташлатып,
Төшөрҙөләр картуф баҙына:
"Директорға тиклем үрләрһең,
Аҡыллы эш ҡылһаң аҙ ғына!"

Картуф ине ул саҡ "дефицит" --

Аҡкарабыҙ “һулға” баҙҙарҙан.
“Аҡыллым!” тип ҡәйнәм йүпәләй,
Төшөм төшөп торғас баҙарҙан.

Әммә ап-аҡ аҡыл-кылығым
Ҡара баҙға һыймай “ҡоторҙо”:
Арҡа бирҙем мутйән ҡәйнәгә,
“Һул” эштәргә тороп оторо...

### *4*

“Һәй үҙ һүҙле — үгеҙ күҙле!” — тип
Ҡайыҙлайҙар өйҙә, эштә лә.
“Ниңә көллө ил “аҡ” тигәнде
Теҙәһең гел ҡара кәштәгә?!”

“Сөнки ҡомаҡ була алмайым --
Ҡомаҡлыҡтан торам юғары!”
“База тигән баҙҙа картуфтан
Алтын яһай ирҙәр ҡомары!

Ә һин, ахмаҡ, бәлеш бешмәгән!
Ҡомаҡ түгел -- меңкен сысҡан һин!
Шау-ебәккә төрөр Сильвамды
Киндеркүлдәк итеп ҡосҡанһың!..”

Еште ҡыҫып күпте күтәрҙем...
Тыуҙы бына көткән улыбыҙ.
*Идеал* тип ҡуштыҡ беҙ уға,
Бәхетлебеҙ, елдәй алйыубыҙ...

...Алйыуланып бер көн ҡайтыуға
Сумаҙаным тора тупһала.
“Хуш, инде һин килеп йөрөмә —
Ҡыҙым йәшәй башҡа ҡалала!

Һинең кеүек үгеҙ күҙленән
Ҡотолоуын тапты яҡшыраҡ!”
Эшләпәмде аяҡ аҫтынан
Алып кейҙем, тәнем ҡалтырап...

Һәм ҡарама көлө бер күнәк
Һибеп ҡалды ҡәйнәм артымдан...
Ах, машина ауған...
Сильвамдың

Ғүмеркәйе юлда ҡырҡылған...

Һәм күрмәнем ғәзиз улымды --
Ҡәйнә-ҡайны япты ишеген...
“Идеалым!” тиеп буҙарам,
“Сильвам!” тием, -- Мәжнүн ише мин...

### *5*

“Сильвам!” тиеп сеңләп уянам,
“Сильвам!” тиеп өнләп тулғанам...
Идеалым, улым, ҡайҙа һин? —
Атай-әсәйһеҙ бит аҙаһың!..

Терәк улы булмай үҫерһең,
Бәғеремде көн-төн киҫерһең...
Ер шарына һыймай йәберем,
Ҡанай, ҡанай һыҙлап бәғерем...

Ап-аҡ ине лә һуң был донъя --
Ҡаралыҡҡа бирҙе ник улъя?!
Аҡлыҡтарым көйрәп ҡараям,
Яҡты урамдарым тарая...

Аҡ күлдәгем -- кәрле тышымда,
Ҡара ҡайғым зарлы эсемдә...
Ҡарыулашып шайтан өндәшә:
“Ҡаршылашма — килеш, мут йәшә!”

Тыны өтә ике ҡолаҡты:
“Башыңды эй — онот юҡ аҡты!
Мәңге булған донъя -- ҡуласа,
Эйелмәгән башты ул баҫа!”

### *6*

...Алыҫ төштәй генә тойола, —
Оҙатканда ҡала юлына,
Әсәйемдең күҙгә баҡҡаны:
“Һеҙ инегеҙ илдең баҡаны!
Азат, Яузат, Тимер һәм Терәк –
Иш инегеҙ илгә бигерәк!

Дүрт урамға ырыҫ дүрт малай,
Күк көмбәҙен терәр, тип, ҡалай
Дүртегеҙгә тигеҙ инандыҡ.
Тәңренән үк булып һайландыҡ,
Изге айҙа бит һеҙ тыуҙығыҙ,
Бишектән үк тулап торҙоғоҙ!

Ил күрке дүрт ҡыҙыл партизан —
*Хәмзә, Хисам, Сәлим, Суфиян* —
Сәсегеҙҙе алды бәкеләп,
Һәр бәпәйгә әйтте аҡ теләк:
“Илауҙары ҡалһын бишектә,
Тулауҙары сыҡһын ишектән!”

Исем ҡушҡан көндө клубта,
Дүрт сал әйтте нәҙер халыҡҡа
(Ялҡынлы һүҙ көнгә иш ине,
Һәр иш һүҙе — бәпәй исеме!):

“*Яу-зат* барҙа йәшәр ил *азат*.
*Терәк* булыр ергә *тимер* зат!
Бирәйек беҙ шул дүрт сифатты
Дүрт уланға, ҡушып дүрт атты[64]:

*Азат, Яузат, Тимер* һәм *Терәк* —
Дүрт баҡандай торһон ил терәп!” --
Тине ҡарттар. Ауыл хупланы,
Исемдәрҙе һеҙҙең ятланы”...

## 7

Шул дүрт бабай ҡушҡан исемдән
Тарамыштар микән ишелгән —
Елеп килде беҙҙең егетлек...
Егелдек беҙ эшкә, егелдек...
Ҡупҡайны шул Ватан һуғышы...
Өттө беҙҙең, өттө һулышты...

Ҡаршы ҡуйып ҡара яуҙарға,
Бураҙналар һуҙҙыҡ Ер-шарға,
Табандарҙы таңдан ҡанатып,
Тир һәм ҡандан башаҡ шаулатып!..
Һуғыш бара сөнки Ватанда —

[64] Атты — исемде.

Ватан үҙе батҡан ал ҡанға...

## *8*

Туҡмалғандай талып ҡайтабыҙ,
Баш аҫтына һалып ятабыҙ
Һөйәлләнгән һөймән-ҡулдарҙы...
Көнбайышҡа бағлап уйҙарҙы...

Көн дә барлай ыҫтан көн ғәмен:
Нисә гектар кем ер һөргәнен,
Тырматҡанын. Күпме еп ишкән
Бәкер бабай. Үгеҙ бирешһә —
Фашисҡа ҡул биреү ул, тимәк...
Тап фронтса фарыз эш итмәк...

Уҫал Вәкил -- район түрәһе
Байҡап йөрөй ҡыуыш тирәһен:
“Аттар арыҡ... Хуҙмәт нормаһын
Үтәү фарыз! Болғау ондарын
Ыумас ҡылып конюх[65] эсмәйме —
Гитлерға ул хеҙмәт итмәйме?..
Мал алдында булһын болғау мул —
Йоҡламаҫка тейеш комсомол!
Фронт ҡалай — шулай бында ла,
Һуғыш бара тәрән тылда ла!..”

Кисен ҡайтып күҙҙәр йомолғас,
Йоҡо туйыр төҫлө тойолғас,
Ах, ҡыҫҡарған ниңә төнө лә! --
Сыбыртҡы һап күткә төйөлә:
“Дүрт баҡан! Тор! Атлан ҡашҡаға!
Төнгө “һабан” һеҙгә баш ҡаға! —
Һөрән һала Нурул-бригадир,
Сталинград үтеп ҡайтҡан ир. —
Таң атҡансы, сәсеү орлоғон
Ташып ҡуйыу — фронт бойороғо!
Егетлеккә, тимәк, бир сират!”
Егетлектә булдыҡ беҙ көр ат...

## *9*

[65] Конюх — ат ҡараусы.

Үтте инде, үтте ул көндәр --
Егетлектә елгән көн-төндәр...
Булдым бына “волчок” валсығы,
Әллә инде табан балсығы...

Аэропорттан елә лимузин —
Волчогымдан ҡарап мин киләм.
Ҡала йорттарының волчогы
Кире ҡаға мине – мин беләм...

Күпер тығынлығы -- ҙур сират...
“Жигули”ҙар, ҡара “Волга”лар...
Аҙауҙарҙа алтын ялҡылдай,
Яурындарҙа — йылтыр ҡамалар...

Тимер “ат”тар тешен ыржайта,
Уҙмаһын, тип, күршем бер аҙым.
Лимузинға һарҡа һөрөмө —
Ҡара шәүлә быуа көн ағын.

Сәсәй-сәсәй ҡарға һибелә,
Лимузиндан бырғып, юл халҡы.
Ҡара ҡарҙа ятам мәтәлеп...
Ҡармай мине ҡара ҡул һалҡын...

Ах, был ни хәл?!. Елгә остомо
Башымдағы болан бүрегем?!.
Ҡара ҡулын һуҙып, ялбырйөн
Тунымды ла һәрмәй береһе...

Бында ла, тим, мыжғый, күрәһең,
“Коммунизм төҙөү” лагеры...
Лагерҙан һуң ҡайтып лагерға,
Азат “зэк”тың ҡанай бәғере...

## *10*

Тик бер яҡты өмөт — *Идеалым...*
Үҫмерләнеп улым еткәндер.
Атаһының ҡайҙа ҡатҡанын
Өләсәһе, беләм, әйткәндер...

Күрмәҫкә лә хатта ризамын,
Ишетәйем фәҡәт барлығын...
Тегенән бит аҙмы хат яҙып,

Яҙған берем ҡайтты яҙлығып...

Баш төртөргә, ярай, ярыҡ бар —
*Яузат* дуҫым йәшәй ҡалала!
Милиционер ул — аяуһыҙ
Аралаусы аҡты ҡаранан.

(Шуның аша көнгә бағырмын...)
Аяҡтарым уға тартыла!
Тик тартынам, шарф бөркәнеп,
Фатирына тура ҡарпырға —

Таныш түгел миңә ғаиләһе...
*Тимер* дуҫты тапһам, исмаһам!
Унын йәмәғәте Алһыуҙан
Тартынмаҫ та инем һис ҡасан...

Тиреп килә янда юлдашым:
— Туғаның да инде ят һәм сит.
“Туған” һүҙен хәҙер башкөлләй
Алмаштырҙы алкаш “дефицит”...

## *11*

Ах дефицит, вах, дефицит,
Алкаш-малкаш түгел инеҢ бит!..

Киндер ыштан ине — дефицит...
Киндер күлдәк ине — дефицит...

Беҙҙең ҡулдар ине — дефицит...
Һылыу ҡыҙҙар ине — дефицит...

Ирлек — түгел ине дефицит!
Кеше булыу ине дефицит!

## *12*

...Аэропорттан елгән лимузин
Керҙе гөрләп күпер түренә.
Ағиҙелде сыҡкан урында
Халыҡ мыжғығаны күренә.

Туҡтаттылар яман һүгенеп,
Һеперелеп ирҙәр төштөләр.
Иләү илергән шул тәңгәлгә
Бер-береһен тапап үттеләр.

Даһи табутына барғандай,
Йөҙәр-йөҙәр Ир-ат — ҙур сират...
"Нимә көҫәйһегеҙ, йәмәғәт?" —
"Дефецит"ҡа торҙоҡ, әхирәт"...

Тешегешеп тештәр ҡыҫылған,
Волчок ҡомһоҙлоғо — күҙҙәрҙә.
Тегендә лә былай булманы...
Передача бүлгән төндәрҙә...

Их һеҙ, кемдәр... кибет көҫәүләп
Ваҡлайһығыҙ алтын ғүмерҙе!..
Яңылышам әллә мин үҙем?..
Был ҙур сират — яуға кереүҙер

Арттырырға Ватан ырыҫын,
Игелектән ташып талаҡтар?!.
...Сәғәт һуҡты! Йоҙаҡ асылды,
Сайҡалып та китте халыҡтар...

Ах, араҡы! Асы араҡы
Тарткан кибеткә был өйөрҙө!
Шешәләре шылды шылтырап,
Ҡуйындарға кереп өлгөрҙө...

"Амбразура" — дүрткел тишекте
Ҡаплай, ҡарпып, ирҙәр күкрәге...
Дошман пулеметын көл итеп,
Матросовмы әллә күкрәне?!.

Шешә ауыҙынан эсәләр…
Бер сал ҡарсыҡ тора ҡалтырап.
Беҙ йәш саҡта күпме ғәзиз йән
Астан үлде шулай нан[66] һорап...

Юлтоҡсайҙан ризыҡ сығарам:
"Аша, инәй, Себер ҡаласын!"
«Абау-абау!..» -- Һуғып осорҙо
Ҡаласымды, кереп ҡоласын!..

---

[66] Нан — икмәк.

Биш тәңкәһен ташлап бер мутҡа,
Бер стакан алды ҡойҙортоп.
Ғорҡолдатып йотҡас бер юлы,
Тиргәп китте мине: “Ер йотҡор!”

### *13*

Аһ, ни күрәм! Ҡойоп биреүсе —
Оҡшап тора дуҫым Тимергә!..
Шешә төбөн тигеҙ бүлешеп,
Ылыҡты ул ҡыңғыр өйөргә —

Һелкеп йыҡты аҡһаҡ бер ҡартты...
Түңкәрелә ерем... әллә мин?..
Бетон стенаға һарылып,
Намыҫ дефицитын шәйләйем...

Ҡасма, Тимер!..
Кемгә киҙәндең?!
Кисererме беҙҙе атайҙар?!
Эй Илаһым! Хәрби орденды
Шығырҙатып ҡарға тапайҙар...

Ҡаты ҡарҙа ҡалғып ултырам...
Уйҙарымды ялғап уй ҡорам,
Фекер-дарым дөрләй ҡанымда...
Иҫеректәр шаулай алдымда...

### *14*

Ах, был көнгә ҡайҙан тарыныҡ?!
Ҡырлыҡ алдыҡ, биреп тарыны!..
Кем ғәйепле быға?.. Был быуын
Муртайғас, кем сөйөр ил тыуын?

Муртландыҡ шул, эйе, үҙебеҙ...
Ҡыҙарманы, буғай, йөҙөбөҙ,
Кимермәне выждан ғазабы —
Дүрт партизан-ҡыҙыл бабаны
Себер ебәргәндә нахаҡҡа...
Лайыҡ быуын алдыҡ шул хаҡҡа!..

"Бөйөк" тинек көйөк-мәкерҙе,
Күҙ йомоштоҡ "күрмәй" йәберҙе.
Теҙ сүктертеп рухты, теш ҡыҫтыҡ,
Тоҭҡонлоҡта тоттоҡ намыҫты...

Был йылда ла, ҡырсып бураны
(Һәр бөртөгөн фронт һораны...),
Ил игенен иңдән осорғас,
Аслыҡ гиҙҙе ҡотто осорғос:
Майшәм һымаҡ һүнде сабыйҙар
(Иҫәпкә лә кермәй ҡарыйҙар)...
Һәм бер көндә -- мәйет дүрт йортта.
Киләсәген илдең гүр йота...
Дүрт баҡандың нәҡ дүрт ҡустыһы
Һүнде... Киләсәктең йырсыһы...

...Ҡамыр баҫып әсәй күк ондан[67],
Ҡағыҙҙай ҡаҡ йәймә ҡатырған —
Күренәләр үтә һәр бере,
Әйтерһең дә, сабый ғүмере...

Асы йәшкә мансып ҡабабыҙ,
Әсәй һүҙе асы самаһыҙ:
"Бәхилләргә һәр дүрт мәрхүмде,
Дүртәр ҡалаҡ колхоз он бүлде"...

## *15*

Их, бер көнгә ниңә ҡайтмайҙар
Фронтта ут кискән атайҙар?!.
Атайҙарҙан ҡалған клубта
Дүрт тәнәкәй ята ҡабыҡта,
Дүрт урамдың ярып бәғерен...
(Их, белмәйбеҙ ғүмер ҡәҙерен!..)

Ҡәбер ҡаҙа баҡан — беҙ, дүрт "ир"...
Килеп етә Нурул-бригадир,
Фляганың аса бормасын.
Дер-дер килә ҡулы... ыу хасын
Соҡортайға ҡыуып хитлана:

"Эскәйҙәрҙә, беләм, ут яна...
Волга ярындағы мәхшәрҙә

[67] Күк ондан – күк төҫтәге сыҫҡан тарыһы (мысай) ононан.

Тура килде миңә “йәшәргә”,
Умыртҡансы бынау уң ҡулды...

Күпме ғүмер шунда ҡырҡылды...
Мәгәр былдай йөрәк яныуын
Беренсе ҡат, дуҫтар, таныуым...
Йотоғоҙ! Был — нарком нормаһы.
Һеҙ ҙә һалдат — яуға бараһы!”

### *16*

Танау яра хәмер быуланып,
Ултырабыҙ дүртәү уйланып.
Күҙ алдынан күсә үткәндәр —
Илап-көлөп донъя көткәндәр...

Төҫмөрләнә һәм дүрт аҡһаҡал —
Береһенән бере дәү һәм сал
Дүрт олатай — ҡыҙыл партизан:
*Хәмзә, Хисам, Сәлим, Суфиян* —
Тура баға беҙҙең күҙҙәргә:

“Беҙ түгелме һеҙҙе күтәргән,
Ҡырып алып бәпәй сәстәрен?!
Һөртмәнекме беҙ ил йәштәрен,
Илар саҡта ҡанлы йәш менән?!
Ял алманыҡ иллә шешәнән!..

Мәңге булған донъя, мәңге — Ер,
Миңрәү булмаған тик бәҫле ир!
Ҡан тулһа ла уртҡа, ут-бабаң
Ҡанын йотҡан, хәмер йотмаған,
Һалдат булып, яу-зат булып та!

Әжәл асы һәр бер быуатта.
Әммә ләкин беҙҙең бабалар,
Әжәлдәрен ғәййәр яғалап,
Хәмер менән бәғер баҫҡанмы?
Юҡ! Айыҡйән барған яҫҡанып!”

Тойҙо баҡан тоғро телмәрҙе, —
Ҡотҡо-ыуын оторо этәрҙек!
Сырт-сырт килде Нурул керпеге,
Өтөп үтте һәр һүҙ бөртөгө:

“Бөркөттәрҙе күрәм ҡаршымда!
Үҙемде лә беләм... Барыһын да
Тарих ҡылып тирер киләсәк...
Ә мин — тарихтан тик мөнәжәт...
Мине бер үк ғәфү итегеҙ!..”

Нурул-һалдат кирза итеген
Лапылдатып китте юлына.
Ҡустыларҙы күмдек шым ғына...

### *17*

Күҙҙән олаҡҡас Тимерем,
Ҡалам буйлап атланым:
“Танымағандыр ул мине --
Күпме йылдар ҡайтманым”...

Ҡунаҡхана ҡапҡаһына
Ҡуш ҡарашым ҡапланды:
Ҡаҙна йорто ҡабул ҡылыр
“Ҡаҙна йорт”тан ҡайтҡанды...

Алғырланған, -- ҡалам хайран! --
Илдә “сервис” буталы! --
Неондар ҡаш һикертеүҙән
Зиһендәрем буталды.

Паркетының ялтырына
Ҡыйып аяҡ баҫҡыһыҙ.
Күҙгө кеүек тәҙрәләре,
Шәмдәлдәре — баҡҡыһыҙ.

Зыр-зыр килә телефоны,
Өйөрөлә ҡыҙ-орсоҡ.
“Дефецит”ы ҡыҙығырлыҡ —
Буржуйҙарҙан уҙҙырҙыҡ!

Түш яланғас, һай, ялманғыс!
Бот ялтыраҡ -- иҫең кит!
Кеҫә һәрмәнә әрмәндәр --
Әжер көтә дефицит...

“Урын юҡ!” — Ах, ҡаҡ һөңгөһөн
Ҡаҙалтты был тарафҡа.
Ҡайҙан килеп кергән был “зэк”

Дефицитлы карапҡа?!

Сәләм бирҙе дефицитҡа
Ҡуңыр тәнле ир миндәй...
Африканың алмастары
Аҙауында емелдәй.

Быҙау сәйнәгән “джинси”
Төшкәс туташ алдына,
Уҙып китте “люкс”ҡа мут,
Тылсым-асҡыс алды ла...

“Ах дефицит, вах дефицит!” —
Һуштан яҙҙы һылыуым.
Сепрәк ыштан төбөн үбеп,
Саҡ-саҡ һурҙы һулышын...

Кейеп алды, бейеп алды —
Уйнаҡланы тос оса.
Африканың негры ла
Йәшәй белә! Яңыса!

Көсһөҙ икән алтын йыуып
Тапҡан минең тәңкәләр.
Тәңкәләнеп тәгәрләйем
Төнгә ҡарай, әшнәләр...

*Ах дефицит, дефицит,*
*Ҡылдың мине ниңә сит?!*
*Дефицитҡа ҡалған йәшлек,*
*Өйрәтмәнең мине ник?!.*

## *18*

*Тимер* ҡорҙаш! Зинһар, хәтерлә!
Хәтерҙә бит беҙҙең, хәтерҙә
Бәғерҙәрҙе телгән теге көн...

Ҡырҡ бишенсе йылдың игенен
Игергә тип иртән торғанда
Шомло хәбәр гиҙә ыҫтанда:

“Бер тоҡ орлоҡ төндә урланған,
Йолған уны әммә бурҙарҙан
Миңкәй-комсомолдың сослоғо —

Ҡайтарылған сәсеү орлоғо!"

Ҡырандаска һалып дәлилде
Вәкил[68] үҙе килде! Һәм илде
Шаҡ ҡатырып ҡатты дәлилен:
"Арағыҙҙа һатлыҡ! Үҙ илен
Һатҡан, тимәк, Гитлер-өрәккә,
Ҡулын һуҙып изге орлоҡҡа!.."

Һәм баҡтыртып үҙе танытты
Тоҡ тамғаһын — таныш яҙыуҙы:
«*Азат*» тамғаланған тоҡ-ҡапсыҡ!..
Телде тешләп дүртәү шаҡ ҡаттыҡ...

Шундай тоҡтар сөнки бар беҙҙә —
Башлыҡ яһап кейҙек ямғырҙа,
Тамға һалып, колхоз тоҡтарын...

"*Азат* -- түгел бур-зат!" — Ҡотҡарып
Ҡалыр өсөн ҡупты һәр баҡан.
"Хөкөм ҡулы үлсәр бар яҡтан!" —
Ҡамсы сыжлай Вәкил ҡулында.
Азат-баҡан — төрмә юлында...

## *19*

Иçеңдәме, Тимер, елтерәп
Тәгәрмәсте тотто, тик терәк
Етмәне шул... Ауҙыҡ һөрлөгөп...
Азат өнө ҡалды өҙлөгөп:

"Сәсегеҙ көр Еңеү игенен!
Ни эшләргә үҙем белермен!" —
Уҙаманлыҡ булған егеттә!
(Дефицитһыҙ йәндәр инек тә!..)

Сәсеп, кисен ҡайтһаҡ ҡыуышҡа —
Бригадирҙан аңҡый көмөшкә...
Көрөшкәгә һөйләй ул хәбәр:
"Их туғандар, ауыр шул ҡәҙәр!..

[68] Вәкил — һуғыш ваҡытында колхозсыларҙы ҡаты күҙәтеп эшләтеү өсөн район үҙәгенән ебәрелгән кеше.

Булһа иҫән дүрт ҡарт партизан,
Ил алйымаҫ ине йонсоуҙан,
Быумаҫ ине нахаҡ хаҡлыҡты!..”
Күҙебеҙҙән йәштәр атлыҡты,
Ҡаҡты йөрәк, йәнде тулатып...

...“Дошман улар!” — тиеп бер ваҡыт
Дүрт бабаны алып киткәндә,
Тел тешләүҙе белмәҫ мин бәндә
Һөрәнләнләгән инем сарбайлап:
“Дошман түгел! Ҡыҙыл бабайҙар!..”

Ҡайыш алды атай... Тәү тапҡыр
Арҡа һабаҡ алдым мин бахыр...
“Их!” — тине лә атай уфтаны —
Шешәһенән ҡат-ҡат уртланы,
Баҫыр өсөн янған йөрәген...

Азатты ла тартты, күрәһең,
Дүрт бабаның хәтәр яҙмышы...
Иртән торһаҡ — Нурул тауышы:
“Оҙон ҡуллы контр беленде —
Үҙе хөзгән[69] Миңкәй игенде!..” —
Хаҡлыҡ килде... ләкин эш үткәс...

Бөркөт сағылына, ти, еткәс,
Бөркөт-Азат осҡан баштүбән
Тарлауыҡҡа... Ғәрһеҙ йәшәүҙән
Артыҡ күреп сая үлемде...
Бирҙе донъя беҙгә ғилемде...

## 20

Дуҫым, дуҫым! *Яузат* туғаным!
Юҡ итергә золом йыланын
Теләй инек бала саҡтарҙан.
Теләкте һин көнгә атҡарған!

Азат дуҫты гүргә һалғанда,
Ҡомарлығың ҡайнап ал ҡанда,
Ҡаптың бер ус ҡара тупраҡты,
Бурыс менән бурап күкрәкте:

---

[69] Хөзгән — урлаған.

Ҡыңғырлыҡты[70] ҡырҡып өҙөргә
Ант иттең... һәм ҡылмай хыянат
Ҡомарланы изге һинең ант:

Ал погондар һалып иңеңә,
Ауыр наган аҫып биленә,
Ғәҙеллектең булдың яугире!
Баш ҡаланың һынмаҫ дан-ире!..

Ах, шулай ҙа, дуҫым, шулай ҙа
Уйланым йыш: Яузат, һин ҡайҙа?!.
Тайҙың ҡайҙа беҙҙең аранан?
Әллә беҙме — ярыҡ барабан?..

Һине, мине ҡасан юғалттыҡ?
Баҡанлыҡты юйҙыҡ, йә һаттыҡ...
Ваҡлыҡтарға бирҙек иңдәрҙе,
Ваҡлай-ваҡлай эре йәндәрҙе...

Яузат дуҫым!.. Күрмәй һин ҡалдың,
Һөрлөгөп бит төптән мин ауҙым...
Волчоктан да баҡтым донъяны...
Алтын йыуҙым, айҡап тундраны...
Төшөнмәҫһең теҙеп бирмәһәм,
Күҙҙәр менән минең күрмәһәң...

### *21*

Башы булды минең ауыуҙың
Картуф баҙының ҙур ауыҙы...
Блат аша булып бур-мөдир,
Картуфтай серенем мин, мут ир...

Юҡ, туғаным, тыуған саҡта уҡ
Һуғылғандыр беҙгә саҡма ут
Һүнә алмай дөрләп янырға...
Баҙланым мин картуф баҙында...

Тейҙе йәнгә быңа ни нәмә:
Картуф серей, картуф күҙләнә!
Ә ҙур залда алҡыш тирәләр,
Мутланышҡан алкаш түрәләр...

---

[70] Ҡыңғырлыҡты — ҡырын ҡылыҡ, ғәҙелһеҙлекте.

Гәзиткә хат яҙҙым тәүге ҡат.
Ҡайтты кире ләкин минең хат,
“Урында, — тип, — сара күрергә”...
Саҡыртылам бына түрәгә...

Айыҡ баштан ярып әйтәмен:
“Хисап бирҙең — “план үтәнем”,
Ә баҙыңдың серей яртыһы!..”
”Пардон, яртыһынан артығы”.

“Тимәк... был ғәм — миндә, һеҙҙә лә?”
“Дүрәкләнмә, *Терәк!* Ул “бәлә”
Табыш булып тиҙҙән ҡайтасаҡ:
“Дефицит”лыҡ илдә артасаҡ! —
Һөйҙө түрәм хатта арҡанан. —
Һәй, ауылда ятып ҡартайған!
“Дефицит”ты ла бит белмәгәс,
Белемкәйең әле бәләкәс!..”

— Һеҙ — алдаҡсы! — тинем түрәне.
— Һин — яласы! — тине ирәбе...
..................................................................

“Яла яҡҡан ят”ты сабырға
“Мунса” әҙер — түҙһен ҡабырға!..
Кесерткәнле миндек — һәр сығыш,
Һүтә мине, һүтә йыйылыш:

“Эсмәй, тартмай, ләкин һин ҡара! —
Сүпте өйҙән тышҡа сығара!
Баҙ йылыһы боҙа Терәкте”...
“Шылдырырға тышҡа дүрәкте!”
....................................................

Таңдан тороп тышта эш ҡырам,
Ергә терәп табан! Ҡыш, буран
Ҡоторғанда өс көн туҡтамай,
Көрәнем юл көн-төн йоҡламай,
Сөнки айыҡ — тамсы эсмәйем,
Тамсы-тамсы тамып эшләйем...

Ә бройлерҙа байрам! — Йор төркөм
Аҡ шешәнең көрәй күк “көрт”өн,
“Көрәшә” һәм бергә мут түрә.
Йырлап ҡына төркөм көн күрә...

Ҡайырып та асам ишеген,
Шешәләре төшә ишелеп
Һөймәнемдең һөмһөҙлөгөнән:
“Юл таҙартҡыс батҡан биленән —
Ҡатмаҫ борон барып алығыҙ!
Премияғыҙҙы һалығыҙ
Илтеп бөгөн ҡабат кассаға!
Ҡабырһығыҙ юҡһа ҡиссаға!”

Өйөрөлөп йоҙроҡ болғайҙар,
Тибәрергә яһил янайҙар.
Йығам һуғып әммә икеһен
Һәм татыйым өйөр типкеһен...
Иртәгәһен фарман ишетәм:
“Терәк-дворникка нығ шелтә!..”

Шелтәһенән мәгәр ҡурҡманым,
Шуның өсөн тағы уртланым
“Һуңғы шелтә” тигән ядкәрен...
Баҫылмаған әммә ут-кәрем,
Бирҙе түрә тамам кәрәкте:
“Бушатығыҙ эштән дүрәкте!..”

Бына шулай, Яузат дуҫкайым,
Ҡаланың да йоттом утҡайын...
Аңламаны мине йәмәғәт!
Күҙ буяуҙан булып ҡәнәғәт,
Йыйылдылар йылдың башында
Тантаналы сәхнә ҡашында:
“Ҙур уңыштар өсөн был йылда”
Ҡыҙыл байраҡ ҡабул ҡылырға...

Ҡыуылһам да эштән, мин килдем,
Хаҡлыҡ — минең эшем, тип белдем...
Күрһәң ине, Яузат туғаным,
Күкрәгемә нәфрәт тулғанын:
Күҙҙәрен дә йоммай, түрәләр
Алкаштарға байраҡ бирәләр!..
Дер һелкетә залды ҡуш устар,
Устар гөрөн көрмәй алҡыштар...

Дүрт партизан — ҡыҙыл олатам
Күҙ алдыма килеп, мин ҡалҡам
Туҡтатырға һөмһөҙ сараны...
Көлдө генә түрә яраны...

## 22

Гәлсәр сыңлай банкет залында...
Ҡыҙыл байраҡ тора алдымда —
Ҡалдырғандар бында онотоп...
Тыуҙы шунда хәтәр минутым:
Ағасынан һүтеп әләмде,
Ураттым да күкрәк тәңгәлде,
Алып киттем туным аҫтында...
Даһи торҙо хуплап ҡаршымда...

Таң атыуға баҫып ятаҡты,
Тентенеләр: "Сығар байраҡты!.."
Таптырҙылар: "Ҡайҙа ал байраҡ?!"
"Йөрәгемә йомдом йомарлап!" —
Ошо булды биргән яуабым...
Хәтәр статьяның һауабын
Күрҙем оҙаҡ һалҡын тарафта.
Намыҫ ҡалды минең карапта!

## 23

Волчогымдан бағам ҡалама —
Танымай тик улын аҡ ҡала.
Волчогымды ҡаплап ҡара йәм —
Ҡара шайтан сөнки сайҡала.

Башындалыр болан бүрегем —
Кейеп алған лагерь паханы...
Ҡуныр урын тапмай ҡаңғырам,
Дүрт бабаның һыңар баҡаны...

Берәҙәктәй, төшөп вокзалға,
Йыуынғыска төртәм ҡулымды
(Элеп ҡуйып янда ҙур сөйгә
Ялбыр йөнлө тундра туныңды.)

Ни ғәләмәт?!. Йылтыр һемәктән
Һыу түгел, ә зәһәр ыу аға.
Фенол тигән зәхмәт урғылған
Эсер һыуға, һулар һауаға...

Ағиҙелем — ағыу иҙеле...

Ҡаҙһаң ҡоҙоҡ — ҡарпый диоксин...
Бөртөгөнә әжәл бөрөлгән
Башҡорт ере биргән икмәктең...

Ыулы һүлгә сайып битемде,
Кейенергә итеп әйләнһәм...
Сөйҙән осҡан туным!.. Йә хоҙай!
"Зэк"тар менән тулы йәһәндәм!..

Артымда уҡ ҡара баҙары —
Иҫке көпө төртә бер малай.
Ялбыр шарфыма алмашып,
Кейеп алам... Гулаг бында ла!..

Их, бая, тим, Тимер тайғанда
Төшмәгәнмен ниңә артынан?!
Вокзал эскәмйәһен ҡосаҡлап,
Уй артынан уйҙар артыла...

Ҡайһы көнгә ҡалдыҡ, туғандар,
Ҡайҙа беҙҙең эшсе, һабансы?
Һабан тора, сүкеш тутыға...
Илде тунай ҡараҡ, ялғансы.

Хужа булған илгә "дефицит"...
Сепрәк-сапраҡ... бутал-келәймә...
"Вокзал"да бит йәшәй бөтә ил...
Поезд көтөп... билет теләүләп...

Йәне Ерҙең алмай йөрәктән,
Ғәме Ерҙең сыймай бәғерҙе.
Ил тотҡаһы? — Юҡ! Беҙ — пассажир...
Платформа ҡылдыҡ был ерҙе...

Ватан түгел — вокзал төбөндә
Төтәтелгән махра ыуындай,
Химпромдан тамам быуылып
Ер, һыу, һауа, урам уфылдай...

Бабаларҙың аҫыл һөйәге
Гүрҙәренән ҡубып тапала.
"Әсәй" тип тә әйтә белмәйсә
Балиғ була, алйып, буҙ бала...

Күңелдәрҙән быҫҡый фреон[71],
Һүреп намыҫ-озон[72] ҡатламын.
Антиуҙаманлыҡ — үлтерә-күк[73]
Мур шәүләһе йәнде ҡапланы...

Ҡарғып ниңә набат ҡаҡманыҡ?
Яу сапманыҡ хаҡлыҡ ҡырында?
Амбразураларҙы япманыҡ
Күкрәк менән кәрәк урында?!

Уҙаманлыҡ ҡалды дефицит,
Ил “дефицит” көҫәп елгәнгә.
“Джинси”ҙан ҡорап ҡоролдо
Күңел карабында елкәндәр...

...Шаулай вокзал, халыҡ ағыла...
Платформа ҡылдыҡ был ерҙе...
Бер нәмә лә тартмай йөрәктән,
Бер нәмә лә телмәй бәғерҙе...

Ҡалам һалҡын... керер урын юҡ...
Ҡаңғырырға ниңә вокзалда?!
Ауылыма ғына ҡайтайым,
Сафлыҡ көтә мине байсалда!

Дүрт баҡанды баплап тыуҙырған,
Исем биргән Намыҫ ауылы
Юймағандыр керһеҙ намыҫын!
Йылы табыр күңел был юлы!

Рухлайҙыр дүрт ҡыҙыл партизан,
Сафландырып бәндә йәндәрен!
Өр-яңынан унда тыуырмын,
Балҡытырмын тормош йәмдәрен!

Йөрәк дарҫлай, йөрәк шашына!
Ҡайтам, ҡайтам шишмәм башына!
Сабый саҡтың сафлыҡ һауаһын
Эсһәм, бәғер табыр дауаһын!..

***24***

[71] Фреон — атмосфераның озон ҡатламын юҡ итеүсе үлемес.
[72] Озон — үлемесле үлтерә-күк нурҙарҙы йыһандан ергә үткәрмәүсе атмосфера ҡатламы.
[73] Үлтерә-күк (ультро-фиолетовые лучи) – үлемесле нурҙар.

Ауылымда йөрөп ятам бына...
Һай, үҙгәргән ерем, үҙгәргән!
Үҙгәреште күрәм тирәктәрҙән,
Үҙгәреште күрәм йөҙҙәрҙән.

Мин киткәндә минең буйлыҡ ҡайын
Терәп тора инде күктәрҙе.
Туғанлыҡты күреп танымайым
Күҙҙәрендә йәндәй күптәрҙең...

Күңелдәрҙән килә ҡар һыуығы...
Әйтерһең дә, яҙҙар килмәгән.
Хәмер есе аңҡый ауыҙҙарҙан —
Мин күрмәгән элек, белмәгән...

“Бартер” тигән шайтан сыҡҡан сөнки —
Тауар алып тауар бирәләр.
Эш хаҡына хатта шешәләтә
Хәмер артып ауыл кинәнә...

Урамдары ҡалған һирәкләнеп,
Быуындары өҙөк сылбырҙай.
Хәмер сылбырҙары араһында
Һирәк-мирәк йәндәр ҡыбырҙай...

Ишетелмәй сабый сыңрауҙары —
Әллә инде тыуым туҡталған?..
Йәштәр ҙә юҡ гармун тартып уҙған —
Ауыл һүнгән... ауыл йоҡлаған...

Йоҡлаған ул, йоҡо менән түгел,
Иҫереүҙән ята һаташып.
Ҡарт-ҡоролар ҡайта “лафка” яҡтан,
Шешә тотоп, йырлап-маташып...

Һалғандармы айыҡ заманамды,
Ҡәбер ҡаҙып, әллә ләхеткә?!.
Ҡотолайым, тиеп, ҡәһәремдән,
Киттем, ахыр, изге мәсеткә.

Мәсетте бит элек клуб яһап
Тилерешкән ярһыу комсомол
Ҡартайған да бөгөн, шул клубты
Мәсет итеп дингә асҡан юл...

Намаҙлыҡҡа мин дә баҫтым бер саҡ
Тундрала — алтын йыуғанда...
Осратырмын изге ҡорҙаштарҙы,
Тимен, изге мәсет юлында.

Яҙ ҡояшы битте саға ҡыйыу,
Аяҡ аҫты ята мөлйерәп.
Күк үләне тиҙҙән күҙен асыр,
Ҡар һылыуы китер әлһерәп...

“Ат бүләге” ҡалҡып сығыр ине,
Ҡар мәреһә, әүәл заманда.
Хәҙер иһә шешә, шешә, шешә,
Шешә ята сыйнап табанда...

Нимә күрәм: йома намаҙына
Ҡыйыш баҫып ҡарттар киләләр.
Хәҙрәткә лә, аҡсалата түгел,
Шешәләтә хәйер бирәләр...

Доға араһында табын йырын
Көйләп алды бер дин әһеле.
Намаҙлығында һәм йоҡлап ҡалды
Бер нисәһе...
Башҡорт нәҫеле

Хаҡ исламға шулай ҡайта, тиҙәр...
Киттем сығып! Аллам һаҡлаһын!..
Йөрәк яныуымды баҫа алмай,
Зыяратҡа ҡарай атланым:

Шунда йәнем, бәлки, арыныр, тим,
Көрмәп алған шомло миҙгелдән.
Зыяраттың ләкин юлында ла...
Шешәләрҙән маяҡ теҙелгән...

Рәхмәт төшкөр әммә ауылдаштар
Иҫләгәндәр ҡыҙыл дүрт ҡартты —
Аҡ мәрмәрҙән тора обелиск
Һәм дүрт исем нурлай зыяратты:

*Хәмзә, Хисам, Сәлим* һәм *Суфиян...*
“Олатайҙар! Ҡанай бәғерем!” —
Һалҡын ташты барып ҡосаҡлайым
Оноторға донъям йәберен.

Әммә, әммә... Күҙҙе асҡан һайын
Бары ҡайта ҡабат ҡаршыма:
Һөмһөҙ шешә һәм ҡырлы стакан
Ҡарап тора мәрмәр башынан...

Мосолманға, мөслө “поминка”лап,
Килеп кергән кафыр ғәҙәте.
Лас төкөрҙөм ҡырлы ҡоҙоғона,
Юйып ташлап әхлаҡ-әҙәпте...

Аллаҡайым! Һис бер юҡ ҡотолоу!
Йөрәк тотоп ауам аҡ ҡарға.
Бәғер тауышымды фәҡәт ерем
Ишетергә әҙер, яҡларға...

Ҡар аҫтында, тоям, донъя геүләй,
Гүр-убалар уттай яналар.
Тыңлап төптән бәғер тауышымды,
Ирлек көҫәй ата-бабалар...

### 25

Килеп төшәм ҡабат вокзалыма,
Ауылымды артта ҡалдырып.
Ҡалам геүләй, минән ниҙер теләй,
Йөрәгемде ҡуҙҙай яндырып.

Киоскыға ир-ат — шәп сират!
Һәм матбаға бына — ҡулымда!
Йәшәйбеҙ шул илгә “гәзитә” —
Икмәк һымаҡ зарур заманда.

Шауҙырлатып ҡуҙын аҡтарам,
Тәүге биттән башлап, әлбиттә!
Осҡононан тота осколоҡ —
Йотом-йотом сафлыҡ йән көтә.

Шаҡырайған ҡара хәрефтәр...
Керә хәреф ҡырҡып бәғергә.
Уф! Аңдыған минең ҡайтыуҙы...
Ниңә бөгөн?.. Ниңә хәҙерҙән?!.

Их, булғанмын икән диуана,
Баҙҙан көргөп мут “һул” яҡтарҙы!..
Баҙҙан ҡарпып инде ҡыңғырлыҡ

Ҡырынайтҡан өҫкө ҡаттарҙы:

Төйәк тотмош иң ҙур түрәбеҙ
Түрендә мут алдап тотолған.
Тотолған да... фирҡә билетын
Кәртә ҡылып шыма ҡотолған...

Баш күтәрәм! Тамуҡ утына
Киҫәү ҡылам зыңҡыу башымды!
Ни өсөн һуң шаулап ҡанымда
Тыумыштан уҡ йыһат[74] шашынды?!

*Яузат* дуҫым! Теркә яуыңа!
"Волчок артынан" тип тартынма.
Ауыр наган аҫып билемә,
Ҡаралыҡҡа ҡаршы ҡарпынам!
..................................................
Бына подъезд. Миңә кәрәк ҡат!
Көплө ишек, ҡотло сыңғырлаҡ.
Кнопкаға баҫам. Асылһа,
Йөрәккәйем тулар йыр йырлап!

"Сыңғыр-сыңғыр"... — Тулай… тулайым...
Яузат дуҫым, өн бир! Ҡайҙа һин?
Волчоктарҙан ҡарай күршеләр —
Кем был боҙа йорттоң маҙаһын!

"Командировка"ла дуҫҡайың".
"Ҡасан ҡайта?"
"Ҡайтмаҫ тиҙ-тилә..."
Ҡуҙлы юлым иҙел ярынан
Ҡала зиратына һүтелә...

## 26

Ябай ғына гүрҙә Яузатым...
Баш осонда ҡалай йондоҙо.
Кем уйлаған, гүргә һалыр тип,
Арыҫланды заман дуңғыҙы...

Исемен тик әле белмәйем –
Әйтмәнеләр бая күршеләр.
Юҡ! Белермен! Хөкөм ҡылырмын!

---

[74] Йыһат — изге һуғыш.

Йәшәмәһен уның ишеләр!

Бына бәлә... йәнә эргәлә
Йөрәк өҙгөс йәнем ҡәбере...
Төйөлдөртөп алды алҡымдан
Йәшлегемдең йәмһеҙ йәбере.

Ҡалдым ҡатып ҡәбер ҡырында —
Был ни ғиллә?! *Сильвам*, ни булды?!.
Ҡәберкәйең ниңә боҙолған?
Һәйкәлкәйең ниңә йығылды?

Кем мәсхәрә ҡылып онтаған
Аҡҡоштай пак мәрмәр һыныңды?
Гүреңдә лә тынғы бирмәйҙәр,
Ни булды һуң беҙгә, ни булды?!.

Ултырттым да ташын торғоҙоп,
Килдем зыяратсы янына.
Уфтанды ул: "Ҡәбер талауҙар
Керҙе наркомандар ҡанына...

Кемең ине?.. Ғәфү үтенәм...
Алтын тешен алмай күмгәнһең...
Булыр, тиеп, выждан — дефицит,
Күрмәгәнһең алдан, күрәһең..."

Их, башҡайым зыңҡып әйләнә...
Ерме, күкме әллә бәйләнә?...
Мәрхүмәмде гүрҙә талаған
Ҡара шайтан талай мине лә...

## *27*

Эҙләп табып Тимер фатирын,
Подъезында һалып унтамды,
Барып кергәс йылы өйөнә...
Әйтерһең дә, йөрәк туҡталды...

Ултырамын Алһыу алдында,
Тимер әле ҡайтып инмәгән.
Баҡыр балдаҡ Алһыу ҡулында —
Бәғеремде өҙҙө кинәттән.

Никах балдағы ул *Сильвамдың* —

Төçөм итеп сүкеп биргәйнем.
Гүргә һалған саҡта Сильваны,
Бармағында килеш күргәйнем...

Ябырылам алйыу Алһыуға:
"Ҡайҙан килеп һиндә был баҡыр?!
Сильвам менән гүргә кергәйне..."
"Наркоманда ине был бахыр...

Һинең хаҡҡа, Терәк, был затты
Ғәшиш[75] биреп һатып алдым мин.
Ҡалғанына хәлем етмәне..."
"Ҡалғаны ни ине?"
"Алтындың

Иң юғары ине пробаһы —
Ағалтынлы ырмау һәм тештәр...
*Тимер* аша ҡараҡ атҡарҙы
Таныш ювелирға... вәт эштәр"...

"Кем ул ҡараҡ?"
"Эһем... *Идеал...*
Үҙ малайың, тимәк...
"Пытыуы"[76]
Бөтмәç борон, гүрҙәр аҡтарып,
Өҙөлөп тә ҡалды уҡыуы..."

Ах *Идеал!..* Улым... — Бәғергә,
Әйтерһең дә, хәнйәр батырҙы...
Тинтерәкләп сыҡҡас подъезға,
Күреп ҡалдым йолҡош-бахырҙы:

Ялбыр йөнлө минең унтаны
Кейеп тайҙы күҙем алдында...
Һалып киткән китек итеген
Тотоп торам...
Алһыу янымдан

Уҙҙы жыйлап... Тимер артынан
Уҡлау услап сапты туп-туры:
"Ҡалдыр унтаны, тим, ҡороғоро!
Һай алкашник, ҡәһәр çуҡҡыры!"

"Һис зыян юҡ, — тимен, — унтаһыҙ

[75] Ғәшиш — наркотиктың бер төрө.
[76] "Пытыуы" — профессиональ-техник училище.

Еңел булыр — бына яҙ етә!
Тимер дуҫтың ҡаты-ҡотоһо
Булыр әле миңә йәтеш тә!..”

Көйләп аяҡтарға кейгәндә,
Асылды яй күрше ишеге.
Сал олатай тора баш сайҡап:
“Алып ҡасты Тимер, тиһеңме?

Алмаштырыр “ярты” хаҡына
Унталарҙы тишек быймаға.
Урлап бөттө һис ни ҡалдырмай —
Күрше хаҡы — сүп был шилмаға!

Ул ғынамы! Үҙен ҡараған,
Фатир алып биргән йән дуҫын
Ултыртты ул һатып «ярты»ға —
*Яузат* тигән йәғни ҡорҙашын”...

“Яузат?!”
“Эйе. Мафияның шул
Ғазраилы ине уҙаман...
Ошо Тимер унын фатирға
Ғәшиш илтеп һалған бер заман.

Тентеү килеп, “табып” улъяны,
Ашанылар башын Яузаттың”...
Хәлем бөтөп: “Хуш, ҡарт!” — тинем дә
Күҙем тоноп йорттан олаҡтым...

## *28*

Хәнйәр ҡаҙалған дәү Ер шарым
Ҡанап бара йыһан юлында.
Ерҙең асы бәғер тауышы —
Бүре боғаҙлаған ҡолондай...

Йыһандың да түҙем сиге бар —
Ҡара йотоп йыһан талсыҡҡан.
Ҡарайтырға был аҡ донъяны,
Ҡара йондоҙ баға волчоктан...
Ҡара мәкер ҡайта толчоктан...

1985.

# ХАҠЛЫҠ

## I

Урал ҡыҙы! Һинең нәзәкәтле
Бармаҡтарың — әҫәр битендә.
Сейә кеүек алһыу ирендәрең
“Мөхәббәт!” тип тылсым тиртерҙәй.

Түгелерҙәй утлы хәрефтәргә
Ике тамсы ҡайнар күҙ йәшең.
Сәскә сигеп шиғыр ситтәренә,
Сирғылырҙай ҡәләм-көндәшем.

Һулышыңды һурып ҡағыҙ бите
Дөрләп китер төҫлө ут янып...
Их, уҡығың килә поэманан
Ғишыҡ-ғишрәттәрен уфтанып!

Һөйөклө дуҫ! Бының маһирҙары —
Бөҙрә-көҙрә көҙөк шағирҙар.
Күңелеңде ҡылдай нескәртерлек
Мелодрама, бәлки, яҙырҙар.

Һин өнәгән аллы-гөллө юлға
Юлығалмам, ахыры, һылыуым.
Хаҡлыҡ ҡылысының йөҙөн ҡайрап,
Ҡаштарыма ҡунды ҡылауым.

Ылғый ыуҙай асы Хаҡлыҡ һалып,
Хаиндарҙы салыр ҡылысым.
Ә һин, һылыу, ырғыт был хитапты!
Табыр әле әүҙем уҡыусым!

Урал әле ярһыу — миңрәнмәгән!
Етер, тимен, яугир ир заты.
Былбыл балы илде бәлйеткәндә
Бөркөт саңҡыуҙары бик татлы!

## II

Хаҡлыҡ! Һинең асы асылыңды
Күтәрерлек ирҙәр бик һирәк.
Нахаҡ менеп баҫһа иң башына,
Эйәбеҙ бит башты тиҙерәк...

Шул арҡала аунап ҡала Хаҡлыҡ,
Нахаҡ табанынан тапалып.
Ер ҡатламын ҡаҙып ҡараһағыҙ,
Ҡат-ҡат ята Хаҡлыҡ ҡатламы...

Ер үҙе бит — үкһеп ҡатҡан Хаҡлыҡ...
Нисек әле күсәр күтәрә!
Ер күсәре булыр инсандарҙы
Нахаҡ ҡулы аҙмы түңкәрә!..

Быуат-быуат ерҙе быуған Нахаҡ,
Быума сирен һалып йәндәргә.
"Эйгән башты ҡылыс ҡырҡмай", — тигән
Ҡоллоҡ ҡыуы һеңде ҡандарға.

Быуын-быуын шытты алашарҙар[77] —
Ҡап ҡорһаҡлы, ҡатын йөрәкле.
Бәндәбикә[78] һымаҡ ысын ирҙәр
Бөгөн дә бик илгә кәрәкле!

## III

Хан ғәремен ғәрһеҙ һөйгән тоҡом
Башҡортлоҡтан ҡалған маңҡортҡа.
Әсәһен дә һатып ебәрерлек
Етешкән "ир" аҙмы был йортҡа!

Хаҡлыҡтың ул баҫҡан боғаҙына,
Үҙ башына Нахаҡ ултыртып.
Зыялыһы булып маңҡортлоҡтоң,
Хан замандан килгән маңҡортлоҡ.

Замананың "хан"ы ғәременән
Бөгөн дә бит сыңлай яһил зат:
"Тамырһыҙ мин! Тамыр һис булмаған!
Ҡамғаҡ һымаҡ бәйһеҙ зат — азат!" —

---

[77] Алашар — хан ғәремендә хеҙмәт итеү өсөн бестерелгән ир кеше.
[78] Бәндәбикә — Ил Инәһе тип аталған мәшһүрә, Ерәнсә сәсәндең хәләл ефете.

Азатлығы унын — ҡамғаҡлыҡта:
“Иçкән елдәй иркен тәгәрлә!
“Башҡортостаным!” — тип кендегенде
Бәйләп ҡуйыу — ҡоллоҡ ҡәһәрле!” —

Тип тылҡый ул... ялап “хан”дын усын,
Үтәп алашарлыҡ бурысын...
Ғәрем азатлығын мәҙехләргә
Илтеп ялғай тоҡос йыр осон...

Шунын өсөн уға -- хан һынығы:
“Алтын йондоҙ” сәпәй күкрәккә.
Алтынынын арты -- ҡарағурғаш,
Ағыуынан илде тетрәтә.

Тәхет төбөндә ул, маңлай ороп,
Тәхетмәнден ялай итеген.
Ауыҙына ҡалын ҡалъя ҡунһа,
Иле янһын, иле интекһен!..

Табан сақын татып ятҡан көйө,
“Мин азат!” -- тип өтөк этләнә.
Халҡын матҡып шундай “азатлыҡ”ҡа,
Аҙаплана, яһил хитлана.

“О азатлыҡ!” -- Ошо татлы һүҙҙе
Әфиүндәй өрә күңелгә.
“Азат” икән, тимәк, һин бәйләүһеҙ
Бабаларға, ергә, теленә.

Үҙ ҡорһағын ҡурсап хан юлында,
Темеçкенер рухи алашар...
Ғәременән шытып ғәрһеҙенен,
Ғәрлеләргә хатта юл башлар.
Әйтеп ҡара шунда “юлбашсы”ҡа,
Кем — ысын ир, ә кем — алашар...

# IV

Алашарҙын ҡотһоҙ алалығы
Тонйоратты Хаҡлыҡ-ҡояшты.
Йолҡоношоп йоҡло тамырҙарҙан,
Алашарланды күп уйнашлыҡ...

Ил мейеһен ала-ҡолалыҡҡа
Ҡалдырып ул тартты ҡурайын.
Хан ҡылысы ҡыйҙы ир баштарын,
Айыҡ ирҙәр ҡалҡһа турайып.

Ырыҫыбыҙ ыҡты ҡулыбыҙҙан...
Баҫыу булды ҡыҫыр башаҡлы...
Уйнашлыҡтан тыуған томаналар
Үҫтерҙек бит оло ҡашыҡлы...

Үҙе ҡырҡып ерҙән үҙ тамырын,
Аунай елгә ҡамғаҡ-томана.
Ер шарын ул тибеп китер ине,
Атланалһа аҡҡан томанға...

Шул томанға илен атландыртмаҡ,
Ҡырсып ташлап Хаҡлыҡ хәтерен.
Хәтерһеҙҙең хәтәр хәтеренән
Ҡоролалыр башҡорт ҡәбере...

Алашарҙың хуплап алашаһын,
Ҡасанғаса ҡалыр буръяҡлыҡ?!.
“Тамырым бар!” — тимәк, — бар ул Хаҡлыҡ!
“Тамырым юҡ!” — тимәк, — Нахаҡлыҡ!

Һөйөклө дуҫ! Дары моҙғайындай
Шартлар өсөн йөрәк ҡабара.
Алашарҙар менән аҫыл ирҙәр
Араһында хәтәр яу бара!

## V

Уй юлағы наҡыҫ ундайҙарҙың —
Уйлап та ул, ахыры, ҡарамай.
Хәтер ҡыҫҡалығын хәтерләтеп,
Иңрәп тора анау ҡарағай...

Юҡ, ҡарағай түгел — ҡары ағай,
Яу уттарын уртлап ҡарайған.
Керпек-ылыҫтарҙың араһынан
Бабаларҙың күҙе ҡараған,
Тимәк, Хаҡлыҡ үҙе ҡараған,
Күңелемә һыҙып йырлаған:

“Тыңла мине, тыңла мине,

Киләсәккә күскән түлем!
Нахаҡлыҡтың тырнағында
Ҡанһыраным — бөлдө илем.

Хаҡлыҡ яулап баш күтәрһәк
Батшалыҡтың ҡағып көлөн,
Хаҡлыҡ менән ҡуша ауҙы
Баштарыбыҙ — киҫте үлем.

“Хаҡлыҡ!” — тигән һайын, Нахаҡ
Йолҡоп алды ирҙең телен.
Хаҡлыҡ мәгәр ҡалҡты ҡабат —
Хаҡлыҡ даулап үҫте түлем.

Урал — илем, азат үҙем —
Хаҡлыҡты мин шулай күрҙем.
Шуның өсөн тау аҡтарҙым,
Мал көттөм мин һәм ер һөрҙөм.

Шуның өсөн ҡан һәм тирем
Түгеүҙе мин Хаҡлыҡ тинем.
Дошман дөрһә — онтаҡланым,
Дуҫ-иш керһә — шатлыҡ, тинем.

Хаҡ көндәрҙән, аҡ көндәрҙән
Күп булды тик ҡара көнөм.
“Үлде Хаҡлыҡ!” — тиһә дошман,
Хаҡлыҡ даулап сыҡты өнөм!
“Үлмәйәсәк Хаҡлыҡ!” -- тинем!

Тыңла мине, тыңла мине,
Хаҡ заманға килер түлем!
Ҡарар күҙем ҡара көйөп,
Көттөм оҙаҡ Хаҡлыҡ көнөн;

Нахаҡлыҡтан ҡурсап түлем,
Золомдарға бирмәй билем
Алыштым мин — беләү илем!
Белһәң ине, белһәң ине
Хаҡлығыңдың үткән юлын!..

...Сөйгән осло һөңгөләрҙең,
Атҡан оскор ут-уҡтарҙың
Айға етер сағы булды,
Тик йән ҡыйғыс Нахаҡлыҡтың
Йөрәгенә етмәне шул...

Йондоҙ йолор ҡулдарым да
Ҡулһыҙымдан үтмәне шул,
Буйҡайҙарым етмәне шул...

Бөттө шуға сабырҙарым,
Ҡанһыраны бәғерҙәрем.
Белдем ләкин Хаҡлығымдың
Илдә иҫән ҡалырҙарын,
Минән һиңә барырҙарын.

Тик һин, күрәм, шәйләмәйһең
Бәхетеңдең тамырҙарын.
Белһәң ине, белһәң ине
Хаҡлығыңдың ҡәҙерҙәрен!..
Тарихыңдың тәкбирҙәрен[79]!..”

## VI

Тарих, тарих! Һиңә тарытмаҫка
Алашарҙар ҡулы ау ҡора.
Тарихтан ил төңһә — Тамыр шиңә,
Тамыр шиңһә — Халыҡ ҡанһырай.

Ҡанһыратып ҡанды һура ҡамғаҡ,
Тамырһыҙ ул — елгә ҡоҙаса...
Ҡамғаҡлыҡҡа илде ҡалдыртмаҫка
Әйләнәләр тарих-ҡуласа.

Әйләнә лә баҫа хәтерһеҙҙе —
Тыпырсына шул саҡ алашар.
“Зыялы”ның биҙеп зыянынан
Ил төкөрһә, ҡыу йән ни ашар?..

Дәүерҙәрҙән һеңгән ил ҡандары
Ҡурайҙарҙан тамып торғанда,
Быуат-быуат тарих ҡуласаһын
Әйләндереп бабам ҡорғанды

Юймаҡсылар хәтер юлағынан!..
Хәтерһеҙҙәр хәтәр юл ала!
Башҡорт әгәр башлап манҡортланһа,
Башҡаларға, тимен, ни ҡала?!.

[79] Тәкбир — ололау һүҙе.

Шашынмаһын ғәрем шаҡшылары —
Шаҡшы шауын тыйыр ҡеүә бар.
Башҡорт хәтере — сал Урал, Шүлгән
Хәтерҙәре менән бәрәбәр!

Уралда бит Ерҙең йәҙрәһенә
Имән кеүек кереп баҫканбыҙ.
Таш быуаттан атом быуатына
Ошо ерҙән күҙҙе асҡанбыҙ.

Беҙ эйәһе булыу арҡаһында
Рәсәй үҙе эйә был ергә.
Хаҡлыҡ булыр, әгәр барһаҡ бергә
Нахаҡлыҡты йығып еңергә!

## VII

Хаҡлыҡ тыуын сөйөп Башҡортостан
Йәшәрер мәл — алда, алдале!
Әммә көнөм... уйын түгел бөгөн —
Хаҡлығымды даулап яуҙамын!

...Көнсығыштан, йәки Көнбайыштан
Ҡитға иңен инһә көйҙөрөп,
Нахаҡлыҡҡа ҡаршы көр ҡалҡындыҡ,
Ҡырҡыр өсөн Нахаҡ һеңерен.

Һораһағыҙ тарих биттәренән
Үткәндәрен ғорур халҡымдың,
Әйтер улар: башҡорт тыуҙы, үлде
Нахаҡ ҡулын бырғып алҡымдан!

Урал-билбау менән бил быуған ер
Ҡалҡан булды күпме йорттарға!
Европаны йыртҡыс урҙаларҙан
Ҡаплап ҡалды ул, ҡан йотһа ла.

Шаһит быға Ҡытай стенаһы,
Шаһит быға Карпат тауҙары.
Босфор боғаҙы ла иҫләй һаман
Башҡорт ҡырған ҡара яуҙарҙы.

Скиф бабаларҙың тамырында
Типмәгәнме беҙҙең уртаҡ ҡан?!
Уртаҡ Хаҡлыҡ яҡлап тоҡомдары

Аҙмы ҡойҙо уны тупраҡҡа!

Уртаҡ Телдән телдәр айырылды,
Араларҙы йырҙы дин сиге.
Ә шулай ҙа беҙҙең бабаларҙың
Ҡаты булды хәтер енсеге —

Баҫып кергән Батый урҙаһына
Ур булдыҡ беҙ хәтәр ваҡытта!
Урыҫ илен утыҙ йыл һаҡланы
Башҡорт атҡан мәргән ут-уҡтар!

Мин ул тарихтағы Мүйтән батша --
Хаҡлыҡ өсөн ҡалҡҡан ҡанһырап!
Башҡорт партизаны Бошман үлде,
Тыуһын өсөн урыҫ Коловрат...

Урал тауы менән Мәскәү һыуы
Мең саҡрымдар аша тоташты.
Ил ирҙәре ҡыҙыл тыу[80] сөйгәндә
Ир намыҫы булды юлбашсы.

Онотолдо ләкин, онотолдо
Егетлеге ерҙә башҡорттоң...
Кисә туған — бөгөн булды дошман,
Бауырымды талап баш ҡырҡты...

Баҫҡаҡтары татар-монголдарҙың,
Алайҙары Аҡһаҡ Тимерҙең,
Ҡазан яҡтың ҡомһоҙ ҡоҙғондары,
Күсемдәре[81] һалҡын Себерҙең;

Һәм ҡап-ҡара йәнле "аҡ батша"һы
Беҙ ҡотҡарған маңҡорт-Рәсәйҙең
Башҡорт ҡанын эсер өсөн килде,
Киҫте телен башҡорт-әсәйҙең...

"Сүк!" — тинеләр, "Төңөл! Бөт!" — тинеләр,
Ләғнәттәре тизып төйҙө йәнде.
Башҡорт йәне ләкин төңөлмәне,
Әйтте: "Килер, йөрөр Хаҡлыҡ мәңге!"

[80] Ҡыҙыл тыу — ҡыҙыл байраҡ. Боронғо бабалар азатлыҡ яуына ҡыҙыл тыу күтәреп сыҡҡандар, мәҫәлән, Е.И. Пугачев һәм Салауат Юлаев етәкселегендәге Крәҫтиәндәр һуғышында ла шулай булған.
[81] Башҡорт хандарын үлтереп ҡаҙаҡ ҡулына күскән Себер ханлығының һуңғы ханы.

Шул ғорурлыҡ һаҡлап ҡалды илде
Йылан булып бөгөлөр йылдарҙа,
Болан булып егелер йылдарҙа.
“Хаҡлыҡ!” — тиһәк башты сапты балта —
Әйләнмәнек ләкин ҡолдарға!

Көйҙөргөс ут янды күҙҙәрҙә,
Оранлы үрт бүртте телдәрҙә.
Ер уфтанды: “Килмәй ниңә Хаҡлыҡ?!
Хаҡлыҡ кәрәк тыуыр көндәргә!”

## VIII

Һәм... Хаҡлыҡтың күреп килеү көнөн
Аймылышты иләү бер заман:
“Ураҡ менән Сүкеш ҡауышыуын
Теләй икән Үҙе уҙаман!..”

Бара ине ерҙә ҡанлы уйын...
Яһил бойом
Барыр төҫлө ине мәңге-һаман...
Килде ләкин, килде байман[82] —
Ир еткерҙе беҙҙе заман!

Үткер штыктарҙан туҡылған,
Ураҡ-сүкештәрҙән ҡайылған
Ҡыҙыл тыуын киреп таман,
Ишетелде Хаҡлыҡ һүҙе —
— Етте!
Ҡанлы уйын тамам! —
Нахаҡлыҡ-мор
Ил иңенән
Ауҙы яман!
Килде байман!

Ҡитғаларҙы елеп үтте,
Еҫерҙәрҙе егет итте
Инҡилаптың бөрө еле.
Һәм ул түгел миңә генә —
Миндәйҙәрҙең бөтәһенә
Ирек бирҙе, ирлек бирҙе —
Толпар-аттарға мендерҙе!
Елдерҙе!..

[82] Байман — үҙ аллы иркен тормош, бәхет.

Хаҡлыҡ үҙе
Ерҙе ҡыҙыу әйләндерҙе:
Илде — илгә, ҡулды — ҡулға,
Сәсте сәскә бәйләндерҙе.
Алашарҙан халыҡтарҙы
Арсап алып ирәйттерҙе,
Теҙ, билдәрҙе турайттырҙы,
Ерҙе-күкте нурландырҙы!
Хыял — булмыш, маҡсат — табыш
Араларын берләштерҙе!
Ҡырҡ атаның балаларын
Бер туғандай гөрләштерҙе!

Күр: беҙ ниндәй бахыр инек —
Яраланған батыр инек.
Ярһыу атҡа ырғып менһәк,
Тәкмәс атып ятыр инек...

Тыумыштан уҡ сапҡыр инек,
Һыбайлы ир-тапҡыр инек.
Ерҙең үҙен ауыҙлыҡлап
Елерҙәй ҙә яу-ҡор инек.
Ер эйәре Уралҡайға
Быуын-быуын ҡалҡыр инек.
Тибелеп тик Нахаҡлыҡтан,
Таш бәғерҙең таш тояғы
Типкеһендә ятыр инек...
Ҡара гүргә батыр инек...

Күр: ҡара ер төпкөлөнән
Ҡарпып көнгә ҡалҡкан халыҡ,
Толпарынан нисә ҡолап,
Толпар менеп сапкан халыҡ,
Хаҡ-йөрәге дөрләп янып,
Ике күҙе балҡкан халыҡ —

Иңен кирҙе, билен кирҙе --
Ерҙең үҙен эйәрләп елдерҙе!
Ҡуш ҡуллап, сөм-яҡты Күктән
Илгә Көндөң нурын тирҙе!

Бөркөлдө нур иргә ҡот-ҡояштан
Ап-аҡ юлыҡ, тулҡын-тулҡын булып,
Туптай тығыҙ беләктәрен,
Бит-муйынын, көллө тәнен йыуып.

Ус-бармаҡтар остарынан
Табан төптәргәсә ләйсән ҡойоп,
Ерҙе кинәндереп нур бөркөлдө,
Нур эркелде!

Нур күркендә — ҡара-ҡусҡыл ҡулы,
Ҡара сәсе,
Ҡара күҙе,
Ҡара янған йөҙө
(Тарих һөрөмдәре һырған көйө!),
Ер-толпарҙың ҡабырғаһын
Типсегән тос аяҡтары,
Ҡулындағы төҙ ҡурайы,
Билендәге кәкре ҡылысы,
Өҙөләм-өҙөләм тип тибрәнеп
Торған һүҙе — тел осо
(Бөтәһе лә, бөтәһе лә!) —
Бер ҡараһаң шундай сәйер ине,
Шул уҡ саҡта нәҡ Хаҡлыҡ — көр ине,
Шөңгөр ине! —

Һыбайлынан ҡомарланып,
Йомғаҡ кеүек йомарланып
Нурға эркелеп елеүсе толпар-Ер ҙә,
Ирҙең йәпле ҡулдарынан ҡытыҡланып
Алтын сәсен туҙғылтыусы ал Ҡояш та —
Икеһе лә, икеһе лә
Ҡыуанышып көлөштөләр:
— Ниндәй хозур!
— Ниндәй ғорур!
— Ниндәй зарур! — тиештеләр.

## IX

Әммә, әммә... Ғәзиз бабаларым,
Булманымы һеҙҙә яңылышлыҡ?
Ерҙе һалып Ленин елкәһенә,
Һеҙме, әллә беҙме яңылыштыҡ?..

“Күсәрендә Ерҙе өйөрөлтә!” – тип
Һөрәнләргә ниңә күнектек?
Бәндәлектән хоҙай тыуҙырышып,
Яһаныҡ бит ялған бөйөклөк.

Ялған хоҙайҙарҙың тирәһендә

Тәкбир әйтеп аҙмы ураныҡ?
Йыртып ташлап хәләл йырыбыҙҙы,
Йыртыҡтарҙан йырҙар ҡораныҡ
(Алашарға ҡушылып йырланыҡ):

“Иң бәхетле быуын булып тыуҙыҡ,
Ҡоҙғондарҙы ерҙән, күктән ҡыуҙыҡ,
Ленинизм иле булып уңдыҡ!” —
Тип данланыҡ көндө (ҡыҙыл ҡыуыҡ!..)

“Ырыҫ ләйсәндәре ерҙе ҡоса,
Күк бөрөләр тулап керпек аса,
Буҙтурғайҙар буҙрап-сыңрап оса —
Шул сафлыҡҡа Ленин сафлығы
Ирештерҙе!” — тип йыр саңҡыны...

“Тулҡын-тулҡын ҡояш нуры аға,
Нур сәсрәтеп арыш мыйыҡ ҡаға,
Бөртөк-бөртөк туҡлыҡ күҙгә баға —
Шул муллыҡҡа Ленин хаҡлығы
Туйындырҙы беҙҙе!” — тип тағы...

“Күпереп тә икмәк-ҡалас бешә,
Имен йортҡа егәр килен төшә,
Күкрәк киреп алсаҡ ир етешә —
Шул көрлөккә Ленин хаҡлығы
Тейендерҙе!” — тинек йотлоғоп...

“Донъям тыныс — көләс Ер, Күк-һауа,
Тынлыҡ ярып илап бала тыуа,
Бәхет үҙе кендек инәй уға —
Шул бәхеткә Ленин хаҡлығы
Ҡойондорҙо!” — Йәнем шатлығы...

“Ҡот-тупһанан сабый сабып сыға,
Әйләнә шат егет-һабансыға,
Ҙур заводта йәки сүкеш һуға —
Шул шатлыҡҡа Ленин хаҡлығы
Һөйөндөрҙө!” — тинем мин тағы...

“Үҙ ер-һыуын, күген — Ватанын
Ҡурсап ҡойһа хәләл ал ҡанын,
Сабып өҙә Нахаҡ алҡымын —
Еңеү яулай Ленин хаҡлығы!” —
Тип һөрәнләй юлдар сатлығы...

“Төштә генә батша, хоҙайҙар
Ер күсәрен бороп уйнайҙар.
Беҙҙең ҡулда бөгөн Көн, Айҙар —
Титандарға хеҙмәт кешеһен
Тиңләштерҙе Ленин хаҡлығы!” —
Тип туҡтауһыҙ тел-теш сарлауҙар...

“Йөҙ телле — беҙ, берәү — илебеҙ,
Маҡтап туймаҫ уны телебеҙ,
Фиҙа уға ғәзиз йәнебеҙ,
Урыҫ — ағай, уға эне — беҙ! —
Ленин хаҡлығылыр үҙебеҙ!” —
Тип асылды аслан телебеҙ...
Ләкин... ләкин...
Инде беләбеҙ...

Ҡыҙыл олатайҙар ҡыҙамығы
Алмаштырҙы, буғай, Хаҡлыҡты...
Алашарлыҡ — бөгөн аҙашырлыҡ,
Иблес бәйләй күҙен халыҡтың.

Ватан бөлә... Унан илдәр көлә:
“Туйҙырҙымы Ленин ҡаласы?..
Аҡ батшаның йортон утҡа тотоп,
Ҡорҙоғоҙмо ҡыҙыл аласыҡ?..”

Эйе ҡорҙоҡ... Ҡыҙыл аласыҡтың
Табындары ләкин талымһыҙ.
Аслы-туҡлы үҙгәртеп ҡороуҙың
Ҡыҙыл йыры инде яғымһыҙ.

Яғымһыҙға әммә йомоҡ күҙҙәр,
Ә ауыҙҙар – асыҡ арандай.
Һәр беребеҙ, баҫып ҡотһоҙ маршҡа,
“Капитализмға” тарбаңдай...

Болғаныша әҙәм балалары,
Таный алмай иблес, аллаларҙы.
Рәсәй-әсәй тигән ватаныбыҙ
Ҡанһырата ҡанлы яраларҙы...

Үҙе — хәтәр, үҙе хозур кеүек...
Күңелдәрҙе әммә боҙор кеүек...
Юл башлаусы “башлы даһи”ҙары —
Юлға төшмәҫ элек туҙыр кеүек...
Алашарҙар уҙыр кеүек...

## X

Ҡыҙыл бабаларҙың ал томаны
Быуҙы, буғай, күҙҙе минең дә.
Етмеш йыллыҡ ҡыҙыл ҡыңғырлыҡтан —
Дөйөм алашарлыҡ илемдә...

Егерменсе быуат замандашым!
Таш йорттарҙың фатир хужаһы!
Ҡатлы-ҡатлы ожмах ҡосағында,
Күҙгә терәп ерҙең дүрт яғын да
Йәшәйбеҙ шул, эйе, “нужаһыҙ”

(Беҙҙең өсөн бары әкиәттә
Тороп ҡалған ҡабыҡ аласыҡ).
Тәҙрәләрҙә көлкеп тулай ҡояш,
Табындарҙа — ҡояш ҡаласы:
“Их, йәшәһен, әйҙә, власы!” —

Фанилыҡҡа йәнде алмаштыртып
(Хаҡлыҡты, тим!), Нахаҡ көлмәйме?!
Алашарҙар һүткән көн йырынан
Алашарлыҡ рухҡа һеңмәйме?

Телең дә юҡ — ана, ят телендә
Ләпелдәшеп үҫә сабыйың.
“Башҡортостан” тигән иленде лә
Алмаштырыр “өлкән ағай”ың...

Хаҡлыҡ бизмәнендә үлсәүҙәрҙе
Онотоп уҡ, ахыры, барабыҙ.
Үлсәйексе көндө,
Үлсәгәндәй
Йәнен һалып уны бабабыҙ!

Баһаланыҡ мәле икмәк тәмен,
Һауа тәмен, эскән һыу тәмен?
Баһалаһаҡ, ниңә онотабыҙ
Мәғәнәһен “Хаҡлыҡ” тигәндең!

Тыныс һәм туҡ көйө уйланыуҙың
Ҡыйын икәнен дә беләмен,
Уйланайыҡ ләкин, уйланайыҡ,
Уйланайыҡ, туған, беҙ, йәме:

Сарсап эскән ебәк һыуҙарыбыҙ,
Икмәгебеҙ, һулар һауабыҙ
Ҡайҙан килә?! —
Хаҡлыҡ арҡаһында
Хаҡ-эш менән уны табабыҙ!

Хаҡлыҡҡа беҙ хыял туғарабыҙ,
Ҡалас итеп өйгә алабыҙ.
Ҡандай алһыу-ҡыҙыл кирбестәрҙән
Хаҡлыҡ ҡалалары һалабыҙ.

Түгел ләкин бәндә "хаҡ"лығы ул,
Фирҡәләрҙең түгел "хаҡ"лығы --
Улар бурһый...
Фәкәт Дәү Хоҙайҙан
Төшкән Хаҡлыҡ һаҡлай сафлығын!

Быуын-быуын, быуат-быуат ашып,
Алып килә беҙҙе был Хаҡлыҡ.
Бөгөнгөмдә Хаҡлы булһам ғына,
Иртәгәмә кермәç Нахаҡлыҡ.

Бөгөнгөлә ҡайнай иртәгәмдең
Ут бураны һәм һөт паклығы.
Үткәндәрҙе, килер-көткәндәрҙе
Тоташтырған — ысын Хаҡлыҡ ул!

Хаҡлыҡ — түгел көмөш шалтырауыҡ,
Йәки бутал кершән ҡылырлыҡ.
Бөтә көндәремдең йөрәге ул —
Лөп-лөп типкән ал ҡан тамырлы.

Урал улы — ата-бабаларың
Хыял иткән тормош ул — Хаҡлыҡ.
Шул тормошто Хаҡ ҡул төҙөмәһәк,
Булыр ине үҙе Нахаҡлыҡ.

Ерем елә Быуат Ҡапҡаһына!
Нимә йөкмәп унда кем керер?!
Үҙ йөрәгең әйтһен дөрç-дөрç ҡағып:
"Хаҡлыҡ яҡлап яуға мин өлгөр!"

Алашарҙар ғәрем ҡараулаһын,
Ырғып тороп иңгә һал йөктө!
Торғонлоҡтоң ойоу талғынлығын

Терһәк терәп йыртыр мәл етте!

Янып-ярһып йәнде көл итергә!
Ауыр тартып йөрәк ярырға!
Хаҡлыҡ даулап, ялҡын-метеорҙай,
Ҡара төндө ярып барырға!

## XI

Ватандашым минең, хаҡ-ҡорҙашым,
Ҡыҙҙырмаймы бер хәл ҡаныңды:
Ярһыу ғәскәр берҙәм атлағанда
Кемдер аҡһай, боҙоп аҙымды.

“Их, өс көнлөк кенә был донъяла
Типтереп ҡал! Йолҡоп ал, аша!” —
Шул мут таҡмаҡ менән көнөн башлай
Алашарҙан шыҡкан алашар.

Тәмәкеһен ҡабып арҡырыға,
Эш көнөнөң ыҫлай яртыһын.
Ярты көскә “һөрөп”, “ярты” кәгә —
Баҫа шулай “йөрәк ярһыуын”.

Сәғәт һуға — цехтан сығып һыҙа:
“Беҙ — эшләнек! Бир ял тиҫтергә!
Минең хоҡуҡ илдең Төп Ҡануны
Менән гарантия ителгән!”

Келәм менән көплө фырт фатиры,
Асфальт менән ҡаплы урамы.
Аяғын, күр, ҡалай иркен һуҙа,
Иркен киреп илдең юрғанын.

Ауыҙына төйөп ҙур ҡалъяны,
Күк экрандан күҙләй Күк йөҙөн...
Режиссер бит унын өсөн уйлай,
Унын өсөн актер көлөп-илай —
Гарантиялы бит был үҙе!

Гарантия унан көтмәгеҙ тик —
Маңҡорт тыуыр унан, тыуһа ла...
Шундайҙар шуҡ шытыу арҡаһында
Башҡорт ҡалыр бер көн тупһала...

Хәтерһеҙ йән хәтәр икәнлеген
Белә тороп, быны үҫтерҙек.
Еребеҙҙең мең йыл егәрлеге —
Уға тик бер уртлап эсерлек.

Юҡ! Ғәйепһеҙ ул да! --
Алтын Йондоҙ
Алашар бит уны шыттырҙы.
Шул шытымдар баҫып ил баҫыуын,
Нахаҡлыҡты бөгөн шаштырҙы.

Бишектән үк Нахаҡ көйөн көйләп,
Алашарлыҡ көнгә моронлай.
“Тамырың юҡ!” — тип ул һабаҡ бирә,
“Тамырың ҙур!” — тиер урында.

Үткәне юҡ икән — көткәне юҡ,
Көткәнһеҙ ер — көҙөк майҙаны.
“Аҡҡошом!” — тип ҡоҫҡан ҡара ҡошо
Көҙөклөктән тирә файҙаны.

“Азатлыҡ” тип ҡола ҡамғаҡлыҡты,
Болғай[83] ерен бәғзе балалар:
Башҡортто бит бөгөн алашарҙар
Башҡортлоҡтан азат ҡылалар...

Аҡ йортонан, ана, ҡара ҡоҙғон
Ҡанаттарын ҡағып ҡубына.
Хаҡлыҡ бөлгән ерҙә халыҡ үлә —
Ҡара ҡоҙғон шуны һағына.

Бөлдөртмәйек, дуҫтар, сын Хаҡлыҡты!
Уралым — сын Хаҡлыҡ төйәге!
Уҡ-һаҙағын һалмай ҡулдарынан,
Бабаларҙың ята һөйәге!..

## XII

Гиҙә әле, гиҙә ерҙә Нахаҡ,
Ҡоҙғон кеүек аңдып Хаҡлыҡты.
Бәндә менән бергә Айға менә,
Йыһандан ул һалмаҡ хаслыҡты...

[83] Болғай — болға (аҡсаға) әйләндерә, һата.

Уралымды, изге Хаҡлығымды,
Йәндәй күрһәм, тимәк, — Ер аман.
Йөрәктәрҙең утлы балғалары
Һуҡһын, һуҡһын ярһып, уҙаман!

Беҙ терәмәй, Күкте кем терәһен?!
Беҙҙәй шашып Ерҙе кем һөйһөн?!
Шуның хаҡҡа (йән-тән булһын фиҙа!)
Керәм утҡа — әҙер мин үҙем!

Нахаҡ һалһа ҡулын Хаҡлығыма,
Үҙем ҡылыс — йәнен киҫәмен!
Был көнөнә сөнки бөгөнгөмдөң
Алып килгән мең йыл кисәгем!

Юҡ, төңмәгән әле ерҙә Нахаҡ —
Хаҡлыҡ-ҡылыс зарур был ергә!
Һәй, иртәрәк әле Хаҡ-ҡылысты
Алтын уҡа менән төрөргә!..

## XIII

“Өс көнлөк”тәр! Ҡамғаҡ-алашарҙар!
Һеҙгәме һуң иңләү Хаҡлыҡты!
Күтәралмаҫ елкә соҡороғоҙ,
Ҡайыш аяғығыҙ ҡамыты!

Хаҡлыҡ бит ул түгел йылы имсәк
Йәнең иҙрәп имеп ятырлыҡ.
Хаҡлыҡ бит ул — ҡылды ярыр ҡылыс,
Ҡыныһынан сыҡҡан ялтырап.

Ер-Күк тора Хаҡлыҡ арҡаһында!..
Сын Хаҡлыҡты ялған хаҡлыҡҡа
Алмаштырып күпме баҫтыҡ буҡҡа,
Ҡолаҡҡаса баттыҡ һаҙлыҡҡа...

“Коммунизм” тинек шул һаҙлыҡты...
Хаҡлыҡ ҡына тартып сығарыр.
Юғарынан әммә суҡый ҡоҙғон
Соңҡаларҙы, ҡалҡһаҡ юғары...

Туҡталмабыҙ ләкин, тайпылмабыҙ!
Арҡа терәге беҙ донъяның!
Хаҡлыҡ булһа ҡанда, нахаҡлыҡтар

Ала алмаҫ беҙҙән улъяны!

Тәкбир әйтә, ана, Урал ҡыҙы:
«Хаҡ-ирҙәрҙең күркен һағындым!
Хөкөм һөрә ниңә алашарлыҡ,
Егеткәйем, мүкләп аңыңды?!»

Хаҡ-ир булһаң, Хаҡлыҡ-ҡылысыңды
Мүгеңә сап илдән элгәре.
Намыҫыңдан ҡырсы ҡанһыратып
Гөнаһ шомлоғоноң түлдәрен.

Хаҡ-ир булһаң, илең гөнаһтарын
Ҡырсып ташла — тайып-тайшанма!
Ҡыңғырлыҡты ҡырмай, эш бөттө, тип,
Ҡаушарырға ҡулды тамшанма!

Иҙеүеңде сисеп ик игелек —
Яҙыҡлыҡты күмһен изгелек.
Мәңге эштә, мәңге-гел көрәштә
Илеңде илт төптән егелеп.

Нахаҡлығын көндөң тураҡларға
Тутыҡмаһын Хаҡлыҡ-ҡылысың.
Сүкеш һабы, һабан тотҡаһында
Ойомаһын ике ҡул осоң.

Бүрәнәнең, ана, ауыр башы...
Күтәреп ал — булыр был Хаҡлыҡ!
Еңел башына бит атланышып
Хөкөм һөрә Мутлыҡ, Нахаҡлыҡ!”

Күк Уралым -- башҡорт яралған ер,
Ғәзиз илем -- Башҡортостаным,
Һеҙҙең өсөн йәнем-тәнем фиҙа --
Хаҡлыҡ һағында гел постамын!
...........................................................
Ғаләмемә булам таймаҫ күсәр —
Шашып ташһын көнгә шатлығым!
Ер шарын мин иңемә күтәрәм —
Бына Хаҡлыҡ! Минең Хаҡлығым!

1987 — 1988.

# ҮТКӘН ЙЫЛДАР МОҢО

*(Аҡ шиғырҙа роман)*

## I
## КИТАП

Һөйләйем мин фәҡәт булғанды —
Күрмештәрен туған халҡымдың...
***Китапсынан.***

Сәғәт һуҡты, ахыры, миңә лә —
Сәнкем-Биктимерҙә тыуып үҫкән,
йәш сағынан
"әсе тормош һурпаһы"н мул эскән,
ҡыу яланда һыуһауға күнеккән,
ҡарурманда Көн йөҙөн оноткан,
силәкләп ҡойма ямғырҙа
күлдәксән йөрөгән,
туңдырып өргән буранда
өйөнә кермәгән,
яҙын боҙло ташҡындарға ҡойонған,
ҡырҡ сирләп, ҡырҡ тапҡыр һауыҡҡан,
ҡырҡ үлеп, ҡырҡ тапҡыр терелгән,
апрелдә гәрәбә бойҙайҙарын сәсеп,
августа алтын уңышын йыйнаған,
йәйгеһен
һөйәркәһен көткән кеүек һағынып
ямғыр көткән,
көҙөн болот араһынан
Ҡояш эҙләп күҙ талдырған,
иртүк тороп, хеҙмәткә тотонған,
кисен ятып, иртәһен уйлаған
ябай игенсе балаһына —
сәғәт һуҡты, ҡорос перо алып,
аҡ Көнгә һәм ҡара Төнгә мансып,
маңлайымды һыҙлатҡан уйҙарҙы,
йөрәгемде тулатҡан моңдарҙы
аҡ юлдарға аҫыл алмас һымаҡ теҙеп һалырға,
дәфтәр биттәренә ҡайып яҙырға!

Егерме бер йыл буйына йөрөттө
башҡорт ере мине — йөктө күтәреп.
Яланаяҡ, сабата, итек кейеп,

йәйәү, һыбай, арба йә сана егеп,
ут-көндәрҙә, ҡараңғы төндәрҙә,
ҡанға мансып зәңгәр Күкте
шәфәҡ ҡалҡҡан кисәләрҙә,
йыр һәм илау кеүек моңло иртәләрҙә
муйыл баҡсаһындай хуш еҫ-әрәмәтле
һауаһына иҫереп,
шашҡын хистәр кисереп,
болоттарҙай туҙғыҡ уйҙарыма сумған көйөмсә,
уның оҙон юлдарын мин буйланым.

Килтерәләр ине юлдар
үҙем һымаҡ
хеҙмәт өсөн тыуып-тулап,
хеҙмәт менән көн күреүсе инсандарҙың өйөнә.
Үҙ өйөмдәй,
тартынмайса,
инеп йөрөнөм мин ул ыҙмаларға,
бер табынға ултырып, ихласланып
татлы йүкә балы менән сәй эстем
шул кешеләр менән бергә мин -- иркен;
һөйөклө туғаным булдылар
һәр береһе уларҙың.

Бишмәттәре
алтын менән ҡаймаланған түгел
был кемдәрҙең,
энциклопедиялағы
борма-һырма һүҙҙәр менән
улар һөйләшмәй, —
хәҡиҡәттәй аңлайышлы телмәрҙәре,
яҙғы Ҡояштай йылы һәм
йомарт асыла йөрәге.
Икмәк валсыҡтары ҡойолһа табынға,
улар уны
аҫыл таштар һымаҡ ҡәҙерләп сүпләйҙәр!
Ҡояш сыҡҡан саҡта:
“Уңыш килтер игендәргә!”
“Үҫеш килтер тыуымдарға!”
“Тыныслыҡ бир илдәргә!” —
тип теләйҙәр...

Иген, иген!
Йәшәү эликсиры
тип атарға кәрәк булған һине!
Мендәр һымаҡ күпереп бешкән икмәк

ятһа табынға, кем теләп ултырмай,
Ҡояш кеүек һары карауайҙы
күкрәгенә терәп телгән саҡта
кем иң бай һәм
иң бәхетле итеп үҙен һанамай?!
Ашап торғас уңған күмәстең
бер-ике телемен,
беләктәрендә кем ҡеүәт-көс тоймай?!

Иген, иген!
Иген, тиеп, беҙҙең атайҙар
кулак баҫыуҙарында бил бөккәндәр,
һәр ҡарышын изге башҡорт еренең
әсе тирҙәренә улар ҡандырған,
бураҙнаға төшкән һәр бер орлоҡто
йылы тынын өрөп улар шыттырған,
алтын нурға ҡойонған һәр башаҡты
үҙ ҡулдары менән һөйөп йыйнаған,
тик гәрәбә бойҙай һаҡлай алмаған
буралары уларҙың,
тәпәндәре йомшаҡ ҡамыр әсетеп кинәнмәгән...

Үткәндәрҙе мөмкинме һуң онотоу!.. —
Халыҡ хәтерендә ул мәңге,
мәңге ята юйылмайынса,
үрт ялмаған дала һымаҡ ҡарайып...
Шул бошонҡо замандың бер киҫәген
бурысланы һеҙгә ошо йөрәгем
һөйләп бирергә — билгеһеҙ бер ауылда
тыуып үҫкән ябай-ялпы улына,
мин-ҡолона!

Йөгөм ауыр.
Таймам микән хәлдән,
күрә алмай осон юлымдың?!
Саң-тупраҡка күнеккән ҡытыршы
ҡулым игә алырмы икән һуң
уйҡайҙарымдың тос орлоғон,
түкмәй-сәсмәй, аҡыҡ ҡағыҙға?
Һүҙем-ынйыларым араһынан
таушалмағандарын табырға
тапҡырлыҡҡайҙарым етерме?..
Тәңрем ләкин быға килтерҙе —
*сәгәт һукты!..*

# Беренсе бүлек

## Эпиграф урынына

Борон заманда Үлем
бик иркен йәшәгән, ти:
нимә килһә башына —
тотҡан да эшләгән, ти...

Уның баш-баштаҡлығын
көскә күтәргән донъя.
*Тормош* менән *Мөхәббәт*
кәңәш иткәндәр шунда:

*“Ғүмер бирәбеҙ кешеләргә беҙ,*
*һөйөү бирәбеҙ кешеләргә беҙ.*
*Был донъяла тик икәү — һин дә мин*
*хакимлыҡ ҡылырға тейешбеҙ!*
*Әммә-тик Үлемдең ҡылығы*
*беҙҙең аҡ хеҙмәттән күберәк.*
*Ҡоротҡос ҡулдарын залимдың*
*Шаҡарып ҡыҫҡартыу бик кәрәк!”*

Һәм икәү һүҙ ҡуйышҡан —
осратҡан һайын, тотоп,
ҡайыҙларға Үлемде,
һыу эскеһеҙ ҡаҡшатып.

Тап шул көндән һуң Үлем
тап булырға ҡурҡа, ти,
Тормошҡа, Мөхәббәткә!
Йәшеренеп юрта, ти

икеһенең артынан,
күләгәләй ҡалмайса...
Ләкин ҡара эштәрен
башҡара, ти, талмайса:

Тормош ғүмер тыуҙырһа,
әжәл сирен ҡуша, ти.
Мөхәббәт һөйөү бирһә,
ағыу бөркөп боҫа, ти...

Уңайлы һәр форсаттан
файҙаланырға әҙер,

икеһенең артынан
ҡалмай йөрөй ул хәҙер...

### *1*

Аҙ йоҡлайҙар Сәнкем ауылында
алтын ҡауырыйлы әтәстәр...

Диңгеҙ артындағы илдәрҙән
килеп, Ҡояш үткер нурҙарын
йәмле Һаҡмар буйына тиртһә;
ҡара урманлы Билән тауҙың
ҡая-ҡутырлы таҙ түбәһендә
шаян шандаҡ уйнай башлаһа;
таң еленән һығылып-һығылып зифа
тирәктәр шауларға тотонһа;
яр ситендә талдар, әүешеп,
толомдарын һыуға мансыһа,
уяналар ҙа таң әтәстәре
һуҙып кикерүкләй башлайҙар,
әйтерһең дә, төндө тиҙерәк
ҡыуып ебәрергә теләйҙәр...

Таң әтәстәренән иртә тора
ярлы ҡыҙы һылыу Сәлимә,
зәңгәр таңда бай утарында
һыйыр һауа һәр саҡ Сәлимә.

Талған тәне һыҙлана ял һорап
һәм күҙҙәре ҡарыш йомола,
ә күңелен биләй бер уй ғына:
“Их, йоҡлайһы ине тағы ла...
тағы ла... тик бер сула ғына”...

Байғуралар мамыҡ түшәктә
теләгәнсә наҙланһын өсөн,
баш ҡалҡытып ятҡан урындан,
баллап хуш сәй эсһендәр өсөн,

аҡ ҡулдарын “ғәрле” хеҙмәткә
ҡағылдыртмай, бойороп, екереп,
илдең маңлай тире ашлаған
ләззәт емешен өҙһөндәр өсөн,

таң әтәстәренән иртә тора

ярлы ҡыҙы һылыу Сәлимә.
Таң йоҡоһон донъя йоҡлағанда,
һыйыр һауа байға Сәлимә...

Ҡамыш кеүек һомғол бармаҡтары
етеҙ һығылып уның йөрөйҙәр,
тик аҙаҡҡа табан арыйҙар,
ағас һымаҡ ҡатып әрнейҙәр:
таңғы сулала ул унлаған
һауынлыҡты үткәрә шул ҡулынан...

Малдарҙы ҡыҙ ҡыуалай көтөүгә,
ысыҡлы саф үләндәргә эҙ ярып.
Ҡурай уйнап көтөүсе олатай
тәбрик итә уның килеүен
тымыҡ таңды моңға тултырып,
әрәмәлә көндө ҡаршылаған
"сут-сут" һандуғасҡа ҡушылып...

Мүк ҡаплаған суйырға сүгәләп,
гүзәл ауаздарҙан шәрбәт эсә ҡыҙ;
туған тауҙар араһында тыуған
моңло көйҙәр һыға наҙлы йөрәген,
һынландырта көйҙәр тирбәлеүе
бала саҡтан әсе күргәнен.

...Уңдырышһыҙ яланғас ҡаяла
шытҡан ҡайын һымаҡ ул үҫте
яфа сигеп... Кесе йәштән үк
"нужа бабай" барҙы яғылып,
күләгәләй уға тағылып...

Баҫма бар тип баҫҡан һәр ерендә
лайҡау һаҙлыҡ ҡыҙҙы аңдыны,
аҙымҡайы һайын, астамаҡ
тәрән соҡор ятты һағынып.
Бәғеренә ҡатҡан хәсрәттәрҙе
һанай-һанай ҡатты тәҡәттәре...

Ете йәштә, етәкләп ҡулынан,
абыстайға уны илттеләр:
"Изге ғилемдәрҙе өйрәнергә
ваҡыт етте, ҡыҙым", — тинеләр.

Шул көн уға ыҙалы тормоштоң
башы булды... Ҡарт абыстайҙың

әйләнде ул бәләкәс ҡолона,
ҡарышыуһыҙ йомошсоһона;

ҡайҙа ҡушһа — шунда йүгерҙе,
нимә әйтһә — шуны килтерҙе,
ә кистәрен, һуҡыр шәм алып,
изге сүрәләрҙе ятланы:
“Алла”, “ен” һәм “әүлиә”, “пәйғәмбәр”
тигән йөктө башына тупланы...

Бала йәнен ғәрипләгес үле
“ғилем”гә баш бирмәй, аҡылы
бесәй тырнағына эләккән
ҡарлуғастай ҡаты талпынды...

“Әсәйемдең бишек йырҙарынан
башлап отҡан телем барында
ниңә миңә ят ғәрәп теле?” — тип
һораны ул...
“Башҡорт һабансыһы
һөйләшкән тел ғилем өсөн түбән, —
тиеп уға яуап бирҙеләр. —
Был тел тау һәм урмандарҙа тыуған
һәм шунда уҡ үлер!” — тинеләр...

Өйрәнде ул шулай аң-белемде
ун икегә ҡәҙәр...
Һуңынан
“ғилем йорто”н ҡалдырып, яланға
сығып ките һары таң менән,
атай-әсәкәйе менән бергә
Көнгә янып урҙы игендәр,
ҡортҡаларҙың йыуан ҡорһағына
яңы май ҡатламы ҡундырып,
тиргә һыҙып аҡҡан йәшлеге
менән туған ерҙе һеңдереп...

Ғимыранға шунан ялланды
ун алтыла, булып көнләксө.
Байҙың күмәк һыйырҙарын һауып,
көн артынан шулай көн үтте...

Ҡурҡып япраҡ ярған саф сабыйлыҡ
атты күкрәп йәшлек сәскәһен,
һоҡландырғыс булып зифа буйы
һомғолланды, оҙон толомдары

ҡыуандырып ятты яурынға,
үбеү көтөп тығыҙ биттәре
алһыуланды... Көнгә күҙҙәре
уйсан хыял менән төбәлде...

Тәмле төштәр ҡыҙға күренделәр
хыялыйлап:
көслө һәм сибәр
егет баға уның күҙҙәренә,
утлы һулыш алып – тоҡаныһ,
ҡомһоҙ мөхәббәт менән яныһ...

“Һөйәм һине, һуштан яҙып һөйәм,
ҡулыңды бир, йөрәгеңде бир!” —
тип шыбырҙай егет ирендәре,
үртәп көләләр серле күҙҙәре,
тауышында — теләк һәм үтенеү,
һорау, саҡырыу, дәрт, талап итеү...

Һәм Сәлимә ҡулын тоташтыра,
имеш, мыҡты егет ҡулы менән...
Етәкләшеп тауға менә улар
ҡырағай кейектәрҙең эҙенән...

Әллә өңдә, әллә төштә, әллә
хыял диңгеҙендә күрәләр:
юлдарына гөлдәр һибәләр
ҡылыс аҫҡан хатта түрәләр:

“Хәйерле ҡыл! Бәхетле ҡыл!” — тиҙәр,
“Оҙон ғүмерле, татыу бул!” — тиҙәр,
дуҫ йылмая бәндәнең һәр бере,
уңыш байрамындағы шикелле...

Һоҡланалар тауҙың түбәһенән
киң донъяның матурлығына:
көмөш йылға, емешле урмандар,
бил тиңентен үләнле болондар,
иген һарылығы баҫыуҙарҙа,
ҡупшы өйҙәр йыйнаҡ ауылдарҙа
балҡып тора сағыу һүрәттәй,
мөхәббәтлеләрҙең алдарында...

Ҡулын һоноп әйтә егет уға:
“Бөтәһе лә һинеке бында!
Йәшә, ҡыуан, мәңге бул бәхетле,

тик һөй мине, тик мине ҡыума!"

Һәм ҡыуана ҡыҙ, һәм ләззәтләнә
һиҙелдертмәй килгән бәхеткә;
елгә ҡарыш шаярған зәп-зәңгәр
умырзаяларҙы ул ҡосаҡлай,
күлдәк итәген үрелеп үпкән
ҡусҡыл ҡыяҡтарҙы ул һыйпалай,
бар донъяны өнһөҙ туйҙырыусы
һутлы ерҙең услап тупрағын,
алма-ҡыҙыл биттәренә баҫа,
бүртек-тиртеү күкрәгенә ҡыҫа...

Хистәренең ҡылдарына сиртеп,
алсаҡ йөҙлө йәштәр йырлайҙар,
ялбыр ҡыуаҡтар артынан, көлөп,
хәйләкәр еңгәләр ҡарайҙар...

Ә күңелдә бер тамсы хафа юҡ:
әйтерһең дә, үҙе *Хәҙерәт*
һаҡлай уны фәҡирлек ғәренән,
хан ҡыҙылай һөйөп, ҡәҙерләп...

## 2

Бер яҙғы таң уны һыуалғыста
тоташтырҙы бәхете менән:
Төштә түгел, өндә егете
килеп етте ҡыҙҙың эҙенән...

Яҙмыш үҙе беркетте икәүһен
яр ситенә: Ул ат һуғарырға
төштө бер мәл Сәлимә менән...
(Иркен Һаҡмар буйҙарына һуҡмаҡ
һис кемгә лә бит өҙөлмәгән!)

Ғәжәп матур әкиәт ине ул таң,
йәмле Һаҡмар аға ине тын,
һары "көсөк"ләгән күк талдарҙан
ысыҡ тамсыланы бал һыман.
Наҙлы йыуып шыма һыу биткәйен,
Күтәрелә ине аҡ томан
йылым-ҡаранынан йылғаның.
Әллә ҡайҙан ябырылған бәхет
әйләндерҙе башын уларҙың...

Янар ҡараштары менән генә
аңлаштылар икәү үҙ-ара —
ҡайнар күкрәктәге хис дауылын
ябай һүҙләп кем әйтә ала?!.

Изге тойғоларға тымыҡ һыуҙы
шаһит итеп оҙаҡ торҙолар,
ваҡыт туҡталғандай, офоҡ сите
алланыуын һиҙмәне улар...

Алды Харис тулы күнәктәрҙе —
аҡрын атлап ярҙан менделәр.
“Бәхет мәлен оҙағыраҡ ит!” — тип,
Тәңреһенән өнһөҙ үтенделәр...

Йөрәктәре типте ҡабаланып,
аяҡтары ашыҡмаһа ла.
...Билән тауҙың түбәһендә шаңдаҡ
алһыулана төштө тағы ла...

Саф, һалҡын ел йомшаҡ һыйпап үтте
үләндәрҙең ебәк сәстәрен,
аръяҡ туғайҙа бер моңло кәкүк
һананы кемдеңдер ғүмерен...

Һәм арғымаҡ — оҙон араларҙы
ҡыҫҡа итмеш егет йән дуҫы,
аңлағандай хәлен хужаһының,
йомшаҡ ҡына баҫып тын барҙы...

Тапты шулай ҡыҙҙы бәхет мәле
тормош ҡараңғыһы эсенән,
Көндө тойоп тәүгә йылмайҙы ул
май сәскәле сихри хис менән.

Бәғеркәйен киҫкән ҡара нужа
йыуылғандай булды ямғырға,
яҙ Ҡояшы менән балҡып тыуҙы
алдарында ялан һәм ҡырҙар,
сихырланы сихри моң-йырҙар...

Талға ҡунған һары һандуғастар
уға ғына тик һайранылар,
серҙәштәре яҡтырған йөҙөнә
ғәжәпләнеп һаҡ ҡаранылар...

Һәм мөхәббәт ялҡынына яттар
ҡул һалмаҫ, тип йән арбанылар...

Таң нурҙарын һалып иңдәренә,
һыуалғыҫҡа килде иркәһе,
тәүлек буйы тулышҡан хистәргә
ирек бирҙе улар шул мәлде.

Ярҙарынан урғылған ташҡындай
аҡты, ярһып, һөйөү һүҙҙәре,
йөрәктәре берегеп типкәндә
тоташтылар ал ирендәре...

Харис ҡулы тулҡынлы сәстәрен,
иркәләтеп, ҡыҙҙың һыйпаны.
Өмөт сағылтҡан уйсан күҙҙәрен
ҡомһоҙ үбеү менән ҡапланы...
Һаҡмар һыуы, аҡ тирәктәр генә
торҙо һынап ул наҙлауҙарҙы...

## 3

Ә был иртә беҙҙең Сәлимәгә
шат күрешеү өмөт иттертмәй...
Башын эйеп, йөрөй ул төшөнкө,
өмөтө өҙөлгән кешеләй:

элек алһыу йөҙө — етендәй аҡ,
эҫе йәш томалай күҙҙәрен,
“фекерҙәрем һүҙ булып донъяға
сыҡмаһын” тип, ҡыҫҡан тештәрен...

Ғимыран бай кисә “йотто” уны
ас бүреләй, убып күҙҙәре...
(“Һылыуһың да инде, һәй, гөлгенәм!
Йәш бисәм булырһың һингенәм!”).
Хихылданы... Ҡулдарын уйнатып,
ыумаҡ булды тиртеү күкрәген,
ялсылыҡҡа ҡыҙҙың хәләл тәнен,
аҡ намыҫын һатып алғандай,
яңы табыш артып елтерәне...

Ғәрлегенән ҡуҙ һымаҡ ҡыҙарып,
шомло уйҙар ҡыҙый уйланы.
Тар һикегә ауып аласыҡта

һулығып-һулығып оҙаҡ иланы
яңғыҙ ҡалып... Йыуатыу хаҡына
һис бер бәндә яҡын килмәне, —
бөтә донъя, бармаҡ төртөп уға,
көлә төҫлө ине был мәлде...

Һәм әйтә ҡыҙ бына һөйгәненә
үҙенең һәм уның хәсрәтен:
баш өҫтөндә һөмһөҙ ҡара болот
ҡуйырыуын.. Ғишыҡ-ғишрәтен
көл итергә афәт яҫҡыныуын,
ағыу бөркөп ғәйбәт йөрөүен,
ә төндәрен ауыр ҡара төштәр
баҫлыҡтырып, йәне өшөүен...

“Яусы килә, тиҙәр, Ғимырандан,
әйт, бәғерем, ни хәл итәйем?..
Аҫылынып үлеү артығыраҡ
ҡарттың ҡуйынынан! Башҡайым
ауырыуға һабышты күп уйлап,
тик һис фекер төйнәй алмайым...
Гүр ҡуйыны көтә микән әллә
йәшлегемде?!. Шулай аңлайым”...

Харис маңлайына был һыҡтауҙан
тәрән бураҙналар буйланы,
тимерләнеп утлы ирендәре
ҡыҫылдылар... Быҫҡып күҙҙәрҙә
ҡурҡыныслы осҡон уйнаны;
йоҙроҡ йомарланы егет, һуғып
ҡая емерергә иткәндәй,
көллө донъя шуны көткәндәй,
боғаҙынан сыҡты тәүге ҡат
“Мәңге булмаҫ улай!” — тигән ант...

“Сәлимәкәй, нығын, йый сабырлыҡ —
күҙҙәреңде илап бөтөрмә!
Ун ҡат үлһәм дә, мин юл ҡуймамын
мәсхәрәгә! Һинең хаҡыңа
мең тамуҡты әҙер үтергә!
Яуыз йәндең ҡулы киҫелер,
йәки йәнем фиҙа ителер!”

***4***

Ғимырандың малы, аҡсаһы күп,
“хужаһы” ул Сәнкем ауылының...
Ер ҡалтырай уның аҙымынан,
гөлдәр көйә уның асыуынан,

ул “аҡ” тиһә — бүтәндәр “аҡ” тиҙәр,
ул “күк” тиһә — бүтәндәр “күк” тиҙәр,
“земский түрә” уның ҡулын ҡыҫа,
ғүмер теләп мулла доға ҡыла.

Бөтәһе бар байҙың, тик маңлайын
бураҙналай яман фекерҙәр.
Шатланмай ул, әүәлгеләй ҡарап,
шығырым тулы келәттәренә,
йорттоң һыйлы мөлкәттәренә;
малдарының ишле ырыҫы ла
күңелкәйен уның йыуатмай,
ҡапҡан ашы үтмәй тамағынан,
ҡара көйөп гелән йөрөй бай...

Йоҡо бирмәй уға, йәшеренеп
килгән ҡартлыҡ, фани донъяның
ләззәтенә кинәнеп ҡалғыһы
килә... Ләкин ике бисәһенең
икеһе тиң үтә туҙғандар,
Ғимыранға байлыҡ йыя-йыя,
таҡта һымаҡ ҡатып ҡалғандар...

Сәлимәгә төштө күҙе байҙың:
“Ах, был һылыу ниндәй пак, наҙлы!”
Таңғы ысыҡ һымаҡ саф баланы
упмаҡ булып бай ҡомһоҙланды
(көтмәгәндә боҙло ямғыр шулай
һуға иркә, шат ужымдарҙы...)

Тәңрегә ул иртәнге намаҙын
уҡыны, һай, шул көн бирелеп!
Йортһоҙ эткә аш сығарып һалды,
аруахтарҙың рухына, тиеп.

Донъяға ҡул һелтәгән изгеләй
ипле баҫып муллаға килде
намаҙ бөткәс. Тәрән тойғоларын
бәйнә-бәйнә ул һөйләп бирҙе.

Гәпләштеләр яйлап дин хаҡында,

изгеләрҙе хәтерләнеләр,
хәйерселәй һуҙып ҡулдарын,
күктән именлек теләнеләр.

Тулы тәпән май һәм бер батман
бал эләккәс хәйергә, мулла
аҡ доғалар уҡып фатиха
бирҙе Ғимыранға йәш бисә
алып өсөнсөгә йәшнәргә,
кәйеф-сафа һөрөп йәшәргә...

Һәм бай сығып киткәс тә ул оҙаҡ
абыстайға маҡтап ултырҙы
уны... “Уңыш бир йәш кейәүгә!” — тип
изге теләккәйен теләне.
Бына шулай хөкөм ителде
Сәлимәнең ғүмер күләме...

Ошо көндән Харис күрмәне
йәнкиҫәген Һаҡмар буйында,
иртә һайын изге сулала
атын һуғарырға төшһә лә...
Елдәр өҙгән һары япраҡтай
китте осоп егет бәхете,
өмөт тойған йәш күңеленә
һағыш юшҡындары йәбеште...

Уйҙар, уйҙар осһоҙ-ҡырыйһыҙ
һағаланы уны һәр мәлде,
хафаларын тәрән быуаға
батырып та ҡасаһы килде...
Ун туғыҙ йәш ләкин тулғанда
ҡасып ҡына буламы инде...

**5**

Ә ауылда, күсеп өйҙән-өйгә,
шомло хәбәр йөрөй: «Ғимыран
Сәлимәгә яусы ебәргән”, —
тел ҡағалар...
“Йәнтимер балаһын
тота икән бикләп өйөндә
туйға саҡлым”, — тиҙәр... Хоҙай, ҡасан
бөтөр икән золом был ерҙә!

Кисәләрен, серле шәүләләй,
һағаланы егет, йәшертен,
Йәнтимерҙең ҡапҡа төбөндә
һөйгәненең сығыу мөҙҙәтен.

Тик тынғыһыҙ йөрәге унын
һуҡты бушҡа, булып сатнарҙай:
асылманы ҡапҡа... сыҡманы...
Ҡыҙырынып төнгө урамда,
ошондай уй егет уйланы:

“Көндәр, айҙар, йылдар үтә бара,
тыуалар һәм үләләр кешеләр,
атайҙарҙың “аһ!” орған юлына
балалары килеп төшәләр,
шул уҡ йыр һәм ыңғырашыу менән
шул “нужа һурпаһы”н эсәләр...

Тулыр микән сабырлыҡ туҫтағы
был халыҡтың?!. Күпме түҙергә
мөмкин инде! Ҡанды һурыусы
һөлөктәрҙе ваҡыт иҙергә!
Үс ҡылысын башлап күтәрерлек
ир яралыр микән был ерҙә?!.

Үткән быуаттарҙа ирек илткән
бабаларҙың сәмен йәшәртеп,
елер ҡасан ҡыҙыу юрғалар,
далаларға йәшлек йәшнәтеп?..

Етһен, етһен хисаплашыу көнө,
атһын, атһын түҙмәй көткән таң,
иҫһен, иҫһен таҙартыу елдәре,
үҫһен, үҫһен туғанлыҡ гөлдәре —
шулар өсөн көрәш усағында
йәнем-тәнемде мин йәлләмәм!”

### *6*

Сәнкем ауылы, күҙҙәрен тырнап,
таңғы йоҡоһонан уяна.
Мөрйәләрҙән төтөн тирәктәре
күккә терәлеп борғолана.

Аҡ ысыҡҡа сәңгеп аяҡтары,

көтөү ҡыуа әрһеҙ малайҙар;
ҡупшы көйәнтәләр иңгә һалып,
йәш килендәр һыуға баралар
(сыңғырлаша тәңкә-талирҙар) --
Һаҡмарҡайҙың сихәтле һыуҡайын
күнәктәргә һирпеп алырға...

Яҙмыш иртән нимә килтерәһен
Ай-Ҡояшҡа ҡарап әйтеүсе
сал олатай, ҡапҡа төбөнән,
Көндөң ҡалҡыныуын күҙәтте.

Ул күҙҙәре менән тотоп алды
Билән тауҙа сапҡан атлыны —
серле тойғоларын сәхрәлә
сыуалтырға сыҡҡан юлсыны:

күкрәгендә дөрләгән ялҡынды
елгә һуғып баҫмаҡ булғандай,
теҙгендәрен бушатып елә ул
Билән тауҙың таҙ түбәһенән,
саҡма сағып, осҡон-ут сәсрәй
саҡма тояҡтарҙың аҫтынан.

Күтәрелеп килгән ҡыҙыл Ҡояш
алһыу ҡанға бояп юлсыны,
саҡрымдарға һуҙып күләгәһен,
ялан яҫыһына яҡкыра,
тымыҡ һыулы көмөш күл бите --
ҡара шаршау һымаҡ томора:
атлы ҡалҡытһа ҡамсылы ҡулын —
күләгә-ҡул ҡалҡа шул тошта,
сөкөрәйеп батҡан өйҙәрҙе
ынтылғандай һелтәп ташларға...

Ел-дауылдай елә ир текәнән
һәм һикертә тәрән соҡорҙан.
Арғымағы сапҡыр һәм дыуамал,
әкиәттәге батыр атылай,
осҡон көлтәләре туҙҙырып
дағалары ташҡа саҡылдай,
тибендиһә — ерҙе тетрәтә,
бышҡырҙиһә — күкте күкрәтә...

Кем ул, кем ул — бүре һуҡмағынан,
ҡурҡмайынса, тура юл һала,

дуҫлашҡандай таштар менән, елеп,
тарлауыҡтар аша ырғыла,
ҡарурмандың ҡырағай тауышын
матур көйҙәй тыңлап ҡарғыла?..

Кем ул, кем ул — таң тишегенән
Билән тауға менгән йөрәкле,
мәжбүр иткән уны ошоға
башһыҙлыҡмы, әллә теләкме

ҡыйыулығы менән бар ғаләмде
шаҡ-ҡатырыр өсөн сәмләнгән?
Йә булмаһа, ерәнеп, мыҫҡыллап
көлөүеме керле замандан?..

Харис ине шашҡын был һыбайлы:
башын быраулаған уйҙарға
түҙә алмай, юрғаһын эйәрләп
зәңгәр таңдан юлға сыҡты ул,
таш һәм ағастарҙы серҙәш итеп
дөрләү тойғоларын саҡты ул...

Оҙаҡ, оҙаҡ талпынды шашынып,
ҡайҙа һуғылырға белмәҫтән.
Меҫкен атын күбеккә батырып
баш ҡараған яҡҡа саптырҙы,
ҡасҡан бәхетен юллағандай,
серле һуҡмаҡтарҙан ҡыҙырҙы,
килмәне тик көткән тыныслыҡ —
ярлы башын хафа ташлармы?..

Арғымағын ебәреп утларға,
йомшаҡ үләнгә ул һуҙылды
һәм сәскәнән-сәскәгә ҡанығып
осҡан бал ҡорттарын тыңланы.
Яуҙа ауып ҡалған һуғышсылай
ятты оҙаҡ, һис ҡыймылдамай.
Аты тыныс утланы янында,
һимеҙ кәрешкәне ялмалап.

Әле күтәрелеп, әле ҡайтҡан
диңгеҙ кимәлеләй, ярһыуҙар,
бер-беренә оҡшамаған хистәр
иҙҙе егетте... Төшөнкөлөк
томаланы рухын, эркелеп,
эйәренән ырғып ҡалмайса;

ҡатты йәне, тормош соҡоронан
сығыу юлын таба алмайса...

*"Һинһеҙ йәшәп килгән фани донъя*
*йәшәй бирер һинһеҙ ары ла!*
*Бөтәһенә төкөр һәм башыңды*
*баш китерлек эшкә бағышла!*

*Юлдарыңды дошман ҡаны менән*
*һуғар! Маһайған һарайҙарға*
*ут һал!.. Исемең, күк күкрәүеләй,*
*сүгәләтһен залим бәндәне!*
*Золом ҡылып күнгән йәндәрҙе!*

*Аяҡ баҫылмаған төбәктәрен*
*Уралыңдың ыҫтан-төйәк ит.*
*Ҡорбан эҙләп ауға ояһынан*
*осҡан ғорур тау бөркөтөләй,*
*юлдарға һәм ауылдарға ырғыл,*
*ҡан имеүсе һөлөктәрҙе һыт!*

*Бошонма һис ғәйбәттәргә — айыу*
*ҡолаҡ һалмай себен сеңләүгә!*
*Иҫке зиратты тигеҙләп баҡса*
*ултыртҡанда һиңә һәр бәндә*
*екерһә лә, ағастар ҡалҡынып*
*гөл-баҡсаға шул ер әйләнгәс,*
*шул уҡ йәндәр шул уҡ таңғалдән*
*хозурланып атлап йөрөрҙәр*
*һәм ҙур рәхмәт һиңә әйтерҙәр...*

*Ә йәшлегең?!. Батша һалдаттары*
*эттәй итеп атып үлтерһә?*
*Эләгеп йә ажар жандармға,*
*төрмәләрҙә башың сереһә?*

*Йәшәп өлгөрмәҫтән харап ҡылыу*
*ғүмереңде — яҡшы булмаҫ бит!*
*Һин үлерһең, дошмандарың көлөр:*
*"Йәшәй белмәне был һармаҡ!" — тип...*

*Әйтһендәрсе! Башҡаҙығы ҡылып*
*ҡаҡһындарсы былдай һүҙҙәрҙе!*
*Әйләнәңдә ҡайнашҡан ағыулы*
*йыландарҙың аҙғын аҙауы*

*йәнең йәрәхәтләгәндә, көндәр,*
*айҙар буйы, һелкенмәйенсә,*
*йәнһеҙ тумар булып ятыуы —*
*оло хурлыҡ үҙе түгелме?!.”*

Елгә ҡыштырҙап, егеттең битен
ҡытыҡланы наҙлы тау гөлө,
хушбуй бөркөп көлдө наҙ теле --
мәжбүр итте, өҙөп уй сылбырын,
гүзәллеге менән һоҡланырға,
хуш еҫкәйен йотлоғоп һуларға...

Гөлдөң биле һындырылған ине
төньяҡ еленең зәһәренән,
яңы тамырҙар ебәреп ләкин
һауыҡҡан ул ҡаты сиренән.

Ерҙең тәмле һутына кинәнеп,
Ҡояш нурҙарына йылмайып
ултыра гөл, уҙғынсыларға
мөлдөр-мөһәбәт тажын һуҙып...

Үпте егет уны бәбәгенән,
һылыу Сәлимәһен үпкәндәй,
иркәләп тә сикһеҙ яратып;
ҡанатланды егет йөрәге
яңы ниәт, яңы теләккә,
көс тойҙо ул ике беләктә
зар-быҒауын өҙә һуҒырлыҡ!

Һәм атланды арғымағына.
Киң йылмайыу ятты тағы ла
ирендәренә, биҙәп йөҙөн.
Күккә осҡандай тойҙо үҙен.

“Буйһонмаҫҡа! Рух һындыртмаҫҡа!
Көрәшергә, еңеп сығырға!” —
тип һүҙ бирҙе егет үҙенә,
тура ҡарап яҙмыш күҙенә...

..Һуҡмаҡ буйлап төшә тауҙан һыбай,
баҫып йылтыр өҙәңгеләргә.
Бит остары баҙыҡ-ҡалҡыу уның,
әйтерһең дә, таштан юнылған.
Күҙҙәрендә йәшерен ут быҫҡый —

хәтәр фекер унда йомолған...
.......................................................

## Икенсе бүлек

### *1*

Ниндәй халыҡ елә юлдарҙан,
толпарҙарын тиргә батырып?
Хәбәрселәр улар сабалар,
яңы хәбәр алып баралар
күрше ауылдарға осортоп:

— Тиҙҙән, күрелмәгән ҙур байрам
Сәнкем ауылында буласаҡ,
табындарҙа ҡымыҙ, асы бал
йылға һымаҡ ташып ағасаҡ,
йыр һәм ҡурай тауыштарынан
ауыл күге гөрләп торасаҡ,
егеттәрҙең ҡотороп бейеүен
иҙәндәр күтәрмәй һынасаҡ —
ишетегеҙ, кешеләр, тыңлағыҙ,
белмәнек, тип әйтер булмағыҙ!

— Көрәшселәр, салт йүгеректәр,
уттай янғыр атсабыусылар,
ярыштарға әҙерләнегеҙ —
беренселектәрҙе дауларға,
аҫыл бирнәләрҙе яуларға!

— Гармунсылар, бармаҡ әһелен
арымаҫка күнектерегеҙ!
Тальянкағыҙ йәштәр йәненә
ут һәм ҡорос һипһен көйҙөрөп,
түңәрәккә тартып һәр кемде --
тыпырҙатһын сап-сал ҡәүемде!

— Ҡурайсылар, Һаҡмар буйынан
ҡырҡып алығыҙ төҙ ҡурайҙың
иң һылыуын! Ҡабып тартҡанда
таш иреһен уның шаңынан,
донъя моңон йыйған йырсылай
илаһын вә көлһөн был ҡурай!

...Асылалар ишек, тәҙрәләр,
ҡапҡаларҙан сығып йүгерәләр —
йәше, ҡарты, булып йоторҙай,
һөрәнсене һәрмәй һәм тыңлай:

— Батша балаһының тыуыуын
тамғалаған байрам түгел был,
иген уңышына арналып
самаланған байрам түгел был —
Ғимыран бай ала йәш бала
бисәлеккә — шуға туй була!..

Халыҡ мыжғый,
халыҡ ҡайнаша:
“Ха-ха-ха!
Ха-ха-ха!..
Булыр бына бер ҙур тамаша!”

Тау һәм урмандарға тарала:
“Урыҫ байыһа — сиркәү һала,
башҡорт байыһа — бисә ала,
ха-ха-ха!
Ха-ха-ха!..
Ғимыран бай йәш бисә ала!”

Ҡабаланып байҙар тоталар
һимеҙ һуғым көтөүҙәренән;
май еҫенә күмеп һауаны,
ялсылары ҡаҙы тултыра;
йүкә мискәләрҙә сәмле бал
әсетәләр күбекләндереп,
баллы сәк-сәктәр бешерәләр,
ҡарбаҙҙарға май төшөрәләр.
Йомарт бүләк көтөп еңгәйҙәр
килен төшөр көндө һанайҙар...

Ярлы йорттар иһә бер килеш
дауам итә фәҡир тормошон,
йөкмәгәндәй хоҙай ҡарғышын:
әҙәмдәре, тороп көн һайын,
урман, баҫыуҙарға тарала,
ҡабым икмәк көҫәп үткәрә
көнөн ир ҙә, сабый бала ла...

Тамсы һайын, эсә ҙур тамсы
ер-әсәкәй әҙәм тиренән,

ыңғырау һәм уфтау — тынмаҫ “йыр”
булып йөрөй ярлы эҙенән.
Ялпы-йәнгә хеҙмәт һаман шул
михнәт-яфа булып һанала...
Берҙәй -- сал да, сабый бала ла...

## 2

## *Сәлимәнең атаһына ялбарыуы*

*“Атаҡйым, һәләк итмә мине,*
*йыртҡыс тырнағына ташлама!*
*Ғәзиз башҡайымды ашама!*
*Килтергәстен был донъяға, ҡабат*
*тартып алма йәшәү хоҡуғын!*
*Буйлатмасы залим мутлығын!*

*Көн нурҙарын күрергә рөхсәт ит,*
*гөл еҫтәрен һуларға рөхсәт ит, —*
*ниңә мине язалайһың, атай,*
*һинең менән мин дуҫ инек бит?!.*

*Дуҫ инек бит һинең менән, атай,*
*иҫеңдәме минең бала саҡ?*
*Йөк атындай арып ҡайта инең*
*эштән һәр көн, ләкин йөҙөңдән*
*китмәй ине йылмайыу. Эйелеп*
*минең кескәй яҫтығыма һин*
*һорай торған инең: “Үҫәһеңме,*
*ҡыҙым?” — тиеп; ә мин: “Үҫәм!” — тип*
*әйтә инем... Сыулап шаярырға*
*башлай инек унан икәүләп,*
*дала аңҡый кейемдәреңдән,*
*тупраҡ аңҡый ҙур ҡулдарыңдан...*

*Бишенсе йыл?! Баяр утарҙары*
*ялҡын теле һыҙа башлағас*
*йөҙөң нисек яҡтырып йөрөнө!*
*Һәм — еңелеү, өмөттәр өҙөлөү...*
*ҡараңғы төн һәм ишек шаҡыу...*
*Наган болғап, мыйыҡлы яһилдар*
*әйттертергә һинән итәләр*
*башлыҡтарҙың исемен... Булмағас,*
*аҡса тауы алға өйәләр,*

*ә һин, горур төкөрөп байлыҡҡа:*
*“Намыҫымды һатмайым иблескә,*
*әфәнде!” — тип яуап ҡатаһың.*
*Атай, атай, ниңә хәҙерен*
*туған ҡыҙыңды һин һатаһың?..*

*Иҫеңдәме, кисәләрен оҙон*
*әкиәттәр миңә һөйләүең?..*
*Йылғалай мул, тигеҙ аға ине*
*гәүһәр өндәр һинең ауыҙҙан;*
*тәпәш өйөбөҙ алтын һарайға*
*әүерелә ине хыялымда;*
*бәләләрҙән мине аралаусы*
*батырға һин әйләнә инең!*
*Һәм – еңеүсе Хаҡлыҡ яуында!*

*Әкиәттәрҙә һинең дейеүҙәрҙе*
*еңә ине һәр саҡ фәҡирҙәр,*
*күрмештәре уларҙың яҡты көн,*
*бәхет менән ослана ине —*
*ниңә ҡыҙың йәшлеген, атайым,*
*томаларға гүргә теләйһең?!.*
*Ниңә малдай һатаһың мине?!”*

Балаһының үкһеп илауҙары
өҙгәс йәнен, барҙы Йәнтимер
кәңәш итеп муллаға: “Нишләйем,
кире ҡағыу яҡшы булмаҫмы
байҙың нәфсеһен?” — тип һораны ул...
“Маңлайыңа яҙылған яҙмыштан
уҙмыш юҡ шул... — тине хәҙрәт. —
Аллаһы Тәғәлә бәйләп ҡуйғас
Ғимыранға ҡыҙың сәстәрен,
ҡарышыуы гөнаһ... Балға-майға
сумып йәшәр уның ҡарауы.
Теге донъяла ла йәннәткә
керер рухы изгеләр менән.
Ҡарышыуҙың арты ҡарыулы
*(бурыстарың башыңдан ашҡан бит*
*һинең,*
*башың булһа, шул хаҡта ла уйлап*
*ҡарар инең”...)*

**3**

Һәм Сәлимә бына ситлектәге
ҡошҡай һымаҡ бикле ултыра...
Эйәрсенһеҙ ишек алдына ла
сығармайҙар уны... Ҡалтырап
тапма тапҡан һымаҡ, көнөн көтә...
Туйҙы көҫәй бай шымсылары --
йәш башҡайын ашаусылары...

*"Нишләй икән Харис, белә микән*
*минең хәлде?.. Күреп әйтергә*
*бер ауыҙ һүҙ мөмкинлек бирмәйҙәр...*
*Тимер ситлектәге тутыйғоштай*
*тилмерәмен ҡарап урамға,*
*йылы һүҙкәй алып, йыуатырға*
*әхирәттәрем йә килмәйҙәр...*

*Моңдарым да үҙем... Йөрәгемдең*
*яныуына түҙеү бик ауыр —*
*серҙәремде кемгә һуң һөйләйем?!*
*Ишетмәй ел минең зарҡайымды,*
*һәм тоймай Ай минең янғанымды,*
*ҡотолоуҙан өҙөп өмөтөмдө,*
*Тәңренән тик әжәл теләйем..."*

Яңғыҙ үҙе интекте ул шулай
хәсрәттәрҙән йәнен талатып...
Күҙ йәштәре тамды тып та тып...
Минут һайын, минут үтә барҙы,
тик ҡайғыһы уның үтмәне,
яраланған йөрәге һулҡылдап
ҡанай торҙо... Тамсыланып тамған
йәштәренән күҙҙәре кипмәне...

Телһеҙ шаһит — кескәй турғай көн дә
ҡуна уның тар тәҙрәһенә.
Оҙаҡ, оҙаҡ текләп ултыра ҡош,
ҡымшаныуһыҙ, быяла үтә.
Ҡабаланып тышҡа саҡырғандай,
суҡышҡайы быяла сиртә...

Ҡоштоң өнһөҙ өндәшеүҙәренә
бәхетһеҙ ҡыҙ күптән күнекте.
Янар күҙ ҡарашын осраштырып
уның моңһоу ҡарауы менән,
тәүлек буйы йыйналған зарҙарын

йотлоғоп, йотлоғоп һөйләне:

*“Бәләкәсем, бирһәң ине миңә*
*еңел-елпе ҡанаттарыңды, —*
*тар зинданды ҡалдырып, йыраҡҡа,*
*киң сәхрәгә осор инем мин,*
*гөл-сәскәләр менән аҫыл ҡоштар*
*араһында көн итер инем...*

*Ҡайҙа яҙ һәм мәңге гөлдәр гөлтләй —*
*шунда гиҙеп йөрөр инем мин,*
*яфаларҙы онотор инем,*
*йөрәгемде йылытыр инем,*
*таңды ҡотлап иҫкән елдәр генә*
*ил хәбәрен һөйләр ине миңә...*

*Әллә, дуҫҡай, онота алмам микән*
*кисерелгән бәхет мәлдәрен?..*
*Һүнеп барған усаҡ тоҡанғандай*
*ҡараңғыла балҡып яңынан,*
*хәтирәләр күңелем ҡылдарын*
*сиртер микән, иңрәтер микән?..*

*Кешеләрҙе һағынып, ҡабаттан*
*был тормошҡа ҡайтмаммы икән,*
*сәхрәләрҙең йәнһеҙ буш иркен*
*нәфрәтләнеп атмаммы икән?..”*

Болоттарҙы шәфәҡ алһыуланы,
киске шау-шоу баҫты ауылды:
баҫыу улдарының бисәләре
һыйырҙарын өйгә әйҙәне
саң борҡотоп ҡайтҡан көтөүҙән...
Ҡауғаланды ҡапыл тын үҙән...

Имсәк теләп баҡырыштылар
бәйләп ҡуйылған йәш быҙауҙар,
кемдер ярҙы малайын, әсе
сыйнау менән урам ярһытып...

Бары тынды...
Алсаҡ йылмайып
Ай ҡалҡты тауҙар артынан.
Шәм алманы Сәлимә. Һалҡын Ай
нуры ғына төштө тәҙрәнән...

Бик һаҡ сиртте кемдер тәҙрәне:
“Ах ғәжәп ҡош, йәнә һинме был?
Ҡалдыр мине, ҡалдыр ғәмем менән!”
Ҡош түгел, ә әҙәм күләгәһе
ҡаҡ иҙәнгә һуҙылып ятты:
бала ҡулы, тал кеүек бөгөлөп,
ярыҡ үтә аҡ төргәк атты.

Алыҫлашты тәпәй тауыштары,
һалмағайып, баҡса артында.
Сәлимәнең ҡулы дерелдәне:
әйтерһең дә, йоҡа ҡағыҙ түгел,
тере ялҡын яна усында...

*“Яҙмыш! Алып килгән хәбәркәйең*
*шатлыҡҡамы, әллә ҡайғыға?!.”*

## *4*

## *Харистың хаты*

*“Иҫәнмеһең, күҙ нурым! Был*
*хатты яҙам*
*яныуына йөрәгемдең*
*сыҙамауҙан.*

*Дошман беҙҙе айырырға*
*мәкерләнә,*
*башҡайҙарҙы ашарға тип*
*әҙерләнә...*

*Өмөтөңдө өҙмә, ныҡ бул*
*тик һин, иркәм,*
*туйҙан алып ҡасасаҡмын*
*һине иртән!*

*Был эшкә тик дуҫ ҡыҙыңды*
*бағышландыр,*
*баҡсаға сыҡҡан тәҙрәңде*
*асыҡ ҡалдыр.*

*Мәжлес шауы менән халыҡ*
*болғанғанда,*
*бай: “Ирештем теләккә!” — тип*

*уйлағанда,*

*осортор беҙҙе ауылдан*
*сапҡыр аттар*
*һәм Мөхәббәт, юлдаш булып,*
*беҙҙе һаҡлар!*

*Бирешмә һәм ышанып көт*
*мине, иркәм,*
*таш яуһа ла килермен мин*
*һиңә иртән!”*

Һуңы микән ни был меҫкен ҡыҙҙың
Ғазаптарҙан иҙелеүенең?..
Ишек шығырҙап асылған һайын,
ҡатилының көтөп инеүен,
йомғаҡ кеүек бөрөшә ине ул,
төн эсендә нисә ҡабат тертләп
уяна ла һаташыуҙарҙан,
һалҡын тиргә батып, таң атҡанын
күҙ йоммайса көтә торғайны,
текә ярҙан ташланып Һаҡмарға,
үлә ине фекерҙәрендә...
Һуңғы юлға ниәт ҡорғайны...
Шулай уҡ тиҙ аралар микән ни
яҙмыш уны ауыр бөтөүҙән?..
Арыны йән өҙөлөп көтөүҙән...

**5**

Сәлимәне кейәү ҡаршыһына
кейендерә әхирәттәре
һәм сеңләйҙәр көсләп бирелгән
бәхетһеҙ ҡыҙ бала хаҡында,
бөгөн уның йәшлегенең һуңғы
кисе янасағын һыктайҙар...
Ә ялсылар ишек һаҡлайҙар...

Сәлимәкәй тик һаңғырау хәҙер
ауаздарға... Уны зиһене
тарта ситкә. Сирендәргә сыҡкан
тәҙрәнән алмайса күҙҙәрен,
ҡараңғынан көтә һаҡ һыҙғырыу,
Харисының көтә килеүен.
Йән дуҫкайы Хәйерниса ғына

белә серҙе. Хәленән килгәнсе
тынысландыра ул Сәлимәне;
аңлаусан йылмайып: “Килер тиҙҙән,
шикләнмә!” — тип баға күҙенә...

Балаһының ҡайғыһынан янып
бөкөрәйгән меҫкен әсәһе
күҙ йәшенә сылатып яулығын
инеп-инеп сыға бүлмәгә.

Һалҡын ирендәре менән үбә
балаһының эҫе маңлайын
һәм мөйөшкә ҡарап: “Сабыр иткән
Хоҙай, һин дә сабыр ит”, — тиә...

Кейәү буләге, тип кейҙертелгән
алтын беләҙекте һындырып
ырғытҡыһы килә Сәлимәнең
йөҙҙәренә... “Юҡ! Һис сабыр итмәм,
аждаһаны алығыҙ үҙегеҙ,
ә мин иһә бәгеремде көтәм!” —
тип әйткеһе килә асыу менән.
Тешләп ләкин ирендәрен түҙә,
ҡыҫып ләкин йөрәккәйен көтә...

Күрше өйҙә иһә туй -- ҡоҙалар
ҡымыҙ һәм бал эсеп дыу-кубалар,
ҡурайҡайҙан гөжләп моң ағыла.
Төн ҡуйыра... Ағастар ябына
сер япмаһын... Ике йөрәк көтә
ҡауышыуҙы, дерелдәп, шул төндә...

**6**

## Никах мәжлесе

Ҡатырғанан — ҡатырғаһынаса
белә хәҙрәт изге Ҡөрьәнде...
Ен-бәрейҙең ҡара мәкеренән
доғалары һаҡлай һәр йәнде.

Тыуыр булһа бала мәхәлләлә,
хаҡ юлына уны баҫтыра,
ә донъянан китә икән бәндә —

йыназалап гүргә яҡкыра:
һәр хәлдә лә хәйер, тояҡланып,
таба һуҡмаҡ уның йортона...

Нисек төйнәй хаҡ никах төйөнөн!
Уның никахы ҡауыштырған
хәләл ефеттәр зыҡ-ҡубышҡанда,
һаҡалын йә сәсен йолҡошҡанда,
һыу һибеп тә айыра алмаҫһың!..
Шуға нисек хайран ҡалмаҫһың!..

“Тигеҙ” ғүмер шулай кисерерҙәр,
ҡаш аҫтынан ҡырын ҡарашып...
Сабырлығын юйған меҫкен бисә:
“Айырылам!” — тип баш күтәрһә,
яҙған ғаризаһы “онотолоп”
йылдар буйы ята мөфтиҙә,
хоҙай “йәлләп” ваҡытһыҙ бөгөлгән
ҡолон ала “теге донъя»ға —
төйнәй шулай төйөндө аға!..

Хәҙрәт бына Йәнтимер өйөндә
никах мәжлесендә ултыра...
Тиҫбетартып сәғәт тултыра.
Ебәк салманың аҡ кәбеҫтәһе
“ғалим” башын бөхтә сорнаған,
мөләйемлек, изгелек, рәхимлек
шәүләләре йөҙөн нурлаған...

Әйтерһең дә, йоморҭка баҫалар —
аяҡ бөкләп күбек мендәрҙә
ултыралар ҡунаҡтар, бөртөкләп
хәҙрәт ағай һипкән “энйе”не.

“Ҡайһындай шәп беҙҙең хәҙрәт!” — тиеп
Ғәжәпләнә һәр кем; үҙенә
күсерергә уның ҡиәфәтен,
хыялланып баға күҙенә...

Һимеҙ һурпа торғанда боҫланып,
ҡоҙаларҙың тарҡау зиһене —
бесәй һымаҡ морон йыйырып
еҫкәй улар майлы һауаны.

Ҡорһаҡтары менән тыңлайҙар
никах вәғәзен мут мулланың,

ласҡау көйгә һалынған аңланмаҫ
ғәрәп доғаһы әйләндерә
башҡайҙарын -- әфиүн төтөнө
мейеләргә, бирәйни, өрә...

Хәҙрәт иһә һала, һала ауҙы,
ысҡынмаҫлыҡ ҡылып нык һала,
әйтерһең дә, йыйын ен-бәрейҙәр
тора янап өйгә тупһала...

Был йәтмәнең ҡурҡыныс ептәре
ғөрөф киндеренән иләнгән,
был йәтмәнең гер-батырмыстары
наҙанлығыбыҙҙан төйнәлгән,
был йәтмәне быуаттар буйына
хәйер ҡарғалары көйләгән...

Сәлимәнән һораманылар,
ризаһыңмы барырға, тиеп:
алмаштырҙы уны Низамый,
сәтин шаршау артына инеп...

Асы балдан тап тирмән ташы
һымаҡ тығырҙаһа ла башы,
"баш төҙәтеү" мәле етерен —
бер туҫтаҡ бал эсеп китерен
өмөт итеп, шәйләп көттө ул
шомло өйҙә йола үтеүен:

***Хәҙрәт (майлы тауыш менән):***

Алла ҡоло Ғимыран ризамы
Алла ҡоло Сәлимәгә хәләл
ефет һәм дә хужа булырға?

***Ғимыран (һаҡалын һыпырып):***

Риза.

***Хәҙрәт (ҡаштарын емереп, шаршау яғына):***

Алла ҡоло Сәлимә ризамы
Алла ҡоло Ғимыранға хәләл
ефет һәм өнһөҙ ҡол булырға?

***Низамый (шаршау артынан бар көсөнә):***

Риза! Риза! Бик риза!

***Хәҙрәт:***

Йә, бәйләһен сәстәрен йәштәрҙең,
оҙон ҡылһын ғүмерен йәрҙәрҙең,
татыу тормош, тигеҙ ҡартлыҡ бирһен
Аллаһы Тәғәлә. Амин.

***Ҡоҙалар (бер ауаздан):***

Амин!

***Низамый ("махмур" башын сығарып):***

Амин! Амин! Һә-ә-әй, башым!..
Ҡарасәле, хәҙрәт, бер туҫтаҡ бал
ҡойоп бирсе Аллаң ҡолона!
Уй башым! Уй йәнем!.. Бал ғына...

## *7*

## Теләк

Төнкәй, ҡараңғыраҡ бул,
йәшер ҡайыҡ-Айыңды —
егет тормош соҡорон
ашатларға йыйынды!

Никах туйы тулаған
Йәнтимерҙең йортона
килде, ҡуйып аттарын
арткапканың артына...

Нимә икән һағалай
киләсәгендә уны?..
Уңһын, тиеп теләйек
тоткан рәхимле юлы!

Дошманы танымаһын
йәрен алып ҡасканда,
аттары арымаһын
юлдар буйлап сапканда.

Ике йөрәк ҡауышып,
тигеҙ донъя көтһөндәр!
Бер-береһен бағышып,
етәкләшеп үтһендәр!

Ҡарамаға бәйләп эйәрле
ике атты, Харис, һаҡтабан,
әрем араһынан йүнәлде
Йәнтимерҙең өйөнә табан.

Унлы шәм йәлләмәй һары нур
ҡоя ине ишек алдына,
табын геүләй һәм иҫеректәр
үкерешә ине табында,
шәүләләре йыш-йыш салынып
китә ине ҡорған тәҙрәлә,
бейеүҙәрҙән һығыла һәм уфтай,
ҡалтырана ине ағас өй...

## *Табын йыры*

*...Һай, һай, һай,*
*йәшәһен Ғимыранбай!*
*Ҡама бүркең аҫыл икән,*
*кемдән тектерҙең, ағай?!*

*Ерҙе ябып йөрөгән*
*мал кемдеке, тиһәгеҙ,*
*күкте ярып баҡырған*
*мал кемдеке, тиһәгеҙ,*

*әйтеп һеҙгә бирәйем:*
*Ғимыранбайҙың малы ул,*
*Ғимыранбайҙың малы ул,*
*илгә ашҡан даны ул!*

*Һай, һай, һай,*
*йәшәһен Ғимыранбай!*
*Ҡама бүркең аҫыл икән,*
*кемдән тектерҙең, ағай?!*

*Ғимыранбай кейгән тун*

*тас ҡаманан торалыр,*
*Ғимыранбай әйткән һүҙ*
*ил ҡолағын боралыр,*

*Ғимыранбай аш һалһа —*
*Алтмыш ҡунаҡ туялыр,*
*Ғимыранбай таш алһа —*
*ер ҡалтырап ҡуялыр.*

*Һай, һай, һай,*
*йәшәһен Ғимыранбай!*
*Ҡама бүркең аҫыл икән,*
*кемдән тектерҙең, ағай?!*

*Ғимыранбайҙың келәте*
*лыҡа-тулы игендән,*
*ә йортоноң түбәһе —*
*дыңғырҙауыҡ тимерҙән.*

*Гөбөләре гөбөрҙәй*
*ҡыҙылдауыҡ ҡымыҙға,*
*мискәләре мөлдөрәй*
*семелдәүек сәм-балға.*

*Һай, һай, һай,*
*йәшәһен Ғимыранбай!*
*Ҡама бүркең аҫыл икән,*
*кемдән тектерҙең, ағай?!*

*Тәбрик итәбеҙ һине,*
*сын күңелдән, бай ағай,*
*оҙон ғүмер теләйбеҙ*
*шат йәшәргә, бай ағай.*

*Себен кеүек үрсеһен*
*мал-тыуарың, ҡош-ҡортоң,*
*бәлә-ҡаза күрмәһен*
*аш-һыуға йомарт йортоң.*

*Йәш кәләштең ҡуйынында*
*ләззәт татып һөр ғүмер.*
*Ожмахына кергәндә*
*ҡайғың булһын көл-күмер.*

*Тупылдатып уландар*

*үҫтерегеҙ бергәләп.*
*Тағы ла бер йәш кәләш*
*булһын һинең эргәлә!*

*Һай, һай, һай,*
*йәшәһен Ғимыранбай!*
*Ҡама бүркең аҫыл икән,*
*Үҙең дә аҫыл, ағай!*

Тешен ҡыҫып, ҡойма артынан,
нәфрәтләнеп Харис күҙәтте
был һүрәтте... “Алып ҙур һуйыл,
селпәрәмә килтерһәң ине
табындарын!.. Өҙөп йырҙарын,
ҡоҙаларҙың һимеҙ битенә:
“Ашағыҙ!” — тип төкөрһәң ине!..” —
тип ярһыны, янып эсенән,
ләкин ҡымтыны ирендәрен,
итте сабыр, ҡыҫып тештәрен...

Янҡапҡаны асып һаҡ керҙе
баҡсаға... Ҡыймылдап сирендәр
ҡул бирҙеләр, яңаҡтарынан
ҡалды үбеп япраҡ-ирендәр.

Ситкә ҡаушарып суҡ ботаҡтарҙы,
тын тәҙрәгә егет күҙ һирпте.
Йоҡонан тертләп уянғандай,
йөрәккәйе тынысһыҙ типте,
ҡом сүлеләй, тамағы кипте,
күҙ алдары ҡараңғыланды:
танһыҡ тәҙрә — *Уның* тәҙрәһе
асыҡ ине! *Ул* көтә ине!..

Дан Аллаға! — боҫоп һыҙғырыуын
ишеттеләр!.. Бүлмә төбөнән
яҡынлашты йәһәт Сәлимә һәм
серле төнгә ҡарап йылмайҙы...

“Күҙ нурҡайым, һағынысым минең,
килде бына өҙөлөп көткән мәл!” —
Йәһәт, йәһәт талпынды йәш йөрәк,
ҡолас йәйеп... Изге был әмәл!

Бына-бына ҡулдары уларҙың
беркей, ҡосоп, йәш йөрәктәрен,

бына-бына эҫе ирендәре
ялҡынлата хис-теләктәрен!

Көслө ҡулдарына алып ҡыҙҙы
тәҙрәнән ул тышҡа төшөрөр,
ярһыу аттарға менеп сабыуын
Төн күрер ҙә берәҙәк ел күрер!..

Хәҙер... Ах, ҡараңғы ҡыуаҡтарҙан
сыҡты боҫоп ике күләгә,
Аллаҡайым, ҡара ҡыуаҡтарҙан
сыҡты боҫоп ике күләгә!..

Күҫәк тотҡан ҡулдарын ашығып
күтәрҙеләр улар юғары,
Аллаҡайым, ҡулдарын ашығып
күтәрҙеләр улар юғары...

"Эһ!" итте лә Харис ауҙы ергә,
һуҙған ҡулын һуҙа алмайса,
ҡанға мансып ҡусҡыл үләндәрҙе,
әйтер һүҙен әйтә алмайса...

...Ә тәҙрәнән, бәрәс йөрәгенә
бысаҡ ҡаҙалғандай, йән биргес
ҡысҡырыуы сыҡты Сәлимәнең —
аккордланды шулай серле кис...

...Ниңә, ниңә, Алаһы Тәғәлә,
тормош, һөйөү ергә тыуҙырҙың?
Ниңә, ниңә, Аллаһы Тәғәлә,
ҡайғы, үлеү ергә тыуҙырҙың?

Йәнһеҙ матдәләреңде терелтеп,
етте көсөң *Кеше* итергә,
етмәне тик ҡөҙрәтең аҡ бәхет
һәр кешеңә бүлеп бирергә.

Ике йөрәккә мөхәббәт уты
дөрләтергә килде хәлеңдән,
ләкин бәхетле итеп уларҙы
ҡушырға килмәне ҡулыңдан!..

## Өсөнсө бүлек

## *1*

Батып барған ҡайыҡтан сорғолоп,
алыҫ ярға ҡарай һин йөҙҙөң,
ҡурҡынысլы һыу яланын тиҙ-тиҙ
артта ҡалдырырға тырышып,
ҡолас һайын ҡолас ташланың...

Бөттө көсөң аҡрынлап... һыу йоттоң...
Хәлһеҙлектән башың әйләнде...
Айҡал-сайҡал килмеш күк көмбәҙе
ҡара кейеҙ булып шәйләнде...
Ҡот осорғос фекер: “Бөттөм...” — саҡ-саҡ
өлгөрмәне алып йәнеңде...

Еңдең ләкин минутын шомлоҡтоң —
үтә һөйҙөң шул тормошто һин —
һуңғы ғәйрәтеңде һалып, ҡолас
һайын ҡолас үттең тулҡындар
тауы аша!.. Бына ләззәтләнеп
шыршаулығын ярҙың һәрмәнең!

Яҡты өмөт тоҡанды елһенгән
күҙҙәреңдә... Ах! — ошо мәлде
дошман ҡулы һуғып ысҡындырҙы
яр тырнаған бармаҡтарыңды...

Йәшәү менән бөтөү ҡапма-ҡаршы
төкәлешкән шул мәлдә, дуҫым,
ниндәй хистәр кисерер инең?!.

Һындырылған наҙлы гөлдәй ауҙы
бәхетһеҙ ҡыҙ, ҡағып йөрәге,
һәм ер түңкәрелде күҙ алдында
аҫты өҫкә килеп терәге...

Ҡыҙҙар үкһеп уға ташландылар,
һаҡ күтәреп йомшаҡ урынға
яткырҙылар... Хәйерниса йәһәт
һалҡын йылға һыуы бөркөнө
сынаяҡтай ағарған йөҙөнә,
Һаҡмарҡайҙың шифалы дымын...

Ах Сәлимә, йомған күҙҙәреңде
ҡабат инде асмаһаң ине!..
Баш осонда көткән яфаларҙан

мәңгелеккә арыныр инең!..

Күп икән шул күрәһеләрең бик,
Ғүмерең тартып Хоҙай алмаған,
мәңгелек өй, мәңгелек түшәккә
йәп-йәш көйө илтеп һалмаған...

...Тәүге ҡарашынан осратты ҡыҙ
ҡурҡып ағарынған йөҙҙәрҙе,
хәтерләтте булған һәләкәтте
йөрәгенең киҫелеп әрнеүе...

Ҡуҙғалмайынса тын ятты ул
һыны ҡатып... Фәҡәт күҙҙәре
яҡлаусыһын эҙләп туланылар,
моңайып, зарығып иланылар...

## *Сәлимә күҙҙәренең өнһөҙ илауы*

*"Бәхет бир, тип теләктәр теләнем*
*алһыу таңдар һыҙылып атҡанда.*
*Доғаларым барып етмәнеләр,*
*күҙ йәшкәйем түгелеп аҡһа ла...*

*Гөл орлоғо сәстем йөрәгемә —*
*руза гөлө сыҡты йәшәреп.*
*"Сәскә атһын" тиеп һаҡланым мин,*
*залимдарҙан гөлөм йәшереп...*

*Әммә сәскә бөрөһө яргастын,*
*гөлкәйемдең тамырын киҫтеләр...*
*Ышанмайым һинең барлығыңа,*
*Аллам! Булһаң, язаңды ебәр*

*аяҙ көндә йәшен уғы итеп*
*дошмандарҙың яуыз башына!*
*Дошмандарҙы йәлләһәң, әйләндер*
*мине йәнһеҙ ҡәбер ташына!.."*

Һәм, ниһәйәт, сыҡты ыңғырауы
күкрәгенән, ташып йылғалай...
Балаларын ҡурсап бәрелешкән
әжәл яралы ҡош анаһылай,

аҡыл юйып ары ташланды ҡыҙ
һәм, таянып тәҙрә төбөнә,
ырғылырға итте тышҡа... Шунда
ҡотон алып ҡалҡты алдында
Низамыйҙың иҫереп ҡыйшайған
һөмһөҙ йөҙө... Йыуынты ямы
кеүек асылған ауыҙы һаҫы
хәмер еҫе һөрөмләтеп, ҡыҙҙың
һулышына ыуын урғылтты,
йөнтәҫ бармаҡтары, ҡалтыранып,
боғаҙына ҡыҙҙың һырлыҡты...

Боҫлап торған ҡан еҫе һирпелде
Сәлимәгә был бармаҡтарҙан:
“Харис!.. Харис!.. Абау, уның ҡаны...” —
бүтән һүҙ ул әйтә алманы,
артҡа сигенде һәм тилмереп
әхирәттәренә ҡараны...

*“Миһырбанһыҙ Алла! Аҙағы*
*ҡайҙа золомоңдоң?! Тиҙерәк*
*ҡалдырырга был шомло йортто,*
*мал ҡолдарының ас ырыуын!*
*Бәндәләрең – нәк тиреҫ ҡорто!..”*

Яурынындағы ал батис шәл
төштө шыуып... Ишек бауына
тотондо ҡыҙ... Тыштан ағылды
һалҡынлығын төндөң яй ғына...

Шул уҡ мәлдә ләкин атылып
инде кире өйгә соландан.
Ялҡын менән мәллә солғанған?! --
Ут ҡапҡандай, түҙә алмайса,
мөйөштән-мөйөшкә туланы,
һыпырылып һөмһөҙ ҡулдарҙан,
сәсен, күлдәген йолҡҡоланы:

ябырылды уның артынан,
(әйтерһең, аждаһа ҡарпыған!)
йәйеп ҡосаҡ, ҡырып тамағын,
Ғимыран бай... Аллам һаҡлаһын!..

Усаҡ эргәһендә Сәлимә
һынташ һымаҡ ҡатып шым көттө,
күҙҙәрендә тик аңлайышһыҙ,

хәтәр уттар сағылып китте...

Яҡынлап бай, йәйгәс ҡосағын,
алды йолоп туҡмас бысағын
һәм йәш күкрәгенә ҡаҙаны.
Тоталманы һис кем ҡазаны...

Сәс-һаҡалы ҡыуҙай “йәш кейәү”
аҡ күлдәген ҡанға буяны,
эҫе ҡанға... Йортта ҡатын-ҡыҙ
ут ҡапҡандай туҙғып сыуланы...

Тантана ит, януар, теләгең
“ҡабул булды”!.. Аяҡ аҫтында
ҡорбаныңдың ята кәүҙәһе,
әжәл дере менән дерелдәп...
«Кейәү» табаныңды баҫ шунда!

Бүреләнеп, хәмер урынына
боҫло ҡанды яла иҙәндән! –
Һин инең бит һыуһып киҙәнгән!
Күкрәгенә ҡун да ҡоҙғондай
тала һәм йолҡ йәнен сәскәнең...
Әллә инде ҡанға сәсәнең?..

## 2

Дыуамал ел алып килде таң
Һаҡмар буйына... Шом-болоттар
күк ҡырынан үрмәләнеләр
туҙҙырылған яуҙай... Бик бейек
буҫағанан төшкән һыу кеүек
шауланы ҡарурман... Харистың
башы ҡарурмандай шауланы...

Арба һикертеүенән ҡалғынып,
аумайынса саҡ ултырҙы ул,
баҫа алмай яра һыҙлауын.
Күлдәк йыртып яһаған бәйләме
сәстәренә ҡатты бүҙәреп,
ирендәре сатнап кибеүҙән,
тонoҡланып батты күҙҙәре...

Һаҡсыларҙың ҡырыҫ төрткөләүе
һиҫкәндерҙе, талған ҡабаҡтары

йомолорға иткән сағында,
әйләнде ер күҙе алдында...

Үткән төндөң ҡанлы хәтирәһе
маңлайында быҫҡып тоҡанды
ғүмерлеккә һүнмәгес булып.
Һаман уны саҡырҙы Сәлимә
тәҙрә аша ҡулдарын һуҙып,
һаман, һаман ҡаршы йүгерҙе ул
һөйгәненә томорҡо төндән,
тәбиғәт һәм йәшлек бүләк иткән
һөйөү паклығына инанып...

Йәркәйенең йылан ояһында
ҡалыуына янды бәғере,
сибек иңкәйенә ауҙарылған
хәсрәт тауы алдында үҙенең
яһил яҙмышы ваҡ күренде...

Ҡотҡарырға мөмкин булһа әгәр
үҙ ғүмере хаҡына ҡыҙҙы,
дөрләп янған тамуҡ ҡосағына
ырғылыр ҙа ине яңғыҙы!..

*Көс бар ниндәй — быгауҙы өҙөрлөк,*
*юл бар ниндәй — яуга саҡырырлыҡ?!*
*Күл бар ниндәй — күкрәгендә артҡан*
*ҡайгы-зарын төйнәп батырырлыҡ?!.*

Ҡыҫып тешен, шыҡайҙы өндәшмәй,
төптән янып, шомға бирелеп.
Күңелкәйе иланы һулығып,
яҙмышынан йәне екһенеп...

## *Егет күңеленең илауы*

*“Бала саҡта мине әсәкәйем*
*етен биләүҙәргә биләгән.*
*Етен биләүҙәргә биләгән,*
*“Бәхетле ет!” тиеп теләгән.*

*“Бәхетле ет!” тиеп теләгән,*
*ҡайҙа, ҡайҙа минең бәхетем?!*
*Ике һаҡсы ике ягымда —*
*бына ҡайҙа минең бәхетем!..*

*Ҡулҡайҙарым үбеп, "Ирекле*
*эшсе булһын, — тигән, — иленә!"*
*"Майлы тупраҡҡайҙы йомшартып,*
*иген икһен, — тигән, — еренә!"*

*Ҡайҙа иркем минең — ҡайҙа ул?!*
*Ҡайҙа ерем минең — байҙа ул!*
*Аяҡ-ҡулдар — ҡыҫып бәйләнгән,*
*ҡыҫып бәйләнгән, быгауланган...*

*Юл баҫтыммы, әҙәм һуйҙыммы —*
*яфа сигәм кем гөнаһынан?*
*Ике һаҡсы ике ягымда —*
*тотҡонландым кем болаһынан?*

*Ҡылыстары, һалҡын йылмайып,*
*һагалайҙар сабып ташларга...*
*Илкәйемдән мине айырып,*
*илтәһегеҙ ҡайһы яҡтарга?..*

*Кескәй иркем — буш ҡулым ине,*
*ҡулдарыма быгау һалдылар.*
*Кескәй бәхетем — һөйөүем ине,*
*һөйгәнемде тартып алдылар.*

*Бар байлыгым — йәшлегем ине,*
*тапанылар йәш гүмеремде...*
*Үстәремде кемдән алайым,*
*ләгнәтләйем икән һуң кемде?!."*

Урман юлы таныш Хариска:
буйҙарынан уның үтә ине
ҡыҫып бәйләгән бай тоҡтарын
тейәп йәрминкәгә...
Көтә ине
ҡыҫыҡ юлда уны ғәжәп хәлдәр
яҙҙыртырға юлдан тырышҡан:
бүре олоуҙары,
айыу үкереүе,
юлбаҫарҙар һыҙғырыуы шырлыҡтан...
Әммә урмандың үҙ ишараһы
бәғеренә йәшләй һеңешкән:

үкһеп, үкһеп

илай ине ҡай саҡ күк урман
сабый тауышы менән.

Үкереп, үкереп
олой ине ҡай саҡ ҡарурман
бүре һағышы менән.

Сеңләп, сеңләп
һыҡтай ине бик йыш был урман
ҡыҙҙар ҡарғышы менән...

Була ине серле тынлыҡ һаҡлап
ҡаршылаған сағы юлсыны:
бал ҡорттары гөжләүенән бүтән
ауаз тотмай ине ҡолағың
күпме тыңлаһаң да... Эсең бошоп
күкрәгеңдән зарлы көй һуҙһаң
ас бүреләр бергә олой ине,
күҙҙәре йот быҙлап ут-ҡуҙҙай...

Төндәрен йыш, кәмһетелгән ата
васыятын үтәп, йәш үҫмер
ҡорбанына пүлә ата ине
ҡыуаҡ араһынан был урманда.

Һалымдарға хәле етмәйенсә
йортон ташлап ҡасҡан игенсе
һуңлап ҡайтмыш “күпис” муйынына
саба ине балта
был урманда.

Ауыл баҫҡаҡларға килә ятҡан
урядникты, батша һалдатын
аҫмай, киҫмәй юҡ итеүсе әжәл
көтә ине көҫәп
был урманда...

Бына ҡайһындай был ҡуйы урман.
Бына ҡайһындай был шомло урман...

“Мин атайың һинең, бәхил бул!” — тип,
егетте ҡарт имән оҙата,
“Мин әсәйең һинең, иҫән бул!” — тип,
йомшаҡ йүкә уны оҙата;

“Мин йәркәйең, онотма, йәнем!” — тип,
эйә башын моңло аҡ ҡайын...
Төрмәгә юл яҡынайта уны
тәгәрмәсләнгән саҡрым һайын...

Тығыҙланып-тығыҙлана бара
ян-яғының ағас диуары,
япраҡ лапаçы үтәләй юлға
төшөп етмәй Ҡояш нурҙары...

Конвой, шомланып, тирә-яғына
әзерәйә — йәшел даръяның
тәрәнлеге, бөйөклөгө иҙә
меçкендәрҙе (“Аллам һаҡлаһын
аҡ батшаның тоғро улдарын!..”)

Сыбыртҡыһы күсерҙең сыжылдап
ялай аттар арҡаһын... Күсәр
үсекләй: “Сирек сәй! Сирек сәй!” —
тип, дегет йәлләгән хужаһын...

Аттар ләкин тарта ығышланып,
дүрт тояғын һигеҙ итмәйҙәр...
Ашҡыныуын батша сиреүенең
хайуанҡайҙар аңлап етмәйҙәр...

Борма-борма урман юлҡайынан
йәйәүләтә аттар аҙымын,
ҡолаҡтарын ялт-йолт ҡайсылатып
абайлайҙар шомло ян-яғын...

Бына ғилләә!.. — ботаҡтан арбаға
ябырылды ике арыçлан!..
Ҡарт имәндәр тертләп тыңланылар
әсе әжәл ауазын юлдан...
Ҡыуҙы күсер, ҡыуҙы малҡайҙарын
ҡото осоп... Татлы ҡан еçе
ҡытыҡланы, иçертеп, танауын,
сүрә уҡып теле арыны...

Ус төбөнә ҡасып йөрәккәйе,
көткән саҡта әжәл нахаҡтан,
яурынынан һелкеп, ниһәйәт,
“айныттылар”: “Туҡтат, ҡарт шайтан!” —
Дилбегәне йолҡоп алдылар,
ярһып сапҡан аттар ҡағылған

бағаналай ҡатып ҡалдылар.
Шөрләне ҡарт тамам: "Уй, хәҙер
бөтөрәләр!.. Меҫкен кәүҙәмде
ырғытырҙар тал араһына
ас бүреләр ҡарамағына..."

"Үлтермәгеҙ, зинһар, йәлләгеҙ
балаларым, ғаиләм хаҡына!"
"Ха-ха, бабай, юҡҡа бошонма,
йәнкәйеңде тиңләп алтынға!

Ә береһен хәйер ҡылырға
тура килер пар толпарыңдың:
күтәрергә ҡаҙна тейеш бит
тотҡононоң юл тотомдарын!"

Сығарҙылар ағас артынан
ике толпар... ҡаҙна атына
Харисты ла ҡырт мендерҙеләр,
"Хәйерле юл, бабай!" тинеләр
һәм дөндөләр урман төбөнә,
йылы яҡҡа осҡан ҡошҡайҙар
атлыҡҡандай зәңгәр күгенә...
Һорғолт балсыҡ ҡына сәсрәне
саҡма тояҡтарҙың аҫтынан.
Ҡанаттарын йәйеп ҡыуаҡтар
шаршау ҡорҙо "банда" артынан...

Сыҡты юлға шулай өс егет,
имән кеүек мыҡты өс егет,
саған кеүек һынлы өс егет,
ҡайын кеүек моңло өс егет...

Дошман ҡаны менән йыуылды
юлдарының башы... Ни менән
тамамланыр ахыры? Көткән
хәҡиҡәткә килтерер микән?..

Иҫке тормош ҡалды ҡалтырап,
кире ҡайтыу инде юҡ уға!
Хәтәрлектәр, хата, ыҙалар
аша өндәй киләсәк алға!

*Бормалылыр был юл, бәлки, ләкин*
*улар өсөн тик бер юл шул ул.*
*Саҡырыуын тойоп ил-әсәйҙең,*

*батырҙары яуға ҡушылыр!*

*Ерекмәндең тулып йөрәгенә,*
*тулап ятҡан үс тамсылары*
*сығыр тышҡа урғылып һәм һуғыр*
*яуызлыҡҡа үс ҡамсыларын!*

Урман ҡуйынына томалана
ҡыҫыҡ һуҡмаҡтарҙан өс егет.
Һүҙһеҙ улар... Йөҙ йәшәгән имән
кеүек уйсан һәр бере... Ағын
йылға кеүек ярып юлдпрҙы,
ваҡиғалар ҡосағына илтә
үгәй әсә — яҙмыш уларҙы...

— Хәйерле юл һеҙгә, егеттәр!
— Бәхетле таң һеҙгә, егеттәр!

## Дүртенсе бүлек

### *1*

Сәй эсергә төшкән юлсылар
Сәнкем ауылына килделәр
бер-беренән хәтәрерәк "имеш-
мимеш"тәрҙең тоғон баҫыраулап...
Кәпәй ҡорһаҡ самауыр ҡаршында
һипте улар хәбәр ҡуш услап:

*"Германия тигән яуыз ил*
*ингән, тиҙәр, баҫып Рәсәйгә.*
*Ниәтләнә, тиҙәр, көҙгөһөн*
*был яҡҡа ла килеп етергә..."*

*"Ер ҡыртышын ашап килә, ти,*
*эснәрәттән ерҙе яндырып.*
*Ямғыр һымаҡ пулә яуҙырып,*
*Үткән ерҙә үлек ҡалдырып.."*

*"Унынһы — унынһы! Бында ла*
*үлтерештәр китте күбәйеп...*
*Юл йөрөүе үтә хәтәрле —*
*юлаусыла, әйтсе, ни ғәйеп?!*

*Именлек юҡ сауҙа әһеленә:*
*малыңды йә талап алалар,*
*бысаҡ ҡаҙайҙар йә арҡаңа,*
*муйынға йә элмәк һалалар!.."*

*"Билән арты ҡара урманға*
*юлбаҫарҙар оя үргән, ти;*
*мылтыҡ, хәнйәр, ти, һәр берендә...*
*"Батша, долой!" — тип һүҙ биргән, ти..."*

Төн үтә һәм төнгә ҡушарланып
юлсыларҙың китә шау-шоуы.
Аҡрын ғына һүрелә алыҫта
арбаларҙың шығырҙашыуы...

Сәфәрйәндәр өҙгән тыныслыҡ
ҡайта һымаҡ ҡабат өйҙәргә...
Кешеләрҙең тик күңелендә
шом ҡуйыра төрлө көйҙәрҙә,
ҡаса-боҫа ғына һөйләргә...

Бөкөр ҡарсыҡҡа әйләнеп инә
һоҫко тотоп иртән, ҡуҙ һорап,
бышылдаша усаҡ эргәһендә
хужабикә менән, ҡуҙрап:

"Баһау улы һәм ялсы Миңлебай
әллә ҡайҙа китеп олаҡҡан.
Аттары ла күренмәй яланда...
Харис "банда"һына юлыҡҡан..."

Кейеп тишек сабата, һүҙ ата
игенсенең ҡиәфәтендә
ыҙан буйына сүгәләп, талған
һабансылар түңәрәгендә:

*"Шаулар урман, башын ел ҡайырһа,*
*шартлар имән, биле бөгөлһә,*
*балта алыр ярһып йыуаш халыҡ,*
*күҙ йәшкәйе көн-төн түгелһә!*

*Ҡорал тотоп ҙур юлға сығыуҙан*
*башҡа әмәл юҡтыр... Һуң, ниңә*
*йәлләргә байғура утарҙарын*
*ас балалар илаған илдә?!."*

“Имеш-мимеш” мыйыҡһыҙ үҫмерҙәр
ҡулы менән ҡайрай аулаҡта,
бабаларҙан ҡомартҡыға ҡалған
ҡылыстарҙы һурып сарҙаҡтан.

Тутыҡ булат йылмайып ебәрһә
йөҙөндә аҡ нурҙар уйнатып,
ҡайнар ирендәрен терәп егет
ҡат-ҡат үбә баба булатын
һәм күҙҙәрен йомоп хыяллана
шанлы бәрелештәр хаҡында...
Ил йөрәге көйрәй ялҡында...

## 2

Яралы ҡыҙ ишетә алманы
донъяның был серле тауышын.
Балауыҙҙай һарғайып, һикелә
ятты алып көскә һулышын.
Көнмө, төнмө — һис бер айырғыһыҙ,
һаташыуҙа үтте көндәре.
Ә маңлайы бер аҙ һалҡынайып
күҙен асҡан ҡыҫҡа мәлдәрҙе
йоҡламауҙан һәм ҡайғынан сүккән
әсәкәйен һәр саҡ ул күрҙе...

“Духтыр” һүҙен ике кеше генә
белә ине ул саҡ ауылда;
өшкөрөүсе әбей дауаланы
Сәлимәне... Яраһын йылдам
таң һыуҡайы менән йыуа ине,
шифалы үләндәр яба ине —
Билән тау артына йөрөп йыйған
Ғәжәп ыуҙарҙың ҡабартмаһын:
«Тфү-тфү, сире артмаһын!»

Ошо әбей ҡыҙҙың ҡолағына
шыбырҙаны бер саҡ аулаҡта
Харисының яуға көс туплауын
Билән артындағы шырлыҡта...

Аңланымы, юҡмы Сәлимәкәй —
уныһын һис әйтә алмайбыҙ.
Күҙҙәренең әммә ялтырауын
күрҙе ҡарсыҡ... Әйтте: “Балабыҙ

Тереләсәк тиҙҙән, Тәңре бирһә.
Тороп китер бына — күр ҙә тор!
Урман яҡтарынан иҫкән елдәр
өмөттәрен уның уятыр!..”

Атҡан һәр таң бүҫкәргән һаулыҡтың
бер мыҫҡалын ҡыҙға ҡайтарҙы,
баҫылғандай булды күкрәгенең
һулҡылдауы, йөрәк «аһ!»тары.

Һәм ҡыҙыбыҙ, оҙон йоҡоһонан
уянғандай, киң асып күҙҙәрен,
ләззәтләнде, тойоп донъяны;
һәр тән күҙәнәге, ҡомһоҙланып,
йәшәү тарафына ымланы...

Сәхрә киңлегенә ымһындырып —
алтын күбәләктәр иленә —
Ҡояш бейетте нур-ҡуяндарын
һәр өйләлә һылыу битендә.

Әсәһенән астыртып тәҙрәһен,
иртәләрен күкшелт ғәләмдән
тыңлай инее былбыл сутылдауын,
һөйгәненән килгән сәләмдәй!
Тик изгелек кенә ер йөҙөндә
тоя ине ҡанат ҡаҡҡандай.
Тик яҙмышы ҡара йыланланып
килеп инде ал таң атҡанда...

Ағыу һалып йылан үрмәләне,
һылыуҡайҙың аңын көрмәләне --
Ғимыран исемле ҡара йылан!
Ҡаяуына ҡара мәкер йомған...

Нәүбәттәге һаташыу ауынан
ысҡынырға итеп, Сәлимә
һыу һораны хәлһеҙ өнө менән.
Йылан өттө ләкин тыны менән --
хөрт күренеш юҡҡа сыҡманы:
Мут йылмайып һаҡал һыйпаны...

Сихырланып этәрҙе Сәлимә
юрған мөйөшөн күҙ өҫтөнән.
Күп аҙналар ҡуҙғалышһыҙ ятҡан

тәне тылсымланып, ҡалҡынды,
тороп ултырҙы, йәшерен ептәр
менән тартылып... Унарлаған
Ғимырандар шашып бейенеләр
тирәһендә... Һәр ҡайһыныһы
ирендәрен торбаландырҙы ла
ҡолағына уның һыҙғырҙы...

Тағараҡтар, бүкәндәр ҡубынып
тыныс урындарынан, шаҡшы
шайтан таҡмағына ылыҡтылар...
Сәлимәнең сәсен йолоҡтолар...
Шунан ҡараңғы төн ҡосағына
батты һәммәһе... Ныҡ ыңғырап,
ҡабат һаташып, ауыр һулап
ауҙы Сәлимә мендәренә –
иләҫ-миләҫле көндәренә...
Ҡабат асылды бирсә яраһы
бик мул ҡанлы йәш менән илап...

Килде тағы ғазаплы тәүлектәр
ҡараңғы һәм тынсыу бүлмәгә.
Ауырыуҙың хәле торған һайын
насарлана барҙы, һис кемде
таныманы, үткәндәрен юйып
ташлағандай хәтеренән ул...
Кипкән ирендәрҙән бәйләнешһеҙ
һаташыу өндәре, ыңғырау
сыҡты фәҡәт... Эсендә ҙур янғын
дөрләгәндәй, эҫе һулышы
бешерҙе ныҡ, һыу һонған сағында,
ҡулын Хәйерниса-әүенең...

Булды мәлдәр, һалҡын тиргә батып
дер-дер килеп ятты, хәлһеҙләнгән
усын һалып дары моҙғайына...
"Харисҡайым, бәғерем, ҡотҡар, ҡотҡар!" —
тип табынды белгән берҙән-бер
ҡурсаусыһы һәм хоҙайына...

Һалҡын япма уның яфаларын
еңеләйтмәй – етмәй ғәйрәте...
Ағылдырҙы ҡайнар йәштәрен
Сал әсәһе һәм йәш әхирәте...

Майшәм һымаҡ янып бөтә барҙы

сәғәт һайын ҡыҙҙың ҡеүәте;
әжәл, боҫоп, мейес араһынан
һүрелеүен уның күҙәтте...

*Ҡотҡарыр кем, ел өрһә, һүнеүҙән*
*кескәй шәмдең быҫҡып яныуын?..*
*Ерләнеләр инде туғандары*
*Сәлимәне, үлмәҫ борон уҡ.*

*“Был донъяла түгел ул йәшәүсе...” —*
*тип һөйләне күргән һәр кеше,*
*ауыр һулап, тыйырға тырышып*
*алҡымынан алған күҙйәшен...*

Тик бер әҙәм йөрөнө хәбәрһеҙ
ауылынан шөйлә йыраҡта...
Ҡыйыу сапҡындарҙан арып ҡайтып,
ҡоралдарын һалғас, берайҡан
ҡыуышында ятып, үткән ғүмерен
ала ине иҫкә моңланып
Харис... Һүнгән хәтирәләр ҡабат
дөрләй ине яҡты нурланып;

йөрәк төпкөлөндә томаланған
ҙур мөхәббәт ҡапыл уянып
энә һымаҡ ауырттырып сәнсә
ине йәнен... Утланып,
балҡып тама ине ҡайнар йәше
һиҙҙертмәҫтән йәшел үләнгә...
Һәм ул йәһәт ҡыуа, ҡыуа ине
ут-хистәрҙе, гүргә күмгәндәй,
йөрәк башы һыҙлап ҡанағандай...
Урман һуҡмаҡтарын яуҙаштары
менән тапап ҡорған пландың
ныҡлығына кемдер янағандай...

Ирендәре шыбырҙай торғайны:
“Хуш бул, хуш бул, һөйөү мәле!” — тип. —
Мәрхәмәтһеҙ үс биләне минең
йөрәгемде мәңге, мәңге!” — тип...

Таш йөрәге иллә ҡайһы ваҡыт
китә ине ҡыҫылып моңдарҙан,
йәшлегенең гәүһәр миҙгелдәре
сыңлай ине йәшерен ҡылдарҙан...

Һәм минутлыҡ ярһыуҙарын йәнә
ҡыуа ине уттай быҙлатып
йөрәк төпкөлөнә, күңелкәйен
“дәлил”дәре менән һыҙлатып:

*“Дошмандарга тоткан үс — түгелме*
*якыныңды һөйөү билгеһе?!*
*Кемдең килер, мөхәббәт өсөн тип,*
*намыҫынан корбан биргеһе?..*

*Йомшармам, юк! — кайгы-һагыштарҙан,*
*алган юлым осона етермен!*
*Бөйөк һөйөү хакына кыйралыш,*
*канлы кырҙар аша үтермен!*

*Еңеү, йәки үлеү — шул ниәтем,*
*ниәтенән егет төңөлмәҫ!*
*еңгән кеше генә һис үлмәҫ,*
*еңеп үлгән кеше еңелмәҫ!*

*Ә һөйгәнем онота алмаҫ мине —*
*кайнар булды үтә һөйөүем.*
*Онота икән — тимәк, һөймәгән ул,*
*һукыр булган, тимәк, күңелем!..”*

...Ҡарурманда, йондоҙһоҙ төндәрҙә
Харис янып шулай уйланы,
фекерҙәрен уның тәбрик итеп
ҡарт имәндәр ғәййәр шауланы...

### *3*

Йәнтимерҙең ҡулдары хеҙмәткә
ылыҡмайҙар һуңғы көндәрҙә,
башын баҫып аҫҡа, тик йөрөй ул,
ҡаңғырынып, белмәй нишләргә.

Мал йыям, тип тотҡан хыялдары
иренеләр яҙғы ҡар кеүек,
иренеләр, насар эҙ ҡалдырып
һары һыуҙай аҡты, һарҡылып...

Күңелкәйе, киҫелгән урмандай,
шыр-яланғас ҡалды бит тороп:

шыбырҙашмай өмөт япраҡтары,
ләззәт менән йәнен тултырып.

Көн хистәре, ҡанатлы ҡоштарҙай,
сутылдашып оя үрмәйҙәр;
таңғы елдәй һыйпап, аҡ хәбәрҙәр
һағыш болоттарын һүрмәйҙәр...

Ауылдаштары ят ҡараш менән
сәпәп ҡала ҡартты артынан.
Өндәшмәүҙәрендә телһеҙ шелтә,
өнһөҙ үпкә ыуы бар һымаҡ...

Тешләп булмай терһәкте үрелеп,
атҡан уҡты булмай ҡайтарып,
үҙен күпме ләғнәтләһә лә, һис
үткәндәргә булмай юл ярып...

Йолҡор ине төкмә-төк һаҡалын,
сейләткәнсе арыҡ эйәген,
ҡаса алһа алып үкенестән
гөнаһланған ауыр һөйәген...

Ҡайтарыу юҡ, эйе, үткәндәрҙе,
сигенеү юҡ кире беҙҙәргә.
Йән шифаһын — түгел хәтирәнән,
киләсәктән зарур эҙләргә!..

...Йәнтимер ҙә һомғол егет ине,
һөйҙө янып ул да берәүҙе,
ҡауышырға бәғеркәйе менән
унын да бит типте йөрәге...

Хаҡ яҙманы әммә ҡауышырға:
бай кейәүгә ҡыҙҙы бирҙеләр,
“Тәҡдир ҡуша шулай!” тинеләр...

Ҡайғыһынан ҡарайған Йәнтимер
эйеп башын йөрөнө-йөрөнө лә
егәрле һәм тыныс бер ҡыҙыйҙы
ҡайтты алып... бөтә ғүмеренә...

“Тәҡдир яҙғанылыр” тигән уйға
әкрен генә аңы күнекте...
Тыуған бере үлгәс балаларҙың,
Сәлимәһе бына буй етте...

Йәшлек рәнйеүҙәрен, үсен ташлап,
бағышланды ир мал йыйырға...
Йәшеренеп ят-ек күҙҙәренән,
төндәрен дә барҙы ул ҡырға,

күршеһенекенән артыҡлатыу
өсөн һанын бураҙналарҙың...
Бөртөктәрҙең көсөн тослатырға
екте аҡыл ҡорамалдарын:

шатлыҡлы көҙ етеп, игендәр
алтын һутҡа тамам тулышҡас,
үҫемлектән күсеп үҫемлеккә,
бал ҡортолай егәр булышҡас,
йыйнап ыуҙы ул башаҡтарҙың
иң туҡтарын һәм уңғандарын...

Бер таҡыя орлоҡ етештерҙе
ошолай ул... Һөрөп ер кәрен,
Аллаға тапшырҙы теләге
гәрәбәһенең бөртөктәрен...

Өс йылдан һуң хужа ине ул
иң уңышлы бойҙай сортына,
әйләнһә лә ерҙең ҡортона...

Ғәжәпләнеп ауылдаштары
услай инеләр орлоҡтарҙы,
еҫкәй, тешләй, һөйә инеләр,
“Мөғжизә был!” тиә инеләр...

Тиҙҙән уның сереп байырын
бер генә “әүлиә” әйтмәне,
Ғимыранға ашташ булырын
Йәнтимер үҙе лә шәйләне.

Төшмәне тик Күктән көткәне —
өттө ҡыуан, ямғыр яуманы.
Ҡайһы йылда хатта сәселгән
орлоғон да йыйып алманы...

Ашлаһа ла түгеп тиркәйен,
тырышһа ла яҙмайсы билде,
иҫке уңыштан яңыһына
көндәр осон саҡ ялғап килде...

Урман киҫте байға ҡыштарын,
күмер яҡты ендәй ҡарайып,
йылмаймаҒас һаман бәхеткәй,
хыялдары бөттө таралып...

Риза булды ваҡ яҙмышына:
"Түгел әле фәҡир мин генә!..
Булһаҡ бөтәбеҙ ҙә бай, мулла,
йөк атына бесән кем һала?.."

Сикһеҙ ләкин иблес мәкере —
тайҙы юлдан, һыймай ҡалыпҡа —
ымһынып уҡ бай һыныҒына,
яңғыҙ ҡыҙын һалды тамуҡҡа...

Етмәй көсө хәҙер ҡарарға
күҙҙәренә меҫкен баланың:
ярым үлек килеш ятһа ла,
"Харисым!" тип һаман ала тын...

*Хәлһеҙ бармағын төбәп уға:*
*"Аждаһа!" — тип әйтер, тип ҡурҡа...*

### *4*

Йәлләйем мин, уҡыусым, шул (о)сорға
тура килгән геройҙарымды...
Кемгә генә серем сисәйем,
ҡайҙа илтәйем моңдарымды?..

Уфтанырға, иларға әҙермен
бәхетһеҙлегенән уларҙың,
юлдарына таш һалған бәндәне
онтап ташларҙай ҙа буламын,
йомарлайым йоҙроғомдо, ләкин
ҡулым ҡыҫҡа — кире аламын...

Яҡты көндө күрмәй геройҙарым
ярты юлда һәләк булһалар,
шелтәләмә һин мине, уҡыусым,
тыңлап әкиәт ҡарсығына:
Хоҙай түгел бит мин, тик булғанды
Тасуирлаған тасуирсы ғына...

Түҙҙем оҙаҡ бикләп хәтеремә
илкәйемдә күптән уйналған
фажиғаның утлы саҡкыларын...
Һүрелмәне улар... Инде иһәм
шаулы урмандарға, йә йөрөһәм
Һаҡмар буйлап солоҡ кәмәлә,
серләшеүе төнгө япраҡтарҙың,
супылдауы һыуҙа балыҡтарҙың
ҡыуандырһа мине, иҫертһә лә,
аһ! — һыҙлауҙан йөрәгем тынманы,
сыңлы серен онота алманы...

Күҙҙәремдә шатлыҡ янар булһа,
һүндерелде әсе йәш менән;
ирендәрем йылмайырға итһә,
ҡыҫылдылар һулығып үкһеүҙән...

Меҫкен башҡайымды кем иңенә
терәргә белмәҫтән йөрөнөм.
Күҙ йәшемде һөртөргә ҡулъяулыҡ,
уҡыусым, һин, бәлки, бирерһең?..

...Яҫтығынан ҡалҡынып Сәлимә
тышҡа сығып йөрөй башланы...
Киң асылып күҙҙәре, һөйөнөп
байҡанылар йәмле донъяны.

Һаҡмар ырмап тартылған туғайҙың
ҡусҡыллығы ҡойона ине
Көндөң нурҙарына, өйрәк һымаҡ...
Тирәктәрҙең еңелсә хис-шауы
көйәҫ елгә һеңеп килә ине,
ҡаға ине шул саҡ йөрәк тулап...

Тәбиғәттең тигеҙ тын алышы
мәңгелеккә саҡырҙы ҡыҙҙы,
күңелкәйен иләҫләндерҙе
үләндәрҙең ҡыштырҙашыуы.

Бер хәсрәттән генә тормай донъя,
шатлығы ла бар уның, тиеп,
һин дә, бәлки, теләккәйҙәреңә
ирешерһең бер заман, тиеп
сутылданы һандуғас ботаҡтан —
әрәмәләр ҡуйы һырт яҡтан...

Хәйерниса дуҫына эйәреп
Сәлимәбеҙ сәхрә ҡыҙырҙы
һәр ауаздан йотоп йән шифаһын,
туйыналмай тыңлап был йырҙы.

Һаҡмар буйҙарына төштө улар —
киртләс-киртләс ташлы һыуалғысҡа,
бала саҡта кер йыуып уйнаған
уйпат ҡаяларҙы ҡаранылар
һәм эйелеп биттәрен йыуҙылар
гәлсәр һыуҙы һоҫоп ус менән...

***Сәлимә:***

Һа-а-ай,
донъя йәмле ҡайһылай!
Көн-апайым йылмайып-көлә,
әйтерһең дә, тик миңә генә!

***Хәйерниса:***

Ҡояш көлөп-йылмая белә
гөнаһлыға ла, изгегә лә...

***Сәлимә:***

Әхирәтем, күрсе, сәскәләр
ниндәй матурҙар һәм нескәләр!
Күбәләктәр иһә сүгәләп
һәр сәскәнең битен үбәләр.
Зәңгәр һауаланып осһалар —
осҡор сәскә һымаҡ бит улар!
Кешеләргә йәм өҫтәр өсөн
алған микән улар гөл төҫөн?..

***Хәйерниса:***

Дошман күҙен алартыр өсөн
алған улар сағыу гөл төҫөн...

***Сәлимә:***

Хәтфә балаҫ һымаҡ үләндәр...

***Хәйерниса:***

Ҡоролоҡтан улар көйгәндәр...

*Сәлимә:*

...әүәлгеләй, Һаҡмар тын аға...

*Хәйерниса:*

Күҙйәш, әүәлгеләй, ныҡ аға...

*Сәлимә:*

Ҡуйсы, дуҫым, үртле һүҙ менән
ағыулама ҡыҫҡа көн йәмен,
унһыҙ ҙа бит ҡайғы-хәсрәттәр
иңләй йәшәүебеҙ күләмен.

Бер юғалып, бер табылғанда
оҡшай күңел сабый балаға.
“Тәтәй” уға кәсә ярсығы...
Ябай һыу — шәрбәт һыуһағанға...

Бәхетлемен һәм иҫерекмен
йәшәү шатлығы кисереп мин,
айығыу тик ҡурҡыныс үтә:
ни ҡылырмын, сабырлыҡ бөтһә?..

Ҡалай күтәрермен яҙмыштың
йәлләмәйсә һуғып-ҡағышын,
йә хәйләкәр, йә ҡомһоҙ өйөр
божоралап уратһа гел бер?..

Ниңә тыуҙым, үҫтем кем өсөн?
Йөрөй ситтә хәләл өлөшөм...
Илай күңел таңҡай атҡанда,
илай күңел кисен ятҡанда,
яҡты Күгем — дөм-ҡара юрған,
барыр юлым — таралмаҫ томан...

Күк ҡараһын нурҡай киҫһәсе,
томанға салт елкәй иҫһәсе,
күрер инем көнөм сыуағын —
ҡаралыҡты ҡыуған көн ағын!

Ә кем белә! — ҡыштан һуң, көләп

умырзая асылған кеүек,
ташлар инем һелкеп ҡайғымды,
хәсерәткәйемде-моңомдо...

***Икеһе бергә йырлай:***

*Мин — бәхетһеҙ ҡыҙ бала,*
*ниңә тыуҙым донъяға?*
*Күкрәгемдә ут яна,*
*күҙҙәремдән йәш аға.*

*Абау Аллам, ҡар һыуҙары,*
*йөрәгем ярһыуҙары!*
*Йөрәгемдең ярһыуҙарын*
*баҫһасы ҡар һыуҙары!..*

*Һаҡмар буйы таллы-таллы,*
*таллы ла ҡарамалы.*
*Күңелкәйем ниңә йәштән*
*бүтәнгә ҡараманы?..*

*"Әү" тип ауаз бирермен,*
*яндарыңа килермен.*
*Хат яҙ, дуҫкайым, яҙмаһаң —*
*һағыныуҙан үлермен...*

Сәлимәгә туған ине бик
һыуалғыста ябай бер мөйөш:
Беренсе ҡат татыны шунда
мөхәббәттән иҫерткес өлөш,
нәҙер итте улар мәңгегә
онотмаҫҡа һәм ташлашмаҫҡа,
яуғанда ла суйыр-таш башҡа...

Уға ҡалһа, керһеҙ йәш йөрәге
алды яҡын һөйөү нәҙерен.
Хәтеренең ебенә сиселмәҫ
төйөн төйҙө – Харис бәғерен
(Хоҙай шаһит тоғролоғона,
сафлығына, түҙемлегенә...)

Ҡайҙа, ҡайҙа йөрөй икән ул,
Һаҡмар ташына һәм саф ҡыҙҙың
күңеленә уйылған егет?..
Таңғы елдәргә йәнен егеп,

иҫләй микән ҡайнар ҡосоуҙарын,
утлы-ләззәтле пак үбеүҙәрен,
һаҡлай микән, нәҙер балдағылай,
күҙ алдында уның төҫмөрөн?..

Хат, йә сәләм ебәрһәсе берәй,
өнһөҙлөктөң ярып ҡараһын —
Йөрөр инее Сәлимә лә бергә,
Шырлыҡтарҙың ярып араһын!
Килмәне тик көткән хәбәркәйе,
асылманы сере урмандың.
Күңеленә һалыусы булманы
Өмөт орлоҡтарын Уралдың...

## 5

Игелек һәм шәфҡәт ерҙе ташлап
киткән, мусҡа эйә һәр кеме
ҡанға һыуһап йөрөй бүре төҫлө...
Көсһөҙ әммә изге-күркәме...

Йола, түрә иҙә ине герҙәй
ябай халыҡтың эс-бауырын.
Күтәрҙегеҙ нисек, кешеләрем,
күтәргеһеҙ Күктең ауырын?!

Шул мөхиттә хәлһеҙ тыбырсынды
геройҡайым, алйып шул хәтле,
өҙөр өсөн нескә муйынына
яҙмыш һалған быуар элмәкте...

Тау артынан хасил юлсыларҙы
һорашыуҙан ул арыманы...
Ҡыйыу йәнле егеттәр хаҡында
серле хикәйәттәр тыңланы,
һөйгәненә ләкин илтер юлды
сырамлай һәм таба алманы...

Һуңғы хәбәр иһә хикәйәтләй
хәтәр ваҡиғалар турында:
“Батша һалдаттары, йыртҡысланып,
гиҙеп йөрөй урман юлында,

йыш-йыш унда урман һиллектәрен
тетрәтә, ти, мылтыҡ шартлауы...

Юлсыларҙың һиҙгер ҡолаҡ итен
ыҙалата сылбыр шалтырауы...”

### *6*

Ә Ғимыран ентек еҫе тойған
ас ҡоҙғондай бөтөрөлдө ҡыҙ
тирәһендә... Һыпырып һаҡалын,
ситтән генә күҙәтте уның
елп-елп итеп сәхрә гиҙеүен,
сағыу сәскәләрҙе үбеүен...

Ҡара уйҙарының йомарлағын
түҙемһеҙлек менән тупланы
көтөлмәгән генә хозурҙа
наҙлы сәскәне ҡырт өҙөргә...

Ғалийәнәб оҙаҡ көттөртмәне,
ҡара яуҙай ҡаҡты ҡапҡаны:
“Ҡайҙа минең никахлы ефетем?
Апҡайтырға килдем мин уны!”

“Нисек... әфәндем... – тине Йәнтимер, --
сирле бит ҡыҙ...”
“Өйҙә төҙәлер!”
“Үҙең беләһең, кем... теләмәй ул...”
“Уның ҡарауы мин теләйем!

Кит юлымдан!” — тине.
Өй хужаһы
тубыҡланып ҡосто муслыҡтың
аяҡтарын:
“Йәллә, зинһар, йәллә,
ала күрмә йәнен ҡошсоҡтоң!
Ҡара гүргә кергән ата-әсәң
рухын рәнйетмәһен ҡылығың!
Күрмәйһеңме бынау руза гөлөн
һәм анауы шайтан таяғын?!

Ҡауышалмаҫ улар икәү мәңге,
ултыртһаҡ та йәнәш түтәлгә.
Алла ымын ымһындыртма улай,
ҡыҙым минең насип бүтәнгә!”

Ғимырандың быҫҡытты күҙҙәре

ерәнес тойғоһон, шырт ҡылға
боҫҡан ирендәре, төкөрөнөп,
күмде ҡартты ылғый мыҫкылға:

“Тиреҫ ҡорто!
Тыуып тиреҫлектә,
тиреҫеңдә аунап төләйһең,
тығып ләкин керле мороноңдо,
өйрәтергә мине теләйһең!

Хәйерсе йән, дөмөк!”
Артҡа сигеп,
Йәнтимерҙең типте ауыҙына,
ҡан сәсрәгән бишмәт салғыйына
баҡкан килеш торҙо аҙ ғына...

Ятты аунап хурлыҡлы Йәнтимер,
күҙ йәшенә үлән сылатып;
татылмаған нәфрәт ғәрәсәте
килде уға йөрәк тулатып...

Ырғып тороп, кинәт ябырылды
һаҡалына яһил дошмандың...
“Яуыз йыртҡыс! Көн һайын ҡан эсмәй
йәшәй алмайһыңдыр!.. Үҙ ҡаның
менән күптерәйем ҡорһағыңды!
Ваҡлатайым эре борсағыңды!..” --

Һаҡалынан йомарлап сиктерҙе,
ҡапҡа тәңгәленә еткерҙе,
билен бөкләп, ботонан күтәреп,
ҡапҡа тышына быраҡтырҙы...

Бәрелеүҙән ерҙең дөпөлдәүе,
ауыртыуҙан ирҙең эһелдәүе
ишетелде урам уртында.
Ләззәтләнеп йомарт төкөрҙө лә
байҙың көлсәләй киң йөҙөнә,
ҡыйыу атланы ҡарт йортона.

Эшен атҡарғандай, артҡа һалып
көрәк ҡулдарын, ул тапаны
иҙән буйын эре-эре... Йәне
ҡәнәғәтлек хисе татыны;

Ғүмер-баҡый көслөнән ҡурсалып

күнгән ғәҙәтенән арынды
һәм яҙғыһын йөҙәткес быуаһын
йырған һыуҙай рухы шашынды!..

…Өс көн үткәс килде “ҡунаҡтар”,
саҡырылмай, уның йортона —
мисәүләп тә еккән ат менән,
зыңғырҙауыҡлы дуға менән...

Сығып хужа ҡапҡа асманы
һәм йылмайып ҡаршы алманы,
түргә мендереп ултыртманы,
хуплап-хөрмәтләп, ҡунаҡтарҙы...

Ҡапҡа ватып улар инделәр,
буçағанан ырғып менделәр
яуызланып баçҡынсы һымаҡ —
саҡырылмай килгән өс ҡунаҡ...

Ҡунаҡтарҙың береһе ине
оҙон буйлы һәм туры билле,
ҡайышында наган бар ине
һәм шпорлы әтәс шикелле...

Ҡунаҡтарҙың икеһе ине
арыҡ тәнле, һоро шинелле,
баçа ине яуырындарын
беҙ һөңгөлө мылтыҡ уларҙың...

Шпагат бау алып, хужаның
бәйләнеләр аяҡ-ҡулдарын
һәм “пүнәтәй” Низамый менән
сығарҙылар һөйрәп өйөнән...

Сәлимәне, һалып арбаға,
оҙаттылар Ғимыран-ағаға
(ҡуйынына...) Ҡыҙҙың үкһеүен
көллө ауыл торҙо ишетеп,
юлда үçкән үлән баштарын
йыуҙы йәше уның “тып” та “тып”...

## Бишенсе бүлек

### *Сәлимәнең әсәһенә яҙған хаты*

*“Әсәкәйем, ниңә таптың мине,*
*хәләл һөтөң имеҙеп үҫтерҙең,*
*төндәр буйы керпек ҡаҡмайынса,*
*бишегемде ниңә тирбәттең?..*

*Уттай янып сирләп ятҡанымда*
*маңлайыма һалып ҡулыңды,*
*минең менән ҡуша ниңә яндың,*
*минең менән ҡуша һыҙландың?..*

*Ниңә миңә зифа буйҡай бирҙең,*
*ниңә миңә нурлы йөҙ бирҙең,*
*Һаҡмар-һыуҙай оҙон толомдарым*
*ниңә тарап, бағып үҫтерҙең?..*

*Үҫеп еткәс, ек-яттар күҙенән*
*мине ниңә көнләп һаҡланың,*
*баҫҡан аҙымымды һанап барҙың,*
*әйткән беремдән мөн тапманың?..*

*Йәнем һөйгән йәрҙәр ҡаршыһына*
*сығарманың, әрләп, кистәрен,*
*эсем бошоп йырлап ебәргәндә,*
*“Килешмәй!” — тип ҡыуҙың хистәрем?..*

*Берәү менән итһәм һөйләшергә,*
*күҙең менән һөҙөп булыштың,*
*йәшлек хистәремде ситлек ҡошо*
*ҡылып тотҡонларға тырыштың?..*

*Ниңә былар, ниңә, әсәкәйем,*
*малдай мине һатыр өсөнмө,*
*йәшлегемдең аҫыл сәскәләрен*
*утҡа бер көн атыр өсөнмө?..*

*Шуның өсөн генә булһа әгәр,*
*әсәм, мине юҡҡа тапҡанһың,*
*тормош дауамыңды ҡалдырырға*
*үҫтергәнһең, наҙлап баҡҡанһың...*

*Донъялағы барса хәсрәттәрҙе*
*тупланым мин хәҙер, әсәйем,*
*аһ! — нишләйем?!. Йөрәк ярамдың*
*әрнеүҙәрен нисек баҫайым?..*

*Донъялағы барса һыҙлауҙарҙы*
*күтәрәм мин хәҙер, әсәйем,*
*аһ, иңдәрем!.. Ауыр яфаларҙан*
*ҡотолоу юҡ, инде нишләйем?..*

*Ерҙә булған барлыҡ ҡара көстәр*
*ябырылды миңә, әсәйем,*
*нисек итеп һелкеп ташлайым,*
*ниҙәр биреп унан ҡасайым?..*

*Киләсәгем дөмә-ҡараға*
*томаланды инде, әсәйем,*
*ҡалай ҡылып уны асайым,*
*нисек итеп ары йәшәйем?..*

*Кисә генә өлкән көндәшем*
*сәстәремдән һөйрәп тукманы,*
*толомом саҡ йолоноп сыҡманы,*
*толомом саҡ йолоноп сыҡманы...*

*Барғайным мин һыуға, күнәгем*
*ҡайтты тулмай, юлда һирпелеп —*
*ярҙы шуға урта көндәшем*
*эттән алып, эттәй типкеләп...*

*Еләнемде алды систереп,*
*калушымды алды систереп,*
*тышҡа унан ҡыуып сығарҙы —*
*торҙом өшөп, кисте еткереп...*

*Төн ауышып, әрһеҙ әтәстәр*
*таң атыуын ҡотлай башлағас,*
*ҡайтып төштө иҫерек "кейәү"ең*
*һәм ҡысҡырҙы, һүгеп: "Ҡапҡа ас!"*

*Астым сығып ауыр ҡапҡаһын,*
*бөттө хәлем ярым асҡандан.*
*Ғимырандың йыуан ҡамсыһы*
*үтте ялап ялан арҡамдан...*

*Ҡалманым саҡ арба аҫтында,*
*йығылыуҙан биртенде билем.*
*Көс-хәл менән атты туғарып*
*һоло биргәс, саҡ өйгә индем...*

*Тапманым тик көткән ялымды —*
*йылан ҡарсыҡ тик ҡуямы ни!*
*Ошаҡлап ул күптән өлгөргән —*
*шулай ҡылмаһа тынамы ни!*

*Аждаһалай яман ажғырып*
*ҡаршыланы һаҡаллы ирем,*
*сөйҙән алып элгән ҡамсыһын,*
*ҡайыҙланы арҡамды минең...*

*Һуҡҡан һайын сәсрәп ҡан сыҡты*
*эшләп талыҡҡан тәнкәйемдән.*
*Уның ошо ҡаты ҡулына*
*меҫкен аты түҙәме икән?..*

*Һушым китеп фәҡәт йығылғас,*
*араланы яҙанан Хоҙай...*
*Урынымдан тора алмайса,*
*аҙна буйы аунаным шулай...*

*Һыу биреүсе миңә булманы,*
*ирендәреп кипһә лә сатнап.*
*Аҡ бесәйем генә ултырҙы*
*баш осомдан китмәйсә һаҡлап...*

*Яҫтығымды башым аҫтынан*
*алды тартып көндәшем минең*
*һәм ятҡырҙы ҡаты таҡтаға —*
*аҡты тулып күҙ йәшем минең...*

*Көн юҡ миңә, әсәй, төн дә юҡ,*
*йәшәүем тик ҡиәмәт кенә.*
*Был яҙаға мине тартырға*
*тейеш ине енәйәт кенә...*

*Ә мин, ысыҡтай саф көйөмсә,*
*күрәм әҙәм күрмәгәндәрен.*
*Әсәй, әллә яңғыҙ балаңды*
*ҡарғаныңмы, күрһен, тип, барын?..*

*Ҡотолорға ошо яфанан*
*ни гилләләр эшләйем икән?*
*Әллә текә Һаҡмар ташынан*
*сөмөкәйгә төшәйем микән?..*

*Ҡол ҡылдығыҙ мине йәштән үк*
*ҡарундарҙың иң ҡарунына.*
*Туҡманы ул мине он өсөн,*
*аҙна уҙмаҫтан барыуыма...*

*Аттай арып эшләп йөрөһәм дә,*
*ултыртмайҙар табынға мине.*
*Үкһеҙ йәндәй, башҡа ҡуялар*
*ҡара аш өй яғында мине...*

*Үҙем бешергән аштарымдың*
*татый алмайым ҡашығын да.*
*Үлмәһен, тип, туҡландыралар*
*төпкө өйҙөң аш ҡалдығына...*

*Төнгә ҡәҙәр бушай алмайым*
*ҙур донъяның мәшәҡәтенән.*
*Ятып инде күҙем йомолһа,*
*уяталар һөйрәп сәсемдән...*

*Торамын да һыйыр һауамын —*
*бер көтөүҙе бер яңғыҙ үҙем.*
*Бармаҡтарым бөтә тумбығып,*
*бирһен инде Хоҙайым түҙем!*

*Һауған һөттө ҡуям эш итеп...*
*Ул бөтһә лә, эш бөтмәй миңә.*
*Бер сынаяҡ сәй ҙә эсалмай,*
*тиреҫ түгергә китәм йәнә...*

*Тотонамын утын ярырға —*
*ир яралмаҫ ҙур тумар утын.*
*Шунда ла юҡ рәхмәт әйтеүсе,*
*әрләйҙәр тик, осороп ҡотом...*

*Инһәм-сыҡһам, ҡара ҡойолоп*
*ултыралар... Яҡты йөҙ миңә*
*биреүсе юҡ, хатта ҡушмайҙар*
*көнөнә бер йылы һүҙ генә...*

*Йылан ояһына оҡшатып*
*биҙәрләнем өйҙән, "ғаилә"нән.*
*Ут сыҡһасы, тиеп теләйем,*
*ялҡын теле һуҙып мөрйәнән...*

*Ҡатырҙылар тамам йәнемде,*
*әсәкәйем, бай ҡоҙаларың.*
*Дусҡа түгел, дошманыма ла*
*күрһәтмәһен бай ыҙаларын...*

*Йәшәй шулай ҡыҙың, әсәйем,*
*көндәштәрҙән, ирҙән сағылып.*
*Үлермен дә инде мин тиҙҙән*
*йә имгәнеп, йәки һағынып...*

*Әсәкәйем, әсәкәйгенәм,*
*ҡыҙғанығыҙ, йәлләгеҙ мине!*
*Бер самауыр сәйгә булһа ла*
*саҡырғалап алһағыҙ ине!..*

*Эскәйемә бикләп зарымды*
*янмаҫ инем бер үҙем генә.*
*Моңом да күп, һағышым да күп,*
*бирһен хоҙай тик түҙем генә...*

*Суйырланып ҡатты бәгерем,*
*туғандарҙан, донъянан биҙҙем.*
*Башҡайымды йәшләй ашатҡас,*
*ҡарғамайса нишләйем һеҙҙе?..*

*Атыр микән бәхет таңҡайым,*
*мәңге әллә төн торор микән?*
*Ҡайғы-хәсрәт, таш ярсығылай,*
*йөрәгемде тик ҡырыр микән?..*

*Күрә алмай яҡты көндәрҙе,*
*һалҡын гүргә инермен инде.*
*Ҡара баҙҙа Көндө һағынып*
*шиңгән гөлдәй шиңермен инде...*

*Әсәкәйем, әсәкәйгенәм,*
*ҡыҙғанығыҙ, йәлләгеҙ мине!*
*Бер самауыр сәйгә булһа ла*
*саҡырғалап алһағыҙ ине!..”*

## Алтынсы бүлек

### *1*

Урал буйҙарынан уралып —
бабалары тыуған төйәктән —
ошо ергә килгән башҡорттар.

Ҡалҡыу-ҡалҡыу тауҙар янында,
ҡусҡыл туғайлыҡтар шауында
Һаҡмар һыуын күргән башҡорттар.

Һылыу-һылыу аҡтирәктәрҙе,
йыуан-йыуан өйәңкеләрҙе
киҫеп ҡарағандар башҡорттар.

Һары ижауҙарға тултырып
һары балдай Һаҡмар һыуҡайын
эсеп ҡарағандар башҡорттар.

Ярһыу толпарҙарын Олобайҙа —
һутлы кәрешкәле туғайҙа
көтөп ҡарағандар башҡорттар.

Умарталарының кейәһен
асып, егәрле бал ҡорттарын
осороп ҡарағандар башҡорттар.

Киндер ептән бәйләп йәпләнгән
йәтмәләрен тымыҡ күлдәргә
төшөрөп ҡарағандар башҡорттар.

Һауалағы кейек ҡоштарҙы
тимербашаҡ осҡор уҡ менән
атып ҡарағандар башҡорттар.

Усаҡ өйөп таштан, ут яғып,
хушбуй еҫле бесән өҫтөндә
ятып ҡарағандар башҡорттар.

Ағастары булғас буралыҡ,
Һаҡмар һыуы булғас шифалыҡ,
үләндәргә болон бай булғас,
(исемен дә “Олобай” ҡушҡас!)
тупрағы шәп — ҡара май булғас;

сәскәләре — ылғый шараплы,
тын күлдәре — мыжғыу балыҡлы,
кейек-ҡошо — һимеҙ һуғымлы,

усаҡ уты — йылы, яғымлы
булғас, яратышып был ерҙе,
тамырланып донъя көтөргә
уйлағандар беҙҙең башҡорттар.

“Ҡайғы китһен, байман килһен, — тип, —
хозурлыҡта ғүмер үтһен!” — тип
йырлағандар беҙҙең башҡорттар...

Әммә шуны тоймай ҡалғандар:
Булһа ла шат тауҙар, урмандар,
Ҡайҙа ла шул ҡорой дармандар,
Ҡайҙа ла шул ырай дошмандар.
Шуға ла шул ҡылыс ҡайрарға
Илаһынан беҙгә ҡушҡандар, --
абайлаған шуны башҡорттар...

Тәүге нигеҙ ташын һалғас уҡ
ҡытлыҡ килгән улар башына,
батша урядниктары булып...

Тәүге бураҙнаны ярғас та
байманһыҙлыҡ килгән уларға,
батша землемерҙары булып...

Онотолған дуҫлыҡ, туғанлыҡ,
һуғышҡандар ҡанға буялып
ярты таяҡ ҡара ер өсөн...

Ҡаҙығандар тәүге ҡәберҙе
ауылдаштарынан туҡмалып
һәләк булған тәүге ир өсөн...

Тәүге йәтмә төшкән Һаҡмарға —
балыҡ һөҙөп түгел, ғәренән
батып үлгән йәш ҡыҙҙы эҙләп...

Оҙатҡандар тәүге киленде —
һөйгәненә түгел, һөймәгән
ҡап-ҡарт бабайға, ирекһеҙләп...

Сәнкем беҙҙең шулай башланған,
Сәнкем беҙҙең шулай йәшәгән...

Шул сәбәптән тиҙ онотолдо

фажиғаһы Сәлимәкәйҙең...
Күнектеләр ил һылыуының
хөшһөҙ ҡартҡа ҡол булыуына...

Ерҙе япҡан сүп-сар туҙымын
беренсе ҡар ҡаплап ҡуйғандай,
яңы мәшәҡәттәр аҫтында
онотолдо яҙмышы уның...

Гелән генә ҡара эшендә
ауылдаштар уны күрҙеләр,
күргән бере: "Ниңә был тиклем
ябығаһың?" — Һорау бирҙеләр...

Күренмәһә, тағы оноттолар,
үҙ ҡайғыһы үҙендә бит ул
һәр бәндәнең ауыр заманда —
уларҙы кем ғәйепкә ала?..

Һәр ерекмән үҙ күкрәгендә
шундай уҡ зар, ҡайғы йөрөткәс,
яҙмыштары шундай уҡ булғас,
кем үпкәләр инде уларға?..

Бисара йән түгеп йөрөмәне
моңон-зарын, сығып кешегә.
Таба алмай ине ул форсат,
ғәйбәт һатыу түгел, ашарға...

Яҡлаусыһы ла юҡ ине шул, —
яңғыҙ башы янды ҡаңғырып...
Шулай ҙа ул ситтән бер ярҙам
көттө, өмөткәйен талдырып...

Яҙмышҡайы хәтәр ҡағытып,
иҙелһә лә бәхетһеҙлектән,
ҡуя ине уйлап кинәттән,
атыр әле бәхет таңым, тип.

Үҙ-үҙенә ҡул һалыу уйы
тоҡанһа ла хәтәр мәлдәрҙә,
төшә ине Харисы иҫенә,
алмаштырып төндө көндәргә.

"Иҫән булһа, ҡайтыр әле бер,
йолҡоп алыр мине ыҙанан!" —

тип уйлай ҙа, йәне арына
ине уның шомло уйҙарҙан...

## 2

Һабан бөткәс, май аҙағының
йәмле көндәрендә ҡунаҡҡа
саҡырҙылар Ғимыран байҙы
алыҫ ауылдан...
Өс ат егеп,
өс ҡатыны, үҙе тейәлеп,
йүнәлделәр һары таң менән,
Билән тауҙың билле иңенән.

Иркен сәхрәләргә сығыуы
кинәндерҙе бик Сәлимәне.
Бала саҡта йыуа йыйнаған
тау биттәрен ҡарап барҙы ул,
һәр ташта үҙ эҙен күргәндәй
тулҡынланды... Елгә яғымлы
елпелдәшкән умырзаялар
ебәк балаҫын күргәс, төшөп
йыйғыһы һәм үпкеһе килде
һөйкөмлө был күк сәскәләрҙе...

Һандуғастар сутылдай ине
ҡунып ҡурай һабаҡтарына
юл ситендә... Улар һамағы,
күккә һеңеп ҡалғандай, оҙаҡ
наҙлай ине ихлас йәндәрҙе,
яҙлыҡтырып ҡатҡан тәндәрҙе...

Көр йүгерә инеләр таңдан
һоло ашап туйынған аттар...
Туҡылдайҙар ғына тояҡтар...

Бер ҡараһаң — йыуан өйәңке
шыуа ине артҡа яныңдан,
бер ҡараһаң — һыуыр убаһы
еләҫ ҡаршы, ашығып, алдан;

икенсегә баҡһаң — йор шишмә
аға ине йырлап артыңда,
өсөнсөгә күҙең һалғанда
төшә инең тәрән соҡорға —

шулай ҡыҙыу инеләр аттар...
Их был зарур, хозур минуттар!..

Сәлимәнең килде йырлағы,
һары һандуғасҡа ҡушылып,
йәмле Уралҡайы тыуҙырған
оҙон-оҙон моңло көйҙәргә.

Ҡурҡынды тик ғазраилынан,
татымасҡа, тип, ҡаты ҡулын.
(Арҡаһында ҡамсы эҙҙәре
бөтмәгәйне бит әле уның...)

Ултырҙы ул тағы бошоноп,
яңынан-яңы уттарға төшөп,
төрлө-төрлө ғәмдәрҙән өшөп,
ҡайғыларҙан, моңдарҙан шешеп...

### *3*

Ҡунаҡ хужаһы ҙур бай ине
һәм өйөргән ине байҙарын
тирә-яҡтың, Ғимыран кеүек...
Йәрминкәләгенән ишлерәк
ат йыйылды ишек алдына,
шығырым тулды өйө кешегә...

Ялсылары, асырауҙары
йүгерешеп йөрөнөләр бары,
ҡунаҡтарға хөрмәт күрһәтеп.

Оҙон башҡорт урындығына —
күбек ҡаҙмендәрҙәр өҫтөнә
ултырҙылар аяҡ бөкләшеп...

Еҙ тас-ҡомған, иңдә аҡ һөлгө —
ҡунаҡтарҙың ҡулын сайҙырҙы
бер йәш егет... Килде һабалар —
ҡыҙлап-ҡыҙлап торған ҡымыҙлы,
килде йүкә-ағас мискәләр —
бышлап-ҡайнап торған сәм-баллы,
килде йыуан ҡорһаҡ тәпәндәр —
ирел торған һары-тос майлы,
килде тәрән-тәрән табаҡтар —
борлап-боҫланып торған ашлы...

Быуын-быуынынан туралған
һимеҙ һарыҡ иттәре килде,
бер ҡалъяһын ҡапһаң ҡанырлыҡ
ҡаҙы менән ялылар килде,
ҡорот иҙеп, ҡара борослап
һыйлыҡлаған һурпалар килде...

Был донъяның бөтә байлығы
өйөлгәйне ошо табынға,
унарлаған ялсы хеҙмәте
ҡуйылғайны ошо табынға
аш-һый итеп...
Гөштө ҡунаҡтар,
һемерҙе һәм эсте ҡунаҡтар,
һоғондорҙо, һоғондо улар,
тығындырҙы, тығынды улар...

Донъя күргән оҙон ашъяулыҡ
тирҙе яңы мәжлес тарихын
һәм урындыҡ саҡ-саҡ күтәрҙе
ауырлығын олпат табындың...

Ҡыҙышып уҡ алғас ҡунаҡтар
керештеләр уйнап-йырларға,
дөпөлдәтеп йортто бейергә,
ҡурай тауыштарын тыңларға...

Өйәҙҙәге иң шәп ҡурайсы
саҡырылған ине мәжлескә,
һыҙҙыра ла өҙҙөрә ине
ил моңдарын, һалып ут эскә...

Ҡаршы өйҙөң асып ишеген
(унда ҡатын-ҡыҙҙар табыны),
йотоп ултырҙылар бисәләр
ҡурай моңдарының ағымын...

Һаҡмар буйҙарының йырҙары,
таҡмаҡтары, оҙон көйҙәре,
көлөүе һәм һулығып илауы,
дәртләнеүе, ярҙам һорауы,
уфтаныуы һәм ыңғырауы
ишетелде ҡурай тауышында...

Февралдәге буран булып та,

апрелдәге һырғаҡ булып та
олой ине ғәжәп был ҡурай...

Ер ҡандырып яуған ямғырҙай,
ил туйҙырып аҡҡан һыуҙарҙай
шаулай ине ғәжәп был ҡурай...

Һабан сыйылдауы кеүек тә,
салғы сыжылдауы кеүек тә
тауышлана ине был ҡурай...

Боғаҙына әжәл йәбешкән,
йәшәргә ныҡ ләкин тырышҡан
меҫкен йәндәй зарығып, зарығып
һағышлана ине был ҡурай...

Сәлимәнең күҙкәйҙәренән
тамсы-тамсы тамды йәштәре,
һары һағыш булып төйнәлде
бөтә уйы, бөтә хистәре.

Үҙенә бер тулыш моң булып
айырылды табын дәртенән.
Иларға, йә белмәй көлөргә,
ултырҙы ул ҡатып таш һыман.

Харис булып уның бәғере
Яра төпкөлөнән сыңланы.
Сәлимәнең һары һағышы
Харис есеменән зыңланы:

## *Сәлимә күңелендә Харис булып сыңлаған ҡурай моңо:*

*"Йәмле Уралҡайҙың буйында*
*Башҡортостан тигән бер ил бар.*
*Үҫә унда күккә терәлеп*
*кейеккә бай ҡуҫҡыл урмандар.*

*Сағылдарға күбек сәсрәтеп*
*аға көмөш йырлы шишмәләр,*
*муйыл муйындары, әүешеп,*
*зифа ярҙан шәрбәт эсәләр.*

*Диңгеҙҙәй киң болондарында*
*йөрөй утлап һимеҙ йылҡылар,*
*аҡ тирмәләр ҡороп, йәйләүгә*
*сыға унда хозур, мыҡтылар.*

*Уттай унда Ҡояш ҡыҙҙыра,*
*тоҙланып тир ҡата арҡаға...*
*Тормошҡайы әммә егеттең*
*бармай алға, күпме тартһа ла...*

*Көндөҙөн — эш "аһ!"ы, кистәрен*
*ҡурай моңо өҙә үҙәгең.*
*Көләм тиһәң — унда илайһың,*
*Ә илайым тиһәң — көләһең...*

*Шул гәжәйеп башҡорт еренд*ә
*мохтажлыҡта тыуып үҫтем мин,*
*етем ҡалып ата-әсәнән,*
*ете йәштән көтөү көттөм мин.*

*Өҫ-башҡайым епкә туймаһы —*
*йыртыҡ сәкмән кейеп йөрөнөм.*
*Ҡышҡа керһәм — туңды аяғым,*
*тешем-тешкә теймәй өшөнөм...*

*"Балаҡайым!" тиеп һөйөүсе*
*күрмәнем шул сабый саҡтан уҡ.*
*Донъям мине ҡаҡты, ситнәтте,*
*булманы һис кемем яҡларлыҡ...*

*Ваҡытында тамаҡ туймайса,*
*ҡоро-һары ҡабып йөрөнөм.*
*Ауыр эшләп хәлем бөткәнгә,*
*тора торғас йығыла инем...*

*Ыҙаланып шулай үҫтем мин,*
*яҙманы тик рәхәт күрергә.*
*Ун туғыҙым еткәс, быгаулап*
*оҙаттылар мине Себергә...*

*Ашанылар йәп-йәш башымды*
*батша түрәләре, ағайым.*
*Хәҙер инде ҡайҙа барайым,*
*хәҙер инде кемгә ярайым?!."*

(Ҡурай телен шулай аңланы
көйҙәр ағымынан Сәлимә.
Моңло башын эйеп һыҡтаны
Һәм уйланы шулай Сәлимә:
*“Юҡ, иларға миңә кәрәктер,*
*юҡ, иларға миңә кәрәктер!..”*
Һәм иланы, һулығып, Сәлимә...)

*“...Нисәмә йыл ерҙә һәм быуат*
*үткән булһа, шундай уҡ ғүмер*
*Башҡортостан ере үткәргән.*
*Данланган да бында кешеләр,*
*ҡанланган да бында кешеләр,*
*золомон да, игелеген дә —*
*бөтәһен тиң ерем күтәргән.*

*Әллә нисә тапҡыр был ерҙе*
*Ҡанга мансып баҫып ингәндәр,*
*“Түңкәрелһен, бөтһөн!” — тигәндәр*
*әллә нисә тапҡыр был илде...*

*Батыр халыҡ — башҡорт улдары*
*күтәрелгән яуға, ил һаҡлап.*
*Бирелмәгән, артҡа сикмәгән,*
*үлһә — үлгән ерен ҡосаҡлап!..*

*Көл ителгән, бөлгән ауылдар*
*торгоҙолган йәнә яу киткәс.*
*Ҡорбандарҙан ҡалган урынга*
*ирҙәр тыуған яңы — һан етмәҫ!..*

*Һәм йәшәгән халҡым туҡталмай,*
*йәшәй һаман, йәшәр алда ла!*
*Ғүмер бирһә аҫыл ирҙәргә,*
*бирешмәҫ ил дауҙа, яуҙа ла!”*

(Ҡурай телен шулай аңланы
Сәлимә... Дәрт тойоп уйланы:
*“Юҡ, йырларга миңә кәрәктер,*
*юҡ, йырларга миңә кәрәктер!..”*)

Ҡаршы өйҙән – асыҡ ишектән
ҡурайсы йыш ҡарап ултырҙы
уйсан Сәлимәнең яғына,
“уға бир” тип бер хат тотторҙо,
бер малайҙы ымлап алды ла.

“Юлбаçар»ға икән булышсы
был ҡурайсы... Төйнәп килтергән
Сәлимәгә Харисынан хат...
Их, Сәлимә нисек булды шат!..

Яҙған егет унда үҙенең
ҡайҙа булып, ҡайҙа йөрөүен
һәм күп итеп сәләм күндергән,
“Онотмамын мәңге мин!” тигән...

Мәжлестәге көллө кешеләр
иçереп үк киткән инеләр,
шул сәбәпле һис кем һиҙмәне
Сәлимәне сөйгән ғилләне...

Әйтерһең дә, тыуҙы яңынан:
елкенде нык, илау һуңынан.
Әйтерһең дә, һаман ҡыҙ ғына,
Ҡыҙ күңеле – утлы ҡуҙ ғына.

Ҡушып йомшаҡ бәрхәт тауышын,
ҡурай менән китте ярышып,
кинәнделәр ҡыҙ ҙа, ҡурай ҙа, —
аптыраны халыҡ былайға...

Бейеү таҡмаҡтарын һыҙғанда,
тыбырсынды ҡапыл һәр бәндә,
ебәргәндәй йотоп утлы ҡуҙ...
Шартылдатып бармаҡ, беҙҙең ҡыҙ,
тауис һымаҡ баçып илпәтле,
ҡунаҡтарға ташлап күҙ дәртле,
төштө бейергә... Иҙән генә
ятты аптырап түҙгәненә...

...Ашау-эсеү, бейеүҙән ҡанып
сыҡты өйҙән ҡайтырға халыҡ,
обозланып теҙелде аттар —
әйтерһең дә, ағылды Һаҡмар...

### *4*

Ҡайтышлайы, ярһып, Ғимыран
Сәлимәне туҡмай башланы.
“Ниңә йырланың, ник бейенең?!” —

тип екереп эшен хасланы.

Тойҙо үҙен әллә егет тип,
эсеп алғас... Көнләү тешләне
ҡыу йөрәген... Ат урынына
Сәлимәнән ҡамсы төшмәне...

Күлдәктәрен йыртып, өҙгөләп
бөтөрҙө ул йәш бисәһенең.
Имән бармаҡтары, борғолап,
ҡара яндырҙы көллө тәнен...

Йәнәш ылауҙарҙа көндәштәр
кинәнделәр ҡол илауынан.
Яй атлатып атты барҙылар,
ләззәтләнеп йән һыҙлауынан...

Сәлимәнең һәр йәш тамсыһы
шарап ине улар йәненә,
ғазапланыуҙары — нәҡ наҙлау,
һөйөп-иркәләү кеүек кенә...

Ҡарт көндәше күсеп ултырҙы
улар арбаһына... Бергәләп
тотондолар ҡолдо ярырға...
Уҙған саҡта соҡор эргәләп,

Ҡарсыҡ ҡарыулаған Ғимыран
ғәйрәтләнеп тамам ҡоторҙо...
Һәм шул тәрән соҡор төбөнә
бәхетһеҙҙе төртөп осорҙо...

Юртып-юртып китте ылауҙар,
тәгәрмәстәр генә жыйланы.
Әҙәм буйы етмәç тәрәндә
Сәлимәкәй аунап иланы...

Текә ине төкөтмәләре
был төрмәнең... Төптә өйөлгән
йомшаҡ ҡомға йығылып ҡына
имгәнмәне... бер ҡат кейемдән

төнө буйы өшөп үткәрҙе
сәғәттәрен еүеш мөйөштә.
Шапылдашып ҙур-ҙур баҡалар
һикереште... Алйып был эштән,

янтайғайны ситкә, ерәнеп,
тапмаммы, тип, арыу урынды,
ям төбөндә сереп ятҡан ат
үләкçәһенә ҡул орондо...

Тын алғыһыҙ һаçы һауанан
быуылды ул... Шомлоҡ ҡуйырҙы...
Сәлимәгә һалҡын ҡәбергә
барып кергән кеүек тойолдо.

Ҡото осоп ҡосаҡланы ла
тубыҡтарын, шулай йомолоп
ултырҙы ул төнө буйына,
илай-илай һулығып-һулығып...

Таң алдынан килде бүреләр
улъя һиҙеп, буғай, соҡорға.
Соҡор ҡырыйында теҙелеп,
ултырҙылар һуҙып олорға.

Ҡуҙҙай янды ҡомһоҙ күҙҙәре,
аҙауҙары аҙғын киршәлеп.
Тырнаһалар ярһып, саң-туҙан
Сәлимәгә төштө ишелеп.

“Һуштан яҙһам ине ошонда!..” —
тип теләне, ҡурҡып, Сәлимә.
Ҡалды аңы ләкин янында,
сығыр-сыҡмаç ҡына йәнендә...

Әмәлдәре башҡа булмағас,
йыр йырларға һуҙып кереште.
Шым булдылар уçал бүреләр,
ғәжәп ҡылып, буғай, был эште...

Ултырҙылар ҡатып, ҡымшанмай,
көйҙән ләззәт йәнгә бар кеүек.
Таң атҡансы йырсы тамағы
бөттө тамам, кипте ҡарлығып;
йырланы ул һуңғы көсөнөң
һуңғы көсәнеүен бар ҡылып...

...Ҡапыл мылтыҡ өçтә шартланы,
туҡылданы ат тояҡтары.
Өйөрөлөп ҡомһоҙ бүреләр

тау артына саптылар бары.

Ике һыбай, ырғып, эйәрҙән
төштө шомло соҡор ситенә.
Торҙо һуҙып арҡан береһе,
уҙҙы бере гүрҙең төбөнә.

Хәлдән тайған йәп-йәш һылыуҙы
сығарҙылар өҫкә күтәреп
һәм ул саңлы арба юлынан
китте ҡайтып өйгә, һөйрәлеп...

### 5

Сәлимәнең ҡурҡып иҙелгән
күңеленә бирҙе һынылыш
был ваҡиға... Инде иренән
шөрләмәне хатта яңылыш!

...Янған саҡта ҡуйы урмандар
унда ҡалған кейек-хайуандар,
сығыу юлы бүтән булмаҡас,
ташланалар бит ут өҫтөнә...

Күбәүҙәре шунда һөрләгөп
ятып ҡала янып уларҙың,
тәүәккәлдәр ләкин сығалар
бешеп-көйөп иркен аҡланға
һәм ташланып һалҡын йылғаға,
яраларын һыуға йыуалар...

Шуның кеүек, беҙҙең Сәлимә
ҡылды ҡарар утҡа барырға,
киләсәге өсөн бөгөнөн
бизмән табағына һалырға...

Ҡайтты ҡыҫып тешен асыуҙан,
типте дарҫлап ярһыу йөрәге.
Ҡояш байытырға ултырып
ҡалды әрәмәлә, инмәне

ауылға ул... Шау-шоу баҫылғас,
алынғас шәм моңһоу өйҙәргә,
китте боҫоп кәртә артынан,
ҡара көстөң ҡонон шәйләргә...

Аласыҡта кеше юҡ ине,
алды инеп шырпы, кәрәсин,
байҙың келәттәрен "суҡырға"
ебәрҙе ул "ҡыҙыл әтәс"ен...
Утҡа тапшырҙы үс-нәфрәтен...

Сытыр-сытыр көлөп-ҡыуанып
ялҡын теле менде ҡыйыҡҡа,
береһенән икенсеһенә...
сәләм биреп өсөнсөһөнә...

Ҡарунланып йыйған байлығын
"ҡыҙыл әтәс" ялмай башланы
Ғимырандың...Ҡара һағыҙҙай
һөрөм-төтөн күкте ҡапланы...

Фәҡәт эске күлдәк-ыштандан
сыҡты дөрөп шашҡан Ғимыран
һәм сарбайлап һөрән ташланы...
Күрше-күлән, күнәк-һыу тотоп,
сыулап йүгерешә башланы...

Ә был ваҡыт беҙҙең Сәлимә
шәп-шәп атлап китеп бара ине
тау артына урман юлынан.
Төйөнө юҡ ине ҡулында,
еләне юҡ ине иңендә, —
әйләнде ул яҙмыш ҡолона...

Юҫыҡҡайы ҡайҙа илтерен
белмәй ине әле, тик: "Аллам,
күрһәт йәрем йөрөгән ерҙәрен!" —
тип шыбырҙай ине, тапшырып
ҡара төнгә йөрәк серҙәрен...

Ай юҡ ине, яҡты йондоҙҙар
ҡапланғайны ҡара болотҡа.
Сыртлап сыбыҡ һынһа, йөрәге
сатнай кеүек тойолдо уға.

Хәтәр минуттарҙа, тылсымдай,
Харисының хатын баҫа ине
йөрәк тәңгәленә... һәм Хоҙай
һуҡмаҡтарҙан юл аса ине...

Оҙаҡ, оҙаҡ шулай барҙы ул
һөйөүенән табып ҡыйыулыҡ.
Үләндәргә ысыҡ ҡунғанда
хәл алды ул ергә йығылып...

Аҫыл ҡоштар һайрап ебәргәс,
йылы нурын Ҡояш төшөргәс,
йылынды һәм тынысланды ул.

Терәп башын тубыҡтарына,
сумды, яйлап, сихри серемгә,
тылсымланып Урал моңона...

Һәм күренде уға төш: хәрби
ыҫтан ҡуйы урман ҡуйынында;
ирҙәр баштан-аяҡ ҡораллы
ултыралар усаҡ янында
аш бешереп... Лапаҫ аҫтынан
сыға һыҙылып бер моң ағышы —
йырмы инде, әллә илаумы,
әллә теге ҡурай тауышы?..

Усаҡ теле дөрләп киткәндә
Яугирҙәрҙең йөҙө йәнләнә,
улар араһынан һөйгәне
йөҙөн эҙләй, түҙмәй, Сәлимә...

Таба алмай тик, күпме генә
уҡталһа ла, күҙ талдырһа ла:
бөтәһе бер төҫлө был ирҙәр
һәм ағастай хәрәкәтһеҙҙәр...

Тупылдашып была салына
тояҡ таҡматары йыраҡтан,
һыбайлылар килеп етәләр,
усаҡ эргәһенә берайҡан.

Күрә ҡапыл йәрен Сәлимә
улар араһында... Ҡысҡырам,
тип көсәнһә — сыҡмай тауышы,
һуҙһа ҡулын — ҡуҙғалмай ҡулы,
йүгерәйем, тиһә — аяҡтар
гер булғандар...
“Аһ Аллам, Аллам!” —
тип илерә-тилерә тамам...

Абайлай һәм Харис, ниһәйәт,
килә башлай уның янына.
Эй, шатлана һылыу, ҡыуана!..

Еткәс кенә ләкин әйләнә
Ғимыранға Харис... Ҡамсыһын
сажылдатып уҫал һуға ул,
сәсрәтеп тә ал ҡан тамсыһын...

...Ауыртыуҙан шашып, Сәлимә
асһа күҙен... ҡат-ҡат сыбыртҡы
төшә һаман уның тәненә...
Елегенә етә, йәненә...

Ике атлы ике яғынан
яра уны тиргә мансылып:
иҫерек Низамый береһе,
береһе — Ғимыран ялсыһы.

Ҡайҙа ғына инеп китергә,
ҡотолорға белмәй Сәлимә.
Күлдәккәйе бөтә тетелеп,
буй-буй яра ята тәненә.

Һыуһындарын шулай ҡандырғас,
арҡанлайҙар ҡолдо муйынынан
аҙғын малдай... тағып эйәргә,
йүгертәләр урман юлынан.

Ярты юлда үҙе Ғимыран
ҡаршы ала, килеп, уларҙы.
Сәлимәне муйын бауынан
тәртәһенә тағып, ул тағы

ҡайыш сыбыртҡыһын шартлатып
яра-яра ҡыуа улъяны
атҡа йәнәшәләп... Юл саңы
менән болғанып ҡала ҡаны
Сәлимәнең яраларынан...
Ҡан тама күҙ ҡараларынан...

Тәртә янлап, һатлыҡ ялсылар
әлһерәгән эттәй сабалар,
Ғимырандың ҡулы талғанда
ҡамсы эшен тиҙ үк алалар...

Сәлимәне илтеп яптылар
таш келәткә... Һәм мулла менән
кәңәшләште оҙаҡ Ғимыран
мәкерле ниәте хаҡында...
Йәш бисәһен алмаштырырға
бармаҡ битендәй бер алтынға...

Тап шул юлы Сәнкем ауылында
Тоҙтүбәгә үтеп барыусы
туҡталғайны бер ҙур кар(а)уан.
Каруандағы аҙай-ҡаҙаҡҡа
ебәрҙеләр һатып ҡоллоҡҡа
Сәлимәне мәңге-мәңгегә
мулла менән муслы Ғимыран...

## 6

Таң-иртәнән тороп, кар(а)уан
ҡаҙаҡ далаһына юл тотто.
Дөйә үркәсенә ҡаҙағы
Сәлимәне бәйләп ултыртты.

Дың-дың итеп баҡыр бутылдар
дыңғылдауы ҡалды һүрелеп...
Күҙ йәштәрен йотоп, Сәлимә
баҡты артҡа, үрелеп-үрелеп...

Бала саҡтарында һөйөнөп
үҫкән яландарҙың күркәмен
хәтерендә мәңге-мәңгегә
ҡалдырғыһы килде һәм тәмен

елдәренең килде татыйһы...
Аяҡ-ҡулдар ләкин бәйләүле,
бөркәтелгән сәкмән башына,
һаҡлай арттан ҡаҙаҡ-йәйәүле...

Китте шулай ауыл һылыуы
илкәйенән, көсләп һатылып,
ҡомло ҡаҙаҡ далаларына,
гүзәл Уралҡайҙан айырылып.

“Өн түгелдер, яман төшөмдөр...” —
тип һыҡтаны, һис ышанмай ул
күрмешенә... Әммә киреһен

дөрөçләне каруан, саңлы юл...

*“Ауылкайым, иçән бул инде,*
*Һаҡмарҡайым, бәхил бул инде!*
*Сит илдәргә китте башҡайым —*
*югалыуым, ахыры, шул инде...”*

Мансылғандай тоҙға, йөрәге
әрнеп унын янды ла янды,
ел өшкөткән таңғы ысыҡтай
күҙ йәшкәйе тамды ла тамды...

*(Беренсе китап бөттө).*

Балтиҡ хәрби-диңгеҙ флоты, Кронштадт -- Таллин, 1953.
“Андриан Зосимов” исемле мина траллағыс карап,
9.09. — 27.11.1955. 22.01.1956.

# II
# КИТАП

## Беренсе бүлек

### Урал тауы һәм башҡорт

### I

Урал тауы! Башҡорт тарихын
һинең исем билдәләй микән?
Әллә һинең исемең башҡорт
тарихынан билдәләнәме?!.

Урал — башҡорт, йә башҡорт — Урал,
бер туғандар, бергә тыуғандар —
икеһен тиң тарих иш итеп
нурландырған күп быуаттарға!

Булған заман, Урал тауының
төптәрендә уттар ҡайнаған,
был уттарҙан таштар ирегән
лаваланып... Һәм шул ҡыҙыулыҡ

сығыу юлы үҙенә эҙләгән...

Ләкин мәғрур гранит ҡаялар
бирмәгән юл көслө уттарға:
тоташланып таш-көп ҡаплаған
Урал-тауҙың яҫы маңлайын,
эстә янған уттар ҡыҙыуын
һиҙҙертмәйсә улар һаҡлаған.
Йыйырсыҡтар фәҡәт һырланып
биргәндәр төҫ был ҡарт маңлайға...

Урал тауы шулай ҡартайған, —
эстән янып аҡрын сүккән ул.
Ҡасандыр күк иңен айҡатып
болоттарҙы сөйгән түбәләр
оноҡтандар маңлайҙарында
таңдар ҡунып, төндәр йоҡлаған,
Ҡояш нурҙарына йылтлаған
күңелле һәм хөр замандарҙы...

Тәрән йоҡо баҫҡан тауҙарҙы —
хәлһеҙ улар һуҙылып ятҡандар.
Емерелгән сал ҡаяларға
бөркөттәрен оялатҡандар,
имәндәргә ерлек биргәндәр,
мамыҡ мүктәргә күмелгәндәр,
көмөш йырлы саф шишмәләрҙән
йыуҙыртҡандар таш итәктәрен...

Шунан Урал ҡаяларына
әҙәм балаһы үрмәләгән,
суйырҙарҙы тәү ҡат ҡуҙғалтҡан,
уның яланғас үксәләре,
тәү ҡат тапап үткән мүктәрҙе,
ҡыуаҡтарҙы тәү ҡат ҡайшарған...

Ҡайҙа — тирен, ҡайҙа — таш йыртмыш
табанының ҡанын тамыҙып,
ҡырағай ергә тәүге эҙҙәрҙе
үткән һалып әҙәм балаһы...

Ҡунаҡ булып түгел, иш булып,
хужа булып йөрөгән ул бында,
сөнки “ҡайҙан” үҙенең “килгәнен”
белмәгән ул... Уның хәтере
Уралдыҡы менән тиң булған —

белмәгән ул сит яҡ һәм унан
күсеп килеү кеүек тойғоно...

Быҙдай ғәмәл булған уға ят,
сөнки күҙе тәү ҡат асылып,
таный башлағандан донъяны,
ошо мәғрур бейек тауҙарҙы,
ошо ылыҫлы урмандарҙы,
ошо пак һыулы йылғаларҙы
һәм Күк көмбәҙенең тик ошо
йондоҙҙарын ғына күргән ул,
һәм ирәүән ошо еренең
бер туғаны итеп һиҙгән ул
үҙен... “Урал менән бер сорҙа,
бергә тыуғанмын” тип йөрөгән ул...

Һәм йәшәгән әҙәм балаһы
һөйөп ҡая ташлы тауҙарын.
Суйыр һуғып, таштың эсенән
ут алған ул ит бешерергә
һәм шул утта ташты иретеп,
баҡырҙан уҡ, балта яһаған,
ул балтаны ышҡып ҡайраған
шул таштарға... Һәм шул таштарҙан
ҡорған йортон... Ошо ташлыҡтар
араһында үҫкән урманда
таба торған булған аҙығын...

Көнө еткән — әҙәм балаһы
олоғайған... Инде донъяның
әүәл танылмаған нурҙарын
таный башлаған ул...
Шүлгәнташ
мәмерйәһен — изге таш йортон, —
мамонт ҡанын ҡыҙыл балсыҡҡа
иҙеп яһалған шалы менән
биҙәп, һүрәтләгән ҡаяға,
сағыулатып, хоҙаййәндәрен...

Уйланған ул әҙәм... Көн һайын
яңы серҙәр уға асылған,
аҡылы унын һаман нығынған
һәм, бил быуып, ышаныс менән
башлаған ул аҙым тарихҡа...
Киләсәккә, тигән тарафҡа...

Салт булған был әҙәм балаһы
ауаздарға... Туған тауының
таштарында ел һыҙғырыуын,
ағастарының шаулашыуын,
ҡамыштарының илашыуын,
ыуҙарының бышылдашыуын,
тулҡындарҙың супылдашыуын —
бөтә, бөтә булған тауышты,
бөтә, бөтә булған һағышты
бөртөкләп һәм тослап йыйнаған
үҙенең салт ҡолаҡтарына...
Мейеһенең улаҡтарына...

Һәм бойорған уға йөрәге
ҡайтарырға был ауаздарҙы
уҡмаштырып, көр аһәңләтеп
тыуҙырыусыһына үҙенең...

Ҡырҡып алған әҙәм балаһы
шыма көпшә Урал буйынан.
Көпшә-көпкә ҡыҫтап тултырған
тауыштарҙың хөр ҡуйыртмағын.

Ер-күктәрҙе серле тибрәтеп
илаһи моң-ауаз ағылған
донъяға шул көпшә эсенән
тылсымлатып урман, ҡырҙарын...

Һәм тәбиғәт, һалып кәпәсен,
түбән эйгән ғорур, сал башын
әҙәм балаһының ҡаршында...
Ҡурай моңо тыуған тап шунда...

Был дәүерҙә инде “башҡорт” тип
танығандар әҙәм балаһын.
Тарих өйөрмәһе эсенән
быуаттарҙың йырып кәртәһен,
ошо исем менән барырға
тейеш булған әҙәм балаһы
дәүерҙәрҙең алыҫ таңына...
Башҡортлоғон төйөп ҡанына...

## II

Урал тауы янар уттарын

тышҡа атмай йомоп ҡалдырған,
таш булғанға күрә есеме...
Тау булғанға күрә исеме...

Ә башҡорттоң янар уттары
ҡурай буйлап тышҡа ағылған,
һүнмәгән ут, һаман ҡабынған...

Тормош зары, баҫҡынсылары
үртәп уны һаман торғандар,
уттар йөрәккә йыйылғандар
һәм көрәйткән башҡорт ҡурайын
йөрәк кәре... Ҡылыс, ялтлатып,
күтәргән ул башы өҫтөнә...
Түҙә алыр икән кем генә!..

Елдәр менән ҡуша елеүсе
арғымағын уттай дөндөртөп
сапҡан яуға... Дошмандарының
ҡыйған башын Урал ҡылысы,
ҡанға ҡанған ерҙең һәр осо —
ек ҡанына, башҡорт ҡанына...
Ебәрмәйсә екте янына...

башҡорт ҡаны ләкин күберәк
аҡҡан унда... ҡуҙҙы үҙ ҡаны
менән һүндергәндәр...
Ҡурайҙан
моңдар тағы гөжләй башлаған,
йөрәктәрҙе өтөп ялҡынға,
бығауланған ирек хаҡында,
зар илаған халыҡ хаҡында...

Моңдар, мең ҡат бергә тупланып,
моңһоҙҙарҙың йәнен фашлаған,
башҡорт атҡа йәнә атланған,
алмас ҡылыс йәнә ялтлаған,
янар уттар башҡорт йәненән
күкрәп сығып, яуға саҡырған...

Йөрөгән был янғын яндырып
был халыҡтың ҡыйыу йөрәген.
Күп быуаттар буйы тарихты
ут һәм ҡанға мансып дөрләгән
Башҡортостан ере өҫтөндә!
Ҡылыс һурған хатта меҫкендәр!..

Яңы быуын килгән, иҫкеһе
киткән биреп уға уттарын,
ҡылыстарын, ярһыу аттарын...

Алмашынған шулай быуындар,
ләкин улар, ҡылып аманат,
ҡалдырмаһалар ҙа яманат,
ысын ирек, байман йәшәйеш
китә алмағандар тапшырып...
Йөрәкте тик һаман яндырып,
тик шул дөрләп торған ут ҡына
мираҫланған Урал халҡына...

Быуындарҙы был ут ҡыҫтаған
һаман, һаман изге көрәшкә!
Башҡорттарҙы бығау ҡыҫымын
өҙөп ташларға гел өндәшкән.

Ике башлы ҡоҙғон өҙлөкһөҙ
башҡорт эс-бауырын суҡыған...
...................................................

Сәнкем-Биктимер, 1957.

*(Билдәле сәбәптәр арҡаһында яҙылмай өҙөлөп ҡалды).*

## Йөкмәткеһе

Ауыл егете..........................................................................................
Ҡурай һәм тулҡындар........................................................................
Крематорий.........................................................................................
Йөрәк илауы.......................................................................................
Минең шәжәрәм.................................................................................
Метеорҙар юлы..................................................................................
Һандуғас.............................................................................................
Ҡыҙыл еңгәсәйҙәр..............................................................................
Яңыртылған иҫке йыр.......................................................................
Дарылы поэма...................................................................................
Ашҡаҙар.............................................................................................
Дауыл планетаһы..............................................................................
Бәғер тауышы.....................................................................................
Хаҡлыҡ...............................................................................................
Үткән йылдар моңо..........................................................................